**Әхнәф Харисов**

# «ҺЕҘГӘ ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР...»

*Һайланма хеҙмәттәр йыйынтығы*



**Ахнаф Ибрагимович Харисов**
**(1914–1977)**

РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫ ФӘН ҺӘМ ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ МИНИСТРЛЫҒЫ
РӘСӘЙ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ ӨФӨ ФЕДЕРАЛЬ ТИКШЕРЕНЕҮ ҮҘӘГЕ
ПОЧЕТ БИЛДӘҺЕ ОРДЕНЛЫ ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

**Әхнәф Харисов**

# «ҺЕҘГӘ ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР…»

## Һайланма хеҙмәттәр йыйынтығы

*Интернет аша таралыусы фәнни-популяр электрон баҫма*

ӨФӨ
РФА ӨФТҮ ТТӘИ
2025

УДК 821.512.141(470.57)
ББК 84(2Рос.Баш)
Х26

*Рәсәй фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге
Почет Билдәһе орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының
Ғилми советы ҡарары менән баҫмаға раҫланды
(Протокол №6, 27 октябрь 2025 й.)*

***Рецензенттар:***
*Г.Р. Хөсәйенова*, филология фәндәре докторы (РФА ӨФТҮ ТТӘИ, Өфө ҡ.)
*З.А. Әлибаев*, филология фәндәре кандидаты (БР Милли әҙәбиәт музейы, Өфө ҡ.)
*Р.А. Сиражитдинов,* филология фәндәре кандидаты (ӨЯЭК, Өфө ҡ.)

***Төҙөүселәр:***
*Г.М. Нәбиуллина,* филология фәндәре докторы;
*Ф.Б. Юнысова,* филология фәндәре кандидаты

**Харисов Ә.И.** «Һеҙгә әйтер һүҙем бар…» : һайланма хеҙмәттәр йыйынтығы / Ә.И. Харисов; төҙ.: Г.М. Нәбиуллина, Ф.Б. Юнысова [Электрон ресурс] / РФА ӨФТҮ ТТӘИ. – Өфө: РФА ӨФТҮ ТТӘИ, 2025. – 247 бит. – URL: http://rihll.com/files/Knigi/2025/11/file_271-5.pdf
ISBN 978-5-91608-271-5

Йыйынтыҡта филология фәндәре докторы, тел ғилеме, текстология һәм фольклористика өлкәләрен үҫтереүгә ҙур өлөш индергән әҙәбиәтсе ғалим, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, профессор, яҙыусы Әхнәф Ибраһим улы Харисовтың (1914–1977) фәнни һәм публицистик мәҡәләләре, художестволы әҫәрҙәре урын алды. Китап талантлы әҙәбиәт ғилеме белгесенең төрлө йылдарҙа, төрлө баҫмаларҙа донъя күргән хеҙмәттәрен, бер йыйынтыҡҡа туплап, башҡорт әҙәбиәте ғилеменең һәм әҙәби тәнҡиттең XX быуаттағы рухи асылын күҙаллау һәм киләсәктә ҡулланыуҙы уңайлаштырыу маҡсатынан әҙерләнде. Яҙыусының өс тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт һуҙымында ижад ителгән жанр формаһы яғынан төрлөлөгө менән айырылып торған художестволы әҫәрҙәре 1981 йылда башҡорт әҙәби теле орфографияһына индерелгән үҙгәрештәргә һәм тулыландырыуҙарға ярашлы рәүештә бирелде. Үткән быуат башы әҙәби телендә ҡабул ителгән һүҙҙәргә һәм терминдарға үҙгәреш индерелмәне.

Китап әҙәбиәт һәм фольклор белгестәренә, уҡытыусыларға, аспиранттарға, студенттарға һәм Ә.И. Харисовтың ижады һәм ғилми эшмәкәрлеге менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

УДК 821.512.141(470.57)
ББК 84(2Рос.Баш)

**ISBN 978-5-91608-271-5**
**DOI 10.31833/271-5.2025.51**

© Нәбиуллина Г.М., Юнысова Ф. Б., төҙ., 2025
© РФА ӨФТҮ ТТӘИ, 2025

**МИНИСТЕРСТВО НАУКИ И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ РФ**
**РОССИЙСКАЯ АКАДЕМИЯ НАУК**
**УФИМСКИЙ ФЕДЕРАЛЬНЫЙ ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКИЙ ЦЕНТР**
**ОРДЕНА ЗНАК ПОЧЕТА ИНСТИТУТ ИСТОРИИ, ЯЗЫКА И ЛИТЕРАТУРЫ**

**Ахнаф Харисов**

# «МНЕ ЕСТЬ ЧТО ВАМ СКАЗАТЬ…»

## Сборник избранных трудов

***Научно-популярное электронное издание сетевого доступа***

**УФА**
**ИИЯЛ УФИЦ РАН**
**2025**

УДК 821.512.141(470.57)
ББК 84(2Рос.Баш)
Х26

*Публикуется по решению заседания Ученого совета
Ордена Знак Почета Института истории, языка и литературы
Уфимского федерального исследовательского центра Российской академии наук
(Протокол № 6 от 27 октября 2025 г.)*

***Рецензенты:***
*Г.Р. Хусаинова*, доктор филологических наук (ИИЯЛ УФИЦ РАН, г. Уфа);
*З.А. Алибаев,* кандидат филологических наук (Национальный литературный музей РБ, г. Уфа);
*Р.А. Сиражитдинов,* кандидат филологических наук (УТЭК, г. Уфа)

***Составители:***
*Г.М. Набиуллина,* доктор филологических наук;
*Ф.Б. Юнусова,* кандидат филологических наук

Х26 **Харисов А.И.** «Мне есть что вам сказать…» : сборник избранных трудов / А.И. Харисов; сост.: Г.М. Набиуллина, Ф.Б. Юнусова [Электронный ресурс] / ИИЯЛ УФИЦ РАН. – Уфа : ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2025. – 247 с. – URL: http://rihll.com/files/Knigi/2025/11/file_271-5.pdf – Загл. с титула экрана.

ISBN 978-5-91608-271-5

В сборник вошли научные и публицистические статьи, а также художественные произведения Ахнафа Ибрагимовича Харисова (1914–1977) – литературоведа, доктора филологических наук, внесшего значительный вклад в развитие языкознания, текстологии и фольклористики, заслуженного деятеля науки Башкортостана, профессора, писателя. Сборник подготовлен с целью осмысления и облегчения использования в будущем духовной сути башкирского литературоведения и литературной критики XX века, объединив в одной книге труды талантливого литературоведа, опубликованные в разные годы и в различных изданиях. Художественные произведения писателя, созданные на протяжении более трех десятилетий и отличающиеся разнообразием жанровых форм, представлены в соответствии с изменениями и дополнениями, внесенными в орфографию башкирского литературного языка в 1981 году. Слова и термины, принятые в литературном языке начала прошлого века, остались без изменений.

Книга предназначена для специалистов в области литературы и фольклора, преподавателей, аспирантов, студентов, а также всех, кто интересуется творчеством и научной деятельностью А.И. Харисова.

УДК 821.512.141(470.57)
ББК 84(2Рос.Баш)

**ISBN 978-5-91608-271-5**
**DOI 10.31833/271-5.2025.51**

© Набиуллина Г.М, Юнусова Ф. Б., сост., 2025
© ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2025

## ИНЕШ. БЕҘГӘ ӘЙТЕРҺҮҘЕ БАР

Филология фәндәре докторы, тел ғилеме, текстология һәм фольклористика өлкәләрен үҫтереүгә ҙур өлөш индергән әҙәбиәтсе ғалим, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, яҙыусы, профессор Әхнәф Ибраһим улы Харисов (1914–1977) башҡорт филологияһында «фольклор менән әҙәбиәт ғилеме тармағында тәрән бураҙналар һалған, фәнни мәктәп барлыҡҡа килтергән ғалим»[1]. Ғ.Б. Хөсәйенов билдәләп үтеүенсә, Ә.Х. Вахитов, К.Ә. Әхмәтйәнов, В.И. Әхмәҙиевтар ғалим етәкселегендә фәнгә килһәләр, Н.Т. Зарипов, М.Х. Минһажетдинов, Ф.А. Нәҙершиналар Ә.И. Харисовтың ҡул аҫтында ғилми-текстологик мәктәп үтәләр.

Эшмәкәрлегенең күп яҡлығына, киңлегенә баҫым яһап, уның тел, фольклор, әҙәбиәт ғилеменә индергән хеҙмәттәрен юғары баһалап, М.Х. Нәҙерғолов ғалимға ҡарата «энциклопедист» һүҙен ҡуллана. «Башҡортостан фәне һәм мәҙәниәте тарихында Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәм Риза Фәхретдинов ғалим-энциклопедист булараҡ танылыу таптылар. Үткән быуаттың икенсе яртыһында милли мәҙәниәтебеҙ күгендә яҡты йондоҙ булып балҡыған әҙәбиәтсе, телсе, фольклорсы һәм яҙыусы Әхнәф Харисов та шундайҙар иҫәбендә»[2].

Ә.И. Харисов 1941 йылда Мәскәүҙә тел ғилеме буйынса кандидатыҡ диссертацияһын яҡлай һәм шуның нигеҙендә «Категория глагольных видов в башкирском языке» (1944) исемле хеҙмәтен рус телендә баҫтырып сығара. Артабан да ул «әҙәби тел культураһы, орфография, тел мәсьәләләре буйынса айырым мәҡәләләр менән сығыш»[3] яһай. Ҡ. Даян менән авторлыҡта донъя күргән «Стилистика. V–VII кластар өсөн дәреслек» (1937), башҡорт мәктәптәре өсөн төҙөлгән «Туған тел», «Башҡорт әҙәбиәте» дәреслектәре һәм хрестоматиялары аша үҙен методист булараҡ та таныта. «Башҡорт халыҡ ижады»ның экиәт томдарын төҙөүҙә ҡатнашып, уларҙың структураһын һәм ғилми яҡтан әҙерләү принцибын тәҡдим итеп, ул фольклор ғилеме өлкәһендә лә тәрән белемгә эйә булыуын иҫбатлай.

Революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтен фәнни яҡтан өйрәнеп, әҙәбиәт

---

[1] Хөсәйенов Ғ.Б. Өлкән хеҙмәттәштәрем // Ағиҙел, 1999. №1. 145-се бит.

[2] Нәҙерғолов М.Х. Изге эштәр башланы ул // Ахнаф Харисов и актуальные проблемы башкирской филологии (к 100-летию со дня рождения): материалы Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием). Уфа, 2014. С.13.

[3] Әхмәҙиев В.И. Күренекле ғалим-филолог Әхнәф Харисовтың ижады һәм тормош юлы // Рухи тамырҙар. Әҙәбиәт һәм фольклор мәсьәләләре. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. 6-сы бит.

ғилеме буйынса докторлыҡ диссертацияһын яҡлап, «Әҙәбиәт теорияһы» (1944) хеҙмәте һәм «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII – XIX быуаттар» (1965) исемле монографияһы менән Әхнәф Ибраһим улы үҙен әҙәбиәтсе-ғалим булараҡ раҫлай.

Был йыйынтыҡҡа билдәле ғалим һәм яҙыусы Әхнәф Харисовтың төрлө йылдарҙа яҙылған фәнни һәм публицистик мәҡәләләре, нәфис әҫәрҙәре индерелде. Китапҡа ингән мәҡәләләрҙең, әҫәрҙәрҙең күпселеге үткән быуатта ижад ителеп, шул осор матбуғатында донъя күргән. Яҙыусының фронт көләмәстәре Рәсәй фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге архивынан алынды[1].

Ә. Харисов 1970 йылдың ноябрендә Миәс ҡалаһында йәшәүсе 69 йәшлек Хәҙисә Ҡусабаеванан «Мамай хан хикәйәте» әҫәрен яҙып ала. Хикәйәттең ҡобайыр өлөшөн анализлап, ғалим тарихта тағы бер Мамайҙың булыуына һәм уның атаһы Муса Ирәмәл итәге менән Яйыҡ башында йәйен йәйләп, ҡышын ҡышлап ғүмер иткән, тигән һығымтаға килә.

«Рәхмәт һиңә, шағир!», «Урал бөркөтө», «Шағирҙың тауышы», «Бикчәнтәй новеллалары», «Девон» мәҡәләләрендә Р. Ниғмәти, Ғәлимйән Ибраһимов, Х. Кәрим, Ә. Бикчәнтәев ижады һәм И. Абдуллиндың Башҡортостан халыҡ артисы Х. Бохарский постановкаһындағы «Девон» пьесаһы хаҡында ыңғай һәм кире фекерҙәре менән уртаҡлаша, ҡәләмдәштәре ижадына ҡарата объектив баһа бирә.

«Салауат Юлаев һәм уның әҙәбиәттәге образы» тигән мәҡәләһендә автор тарафынан башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаевтың фольклорҙағы, рус һәм башҡорт художестволы әҙәбиәтендәге образының һүрәтләнеше анализлана. А.С. Пушкиндың «Пугачев тарихы»на, яҙыусы һәм этнограф Ф.Д. Нефедовтың «Башҡорт батыры Салауат» очергына, Ст. Злобиндың «Салауат Юлаев» һәм В. Шишковтың «Емельян Пугачев» романдарына, П. Бажовтың «Ҡарт тауҙар бүләге» хикәйәһенә, Я. Апушкиндың сәхнә әҫәренә, Ленинград шағиры М. Дудин шиғырына, Б. Бикбайҙың «Салауат» тарихи драмаһына, Х. Кәримдең «Салауат тураһында баллада»һына, Р. Ниғмәтиҙең «Салауат иптәш», С. Ҡудаштың «Минең ауылдашым», «Әсә һүҙе», Ф. Бикбовтың һәм Х. Ғиләжевтең «Салауат ерендә» шиғырҙарына, Ҡ. Даяндың композитор Х. Әхмәтов тарафынан көйгә һалынған «Салауат батыр» тигән йырына туҡтала. В. Шишков романында Салауаттың дөрөҫ образын

[1] Ә.Харисовтың архивынан алынған көләмәстәр БХИ XVI томында баҫылып сыҡты // Башҡорт халыҡ ижады. XVI том: Бөйөк Ватан һуғышы фольклоры / [төҙ.: А.М. Хәкимйәнова, Г.Р. Хөсәйенова] / Өфө: Китап, 2020. 262-278-се биттәр.

күрһәтеүен, Ст. Злобин романы менән П. Бажов хикәйәһенең тәнҡиткә мохтаж икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда К. Симоновтың «Башҡорт дивизияһында» (1942) һәм И. Эренбургтың «Башҡорттар» (1942) тигән очерктарында тыуған илдәренең азатлығы һәм намыҫы өсөн һуғышыусы Салауат Юлаев тоҡомдарының патриотизмын юғары баһалауын билдәләй.

«”Әйләндерелгән” китаптар битенән» мәҡәләһе рус теленән тәржемә ителгән биш классиктың әҫәрҙәренең телен тәнҡитләп, Ә. Харисов ҡәләмдәштәрен был өлкәлә яуаплы булырға саҡыра.

Татар халҡының талантлы шағиры Ғабдулла Туҡайҙың ҡабатланмаҫ оло ижадына бағышлап ғалим «Поэзия ҡаһарманы» исемле мәҡәләһен яҙа.

1969 йылда «Пионер» журналы биттәрендә «Һеҙгә әйтер һүҙем бар, йәш дуҫтар» исемле мәҡәләлә ғалим йәш дуҫтарына эҙмә-эҙлекле итеп халыҡтан йырҙарҙы йыйыу методикаһын, нисек итеп информанттың паспортын төҙөү юлдарын балалар аңларлыҡ кимәлдә бик матур итеп төшөндөрөп бирә.

«Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ» исемле мәҡәләлә ғалим 1967 йылдың мартында «Совет Башҡортостаны»нда асылған «Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ» тигән махсус бүлектә йырсылар, ҡурайсылар, уҡытыусылар, студенттар, театр эшмәкәрҙәре, йыр-музыка менән ҡыҙыҡһынған һәүәҫкәрҙәр тарафынан яҙып алынған башҡорт халыҡ йырҙарының текстары һәм уларҙың тарихы, легендаларының даими рәүештә баҫылып тороуын яҙып үтә. Был ыңғай күренештең кире яҡтары – халыҡтан яҙып алынған йыр тарихын үҙ белдектәренә «эшкәртеүселәрҙең эшмәкәрлеге» Ә. Харисовты борсоуға һала. Йырсылар араһында йырҙың тексын үҙҙәре теләгәнсә үҙгәртеп йырлау күренештәре, «Перовский» кеүек башҡорт халыҡ бейеүен башҡарыусы авторлығына ҡаратырға тырышыуҙар авторҙы хафаландыра.

«Босфор ике ағымлы» мәҡәләһендә 1972 йылда Төркиәгә барған сәйәхәте тәъҫораттары менән уртаҡлаша. Автор өсөн мөһим ваҡиғаларҙың береһе булып – «Тимербай ҡурайсы», «Үләт» хикәйәләренең, «Салауат батыр» исемле пьеса авторы 1920 йылдарҙа Башҡортостандан китеп, Төркиәлә йәшәгән Фәтхелҡадир Сөләймәнов (Абдулҡадир Инан) менән осрашыуы тора. А. Инан үҙенең шаманизм менән ҡыҙыҡһыныуын, 1945 йылда «Тарихта һәм бөгөн шаманизм» тигән китап сығарыуын әйтә, биографияһына ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе һөйләп бирә. Тәүҙә Ташкентта,

Сәмәрҡәндтә, унан һуң Афғанстан, Һиндостан, Франция, Германияла йәшәүен, 1925 йылда Стамбулға килеп урынлашыуын, аҙаҡтан күберәген Анкарала эшләүен, Ташкентта сыҡҡан «Аҡъюл» газетаһында Йылҡыбай имзаһы менән мәҡәләләр баҫтырыуы хаҡында бәйән итә.

Стамбул университеты китапханаһында Ә. Харисов XIII быуатта Мысыр мәмлүктәрендә әмир дәрәжәһендә булған Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди менән Насретдин ан-Насыриҙың реаль шәхес булыуын раҫлаған тарихи ҡулъяҙма менән таныша.

Ҡулъяҙмала ғалим «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы менән бәйле, шулай уҡ башҡорт ғәскәрҙәренең 1812 йылғы Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтарын сағылдырған материалдарҙы табыуын да теркәп ҡалдыра. Веймар ҡалаһында башҡорт атлыларының бөйөк немец шағиры Гете менән осрашыуын, башҡорт яугирҙарының уға уҡ менән йәйә бүләк итеүен шағирҙың дуҫы Эккерман яҙмалары аша дәлилләнеүенә Әхнәф Харисов иғтибар итә. Реалистик йүнәлештә яҙыусы Садри Эртем (Sadri Ertem, 1900–1943), XX быуат төрөк әҙәбиәте классигы Сабахатдин Али (Sabahattin Ali, 1907–1948), Саит Фаик Абасыянык (Sait Faik Abasıyanık, 1906–1954) ижадтарына баһа бирә. С. Алиҙың «Арба» («Kağnı»), «Төшөмлө йорт» («Gelirli ev»), «Айран» («Ayran»), «Ҡаҙҙар» («Kazlar»), «Ҡайнар һыу» («Kaynar su»), «Дошмандар» («Düşmanlar») хикәйәләрен, «Ҡара яҙмыш» («Kara Yazı») шиғырын ғалим ыңғай баһалай. Ә. Харисов шулай уҡ төрөк шағирҙарынан Фазыл Хөсню Дагларжа, Омар Фарук, Топрак, Жаһид Колеби, Жәйхун Атуф Ҡансу, Невзат Устюн, А. Ҡадир, Хәсән Ғиззетдин Динамо, Жаһид Ырғат, Мәлих Жәүдәт Андай, Оҡтай Рифат, Хәсән Хөсәиндәрҙе иң күренеклеләре тип билдәләй. «Ҡазанһыҙ “Ҡазан”» исемле мәҡәләһендә Ә.И. Харисов 1913 йылда Рәсәйҙән сығып китеп, донъя гиҙеп, тәүҙә Монголияла, Манжурияла, Ҡытайҙа, Америкала, Германияла йәшәп, аҙаҡтан Төркиәгә килеп төпләнгән Ибраһимов Әхмәтвәли исемле татар сауҙагәре менән осрашыуын, уның 59 йыл ситтә көн итеүенә ҡарамаҫтан әсә телен онотмауын, татар әҙәби теленең сафлығын һаҡлап һөйләшеүенә ғәжәпләнеүен белдерә. Шулай уҡ сауҙәгәрҙең үҙ аҡсаһына 1970 йылдың сентябренән башлап Стамбулда өс айға бер тапҡыр «Ҡазан» тигән журнал сығарыуын, башҡорт йыр-моңдарын ишетергә хыялланыуы тураһында яҙа. Үҙенең бейә аҫрап, ҡымыҙ эшләп ҡарауын, әммә ҡымыҙ тәменең тыуған яҡтағы кеүек булмауын әйтә. 81 йәшлек сауҙагәр матди мохтажлыҡ

кисермәһә лә, Хоҙай милли моңдан мәхрүм итеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Әхмәтвәли сауҙагәр «йәш сағында, 1911 йылда Октябрь ваҡиғаларына тиклем хәҙерге Свердловск өлкәһенең Ирбит ҡалаһында үткәрелгән Рәсәйҙәге иң ҙур йәрминкәләрҙең береһе Эрбеттә Ғайса исемле башҡорт муллаһы менән танышыуын, уның оҫта йырсы булыуын, Салауат хаҡында хикәйәт һөйләүен әйтә»[1]. Ғалим, башҡорт фольклорын, Салауат Юлаев ижадын һәм биографияһын өйрәнеүселәрҙең береһе булараҡ, сауҙагәрҙең «Ҡазан» журналының 5-се һанында баҫтырып сығарған был риүәйәтен фольклор ғилеме күҙлегенән анализлай. Риүәйәттә телгә алынған Екатерина II менән Салауат Юлаевтың осрашыуы тураһындағы мәғлүмәттең тарихи дөрөҫлөккә тура килмәүен әйтә. Ә.И. Харисов Абдулҡадир Инан һәм Әхмәтвәли сауҙагәрҙең эшмәкәрлеген анализлағанда совет ғалимы күҙлегенән сығып эш итә. Шуға ҡарамаҫтан, Әхнәф Ибраһим улының «Босфор ике ағымлы» мәҡәләһе башҡорт әҙәбиәт ғилемен яңы факттар менән байытты, үҙе ҡайҙа ғына йөрөмәһен, ниндәй илдә генә булмаһын, үҙен һәр саҡ белем-ғилем эстәүсе ысын ғалим булараҡ танытты.

Китапҡа ингән әҫәрҙәрҙең һәм мәҡәләләрҙең ҡайһы берҙәре үҙ ваҡытында Ә. Харисовтың «Тормош яңынан башлана» (1945), «Әҙәби күренештәр» (1963), «Рухи тамырҙар» (1984, төҙөүсеһе – З. Харисова-Мамаева, баш һүҙ авторы – В. Әхмәҙиев), «Үткән ғүмер – ҡалған хәтер» (1997, төҙөүсеһе – З. Харисова-Мамаева, баш һүҙ авторы һәм ғилми мөхәррире – М. Нәҙерғолов) кеүек йыйынтыҡтарҙа ла урын алған. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, журнал варианты менән йыйынтыҡтағы мәҡәләләр араһында бер ни тиклем айырмалар бар. Донъя күргән китаптар менән үҙ аллы ла танышыу мөмкинлеге булғанлыҡтан әлеге йыйынтыҡҡа беҙҙең тарафтан үткән быуаттың башында баҫылып сыҡҡан журнал варианттары индерелде, сөнки был баҫмалар менән киң ҡатлам уҡыусыларҙың танышыу мөмкинлеге сикле.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәт ғилеме, фольклоры өлкәһендә берҙәй әүҙем эшләгән талантлы ғалим фән менән бер ҡатарҙан ижад эше менән дә шөғөлләнә. Ә. Харисов яҙыусылыҡ эшенә лә яуаплы ҡарай: өс тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт һуҙымында ижад ителгән художестволы әҫәрҙәрендә, көләмәстәрендә тарихи ваҡиғаларға ҡарата милләттәштәренең тормош позицияһы асыҡ кәүҙәләнә, фельетондарында,

[1] Ғайсина Н.М., Нәбиуллина Г.М. Әхнәф Харисовтың Төркиәгә сәйәхәте // Научное наследие А. И. Харисова и актуальные проблемы гуманитарного знания : материалы Всероссийской научно-практической конференции с международным участием (Уфа, 24 сентября 2024 года) / отв. ред. З.Я. Рахматуллина, Г.Н. Ягафарова. [Электронный ресурс]. Уфа : ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2024. С.68.
URL: http://rihll.com/files/Knigi/2024/11/sbornik_2024.pdf.

эпиграммаларында һәм әйтелмәгән әйтемдәрендә һүҙ маһирлығы, художестволы алым кеүек поэтик элементтарҙы ҡулланғанда ҡәләмдәштәрен уяу булырға саҡыра. Әҙәбиәт теорияһы һәм ғилеме күҙлегенән яҙыусы-коллегаларының әҫәрҙәрен «семеткеләп», кескәй күләмле юморескалар һәм фельетондар ҙа яҙа.

«Характерлы бер тәнҡитсебеҙ реченан» исемле яҙмаһында яҙыусыларҙы тәнҡитләүсе белгестәрҙең үҙҙәренең дә күп осраҡта «ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарып ҡуйыуын» мәрәкәләй.

«*Шуныһы характерлы был әҫәрҙең: унда характерлы характерҙарға бирелгән характеристика характерһыҙ сөсөләктөң контрасы булған характерлы әселек менән гүзәл характерлана, шул арҡала әҫәрҙең арҡа һөйәген характерлай торған тулы ҡанлы, оло, гүзәл ыңғай образ-персонаж, герой-героиняларҙың төптө интим личный субъектив-индивидуаль тойғоларының общественный интерестар юғарылығына мул күтәрелеүе һәм гармониялы ҡушылыуы менән үҙенең простой, ләкин монументаль характерын алған*».

«Үткән ғүмер – ҡалған хәтер» исемле йыйынтыҡта урын алған «Зәңгәр күҙҙәр», «Тормош яңынан башлана», «Иҫтәлек өсөн», «Ҡыйыу пионер», «Дарыу», «Разведчик», «Дошман тылында», «Өтәс фажиғәһе», «Ҡайғылы шатлыҡ» исемле хикәйәләргә һәм «Суҡ-суҡ сәскәле сәләм» кеүек фельетонға өҫтәп был китапҡа яҙыусының «Иҫәнгилде ҡиссаһы», «Яңы Ҡәһәриә» кеүек юмористик хикәйәләре, «Ағымдағы ремонт», «Бер иштән» исемле фельетондары, «Эпиграммалар»ы, «Әйтелмәгән әйтемдәр»е һәм «Фронт көләмәстәре» индерелде.

«Зәңгәр күҙҙәр» хикәйәһендә Тамара исемле героиняның граждандар һуғышы йылдарына тиклемге ауыр тормошо: бала сағында баяр ғаиләһенән йәберләүҙәр кисереүе хикәйә ителә. Тамара ҡыҙ ҡорона еткәс, яҙмыш уны тағы ғаиләһе яфа күргән синфи дошмандары менән осраштыра. Атаһы менән бергә биш коммунисты телеграм бағаһына аҫып ғүмерен ҡыйған Сөләймән баярҙың управляющийы Андрей Зубатыйҙы шунда уҡ таный. Тамара үҙенең исем-фамилияһын Юрий Тарасов тип үҙгәртеп, кешеләргә аҫтыртын рәүештә яуызлыҡтар ҡылып йөрөүсе баярҙың улы Виктор Тархановтың ысын йөҙөн аса алмай, уға ғашиҡ була. Шулай ҙа Тамараның кинотеатр буфетында Андрей Зубатыйҙы осратыуын именлек органдарында ваҡытында хәбәр

итеүе, ГПУ[1] работниктарының уяулығы ҡороҡкослоҡ эшләп йөрөүсе ойошҡан синфи банданы ҡулға алырға ярҙам итә. М.Х. Нәҙерғолов билдәләп үтеүенсә, «автор новелла алымын бик уңышлы ҡулланған. Ваҡиғаларҙың көтөлмәгәнсә үҙгәреш алыуы, осраҡлылыҡтың хәл иткес роль уйнауы хикәйәне ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс иткән. Әммә композицияның тарҡауланыбыраҡ китеүе, сюжет үҫтерелешенә йылдамлыҡ етешеңкерәмәүе сифатҡа зыян килтермәй ҡалмаған. Бындай етешһеҙлектәр – егермense-утыҙынсы йылдарҙа ижад ителгән әҫәрҙәрҙең уртаҡ сире»[2].

«Тормош яңынан башлана» исемле йыйынтыҡка ингән «Тормош яңынан башлана», «Иҫтәлек өсөн», «Ҡыйыу пионер», «Дарыу», «Разведчик», «Дошман тылында» хикәйәләрендә Әхнәф Харисов шул аяуһыҙ заманда ауыр һынауҙарҙы намыҫ менән лайыҡлы еңеп сыҡҡан замандаштары образына мөрәжәғәт итә. Үҙе был хаҡта, 1943 йылдың һуңғы яртыһында, Алкиндағы хәрби (учебный) частәрҙең береһендә Зариф Ариткулов һәм Нәби Сәфәрғәлиев менән бергә булыуҙары, улар менән бергә ярты йыл бер взводта хеҙмәт итеүе хаҡында яҙып ҡалдырған.

Көйөргәҙе районында тыуып үҫеп, «гражданкала» тракторист булып эшләп килгән сержант Ариткулов Ә. Харисовтың «Разведчик» исемле хикәйәһе геройының прототибы булып тора. Яҙыусы был хаҡта үҙенең «Фронт көләмәстәре»нең[3] баш һүҙендә теркәп үтә.

«Әтәс фажиғәһе», «Ҡайғылы шатлыҡ» кеүек сатирик хикәйәләрендә автор үҙен йәшлек осоро һәм шәхси биографияһы ил яҙмышы менән айырылмаҫ булып бәйләнгән кеше булараҡ таныта. Уның фашистарҙан әсе көлөүе аша Тыуған иленә булған сикһеҙ һөйөүе шул тиклем көслө икәнен аңларға мөмкин.

Әхнәф Ибраһим улы Харисов башҡорт әҙәбиәт ғилемендә генә түгел, Башҡортостан фәне тарихында ла тәрән белемгә эйә булған титан ғалимдарҙың береһе булып ҡаласаҡ. Ғалимдың беҙҙең һәм беҙҙән һуң да киләсәк быуынға әйтер һүҙе бар...

Г.М. Нәбиуллина,
Ф.Б. Юнысова

[1] Дәүләт сәйәси идаралығы. РСФСР Эске эштәр халыҡ комиссариаты (НКВД) ҡарамағындағы РСФСР дәүләт именлеге органы.
[2] Нәҙерғолов М.Х. Изге эштәр башлаусы // Әнәф Харисов. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 9-сы бит.
[3] НА. УФИЦ РАН, Ф. 3, оп. № 2, ед.хр. № 143.

# БЕРЕНСЕ БҮЛЕК. ФӘННИ ҺӘМ ПУБЛИЦИСТИК МӘҠӘЛӘЛӘР

## Мамай хан хикәйәте[1]

Бынан алты йөҙ йыл борон Алтын Урҙа әмире Мамай хан киң Русь илен талап-үртәп, халҡын аҫып-киҫеп, тере ҡалғанын ҡан илатып йөрөгән. Аҙаҡ килеп, 1380 йылдың сентябрендә хәҙерге Тула өлкәһенең атаҡлы Куликов яланында барған дәһшәтле һуғышта ҡыйратылғандан һуң, Мамай хан ҙур булмаған ғәскәре менән Ҡаф тау артына (Ҡырымға) ҡаса, һәм ул шунда үлтерелә лә.

Түбәндә бирелгән башҡорт халыҡ хикәйәте, исеменә ҡарағанда, ана шул илбаҫар Мамай тураһында булырға тейеш ине. Әммә ысынында бер ҙә улай түгел. Бында яманатлы геройҙың бары тик Ҡырымға барып сығыуы һәм шунда үлтерелеүе генә генә Мамай биографияһына тура килә. Хикәйә ителгән бөтә хәл-ваҡиға, исемләнеп үткән тарихи шәхестәр Башҡортостандың ҙур өлөшө Нуғай урҙаһына буйһонған дәүергә, бигерәк тә башҡорттарҙың нуғайҙарға ҡаршы киҫкенләшкән осорға – XVI быуаттың урталарына ҡарай.

Иң элек «Мамай хан» хикәйәтенең үҙен килтерәйек. Ул нисек яҙып алынған булһа, тап шул көйө – үҙгәрешһеҙ-ниһеҙ бирелә.

«Иҙел буйында Сыңғыҙхандың уландары яу менән үткән һуң, йәнә бик күп заман киткән һуң Мамай хан ил биләгән. Мамайҙың атаһы Муса хандың ике хатыны булып, беренсе хатынынан ете ул, икенсе хатынынан биш ул тыуған. Мамай икенсе хатындан тыуған бишенсе ул, кинйә ул булған.

Мамай яу сабырға яратыр, һәммәһен ҡырыр-ҡыйратыр, барсаһын баш эйҙереп үҙенә ҡаратыр иманһыҙ бер яу батыр булған. Мамай үткән бер ерҙә халайыҡ ҡырылған, ауыл үртәлгән, ҡаланың көлө күккә осҡан.

Ураҡ атлы бер ғәскәр башы Мамайҙың тоғро юлдашы булған. Улар икәүләп донъяның аҫтын өҫкә килтереп йөрөткәндәр.

Мамай менән Ураҡ, донъяны шулай иңләп тә буйлап ҡыйратып йөрөй торғас, Ҡаф иленә барып сығалар. Халҡын ҡыралар. Ҡаф ханын үлтерәләр. Ошо Ҡаф илендә Мамайҙың үҙенә лә донъя менән хушлашырға тура килә. Уның ғәскәрен тамам тар-мар итәләр. Үҙен тотоп үлем язаһына хөкөм итәләр. “Күпме илде, күпме халайыҡты нахаҡҡа ҡанға батырып, мөлкәтен талап, торлағын үртәп үттең һин, яуыз Мамай! – тиҙәр. – Халыҡ ҡаны, үкһеҙ

[1] Ағиҙел, 1972. № 5. 118-120-се биттәр.

балалар күҙ йәше, ҡарт-ҡоролар ҡарғышы ебәрмәй ул. Хәҙер үҙеңдең башыңды ҡырҡыр мәл етте. Ни әйтерһең бар? Әйтер һүҙеңде әйтеп кил", – тиҙәр.

Шунан һуң Мамай үҙенең һуңғы һүҙен ошо рәүешле һамаҡлап әйткән, ти:

"Иҙел башы Ирәмәл тау –
Минем атам Мусаның
Иле ҡунған ере ине;
Яйыҡ[1] башы ҡара урман –
Минем атам Мусаның
Йәй йәйләгән ере ине;
Ҡыҙыл[2], Өйсөк[3], Биштамаҡ[4]
Минем атам Мусаның
Ҡыш ҡышланған ере ине,
Табаны яҫы тарлан буҙ –
Минем атам Муса хан
Менеп йөрөр аты ине,
Даусы менән даулашыр,
Даулашыр ҙа яу асыр –
Минем атам Муса хан
Шундай дана зат ине.

Иле илегеп ҡунған ер;
Ҡышын ҡышлап торған ер;
Йәйҙәрен йәйҙәгән ер,
Бейәләр бәйҙәгән ер,
Билгә ҡылыс таҡан ер:
Киреп уғын атҡан ер;
Күп ғәскәргә баш булып,
Алыҫтарға сапҡан ер –
Бары ла ҡалған ата-бабайҙан,
Бары ла ҡала хәҙер Мамайҙан…".

Бына ошо һуңғы һүҙҙәрен әйткәс, ир яманы Мамайҙың башын өҙә сапҡандар, ти».

Беҙҙең фольклорҙа былдай әҫәр барлығы һуңғы ваҡытҡаса мәғлүм түгел

[1] Урал йылғаһын 1775 йылға тиклем Яйыҡ тип атап йөрөткәндәр.
[2] Ҡыҙыл – йылға, Уралға ҡоя.
[3] Өйсөк – йылға, Белорет районы Ҡоҙашман ауылы тирәһендә Һүренйәк йылғаһына ҡушыла.
[4] Биштамаҡ – йылға, күберәге Брештамаҡ тип йөрөтәләр. Инйәргә ҡоя.

ине. Мин уны 1970 йылдың ноябрендә Миәс ҡалаһында йәшәүсе, хәтерендә боронғо поэтик ҡомартҡыларҙы һаҡлар һәм уларҙы иҫ киткес бер оҫталыҡ менән башҡарыр 69 йәшлек Хәҙисә Ҡусабаеванан магнитофон таҫмаһына яҙып алдым. Әйтергә кәрәк, хикәйәттең ҡобайыр өлөшөндә тасуир ителгәндәрҙең раҫлағанына: тарихта тағы бер Мамайҙың булыуына (сөнки беҙ белгән Мамайҙың Башҡортостанды идара итеүгә бөтөнләй ҡыҫылышы булмаған) һәм беҙгә билдәһеҙ ана шул Мамайҙың атаһы Мусаның ҡасандыр Ирәмәл итәге менән Яйыҡ башын үҙ биләмәһе итеп тотоуына, уның шунда йәйен йәйләп, ҡышын ҡышлап ирәүән ғүмер итеүенә бер ҙә икеләнмәй ҡарау мөмкин түгел ине. Шуға күрә, тарихи ерлеген асыҡлағанға тиклем, был әҫәрҙе матбуғатҡа бирмәй торорға булдым. Ҡусабаеванан яҙып алынған ҡобайырҙарҙың, шиғырҙарҙың, йырҙарҙың, 1971 йылда «Ағиҙел» журналында (№ 4) баҫылған төркөмөнә уны индермәнем, Хәҙисә апайҙың үҙе башҡарыуында радио аша биреү менән ҡәнәғәтләндем.

Эҙләнеү-тикшеренеү шуны күрһәтте. «Мамай хан хикәйәте» исемендәге был поэтик ҡомартҡы Мөхәммәт Османов тарафынан төҙөлөп, 1883 йылда Петербургта баҫылған “Ногайская хрестоматия” йыйынтығына индерелгән «Мирза Мамайдың хикәйәте!» тигән нуғай эпосы менән уртаҡлығы булған бер әҫәр икән. «Ногайская хрестоматия» – хәҙер инде сиктән тыш һирәк осрай торған китап, ул хатта илебеҙҙең иң ҙур һәм иң бай китапханаһы булған Мәскәүҙәге В.И. Ленин исемендәге дәүләт китапханаһында ла һаҡланмаған. Шуға ла ул библиографик белешмәләрҙә лә һирәк-һаяҡ ҡына телгә алына.

Ошо хрестоматияла баҫылған «Мирза Мамайдың хикәйәте» эпосы Мусаның ике ҡатынынан ун ике улын исемдәре менән һанап сығыуҙан башланып китә. Артабан ун ике туғандың хакимлек өсөн үҙ-ара ыҙғыш-һуғыштары тасуир ителә. Мусаның беренсе ҡатынынан тыуған алтынсы улы Исмәғил айырыуса мәкерле итеп күрһәтелә.

Бер заман Мамай, Волга менән Урал буйында биләгән ерҙәрен әҙһенеп, ғәскәр туплай ҙа бер ағаһының Ураҡ исемле улы менән бергә Ҡырым яғына ҡарай сығып китә. Тиҙ арала был ике илбаҫар Ҡырым ханлығын тар-мар итә,

уның бөтә хакимдарын аҫып-киҫеп бөтөрә, ерҙәрен баҫып ала. Мамай менән Ураҡ, Ҡырымда үҙ кешеләренән түрәләр ҡалдырып һәм юлайҡан яңы ерҙәр баҫып ала барып, Волга-Урал буйындағы биләмәләренә ҡайталар. Яу йөрөп ҡайтҡас күп тә үтмәй Мамай ауырып үлә (ә башҡорт хикәйәтендәгесә Ҡырымда үлтерелмәй). Йырауҙар Мамай хаҡында мәрҫиә йырҙары сығаралар. Нуғай урҙаһында Мамай урынын Ураҡ ала. Әммә уға ла хаким булып күп торорға насип булмай: мәсеттә аҡшам намаҙы уҡыған сағында артынан уҡ менән атып үлтерәләр. Быны Исмәғил ойоштора. Ул Ураҡтың өс улын да язалай: ун дүрт йәшлек Ҡарасай менән ун йәшлек Ҡазыйҙы, дөмөкһөндәр тип, алыҫ Кавказға, кабардиндар араһына оҙата (әммә улар унда имен үҫәләр), Ураҡтың өсөнсө улы Ғаббасты егет булып үҫеп еткәс үлтерә.

Нуғай эпосында хикәйә ителеүенсә, Мамай әле ғәйәр һәм ғәйрәтле мырҙа сағында уҡ икенсе әсәнән тыуған аға-энеләренең, бигерәк тә Исмәғилдең, уға ҡарата аҫтыртын дошманлыҡ тотоуҙарын, уны юҡ итеп Урҙа башлығы булырға хыялланыуҙарын һиҙенгән була. Ҡырым илен тар-мар итеп килгән сағында Мамайҙы шомло уйҙар баҫып ала, атаһы Мусаның Көньяҡ Уралды, Ирәмәлтау, Һаҡмар һыу буйҙарын биләп хозур йәшәгән замандарын берсә һағынып, берсә шомланып иҫенә төшөрә:

«Идел басы Ирәмән[1] тау
Мәнем атам Мусадың
Иле ҡунған жире иде;
Жайыҡ басы ҡара урман
Мәнем атам Мусадың
Яз йайлаған[2] жире иде;
Ҡызыл. Өйшүк, Бестамаҡ
Мәнем атам Мусадың
Ҡыс ҡыслаған жире иде».

Ҡаҙаҡсаға яҡын телдә баҫылған эпостың тап бына ошо туғыҙ юлына башҡортса «Мамай хан хикәйәтенең» ҡобайыр өлөшөндәге тәүге туғыҙ юлы

[1] «Ногайская хрестоматия»ла шулай Ирәмән тип баҫылған.
[2] Яҙ йайлаған – йәй йәйләгән. Ҡаҙаҡ телендә яҙ (дөрөҫө – жаз) йәй мәғәнәһендә йөрөй. Башҡортса «яҙ» урынына унда «көктем» һүҙе ҡулланыла.

һүҙмә-һүҙ тура килә. Был факт беҙгә яңы табылған башҡорт хикәйәтен «Ногайская хрестоматия»ға индерелгән ҙур эпик әҫәрҙең бәләкәй күләмле бер ише тип иҫәпләргә мөмкинлек бирә.

Әммә быңдай үҙенсәлек әҫәрҙең үтә бәләкәй күләмле булыуында ғына ла түгел. 1883 йылда баҫылған эпостан айырмалы рәүештә, башҡорт версияһында Мамай, тап тарихта булғанынса, тиҫкәре герой итеп, илбаҫар хан, халыҡты яфалар, унан ҡанлы йәш ҡойҙорор яуыз бәндә итеп һүрәтләндерелә. Борондан килгән был поэтик ҡомартҡы шул яғы менән ҡиммәтле лә.

Нуғай эпосында ла, башҡорт хикәйәтендә лә төп геройҙың исеме – Мамай. Был – Шихмамай тигән исемдең ҡыҫҡартылған формаһы булып сыҡты. Ирәмәл менән Һаҡмар буйҙарын биләп йәшәгән Муса мырҙаның ун ике улының береһе – Шихмамай (дөрөҫө: Шәйхмамай булһа кәрәк), икенсеһе, юғарыла инде әйтелгәнсә, Исмәғил булған. XVI быуаттың 40–50-се йылдарында Шихмамай менән Исмәғил һәр береһе һигеҙәр йыл буйы Башҡортостанда хакимлыҡ иткәндәр. Шихмамай айырыуса залим хаким булған, күрәһең: башҡорттар уны яманлап, образына Алтын Урҙа әмире Мамайҙың да йыртҡыслыҡ сифаттарын өҫтәй төшөп, «Мамай хан хикәйәте»н тыуҙырғандар, ә нуғайҙар иһә үҙ хакимдарын мәдехләп, «Мирза Мамайдың хикәйәте» исемле ҙур эпик әҫәр ижад иткәндәр. Нуғай эпосы бынан һикһән туғыҙ йыл элек баҫылып сыҡҡан, ә башҡорт әҫәре яҙып та алынмаған.

Хәҙисә Ҡусабаева «”Мамай хан хикәйәте” йәш саҡымда хәтеремдә нисек һеңешеп ҡалған булһа, мин уны тап шул көйө һөйләп яҙҙырҙым», – тине. Бында ике ихтималлылыҡтың береһен булған хәҡиҡәт тип иҫәпләргә кәрәк булыр. Йә был әҫәр, ана шулай, башта уҡ нуғай эпосы менән уртаҡ поэтик юлдары булған бик ҡыҫҡа, әммә үҙ аллы бер ижад булып барлыҡҡа килгән һәм шул бәләкәй формаһында һаҡланған. Йә иһә үҙ заманында башҡорт фольклорында күп йәһәттән «Мирза Мамайдың хикәйәте» менән уртаҡ үҙенә айырым эпос булғандыр, ә Ҡусабаеваның йәшлек мәленә тиклем ул тулы көйө һаҡланмайынса, ҡыҫҡартылған вариантта ғына килеп еткәндер.

Башҡорт фольклорында нуғай дәүеренә ҡараған бөтә эпик әҫәрҙәре бер

комплекс итеп тикшергәндә генә, тарихи-сағыштырма метод ярҙамында башҡорт, ҡаҙаҡ һәм башҡа халыҡтар фольклорындағы «нуғай ҡатламын» тамам асып эш иткәндә генә был ике ихтималлылыҡтың ҡайһыһы ысын икәнен билдәләргә мөмкин булыр. Хәҙергә беҙҙең ғалимдарҙың боронғо халыҡ ижадын был аспектта махсус рәүештә титшерергә тотонғандары юҡ әле.

1972

## Шағирҙың тауышы (Шағир Х. Кәрим ижады тураһында)[1]

Хәниф Кәрим – бөгөнгө башҡорт поэзияһының үҙәгендә тороусы шағирҙарҙың береһе.

Беҙҙең поэзия, проза менән сағыштырғанда, шағирҙарға ярлы түгел, ләкин унның үҫеш дәрәжәһе һәм сифаты, нигеҙҙә, биш-алты шағирҙың ижады менән үлсәнә. Уларҙың художестволы әҙәбиәттә үҙҙәренә айырым көр тауыштары бар, һәм ул һәр кемгә ишетелерлек булып көслө, асыҡ яңғырай.

Х. Кәримдең поэтик тауышы башлап 1931 йылда, Башҡортостан комсомолы газетаһы аша ишетелде. 1933 йылда унның «Һаҡсы йыры» исеме менән беренсе шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыҡты. Ун шиғырлы был йыйынтыҡты шағир үҙенең тәүге аҙымы итеп атай. Ысынлап та, унның был ижады поэзияға табан башланғыс аҙым, тәүге тәжрибә генә әле. Ул йылдарҙа художестволы әҙәбиәттең төп бурысын, унның алдына ҡуйылған поэтик талаптарҙы ла дөрөҫ аңлап еткереү юҡ ине әле. Шуға күрә күптән түгел генә ныҡлап аяҡҡа баҫҡан йәш әҙәбиәтебеҙҙә, тере кешеләр образын күрһәтеүгә ҡарағанда, күп ваҡытта завод торбаларын, мартен мейестәрен, суйындар «һулауын», рудалар «тын алыуын» йырлыу өҫтөнлөк ала ине, Ғ. Сәләм һүҙҙәре менән әйткәндә, ул осорҙа әле «беҙҙең йырҙа күмер – кейәү, таштар кәләш булып йөрөйҙәр» ине.

Х. Кәримдең дә тәүге ижади аҙымы тап бына шулай башлана:

Кирбес, кирбес,  
Һине һағынып көтә  
Тыуыр заводтарҙың корпусы.

[1] Октябрь, 1946. № 1. 40-44-се биттәр.

Әй һин, йәшлек,

Илдең бөйөк бинаһына

Ныҡмы кирбес иттең бар көсөн?

*(«Постка барышлай»)*

Социализм иленең бөйөк бинаһын төҙөү пафосы менән тәьҫирләнгән, ләкин тәжрибәһеҙлектән, уны әле поэтик фекерләү аша биреп еткерә алмаған йәш шағир күктәге ҡояшты ла прожектор итеп күрергә теләй. Баштағы уйҙар ҙа «цилиндрға тулған пар кеүек». Баш үҙе лә просто баш ҡына түгел – «мейе шары; экран» («мин экранда – мейе шарында иҫке шәүләләрҙе үткәрәм»); уйҙар ҙа ғәҙәттәгесә аҡмай – «уйҙа пожар яна»! Шиғырҙарҙа телгә алынған кешеләр ҙә ғәҙәттә осрамай торған исемдәр менән йөрөйҙәр: Ади, Шәмәй, Хәмеш, Ғибаш.

Шулай ҙа без «Һаҡсы йыры»нда әле формалашмаған шағирҙың өмөтләндерә торған тауышын ишетәбеҙ. Уның йырҙарында еңеүле йылдарҙың күкрәүе яңғырай. Ул тоғро хеҙмәткә, иркен һәм мул тормош өсөн көрәшкә өндәй, йәшәүҙең әһәмиәте һәм мәғәнәһе ни, нәмәлә икәнлекте күрһәтә:

Был йәшлектең алһыу сәскәләрен

Көрәш өсөн бүләк итмәһәк,

Йәшәү ниңә?

Беҙҙең йөрәктәр

Ниндәй хистәр менән ут сәсәр?

Х. Кәрим 1936 йылда «Тантана» исеме аҫтында сыҡҡан шиғырҙары менән ижад үҫеше юлында алға ныҡлы бер аҙым яһай. Дөрөҫ, бында ла фанфара ҡысҡыртыу, барабан ҡағыу тоны шаҡтай ныҡ һаҡлана әле. Ләкин бындай тон, шағирҙың ижад тауышына ҡушылып, уның поэтикаһының төп нотаһы булған социалистик тормошто раҫлау идеяһын асығыраҡ күрһәтергә, уҡыусыла Ватаныбыҙ һәм уның еңеүсе кешеләре менән ғорурланыу тойғоһон тыуҙырыуға, бөйөк хеҙмәт тантанаһын йырлап бирергә ярҙам итә.

«Тантана» йыйынтығына ингән әҫәрҙәрҙең иң уңышлылары итеп «Ильич һәйкәле», «Беҙҙең йондоҙ», «Яуаптар» шиғырҙарын һәм «Ҡыҙ» поэмаһын күрһәтергә кәрәк. Х. Кәримдең үҙенә айырым тауышлы шағир булып формалашыуы бөтәһенән дә элек ошо шиғырҙарға бәйләнгән.

Совет яҙыусылары Ленин образын тыуҙырыуға үҙҙәренең иң яҡшы уй-хыялдарын бирҙеләр, иң тәрән ижади эҙләнеүҙәрен һалдылар. Горькийҙың билдәле очеркында Ленин «дөрөҫлөк кеүек ябай» булып кәүҙәләнә, Маяковский поэмаһында ул «быға тиклем ерҙә йәшәгән кешеләрҙең иң тереләренән дә терерәге» булып алға баҫа. Ләкин Ленин образының бөйөклөгөн күрһәтеү әҙәбиәттә тамамланған темаларҙан түгел әле. Полетаев: Лениндың быуындар «яҙып еткермәгән» портретен быуаттар «яҙып теүәлләй барыр» тип дөрөҫ әйтә. Ленин-Сталин тарафынан яңы йүнәлешкә юл алған донъя тарихы барышында, социалистик Ватаныбыҙҙың бөйөк еңеү һәм ҡаҙаныштарында Ленин эшенең һәм даһилығының яңынан-яңы һыҙаттары асыла бара. Х. Кәримдең «Ильич һәйкәле» Лениндың бөйөклөгөн бына шул яҡтан күрһәтергә тырышыуы менән ҡиммәтле. Шиғырҙың түбәндәге алты юлы ла был турала шаҡтай асыҡ һөйләй:

Күптән түгел
дала ерҙәрҙә
Ҙур корпустар күккә үреләә.
Һәр бер лампочканың
нурында ла
Ильич йылмайыуы күренә.

Шағир икенсе бер әҫәрендә, «Беҙҙең йондоҙ» тигән ун юллыҡ шиғырында, Лениндың даһилығын образлы параллелизм формаһында әйтеп бирә алған.

Х. Кәримдең бынан ун йыл элек яҙылған күп кенә шиғырҙарының идея йөкмәткеһенә, илебеҙҙең үҫешен һәм ҡеүәтен йырлау менән бергә, башҡорт халҡының яҡты бөгөнгөһөн, үткән ҡараңғы көнөнә ҡаршы ҡуйып, раҫлау һалынған. «Элек: бер туйырлыҡ икмәк өсөн дә үтә ине ғүмер ҡан һығып», «Бөгөн: киң бер илдә ниндәй матур тормош төҙөнөк!». «Ҙур байрам», «Барыр юл», «Беҙҙеке» шиғырҙары бына шундай антитезаға ҡоролғандар. Ләкин поэзия әҫәрҙәрен былдай алым менән яҙыу ғәҙәттә уларҙың художество ҡиммәтен сикләүгә алып бара: әҫәр ҡара һәм ҡыҙыл буяуҙан ғына торған картинаға оҡшай. Бында ла тап шулай: фекер һәм һүрәтләндереүҙәр «аҡты» – «ҡараға», «ҡараны» – «аҡҡа» ҡаршы ҡуйып сағыштырыуҙан – «элек шулай ине», «хәҙер –

былай» тип хәбәр итеүҙән уҙмайҙар, һәм бында, шуға күрә, поэзия бик зәғиф әле.

«Ҡыҙ» поэмаһы быңдай тарлыҡ менән сикләнмәгән әҫәр. «Көрәш аша беҙҙең көндәр генә әсәләрҙе кеше яһаны» – шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, әҫәрҙә сиселгән төп тематик мәсьәлә бына шул. Әйтергә кәрәк, беҙҙең поэзияла был темаға яҙылған башҡа берәй махсус әҫәрҙең булғаны юҡ әле.

Поэманың сюжете ҡатмарлы түгел. Миңкәй – совет революцияһына тиклемге осорҙоң иң бәхетһеҙ кешеләренән береһе: ул алты ҡыҙ үҫтерә, ә ер бирелмәй. Миңкәй, «кәрәгенән артыҡ ҡыҙ тыуҙырҙың, тик исмаһам, бер ул тапмайһың», тип бисәһе Ғәйнурҙы битәрләй. Йылдар үтә, Миңкәй ғүмер буйы көткән шатлығына ирешә: Ғәйнур ул тыуҙыра – «бер душ ер артты!» Ләкин шатлыҡ күпкә бармай: «ер бүлергә ваҡыт еткәс тә, үлеп ҡуя уның малайы»... 1914 йыл. Герман һуғышы иғлан ителә. «Күптәр илай, баштар китә», тип. Миңкәйҙең үҙ ҡайғыһы көслө: «Ҡыҙҙар бирелмәне кейәүгә». Миңкәй ҙә, Ғәйнур ҙа күңелһеҙ йыр ишетәләр: «...һикһән йәштәге ҡарттарға ҡыҙҙарҙы ҡала тиҙәр». Поэманың «Бәхетле кеше» тигән эпилогында беҙҙең заман ҡатын-ҡыҙҙары тураһында йырлана, ирҙәр менән тиңләштерелгән әсәләрҙең һәм ҡыҙҙарҙың хеҙмәткә, уҡыуға, ял итеүгә тигеҙ хоҡуҡлы булыуҙары хикәйә ителә. «Ҡыҙ» поэмаһы, бигерәк тә уның эпилогка тиклем булған өлөшө, үҙенең художество әһәмиәте яғынан «Тантана» тибындағы шиғырҙарҙың бөтәһенән дә өҫтөн тора.

Х. Кәримдең поэзия ерлегенә ныҡлап аяҡ баҫыуы ошо «Ҡыҙ» поэмаһы менән башлана. 1939 йылда сыҡҡан «Ҡояшлы ил» йыйынтығында инде беҙ уны поэзия «һауаһы» менән иркен тын алыусы шағир итеп күрәбеҙ. Был хәл бөтәһенән дә элек шиғырҙарҙың художество эшләнешендә, поэтик төҙөлөшөндә күренә. Мәҫәлән, уның нигеҙҙә ике стопалы ямб менән яҙылған «Балҡы, илем!» тигән шиғыры, үҙенең эшләнеш сифаты менән, бөгөнгө башҡорт поэзияһының башында барыусы Рәшит Ниғмәтиҙең «Һалҡын шишмәленән ҡалышмай:

Гөрлә, йәшлек,
Ялҡын сәсеп
Алыҫ йылдарға.

Зәңгәр, аҡһыл
Сәскә атһын
Беҙҙең юлдарға.
Теҙел сафҡа,
Илде һаҡла,
Шартлаһа туптар –
Беҙ ул саҡта
Бөтә яҡтан
Асырбыҙ уттар
Иҫ һин, елкәй,
Үҫ һин, гөлкәй,
Иркен далала.
Балҡы, минең
Яҡты илем,
Бөтә донъяға.

Х. Кәрим 1940 йылды, үҙенең-тыуған ауылына ҡайтыу уңайы менән, «Ауыл» тигән поэмаһын яҙа. Әҫәрҙә һуңғы ун йыл эсендә үҙгәргән, Өй йылғаһы буйындағы колхоз ауылы, уның мул тормошло, шат кешеләре һүрәтләнә; ода характерында хикәйә ителә.

Үҙгәргәнһең, ауылым,
                    Урамдарға
Ай дәүмәле лампа әлгәнһең,
Биш мәсетле ҡараңғылыҡтан
Биш мәктәпле ауыл булғанһың, –

тип һоҡлана шағир, һәм уға: «Ауыл да был, түгел дә кеүек, таныш та был, ят та шикелле» тойола.

Тап бер йылдан «ай дәүмәле», лампалар эленгән ауылдарҙы, ҡупшы йортло ҡалаларҙы ҡырыу-емереү, бәхетле совет халҡын ҡол итеү маҡсаты менән немец бандалары тыуған илебеҙгә баҫып инделәр. Бөйөк Ватан һуғышы башланды.

Егерме икенсе июнь көнө «Ҡыҙыл Башҡортостан» битендә, шағирҙарҙан беренсе булып, Х. Кәримдең «Асыу йыры» яңғыраны.

Ер һелкетер халҡым ҡеүәте

Бомба булып ҡырһын дошманды,
Утлы снаряд булып өҙгөләһен
Ерҙә урын тапмаҫ дошманды!
Бер кемгә лә бирмәҫ халҡым
Заводтарын, шахта, тау-ерен.
Үлемен һиҙенеп ҡоторонған дошман
Ошо ерҙә табыр ҡәберен!

Х. Кәрим Ватан һуғышының һуңғы көндәренә тиклем фронтта булды. Ул һуғышта данлы армиябыҙҙың орденға достоин офицеры булып ҡатнашты. Ул ҙур һуғыштың оҙон юлдарын һуғышсы булып үтте, һәм үҙенең боевой юлдарын, шағир булып, шиғыр юлдарына күсерә барҙы. Шағирҙың «Мөхәббәткә үлем юҡ» йыйынтығына ингән шиғырҙарының күбеһе, ә «һуғыш юлдары» тотошо менән фронт шарттарында яҙылғандар. Был әҫәрҙәрҙең нисек ижад ителеүе «Йырҙың тыуыуы» шиғырында асыҡ әйтелгән.

Әйтергә кәрәк, Х. Кәримдең блиндаждарҙа, канонаданан тетрәп торған Ржев урмандарында, япраҡ кеүек ҡалтыраған шыршы төбөндә ижад ителгән шиғырҙарының күбеһе – өҫтәлендә абажурлы лампа янып торған тыныс бүлмәлә яҙылған әҫәрҙәренән билдәле дәрәжәлә юғарыраҡ тора, тойғо тыуҙырыуҙары яғынан, элеккеләренә ҡарағанда, шаҡтай өҫтөн күренә. Фронт ысынбарлығы Х. Кәримде лирик шағир итә.

Һәм был ғәжәп түгел. Немец илбаҫарҙарына ҡаршы һуғыш беҙҙең Ватаныбыҙ һәм уның кешеләре өсөн ҙур һынау булды, һуғыш беҙҙе дөрөҫөрәк күҙәтергә, нығыраҡ хәтерләргә, көслөрәк һәм тәрәнерәк һиҙергә-һиҙенергә, тәьҫирләнергә һәм кисерергә өйрәтте, һуғыш беҙҙең яратыу һәм нәфрәтләнеү тойғоларын көсәйтте, шатланыу менән бергә ҡайғыра белергә лә өйрәтте. Үҙен Ватанының тоғро улы итеп һиҙгән боец та, шағир ҙа бына шул тойғо һәм кисерештәр менән янды, халҡы шатланһа – шатланды, халҡы ҡайғырһа – ҡайғырҙы, һәм Х. Кәрим фронтта һуғышсы булып та, шағир булып та үҙен һәр ваҡыт халыҡ менән бергә һиҙҙе. Ул үҙен айырым башҡа «тойғолар кешеһе» итеп түгел, ә тыуған иленән, халҡынан айырым йәшәй алмай торған органик бер киҫәк итеп тойҙо, һәм бына шундай шағир ғына:

Мин тормошто,

Ватанымды һөйәм,

Эске ярһыу менән уйлайым:

Кислородһыҙ йәшәп булмағандай,

Мин был илһеҙ йәшәй алмайым, –

тип бик хаҡлы рәүештә әйтә ала.

Үҙ тыуған илен ысын күңелдән һөйгән, үҙ йөҙөндә иленең бер киҫәген күргән кеше генә:

Һуғыш илгә керҙе.

... Шул саҡ

Хуш еҫ сәскән әшәлсәләр[1],

Яландарҙың аҡһыл әреме,

Сүп ҡаплаған межалар ҙа булды

Һалдат йөрәгенә ҡәҙерле.

Сөнки был ер –

һинең тән киҫәгең,

Һәр бөртөгө –

тир һәм күҙ йәшең.

Телһеҙ шаһит булып, күкрәгеңдә

Күтәргән ул хаҡлыҡ көрәшен, –

тип әйтә ала.

Шағир-һуғышсы Х. Кәрим емерелгән ҡалалар, яндырылған ауылдар аша һәм ер өҫтөн ҡаплаған ҡуйы төтөндәр үтәһенән «тыуыр көндәрҙең яҡтылығы»н күрә, бөйөк еңеүҙең беҙҙең яҡта буласағына, еңеү ҡыуанысының «һәр өйгә ҡунаҡ булып түгел, хужа булып инәсәгенә» ныҡ ышаныу менән ҡарай. Х. Кәрим яҡшы аңлай: тормошҡа бер юл бар, ул юл немец мәйеттәре өҫтөнән бара. Бына шуның өсөн дә автоматлы шағир «тимер батальондар сафында» элек ауыл булған ерҙәрҙән, емерек ҡаланың немец мәйеттәре түшәлгән урамдарынан алға, көнбайышҡа табан ашыға, – сөнки:

Ярты юлда

Туктап ҡалмай һыуҙар,

[1] Рус телендә ятрышник – орхидеялар ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үлән төрө // https://dic.academic.ru/ (*төҙөүселәрҙән*).

Ҡоймайынса зәңгәр диңгеҙгә.

Дошман башын өҙөп,

Ергә күммәй,

Тыныс һулау,

йәшәү юк беҙгә!

Х. Кәримдең уй-фекерҙәренең, хис һәм кисерештәренең сығанағы булып тыуған илде һәм «йөрәктәргә ғәйрәт, ҡанат биреп, изге теләккә илтеүсе» даһи Сталинды һөйөү тойғолары ята. Был тойғолар дуҫтарға мөхәббәт, дошманға нәфрәт тыуҙыралар. Шул тойғолар уның автоматын да, ҡәләмен дә бер үк йүнәлешкә табан хәрәкәт иттерә. Шағир һәм һуғышсының «мөхәббәт һәм нәфрәт менән тулы күңеле» шиғырҙар юлына һалына. Фронт Х. Кәримде лирик шағир итә. Фронт тормошоноң теләгән бер күренеше тип әйтерлек унда поэзия уята. Шағир «пушкалар һөйләгәндә, муза өндәшмәй» тигән иҫке ҡарашты үҙенең фронт лирикаһы менән кире ҡаға:

Ҡарайыммы төнгө ут уйнауға

Күк битендә, –

Батам уйҙарға.

Иртән ҡанат ҡаҡҡан ҡошсоҡ һымаҡ,

Миндә поэзия уяна.

Ерҙе дерелдәтеп туптар ата,

Блиндаж усағында ут яна.

Иртән ҡанат ҡаҡҡан ҡошсоҡ һымаҡ,

Миндә поэзия уяна...

Ватан һуғышына саҡлы Хәниф Кәрим өсөн лирика характерлы түгел ине, поэзияның был төрөнә уның «Яуаптар» шиғырынан башҡа әҫәрен күрһәтеп тә булмай. Һуғыш йылдарында ул ижадын лирик йүнәлеш менән үҫтерә башланы. Шағирҙың тиҫтәнән артыҡ лирик шиғырҙары араһында «Йөрәккә яҡын йылға», «Ышаныу», «Мин ҡайтырмын», «Республикама», «Һағыныу», «Ҡайғы» кеүектәре уҡыусының күңелен нығыраҡ тарталар. Х. Кәрим лирикаһы күбеһенсә Ватанды һөйөү, үҙенең тыуған республикаһын – сыуаҡ Башҡортостанды һағыныу тойоғоларына нигеҙләнгән:

Республикам,

Йыраҡ ерҙәрҙә лә
Һиҙәм һинең тупраҡ еҫенде.
Һәм төшөмдә ғашиҡ егет һымаҡ,
Ҡабатлайым һинең исемеңде.

«Республикам, һинең ҡаның – минең ҡанымда» ти шағир, һәм ул, ҡайҙа ғына барһа ла, «тыуған йорто, тирбәлгән бишеге» булған Башҡортостанды тәбиғи деталдәре арҡылы күҙ алдына баҫтыра: Волга һәм Днепр һыуында «Ағиҙелдең тәмен» таба, уға илебеҙҙең көнбайыш тәбиғәте сал Уралдың мүкле ҡаяларын, көмөш Иҙелдең текә ярҙарың хәтерләтә.

Хәниф Кәрим поэзияһының характерлы яҡтары, ҡыҫҡаса алғанда, бына шундай. Ләкин беҙ шағирҙың ун дүрт йыллыҡ поэтик ижадын үлсәгәндә, уның етешһеҙлектәрен дә күрергә һәм күрһәтергә тейешбеҙ. Бынан күҙ йоммау, бөтәһенән дә алда, шағирҙың үҙе өсөн әһәмиәтле. Сөнки ул үҙе үк:

Урылмаған бойҙай баҫыуындай,
Йәшәлмәгән ярты ғүмерем бар,
Һәм ул йылдар
ырҙын табағында,
Үҫкән ынйы булһасы, дуҫтар! – ти.

Беҙ Х. Кәримгә урыласаҡ «бойҙайҙарының» яҡшы сортлы булыуына, ырҙын табағынан йыйып алғанда, ынйылай саф бөртөклө булыуына теләктәшлек күрһәтәбеҙ. Ләкин «ни сәсһәң, шуны урырһың» тиҙәр. Шуның өсөн шағирҙың быға тиклем «урылып йыйылған бойҙайҙарының» сорттарын өҫтәнерәк булһа ла күҙҙән үткәрәйек.

Х. Кәрим шиғырҙарының араһында түбәнерәк «сортлылары» ла бар. Күп кенә әҫәре өсөн характерлы кәмселектәр шуларға ҡайтып ҡала: 1) образдар менән күрһәтеү урынына – һөйләү һәм һанау, 2) поэзияны риторика менән алмаштырыу, 3) шиғыр төҙәлөшөндәге мәжбүри ҡағиҙәләрҙе аша һикереү.

Плеханов, «шағирҙың бурысы – иҫбатлау түгел, ә күрһәтеү», тип яҙҙы. Л. Тимофеев үҙенең «Среди стихов» тигән мәҡәләһендә (жур. «Знамя» № 7, 1945) күп яҙыусылар был хәлде кәрәгенән тыш ябайлаштырып ебәрҙеләр, тип күрһәтә. Улар, ти ул, хәҙер иҫбатламайҙар ҙа, күрһәтмәйҙәр ҙә, үҙҙәре

һөйләйәсәк нәмәне исемләп кенә үтәләр. Шекспир заманында сәхнәлә урман декорацияһы урынына «урман» тип яҙылған таҡта эленеп ҡуйыла торған булған, һәм театр ҡараусы кеше шуны уҡып, ваҡиғаның урманда барғанлығын аңлаған. Беҙҙә күп ваҡытта: «Бында – совет офицерының характеры» тигән яҙыу тағылған әҫәрҙәрҙе уҡыйбыҙ, йәки тыуҙырылырға тейешле кисерештәрҙе атап ҡына күрһәткән шиғырҙарға осрайбыҙ.

Л. Тимофеев быға миҫал итеп тәжрибәле генә шағир Н. Браундың «Морская слава» тигән китабын ала. Был хәлде беҙҙең әҙәбиәткә күсергәндә, байтаҡ шағирҙарҙың әҙ тигәндә ярты ижадтары инеп китер ине.

Бына Х. Кәримдең «Шартлағыҙ, туптар!» тигән шиғырының беренсе яртыһы:

Һүҙ алды артиллерия.
Туптар гөрһөлдәүенә
Ҡушылды миномет тауышы.
Ерҙең дерелдәүенән
Ҡалтыранды ҡалын урман,
Һәр бер нарат, һәр ҡыуаҡ,
Волганың текә ярҙары
Ишелеп төштө шул саҡ...
Был – ДОТ-тарҙың емерелеүе,
Блиндаждарҙың шартлауы,
Беҙҙең данлы пехотаның
Атакаға атлауы.

Был шиғыр уҡыусыла бер төрлө лә тойғо уята алмай. Сөнки бында совет пехотаһының дошманға ҡаршы дәһшәтле һөжүмен, атакаға барыусы тере кешеләрҙе һәм уларҙың нәфрәтен күрһәтеү урынына һуғыш өсөн бик ябай хәл булып һаналған гөрһөлдәүҙәр генә исемләнеп әйтелә. Эстетик тойғо һәм хис бик ескә нәмә, уны шиғырҙа туп гөрһөлдәтеп, граната шартлатып ҡына уятып булмай! Был шиғырҙың төҙөлөшө лә буталсыҡ: баштағы дүрт юлдан берәй нәмә аңлар өсөн рифмалашыуҙары яғынан икенсе куплетҡа ингән ике юлды өҫтәп уҡырға кәрәк.

Башҡорт поэзияһында таң тураһында яҙмаған шағир юҡ. Ләкин «Һуғыш ҡырҙары өҫтөндә таң ата» шиғырын башлап Х. Кәрим яҙҙы. Уҡыусы был шиғырҙан яңы бер таң көтә, фронт лирикаһы менән тәьҫирләнгеһе килә. Һәм ул уҡый:

Һуғыш төнө
Йондоҙ булып
Ракеталар атыла.
Йә уң яҡта, йә һул яҡта
Урман, ҡырҙар яҡтыра...
Был – дошмандың ҡурҡаҡ төнө,
Йоҡоһоҙ төнө.
Был – дуҫтарса уртаҡ көлөү,
Был – беҙҙең көлөү,
Был – еңеүгә ашыҡҡандың
Меңдән бер төнө,
Был – беҙҙең бәхет балҡыуы,
Дошманға һүнеү…

Уҡыусы бының ҡалған өлөшөн уҡып тормай: былай ҙа аңлашыла бит! Х. Кәримдең бер төр шиғырында поэзия урынын риторика ала. Бынығында, дөрөҫөн әйткәндә, риторика ла юҡ.

Шиғырҙы ритмик яҡтан ойоштороу – ижектәр һаның, баҫым һәм паузаларҙы билдәле бер үлсәүҙә сиратлаштырыу – поэзияның мәжбүри ҡағиҙәһе. Х. Кәрим әҫәрҙәрендә был төп поэтик закондарға ҡайһы ваҡытта бик еңел ҡарау – бер нисек тә сикләнмәгән иреклелек һиҙелә. Шиғыр юлдарын рифмалаштырыуҙа ла шундай уҡ хәл. Ул «шаҡмаҡ – таҡмаҡ», «Әптерәш – аптыраш» кеүек күптән сәйнәлеп ташланған рифмаларҙы ҡулланмау яғында. Был, әлбиттә, уңышлылыҡ. Ләкин күп кенә шиғырҙарында яңғырауҙары яғынан бер ҙә оҡшашлығы булмаған «ирекле» рифмалар осрайҙар. Миҫал килтерәйек:

Ҡурҡаҡ көн дә мең ҡат үлә,
Батыр үлә бер тапҡыр.
Ҡоллоҡ сылбырын кейгәнсе,
Яуҙа ауғаным яҡшы.

Бында ижектәр һаны ла тигеҙ, ритм да бар, тик рифма ғына ҡолаҡты яра – «тапҡыр» менән «яҡшы» һүҙенең әйтелешендә уртаҡлыҡ юҡ. «Тапҡыр» – «артыҡ» тип рифмалаштырғанда, ҡолаҡҡа яғымлыраҡ ишетелер инә, һәм улай тиеү мәғәнәһе менән дә йәтешерәк.

Х. Кәрим Ғ. Сәләмдең үлеме уңайы менән яҙылған шиғырында:

Бергәләшеп тинһеҙ бейеклеккә
Күтәрербеҙ башҡорт шиғырын, –

тип һүҙ бирҙе. Бының өсөн беҙҙә шарттар тыуҙырылған. Башҡорт поэзияһын тейешле юғарылыҡҡа күтәрер өсөн шағирҙарҙың, шул иҫәптән Х. Кәримдең, һәр бер шиғыры бөтәһенән дә элек бөйөк шағир Некрасов ҡуйған законлы талапҡа яуап бирергә тейеш. Бына ул поэзияның законлы һәм мәжбүри талабы:

Көмөш тәңкәләй ҡой һин шиғырҙы,
Булһын ул ап-асыҡ һәм үткен,
Һүҙҙәргә тар бир һин урынды,
Булһын фекерҙәргә – иркен.

1946

## Бикчәнтәй новеллалары[1]

Әнүәр Бикчәнтәй үҙенең бөтә әҙәби эшсәнлеген туранан-тура газета менән бәйләгән яҙыусы. Уның ижади тәжрибәһе, стиле тураһында газеталарҙан тыш һөйләү мөмкин түгел, һәм, киреһенсә, айырым алғанда, «Красная Башкирия»ның һуңғы ике йылдағы номерҙарындағы әҙәби материалдар тураһында Ә. Бикчәнтәйҙең очерктарынан, бәләкәй хикәйәләренән, ваҡ новеллаларынан башҡа тулыһынса һүҙ йөрөтөп булмай, тиһәк тә хата булмаҫ.

Ә. Бикчәнтәй әҙәбиәттән «газетаға ҡатнашыусы» түгел. Ул үҙен әҙәбиәттә газета арҡылы таныта барыусы яҙыусы.

«Коммуна», «Йәш коммунар», «Комсомолец Башкирии», «Водник Башкирии», «Мужество» (27-се армия), «Суворовский натиск» (2-се Украина фронты), аҙаҡ килеп, «Красная Башкирия)» – Ә. Бикчәнтәйҙе 1933 йылдан башлап бөгөнгә тиклем журналистлыҡ һәм әҙиплек ижадына дәртләндергән,

[1] Октябрь, 1947. №7. 73-76-сы биттәр.

уны үҫтерә һәм камиллаштыра килгән ерлектәр ана шул газеталар. Был газеталарҙа ул үҙенең очерктары, очеркка яҡын торған әҫәрҙәре менән көндәлек тормоштоң мөһим мәсьәләләрен уҡыусыларға әҙәбиәт саралары арҡылы еткереүселәрҙең береһе булып килде һәм шуны дауам иттерә. Уның был әҫәрҙәре, күләм яғынан газета талап иткәненсә, ҙур түгелдәр, ә һан яғынан улар шаҡтай күп, һәм әҙәби сифат яғынан да улар, шикһеҙ, төрлөләр.

Ләкин был «әҙәби яҙмаларҙың» Бикчәнтәйҙе газета биттәренән ситкә – дөйөм әҙәбиәткә художник-яҙыусы итеп күтәреп сығарыу өсөн көстәре зәғиф ине әле. Автор үҙенең был ижады менән газета номерҙарында «көндәлек» очеркист-яҙыусы булып ҡына килде.

Әнүәр Бикчәнтәй художестволы әҙәбиәткә үҙенең алтмыштан артыҡ ваҡ новеллалары һәм миниатюр хикәйәләре менән килеп керҙе. Уның яҙыусы булып танылыуы йәки танылa барыуы, бөтәһенән элек, ана шуларға бәйләнгән. Уның был бәләкәй күләмле әҫәрҙәрендә ҙур темалар күтәрелгәндәр, уларҙа шаҡтай ҙур образдар йәшәйҙәр. Ҡыҫҡа формалылыҡ фекер тәрәнлегенә ҡамасаулыҡ итмәй. Бикчәнтәй новеллаларын «һүҙгә һаран, фекергә йомарт» итеп яҙырға тырыша. Ваҡ жанрҙар өсөн, билдәле, «йәйелеп» тасуир итеү, киң рәүештә хикәйәләү мөмкинлеге юҡ. Бикчәнтәй ҡыҫҡа формаларҙың үҙ мөмкинлектәре менән оҫта файҙалана белә. Ул образдарҙың бөтөнлөгөнә «еңелсә» һүрәтләү, ваҡ, ләкин типик деталдәр сочетаниеһе аша өлгәшә. Бына шуға күрә лә уның кешеләре «мул тотонған» художник ҡулы менән яҙылған төрлө буяулы образдарҙы түгел, ә ҡағыҙға дөрөҫ силуэты һаҡлыҡ менән генә төшөрөлгән кешеләрҙе хәтерләтә.

Ләкин Бикчәнтәй миниатюралары, бик аҙҙарын иҫкә алмағанда, осраҡлы кешеләр «силәүэты» түгел. Улар төп һыҙаттарҙа дөйөмләштерелгән типик кешеләр. Яҙыусы үҙенең ижади тырышлығын кешеләрҙең фотографияһын төшөрөүҙән ҡасыуға, уларҙың «еңел ҡулдан» һүрәтләнгән тышҡы һәм «эске» портретен биреүгә йүнәлдерә. Дөрөҫ, М.И. Калинин әйткәнсә, «яҡшы яҙылған портрет, ғөмүмән алғанда, фотография менән берҙәй була, ләкин шуның менән

бергә ул һис тә фотография кеүек нәмә түгел: унда тере кеше үҙенең бөтә динамизмы менән һиҙелеп тора».

Ә. Бикчәнтәйҙең 1946 йылда айырым китап булып сыҡҡан «Рус һалдаты тураһында новеллалар»ында ана шул тере кешеләр үҙҙәрен ныҡ һиҙҙереп торалар. Шул йәһәттән Бикчәнтәйҙең «Новеллалары» унының 1944 йылда[1] баҫылған шундай уҡ хәрби темаларҙағы «Ҡыҙыл мәк» йыйынтығынан яҡшы уҡ өҫтөн торалар. Бында Бөйөк Ватан һуғышында «күргән-белгәндәр» авторҙың художество «призмаһы» арҡылы нығыраҡ үткәрелеп дөйөмләштерелгәндәр.

«Рус һалдаты тураһындағы новеллаларҙың лейтмотивы булып Европа халыҡтарының (чехтарҙың, румындарҙың, мадьярҙарҙың) Совет Армияһын нисек ҡаршы алыуҙарын һәм уға ниндәй мөнәсәбәттә булыуҙарын һүрәтләү арҡылы рус һалдатының батырлығын, намыҫын һәм данын күрһәтеү тора. Бигерәк тә «Һалдат бункер ишеген асты», «Ян Гус майҙанындағы сәғәт», «Зәңгәр күҙҙәр тураһында иҫтәлек», «Алҡа», «Чардаш» кеүек новеллаларҙа был төп мотив үҙенең айырыуса асыҡлығын алған.

Рус һалдаты ҡараңғы бункер ишеген аса. Унан – немец снарядынан йәшенгән кешеләр тышҡа – ҡояш нурына, саф һауаға сығалар. Ләкин был чех ҡалаһындағы ғәҙәттәге бер бункер ғына түгел. Ул символлы образ. Яҙыусы, ҡараңғы бункер арҡылы, фашизм һөрөмө баҫҡан Европаны символлаштырған, бункер хәленә төшөрөлгән Европаның халыҡтарын немец фашизмы ҡоллоғонан ҡотҡарып, Совет Армияһы яҡтылыҡҡа сығарҙы.

Әҫәр шуны аңлата. Был новелла күләме менән илле юлға ла тулмай. Ә уға ана шундай тәрән мәғәнә һалынған.

Европа халҡы бункер ишеге асылыуын күптән көтә ине... Был өмөттө Бикчәнтәй икенсе бер новеллаһында ярым романтик образдар аша күрһәтә.

...Ян Гус майҙанындағы ғәжәп ҙур боронғо сәғәттең һуғыуын Прага һигеҙ йөҙ йыл буйы тыңлаған. Чех ҡарты төндәрен сәғәттән күҙҙәрен алмаған. Ул, майҙандағы боронғо сәғәт төнгө ун икене һуҡҡан һайын, изге Ян Густың ергә

[1] Беҙ бында «Ҡыҙыл мәк» китабына туҡталмайбыҙ. Белешмә урынына тик шуны ғына әйтергә кәрәк: был йыйынтыҡ 27 ваҡ әҫәрҙән тора. Улар бөтәһе лә, авторҙың үҙенең әйтеүенсә, 1943-44 йылдарҙа «Һуғыш юлдарында күргән һәм ишеткәндәрҙән» сығып яҙылған.

төшөүен көтә, ул ыңғырашҡан халыҡтарҙы яҡлар, тип өмөтләнә икән. «Бер-берегеҙҙе яратығыҙ, һәр кемгә хаҡлыҡ теләгеҙ», – тигән яҙыулы боронғо сәғәт һуға. Ян Гус төшмәй. Яҡлаусы юҡ. Улай ғына ла түгел: немец бомбаһы Ян Гус сәғәтен емереп ташлай. Сәғәт юғала. Өмөт ҡала. Һәм халыҡ көткәненә ирешә: фашизм туҡмауынан ыңғырашҡан халыҡтарҙы ҡотҡарусы Совет ғәскәрҙәре 9 майҙа Ян Гус майҙанына килеп керәләр...

Европа халҡы ҡараңғы бункер ишеге асылыуын Ян сәғәте һуҡҡан һайын көтә ине... Бункер ишеген рус һалдаты асты. Немецтар өсөн был турала уйлау ҡурҡыныс ине. Улар халыҡ араһында: «Большевиктар бер генә күҙле кешеләр, көпә-көндөҙ кеше талаусылар» тип, күп йылдар буйына пропаганда алып барҙылар. Шуға күрә словак һәм мадъяр ҡыҙҙарының рус һалдатын башлап күреү менән алҡаларын һәм йөҙөктәрен йәшереүҙәре, Ион кеүек ҡарттарҙың яғымлы һәм саф күңелле рус һалдатының «большевиктың үҙе» икәнлегенә тәүҙә ышанғыһы килмәүе осраҡлы хәл түгел ине. «Новеллаларҙа» был бөтә реаллеге менән күрһәтелгән.

Прагала иҫке ратуша стенаһындағы легендалы сәғәт ватылған. Ләкин уның боронғо яҙыуы кешеләрҙең күңеленә һеңешеп ҡалған. Хәҙер демократиялы ил халҡы Ян Густың «Бер-берегеҙҙе яратығыҙ» тигән һүҙҙәренең реаль мәғәнәһен чехтар менән совет халҡы араһындағы дуҫлыҡта күрә.

Совет һалдаты ҡараңғы букерҙе асты... Был көн Европа кешеләрендә, балаларҙан алып өлкәндәргә тиклем, ғүмергә онотолмаҫлыҡ бөйөк иҫтәлек ҡалдырҙы. Будапешттағы Гизи исемле ҡыҙ бала үҙенең карауаты өҫтөнә, стенаға һабын ҡағыҙы йәбештереп ҡуйған. Ҡағыҙға «Венгрияла бик һирәк осрай торған зәңгәр күҙҙәр төшөрөлгән». Гизи ул ҡағыҙҙы үҙен үлемдән ҡотҡарып алып ҡалған зәңгәр күҙле совет һалдатының иҫтәлеге итеп һаҡлай. Сөнки «Гизиҙа ул һалдаттың үҙ фото рәсеме юҡ бит».

Немец-фашист илбаҫарҙарға ҡаршы һуғышта Совет һалдаттарын батырлыҡҡа, еңеүгә рухландырыусы көс совет патриотизмы булды. Тыуған илде һөйөү, Ленин-Сталин партияһына ысын күңелдән бирелеү, бөйөк юлбашсыбыҙ Сталинға сикһеҙ мөхәббәт тойғолары Совет Армияһын еңеүгә

алып барҙы. Совет кешеһенең был бөйөк һәм айырылмаҫ тойғолары Бикчәнтәйҙең бигерәк тә «Ике һалдаттың йөрәге», «Шыршы» («Монахиня»), «Портрет» новеллаларында оригиналь ваҡиға һәм күренештәр аша дөйөмләштерелгән.

«Рус һалдаты тураһындағы новеллалары» менән Ә. Бикчәнтәй үҙен прозала миниатюраһы оҫталығын камиллаштыра барыусы итеп күрһәтте. Шулай ҙа был йыйынтығына ингән әҫәрҙәре художество дөрөҫлөгө һәм дөйөмләштерелеү дәрәжәләре яғынан бөтәһе лә бер тигеҙ түгел. Бындай тигеҙһеҙлек бигерәк тә «Генерал» һәм «Сәскә» тигән ике новеллала айырта нык һиҙелеп тора.

Дөрөҫөн әйткәндә, был ике миниатюрала дөйөмләштереү юҡ, дөрөҫлөк сиктән тыш самалы, улар оригиналлектән ситтә торалар. Ҡарт генерал кеше һыҙған шырпынан, кеше зажигалкаһынан тәмәке ҡабыҙмай. Ул, интегеп булһа ла, утты үҙенең шымарып бөткән тимер ҡаплы шырпыһынан таба. Бына ниндәй, үҙенекен итә торған генерал ул! Автор был курьёз арҡылы генералдың хәрби эштә лә ана шундай ныҡышмалы кеше икәнен күрһәтергә теләгән. Ул 1917 йылда ла «үҙенекен иткән»: ватылыуҙан йылға уртаһында туҡтап ҡалған танкыны, немецтарҙың атыуына ҡарамаҫтан, тырыша торғас яр башына сығарған. Шунан бирле ул тәмәкене үҙ шырпыһынан ғына ҡабыҙыр булған!

«Генерал» новеллаһы уңышһыҙ әҫәр. Ундағы деталь тормоштағы дөрөҫлөккә ярашлы түгел, хатта уға ҡаршы килә! Кешеләр ут тәҡдим итеп тороуға ҡарамаҫтан, тәмәкеңде «тирләп-бешеп» үҙ шырпыңдан ҡабыҙырға тырышыу – кирелектән башҡа бер нәмә лә түгел. Һәм бындай сифаттың эштә ныҡышмалы булыу менән бер төрлө лә уртаҡлығы юҡ.

«Сәскә» новеллаһында һөйләнгәндәр ҙә тәбиғи түгел. Унда тормош боҙолоп сағылдырылған.

Ауыр яра алған һалдат «үлем менән йөҙ егерме сәғәт буйына көрәшкәндән һуң» сестраға: «Сәскәнең кеше ғүмерен алып ҡалыуына ышанаһыңмы?» – ти. Сестра быға ышанғандырмы, юҡмы – билдәле түгел (сөнки һалдат, уның яуабын көтмәҫтән, был хәлдең нисек булыуын һөйләп

алып китә). Ләкин шуныһы асыҡ: новелланы уҡыусылар быға ышанмайҙар... «Мин ҡуйы үлән араһында ята инем, – ти һалдат, – алдымда ҡыҙыл мәк сәскәһе. Мин ашығып уға һуҙылдым», һәм уны өҙөп алып, «баш өҫтәмә күтәрҙем». «Шул ваҡыт санинструктор Мария», «мәк сәскәһен күреп, югереп килде һәм мине күрҙе».

Һуғыш яланы Венаның экзотик урманы түгел. Снарядтар ярылыуы Иоганн Штраус музыкаһы түгел. Фронттағы медицина ҡыҙҙары ла иҫке сентименталь романдарҙағы, донъяһын оноткан, «сәскә йөрәкле» ҡыҙҙар түгелдәр ине. Улар Ватан һуғышында ҙур хеҙмәт күрһәттеләр – ут эсенән яралы һалдаттарҙы, офицерҙәрҙе алып сыҡтылар. Шулай булғас, мәк сәскәһенә иҫе китеп, үҙенең эшен онотҡан Мариялар ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң? Беҙҙең илдә ундай ҡыҙҙар юҡ. Ә юҡ һәм булмаҫ нәмә тураһында яҙылған әҫәр тормошто боҙоп күрһәтеү, тигән һүҙ.

«Сәскә» (йәки: «Ҡыҙыл мәк») новеллаһы ана шундай буш әҫәр. Ғәжәпкә ҡаршы, ул Бикчәнтәйҙең ике йыйынтығына ла ингән, хатта беренсеһе шул исем менән сыҡҡан, етмәһә уның башҡортса варианты «Октябрь» журналында ла баҫылды.

«Сәскә» әҫәре күңелһеҙ факт. Шулай ҙа ундай «сәскәләр» Бикчәнтәйҙең ижад «яланы» өсөн характерлы «Үҫемлек» түгел. Улар Елена Зрелиналар («Москвичка»), Наталья Микитенколар («Орудиелағы ҡатын»), Мария Замриҙар «Дуҫтым», һәм Мариналар («Алтынсы рюмка») аяҡтары аҫтында иҙелеп ҡалалар.

Әнүәр Бикчәнтәй русса яҙа, ул прозаның иң бәләкәй формаларында уңышлы әҫәрҙәр тыуҙыра. Ул миниатюрлыҡ оҫталығына эйә. Артабан уның ижады оҫталыҡтың дөрөҫлөк менән гел генә тулы ярашлы булыуы иҫәбенә үҫергә һәм камиллашырға тейеш.

Театраль тәнҡит

## «Девон»[1]

*И. Абдуллин пьесаһы, Башҡортостан халыҡ артисы Х. Бохарский постановкаһы*

Хәҙерге фән секундтың меңдән һәм миллиондан бер өлөшөндә була торған процестарҙы ла тотоп ала белә. Был төҫлө күренештәрҙе күҙәтеүсе ғалимдар ҡолағы өсөн «секунд» һүҙе «мәңге» тигәндәй ишетелә. Һәм фәндең айырым бер тармағы өсөн был хәҙер ғәжәп түгел. Шулай уҡ фәндең билдәле бер өлкәһендә уның киреһе лә бик ғәҙәттәге хәл булып һанала. Геологияла, мәҫәлән, иҫәпте миллион йәки миллиард йылдар һаны менән йөрөтәләр. Геологтың «күптән түгел» тип әйтеүендә әллә нисә миллион йыл булырға тейеш. Баку нефтен бирә торған ер ҡатламының йәше, мәҫәлән, геология телендә бөтөнләй «бәләкәй» тип иҫәпләнә, уға ни бары… бер нисә миллион йыл! Грозный нефте сыға торған ҡатлам йәш яғынан өлкәнерәк – уға 25-30 миллион йыл самаһы. «Икенсе Баку» нефте үҙенең бөгөнгө бай сығанағын ерҙең девон тип аталған иң ҡарт һәм тәрән ҡатламынан ала. Ул ҡатламдың йәше геология фәнендә 400 миллион йыл менән иҫәпләнә.

Бөйөк совет ғалимы академик И.М. Губкин «Икенсе Баку» районында 300-1200 метр тәрәнлектә ятҡан нефттең тағы ла аҫтараҡ (1600-2000 метр тәрәнлектә), йәшеренгән хазинаны – девон сығанағы барлығын күрһәтте. Һәм йәше дүрт йөҙ миллион йыл менән үлсәнә торған ҡатламда йәшеренгән ана шул «ҡара алтын» хазинаһы табылды! 1994 йылдың сентябрь аҙағында Башҡортостандың Туймазы районында 1750 метр тәрәнлегендәге 100-сө номерлы скважинан, ҡеүәтле ташҡын булып, девон нефте бәреп сыҡты. Девон фонтаны тәүге һынауҙа уҡ тәүлегенә 250 тонна нефть бирҙе. Девон асылғанға ҡәҙәр Туймазы промыслыһының иң яҡшы тигән скважинаһы ла тәүлегенә 10 тоннанан артыҡ нефть бирмәй ине.

Ибраһим Абдуллиндың «Девон» тигән 5 пәрҙәлек драмаһы Ватан һуғышы йылдарында совет кешеләренең ана шул «ҡарт» һәм бай нефтте табыу өсөн көрәшен күрһәтеүгә арналған. 11 апрелдә Башҡорт Академия драма театрында

[1] Октябрь, 1948. №5. 65-72-се биттәр.

пьесаның премьераһы (икенсе варианты) яҡшы уҡ уңышлы булыуын күрһәтте. Бында сағыштырмаса уңышлылыҡ әҫәрҙең иң актуаль темаға яҙылған булыуында ғына түгел, әлбиттә, ә уның ана шул мөһим тематик мәсьәләнең драматургик яҡтан билдәле оҫталыҡ менән хәл ителеүендә.

Йәш драматургтың тәүге пьесаһы булған «Девон»дың үҙ урынында оригиналь бер сәхнә әҫәре булыу әһәмиәтен алыуында, автор хеҙмәтенән тыш, актерҙар коллективының, бигерәк тә театрҙың художество етәксеһе Х. Бохарскийҙың ижади тырышлығы бар. Әйтергә мөмкин: «Девон», үҙенең әле ысын мәғәнәһендә камиллашып етмәүенә ҡарамаҫтан, ВКП(б) Үҙәк Комитетының драма театры тураһындағы ҡарарында совет драматургтары алдына ҡуйылған төп талапты – «совет обществоһының тормошо тураһында художество йәһәтенән асыҡ, тулы ҡиммәтле әҫәрҙәр тыуҙырыу» бурысын – хәл итеү йүнәлешендә, дөрөҫөрәге: хәл итергә тырышыуҙа башланғыс бер аҙым булып тора.

Пьесаны хәрәкәткә килтергән төп конфликт – совет геология фәненең нефть табыу тармағындағы ижади новаторлыҡ (инженер-геолог Стойкин) менән консерваторлыҡ (Сөннәтов) араһындағы ҡаршылыҡ. Яңы менән иҫке араһындағы был тәбиғи көрәш ике геологтың ниндәйҙер предметһыҙ бәхәсе рәүешендә түгел, ә реаль һәм конкрет тормоштоң үҙенән сығып күрһәтелгән, «Икенсе Баку»ҙа (Туймазы промыслаһында) девон нефтен табыу проблемаһын тиҙерәк практикала хәл итеү өсөн көрәш ерлегендә бирелгән.

1942 йылдың май айы. Илгә, фронтҡа нефть кәрәк. Ләкин промысла нефтте сиктән тыш әҙ бирә. План үтәлмәй. Стойкин, промысланы өҙлөктән сығарыр өсөн, разведка эшен көсәйтеүҙе, быраулауҙы девон ҡатламына тиклем еткереүҙе тәҡдим итә. Ул девонда бай нефть булырға тейешлеген ғилми яҡтан иҫбат итә. Быға «факттарым юҡ, ә таянысым, шулай булғас – бар», ти ул. Уның таянысы академик Губкин, элекке разведка биргән ҡайһы бер мәғлүмәттәр һәм үҙенең практик тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһендә тыуып, төрлө геологик аналогиялар менән нығытылған гипотеза. Стойкиндың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә: «Был – тәүҙә гипотеза, унан теория, ә һуңынан нефть, бензин». Шуға

күрә ул, бик ҡыйыу рәүештә, һуғышҡа тиклем башланып та, тейешле тәрәнлегенә еткерелә алмай ҡалған 88-се скважинаны эксплуатациялауҙан туҡтатып, бырауылауҙы девон ҡатламына саҡлы алып барып еткереүҙе тәҡдим итә.

Трестың баш геологы, фәнгә «йәбешеп ятыусы» Сөннәтов Стойкиндың был идеяһына бөтөнләй ҡаршы төшә. «Фәндең үҙ законы бар. Ул ашыҡмай. Ә мин уны уҙып һаташырға теләмәйем», – ти ул. Бер ҡарағанда, уның мотивировкалары ла нигеҙһеҙ түгел: беренсенән, 88-се скважина башҡаларына ҡарағанда нефтте бер нисә тапҡыр күберәк бирә, уны ябыу – план үтәлешен бөтөнләй өҙәсәк; икенсенән, бынан өс йыл элек, бер скважинаны бораулағанда, долото девон ҡатламын уҙып китһә лә – нефть түгел, һыу сыҡҡан; өсөнсөнән, ул үҙенең ун ете йыллыҡ тәжрибәһенә таяна. «Мин, ти ул, – Волга буйында девонға бырауланым – һыу алдым. Камала бырауланым – шул уҡ һыу. Ҡайҙа ҡарама – һыу. Күпме көс түктек, күпме аҡса, ә һөҙөмтә – ерунда». Сөннәтовтың тәҡдиме: девонға разведка тип, һуғыш заманында миллион аҡса тотҡансы, карбон ҡатламын эксплуатациялау эшен көсәйтергә. «Һәр скважина биш-ун тонна нефть бирһә лә, һыуға ҡарағанда яҡшыраҡ!».

Өҫтән ҡарағанда, объектив булып күренгән бындай ныҡышмалыҡтың нигеҙендәге консерваторлыҡҡа тоғро булыу идеяһы ята. Атҡаҙанған артист Ғ. Саттаров, пьеса мөмкинлек биргән ҡәҙәр, Сөннәтов образының «эсенә керә» алды. Уның уйнауында күҙ алдына теорияла һәм практикала яңылыҡтар ижад итеүгә объектив ҡаршы тороусы, новаторлыҡ идеяһын фән менән ярашмай торған буш фантастика итеп ҡараусы, ижади сикләнгән геолог образы кәүҙәләнә. Инженер Сөннәтов совет ғалимы Губкинға тиклем Урал менән Волга араһын күп йылдар буйы тикшереп тә «унда нефть тигән нәмә юҡ» тигән киҫкен фекергә килгән Замятин менән Нечаев һәм американец Шандор кеүек үк, үҙ ҡарашында ныҡ тора. Уныңса, «Икенсе Баку районында девон нефте эҙләү – геология фәненә «мөгөҙ сығарырға» маташыу ғына, ә ул уңышһыҙ «мөгөҙ» государство өсөн бер нисә миллион һум тора, уныңса: девон – «буш һүҙ, томан, төтөн генә», ә уны эҙләүселәр – фантазерҙар, зарарлы романтиктар.

Пьесаның төп образы булған Стойкин фәндән «уҙып китергә» теләмәгән, фәндең кисәге торошона метафизиктарса ҡарау арҡаһында бөгөнгө һәм иртәгәне күрергә ижади күҙе һуҡырайған ана шул консерватор Сөннәтовҡа ҡаршы девон нефте өсөн көрәштә асыла. Атҡаҙанған артист Ғ. Яҡупов Стойкин ролендә алдынғы совет кешеһен – государство өсөн ғәйәт ҙур әһәмиәтле булған яңылыҡ ижад итеүсе геологты нигеҙҙә уңышлы күрһәтә алды. Спектаклде ҡараусы Стойкин йөҙөндә Ватан интересы менән янған совет интеллигентында ижади уйҙың нисек тыуыуын, өлгөрөүен һәм тормошҡа ашырылыуын байтаҡ асыҡ күрә ала. Хеҙмәте өҙлөкһөҙ һәм ныҡышмалы ижади эҙләнеүҙәр юлы менән барған совет геологын консерватив кәртәләр ҙә, уңышһыҙлыҡтар ҙа (мәҫәлән, девон нефте көтөлгән махсус скважинанан һыу сығыуы кеүек күңелһеҙлектәр) бөйөк теләккә ынтылыуҙан туҡтата алмайҙар. Үҙенең уйы ғилми яҡтан дөрөҫ һәм һыналған булыуына, күтәргән идеяһы девон нефте биреренә Стойкин ныҡ ышанған. Һәм шул ышаныс уны еңеүгә ынтылдыра, унда фронттағы гвардеец офицер кеүек ғорурланыу хисе тыуҙыра. Стойкин образында бөгөн новаторҙарға хас, ә иртәгә намыҫлы ябай нефтселәрҙә урын алыу перспективаһы булған һыҙаттар билдәләнешен, пафосты күреп була.

Ана шул ижад пафосының тәьҫире производство планын үтәү яуаплылығын ныҡ аңлаған, уның өсөн көрәшкән, ләкин башта иҫкелек менән яңылыҡ кеүек полюс араһында ниндәйҙер «урта юлды» һайларға тырышҡан трест управляющийы Сахаровты ныҡлы һәм ышаныслы юлға баҫтыра. Атҡаҙанған артист Р. Сыртланов башҡарыу өсөн ауыр ғына булған управляющий ролендә етәкселек эшендә үтә һаҡлыҡ күрһәтеүе менән ҡыйыулыҡты сикләй төшөүсән, ете тапҡыр үлсәп тә бер тапҡыр ҡырҡырға ҡурҡыусан Сахаров образын тыуҙырҙы һәм уны предприятиеның эшлекле етәксеһе итеп күрһәтеү йүнәлешендә үҫтерҙе. Башҡа, тәжрибәһе аҙыраҡ артист уйнаған хәлдә, Сахаровтың тере кеше булыуҙан бигерәк «йәнле схема» булып сығыуы бик мөмкин ине.

Сыртлановтың актерлыҡ искусствоһы был образда схематизмға һәм шаблонлыҡҡа урын ҡалдырманы тип әйтергә мөмкин. Сахаров образы

бирелешендәге төп етешлелек – уның үҙенең реаль етешһеҙлектәре менән бергә күрһәтелеүендә.

Девон өсөн көрәш социалистик хеҙмәттең яңы кешеләрен, тыуған ил өсөн хеҙмәт итеүгә дәртен, бөтә һәләтлеген биргән йәш патриоттарҙы тәрбиәләне. Совет государствоһының ҡеүәтен арттырыу өсөн биргән намыҫлы хеҙмәтендә үҙенең шәхси шатлығын һәм ҡыуанысын күргән ана шул йәш кешеләр пьесала нефть быраулау мастеры Хисмәтуллин (атҡаҙанған артист М. Хәбибуллин), оператор Гөлсәсәк (атҡаҙанған артистка Т. Бикташева) образында үҙҙәренең дөрөҫ һәм яҡшы уҡ тулы дөйөмләшеүен алғандар.

Ләкин, ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, бындай тулылыҡты партком секретары Юлдашбаева образында күреп булмай. Автор бында йомшаҡлыҡ күрһәткән. Юлдашбаева эш кешеһе булыуҙан бигерәк, «һүҙ кешеһе» булып кәүҙәләнә. Уның пьесала бөтә драматик нагрузкаһы Стойкиндың дөрөҫ юл менән барыуын, ә Сөннәтовтың яңылыҡҡа кәртә булып тороуын квалификациялауҙан уҙмай. Был образда нефтселәр араһында партияның етәксе, рухландырыусы һәм ойоштороусы көс икәнлеген күреүе ҡыйын. Артистка Л. Әхтәмованың тырышлығы ғына был образды етешле итә алмай.

Пьесала кисәге колхозсы, бөгөн нефтсе Хөснөтдин ҡарт, ҙур тәжрибәле нефтселәр Андрияпольский, Бикбов, профессор, Валентина Георгиевна (Стойкиндың ҡатыны) Миләүшә кеүек эпизодик образдар бар. Улар һәр ҡайһыһы үҙ урынында әҫәрҙе тулыландырыуҙа, драмаға характер төрлөлөгө индереүҙә әһәмиәтле урын тота. Тик шуныһы күңелһеҙ – был образдарҙы башҡарыусы артистар бөтәһе лә талап ителгәнсә уйнай алманылар. Бында, башҡа эпизодик образдар кеүек үк, әҫәрҙә үҙенең һаран бирелешенә ҡарамаҫтан, асыҡ башҡарылышы яғынан Хөснөтдин ҡарт образы айырылып тора. РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Әмин Зөбәиров уның йөҙөндә оригиналлеге менән хәтерҙә ҡалырлыҡ образ – промыслаға килгән колхозсы ҡарт образын кәүҙәләндерҙе. Бынан ҡала Валентина Георгиевна (халыҡ артисткаһы Т. Рәшитова), Миләүшә (М. Вәхитова) һәм профессор (Л. Фәйзи) образдарын күрһәтергә мөмкин. Ҡалғандарының (Бикбов, Андрияпольский,

Ғүмәров) береһендә лә драматик эшләнештәре яғынан да, башҡарылышы менән дә телгә алырлыҡ билдәләре юҡ.

Ләкин пьесаның етешһеҙлеге былар менән генә сикләнмәй. Унда әҫәрҙең идея-художество сифатына үҙенең күләгәһен төшөрә торған серьезыраҡ кәмселектәр бар.

Девон нефте өсөн көрәш Совет иленең яҙмышы хәл ителгән иң ауыр йылдарҙа, немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғыштың иң ауыр осоронда барҙы. Был тарихи хәл, замандың сиктән тыш көсөргәнешле булыуы, тәбиғи рәүештә, пьесаның бөтә эске үҫешендә, бөтә драматик «тын алышында» үҙен һиҙҙереп тороға тейеш ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был реаллек пьесаның идея-тематик үҫешенә органик рәүештә ҡушылып, ҡараусыны тойғоландырырлыҡ төҫ ала алмаған. Шуға күрә лә пьесала быға бәйләнешле ҡайһы бер деталдәр, айырым репликалар илдә һуғыш барыуын «хәтергә төшөрөү» өсөн килтерелгән тышҡы аңлатмалар булып ҡына ҡалған. Автор девон нефте өсөн көрәште күрһәтеүҙә промыслының көндәлек производство тормошонан ситләшә төшкән. Пьесанан башта уҡ промыслының государство планын үтәй алмауы аңлашыла. Сахаров өҙлөктән сығыу өсөн практик саралар эҙләй. Ә бай нефть биреүсе девон ҡатламы ике йыл ярымдан һуң ғына асыла. Был ваҡыт эсендә план буйынса айына һигеҙ мең тонна нефть биреү факты пьесала үҙенең асыҡ күренешен ала алмаған. Ижади һәм практик юлдар менән девон проблемаһын хәл итеү производство эше аспектында алып, государствоға нефть биреү планын үтәүгә туранан тура бәйләп күрһәтелгәс, был ике тематик һыҙыҡ араһында (уның береһенең өҫтөнлөк алыуына ҡарамаҫтан) тейешле пропорция һаҡланырға тейешле ине.

Сөннәтов образында дөйөмләштерелгән консерватизм девон нефтен асыу өсөн көрәш юлына арҡылы төшкән берҙән-бер ҡаршылыҡ булманы. Ул йылдарҙа бынан башҡа ҡаршылыҡтар ҙа, бөтәһенән элек һуғыш заманы тыуҙырған ауырлыҡтарҙан килеп сыҡҡан, ләкин совет кешеләренең патриотик хеҙмәт подвигтары менән еңелә барған ҡамасаулыҡтар ҙа бар ине. Пьесала был тейешенсә сағылдырылмаған. Һәм ул төп образдың тулылығын сикләүгә

килтергән.

Сөннәтов тибындағы кешеләр общественный тормош үҫеше өсөн характерлы күренеш. Заман өсөн инде иҫкергән ҡараштарҙан, иҫке закон һәм теорияларҙан айырылмаҫҡа тырышыу һәм шуға тоғро булып үҫешкә, яңылыҡҡа ҡаршы тороу – һәр дәүер консерваторы өсөн дә уртаҡ сифат. Ләкин бөтә дәүер өсөн дә уртаҡ булған бер үк ҡарашлы консерватор юҡ: һәр замандың үҙ Сөннәтовы бар. Бына шул дөрөҫлөктән сығып ҡарағанда, «Девон» пьесаһындағы Сөннәтовтың үҙенең ҡараштары яғынан ни тиклем конкрет булыуын, образ итеп бирелеше ни тиклем реаль булыуын шик аҫтына алырға тура килә. Ысынлап та, совет геология фәненең һуғышҡа ҡәҙәре өлгәшеүҙәре юғарылығынан тороп ҡарағанда, Сөннәтов – әгәр уны, пьесалағы бөтә персонаждар уйлағанса, консерватор тип кенә ҡарай торған булһаҡ – нисектер, «һуңлаған консерватор» булып кәүҙәләнә. Сөнки Сөннәтов йәшәй торған дәүер Замятиндар, Нечаевтар заманы түгел бит. Геолог Сөннәтов беҙҙең илдә быға тиклем билдәле булмаған яңы нефть ятыштары асыла барған дәүерҙә йәшәй һәм эшләй. Совет нефть разведчиктарының башында торған академик Губкин был сығанаҡтарҙан реаль булыуын фәндә, шулай уҡ күп урында практикала ла кире ҡағырға урын ҡалдырманы. Ул «Икенсе Баку» районындағы нефть сығанаҡтары Төрөкмәнстандан алып, Төнъяҡ боҙ океанына ҡәҙәр һуҙылған бай нефть полосаһының бер өлөшө генә әле, тип раҫланы. «Был ғәжәп киң территория үҙ эсенә күп һанлы һәм ҙур сығанаҡтарҙы ала, – тине ул. – Уларҙың промышленность яғынан әһәмиәте айырым урындарҙа билдәләнде лә инде. Был территория беҙҙең бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин тарафынан партияның XVII съезында яһаған тарихи докладында күрһәтелде. Уның күрһәтеүҙәре беҙҙең өсөн закон булып тора. Һәм совет ғалимы, иптәш Сталиндың был гениаль программаһын тормошҡа ашырыу теләге менән рухланып, геологтарҙы девон диңгеҙенең ярҙарына – «Икенсе Бакуға» алып килеү менән генә сикләнеп ҡалманы, ул Волга менән Урал араһында ҡайҙа һәм нисек девон нефте ятырға тейешлеген дә күрһәтте.

Бына шул реаль шарттарҙа эшләгән Сөннәтовтың девонды эшкә

ашмаçлыҡ хыял тип, төтөн тип кире ҡағырға тырышыуы – был инде консерватизмдың бөгөнгө күренеше өсөн улай уҡ типик хәл түгел. Һәм шул уҡ ваҡытта Сөннәтовтың совет геологияһы өсөн инде бәхәсһеҙ булған «бар»ҙы күрәләтә «юҡ» тип әйтеүе кисәге ҡараштың ябай бер ҡабатланышы булып ҡына ла ҡала алмай. Был инде консерватизм ғына түгел. Ысынлап та, Сөннәтовтың Башҡортостанда девон ҡатламының нефть урынына һыу бирәсәгенә, иртәгә ҡояш сығасағына ышанғаным кеүек, ышанам, тигән ҡарашта ныҡ тороуын консерваторлыҡ тип кенә баһалау аҙ. Шулай уҡ «Икенсе Бакуҙа» нефть сығарыу көндән-көн киңәйә барған бер мәлдә, өçтәүенә – немец-фашист илбаçарҙарына ҡаршы һуғышта совет государствоһының йәшәүе хәл ителгән иң ауыр йылдарҙа Сөннәтовтың «нефть урынына һыу сығыу – минең докторлыҡ диссертацияма файҙа ғына ул» тип әйтеүе лә фәндәге иçкелекте яҡлау булып ҡына яңғырамай. Сөннәтовтың был ҡараштары, һис шикһеҙ, совет кешеләре өсөн ят ҡараш. Һәм был ҡараш пьесала үҙ исеме менән аталып бирелергә, буржуаз илдәр культураһы алдында ла баш эйеү күренеше итеп күрһәтелергә тейеш ине.

Иптәш В.М. Молотов Октябрь революцияһының утыҙ йыллығы тураһындағы докладында ҡайһы бер интеллигенттарҙың әле капиталистик Көнбайыш культураһы алдында баш эйеүҙән ҡотолмағанлығын күрһәтте. «Беҙҙә, – тине ул, – ҡайһы берәүҙәр Көнбайыш алдында, капиталистик культура алдында баш эйеүҙән һәм ҡолдарса буйһоноуҙан ҡотолоп бөтмәгәндер әле. Иçке Россияның хакимлек иткән синыфтарының Европаның капиталистик яҡтан ныҒыраҡ алға киткән государствонан йыш ҡына рухани яҡтан бойондороҡло булыуҙары юҡҡа ғына түгел ине. Был иçке интеллигенцияның ҡайһы бер кругтары араһында тулы баһалы булмаусылыҡтың һәм Европаның буржуаз илдәренән рухани яҡтан бойондороҡло булыусылыҡтың ҡоллоҡ аңын таратырға мөмкинлек бирҙе. Капитализмдың был хурлыҡлы ҡалдыҡтарынан ҡотолоп тороп, ысын совет гражданины булыу мөмкин түгел».

И. Абдуллин пьесаһындағы Сөннәтов ер шарында нефть ресурстарының ҡасан сығып бөтөү сәғәтен үк «иçәпләп ҡуйған» буржуаз Американың

пессимистик геологияһы алдында баш эйгән инженер-геолог итеп кәүҙәләнергә тейешле булыуын үҙе үк «һорап тора». Ул беҙҙә девон юҡ, девон Америкала, ти. Һәм нефть эҙләүселәрҙең маяғы итеп ниндәйҙер американец Рокфельдты һанай: имеш, ул нефть һәм нефтселәр короле! Автор бындай деталдәрҙе Сөннәтовтың идея-политик ҡарашын асып бирер өсөн түгел, ә уның фәҡәт консерватор икәнен күрһәтеү маҡсатында ғына алған. Тап ана шул маҡсат тотолғаны өсөн генә пьесала бер кем тарафынан да, хатта партком секреттары тарафынан да, Сөннәтовтың аполитик һәм антипатриотк ҡараш һәм фекерҙәренә бер ниндәй ҙә политик квалификация бирелмәй. Был йәһәттән ярҙамсы образ булған етмеш йәшлек ябай колхозсы (хәҙер нефтсе) Хөснөтдин ҡарт барыһынан да уяуыраҡ. Ул исмаһам Сөннәтовтың тел төбөндә нәмә ятҡанын, уның кем йырын йырлағанын һиҙелеп тора.

Драманың нигеҙен билдәләгән конфликттың (йәғни Стойкин менән Сөннәтов араһындағы ҡаршылыҡтың) идея-политик принциптар юғарылығына кәрәгенсә күтәрелмәй, үҫеүе һәм сиселеүе – пьесаның төп етешһеҙлеге. Бына шуға күрә лә, автор Стойкинды ни тиклем генә үҙенең фамиляһына ярашлы (стойкий) характерлы совет геологы итеп күрһәтергә тырышмаһын, ул әле быға ысын мәғәнәһендә ирешә алмаған. Стойкинда ла, башҡаларҙа ла ижади эштәге һәм производстволағы новаторлыҡты, шулай уҡ консерваторлыҡ күренешен аңлауҙа партиялылыҡ етмәй. Стойкин девон тураһындағы идеяһының дөрөҫлөгөн раҫлайым тип, урыны менән шул уҡ Сөннәтов хатаһын да ҡабатлап ҡуя. Мәҫәлән, ул, үҙе ултырған ер аҫтында девон нефте барлығын иҫбатлар өсөн, Америкалағы Панхедел, Африкалағы Хургада структураһы менән мауыға торғас, «геология государство кеүек шартлы сиктәрҙе белмәй» тип бөтөнләй хата һүҙ һөйләй. Беренсенән, билдәле булыуынса, государство ер өҫтөндәге шартлы сик түгел, икенсенән, башҡа фәндәр кеүек үк геология ла государство мәнфәғәттәренән тыш йәшәмәй. Тап ана шул государство сиктәрен белгәндәре өсөн дә фәндәр тик совет илендә генә үҙҙәренең ысын прогрессив үҫешен таптылар, һәм улар буржуаз государстволарҙағы реакцион фәндәргә законлы рәүештә ҡапма-ҡаршы итеп ҡуйыла. Һәм совет кешеләре «Көнбайыш алдында

һәм унының капиталистик культураһы алдында ярамһаҡланыуы һәм ҡолдарса баш эйеүҙең бөтә һәм һәр төрлө күренештәрен аяуһыҙ тәнҡит итеүҙе йәйеп ебәреү ынтылышы менән һуғарылғандар» (Молотов).

«Девон» пьесаһының идея-художество яғынан үҙ нөктәһенә – тәбиғи бейеклегенә күтәрелә алмауы, юғарыла әйткәнебеҙсә, тормошта осраған консерватизм күренештәренең социалистик хеҙмәт новаторлығы алдында еңелеүе ана шул идеологик принциптар көрәше яҡтылығында күрһәлелмәүҙән килә. Пьесала иң ауыр йылдарҙа Ватан өсөн үҙен аямай эшләгән совет нефтселәренең девонды асыу тантанаһында Сөннәтов кеүек ят ҡарашлы кешеләрҙең характерында трагизм да күрһәтелергә тейеш ине.

Пьесаны тормошто дөйөмләштереүе яғынан ысын мәғәнәһендәге реалистик әҫәр итер өсөн, идея эстетик яҡтан көслө итер өсөн уның өҫтөндә ныҡ ҡына эшләйһе бар әле. Образдарға ныҡ ҡына асыҡлыҡ индерәһе, уларҙы тәбиғиләштерәһе бар. Әйтәйек, сюжеттың төйөнләнеү моментын Стойкиндың сәхнәлә беренсе күренеүенән башлау драматик яҡтан бик тәбиғи. Ләкин Стойкинды мотлаҡ фронттан тылда эшләргә ҡайтып төшкән махсус бер кеше итеп күрһәтеү – был урында яһалма деталь. Тимәк, асылда шулай булып килеп сыға: тыл кешеләре промысланы өҙөклөктән сығарыу өсөн, фронтҡа күп нефть биреү мәсьәләһен хәл итеү өсөн Стойкин кеүек специалистарҙың һуғыштан ҡайтыун көтөп ятҡандар. Әгәр майор Стойкин, ҡултыҡ таяҡтары таянып, тағы ла бер йыл һуң ҡайтһа, йәки, әйтәйек, бөтөнләй ҡайтмаһа?...

Тормоштағы типик хәл улай түгел ине. Девон нефтен табыу государствоға әһәмиәтле проблема булып торҙо. Дошманды тиҙерәк еңеү теләге менән рухланған совет тылы кешеләре уны уңышлы хәл итеп, фронттағы еңеүҙәргә торорлоҡ патриотик подвиг яһанылар. Һәм Стойкин кеүек хеҙмәт новаторҙары ана шул средане килеп сыҡтылар ҙа.

Девон нефте совет кешеләренең иң гүзәл еңеүҙәренең береһе булды. Был темалағы пьеса ла артабан драматургияның яҡшы әҫәре булып өлгөрөүен көтөргә хаҡлыбыҙ.

1948

## Салауат Юлаев һәм уның әҙәбиәттәге образы[1]

1

Емельян Пугачев етәкселегенәге 1773–1775 йылдарҙағы ҡеүәтле крәҫтиән һуғышындағы башҡорт халҡы беренсе башлап рус халҡы менән бергә, ҡулға-ҡул тотоношоп, азатлыҡ өсөн, ирекле тормош өсөн һуғышты. Аяуһыҙ колониаль һәм социаль иҙелеүҙән ҡотолоу теләге менән күтәрелгән «был хәрәкәт үҙенең милли юлбашсыһы Салауат Юлаевты тыуҙырҙы» (Ем. Ярославский). Салауатың исеме Тыуған илебеҙ тарихына, Пушкин һүҙҙәре менән әйткәндә, «Себерҙән Мәскәүгәсә, Кубандан Муром урмандарынаса государствоны тетрәткән» крәҫтиән һуғышының данлы етәксеһе Емельян Пугачевтың тоғро юлдашы, башҡорт халҡының күренекле милли геройы булып инде.

Салауат Юлаев 1752 йылдың июнь айында Өфө провинцияһы (хәҙерге Салауат районы), Шайтан-Көҙөй йорто (волосы), Тәкәй ауылында тыуған. Уның атаһы, Юлай Аҙналин, башҡорттарҙың элекке восстаниеларында ҡатнашҡан кеше булған. А. Пушкин үҙенең «Пугачев тарихы» тигән китабында Юлайҙы «ҡарт мятежник» тип телгә ала. Юлай Россия сигендә төрлө хәрби походтарҙа, һуғыштарҙа ла булған. Мәҫәлән, ул 1756–1762 йылдарҙағы һуғышта прусактар кавалерияһына ҡаршы һуғышып, башҡорттар отряды менән командовать итә. Польшала Бар ҡалаһы конфедераттарын баҫтырыуҙа ҡатнашып, башҡорт корпусы составында өс йөҙ кешелек отряд менән командовать итә. Һәм был хеҙмәте өсөн ул медаль менән наградлана. Армиянан ҡайтҡас, Юлай үҙенең 1768 йылда һайланып ҡуйылған старшиналыҡ вазифаһын үтәүен дауам иттерә.

Салауат бына шундай семьяла тәрбиәләнеп, ниндәй юл менәндер грамотаға өйрәнеп һәм билдәле бер белем алып, шул уҡ ваҡытта үҙ күҙе алдында хеҙмәтсән халыҡтың мырҙалар, тархандар һәм дворяндар тарафынан

[1] Әҙәби Башҡортостан, 1953. №5. 45-55-се биттәр.

аяуһыҙ таланыуын, иҙелеүен күреп үҫә. Яйыҡ (Урал) буйында Пугачев етәкселегендәге крәҫтиән һуғышы тоҡанып киткәндә, Салауатҡа 21 йәш була.

«Пугачев восстаниеһында башҡортарҙың ниндәй ҙур роль уйнағанлығы билдәле, – тип яҙҙы акдемик Ем. Ярославский. – Оренбург казактары һәм Урал эшселәре менән бергә башҡорттар батша воеводаларына, чиновниктарына ҡаршы, түҙеп торғоһоҙ кабалаға һәм хоҡуҡһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәштеләр. Был хәрәкәт үҙенең милли юлбашсыһы Салауат Юлаевты тыуҙырҙы».

Салауат Юлаев бөтә крәҫтиән һуғышы буйына үҙ халҡының азатлыҡ теләктәренә тоғро булып, хеҙмәтсән массаларҙы иҙеүселәргә ҡаршы рус халҡы менән берҙәм көрәшкә алып барҙы, үҙен бөйөк крәҫтиән хәрәкәтенең иң күренекле етәкселәренең береһе итеп күрһәтте. 1774 йылдың йәйендә Пугачев Ҡазанға, унан һуң Волганың уң яҡ ярына сығып киткәс, Салауаттың Башҡортостандағы бөтә восстаниесыларға ярты йылға яҡын етәкселек итеүенең әһәмиәте тағы ла ҙурыраҡ.

1773–1775 йылдарҙағы крәҫтиән һуғышы ғәйәт ҙур һәм ҡеүәтле күтәрелеш ине, уның етәкселәре талантлы полководецтар, ҡурҡыу белмәҫ кешеләр ине. Ләкин шулай ҙа ул һуғыш еңеү килтермәне. Сөнки ул ойошмаған крәҫтиән массаһының стихиялы хәрәкәте ине. Иң мөһиме – ул ваҡытта крәҫтиән хәрәкәтенә, халыҡ азатлығы көрәшенә етәкселек итеүсе, уны еңеүгә килтереп еткерә алыусы эшселәр синыфы юҡ ине.

«Крәҫтиән восстаниелары, – ти иптәш Сталин, – тик шул саҡта ғына, улар эшселәр восстаниелары менән бергә бәйләнгәндә генә һәм крәҫтиән восстаниеларына эшселәр етәкселек итһәләр генә, уңышҡа килтерә алалар. Башында эшселәр синыфы торған комбинированный восстаниелар ғына маҡсатҡа килтерергә мөмкин»[1]. Ләкин, шулай булыуға ҡарамаҫтан, «крәҫтиәндәрҙең быңдай восстаниеларының беренсе ынтылыштары тарихын өйрәнеүҙең беҙҙең өсөн һәр ваҡыт әһәмиәтле булды»[2].

[1] Сталин И.В. Әҫәрҙәр, 13-сө том, 13-сө бит.
[2] Сталин И.В. Әҫәрҙәр, 13-сө том, 112-се бит.

Үҙендә азатлыҡ өсөн йән аямай көрәшкән башҡорт халҡының яҡшы сифаттарын кәүҙәләндереп, ҙур һуғышта уның юлбашсыһы, милли геройы булып хәрәкәт иткән Салауат Юлаевтың героик образы беҙгә бөгөн дә яҡын һәм ҡәҙерле.

Салауат Юлаевтың ҡасан һәләк булыуы билдәле түгел[1]. Ул, восстание баҫтырылғас, 1774 йылдың 24 ноябрендә Ҡатау заводы районында, урманда, Йүрүҙән йылғаһынан алыҫ түгел Миндәш ауылы янында тотола һәм атаһы Юлай менән Өфөгә, унан һуң Мәскәүгә тикшереү органдарына ебәрелә. Ун айҙан һуң, 1775 йылдың сентябрендә, Салауат менән Юлайҙы уларҙың ҙур һуғыштары булып үткән урындарҙа ҡамсы менән 175-әр тапҡыр һуҡтырып язалайҙар һәм, икеһенең дә танауҙарын ҡырҡып, маңлайҙарына ҡыҙҙырылған келәймә менән тамға һалып, шул йылдың 3 октябрендә Рогервикка ғүмерлек каторгаға ебәрәләр. Һуңғы йылдарҙа табылған архив документына («Статейный список»ка) ҡарағанда, 1797 йылдың майында әле, йәғни каторгала 22 йыл ғазап сиккәндән һуң да, Салауат менән Юлай иҫән булғандар. Документтан күренеүенсә, улар менән бергә Пугачев полковнигы Ҡәнзәфәр Усаев, Иван Почиталин һәм башҡа пугачевсылар ҙа булғандар.

Салауат Юлаев данлы герой ғына түгел, шағир-импровизатор ҙа. Рус халҡы менән берҙәм булып, бер үк маҡсатты күҙәткән халыҡ азатлығы көрәше ялҡынында башҡорт халҡы Салауат Юлаев йөҙөндә үҙенең тәүге шағирын да тыуҙырған. Шулай итеп, Салауат үҙендә башҡорт халҡының бөтәһенән дә элек ике һәйбәт сифатын – уның героизмын һәм поэтик талантын кәүҙәләндергән. Салауат, азатлыҡ өсөн көрәшсе герой булып, тыуған халҡын рус помещиктарына һәм үҙ феодалдарына ҡаршы күтәрһә һәм, рус халҡы менән туғандарса дуҫлашып, уны дөйөм дошманға ҡаршы берҙәм көрәшкә алып барһа, ул, шағир һәм йырсы-импровизатор булып, үҙенең боевой йырҙары менән воиндарҙы халыҡ азатлығы өсөн подвигтарға саҡырған һәм рухландырған. Салауат беренсе башлап башҡорт поэтик һүҙен азатлыҡ һуғышының үткер ҡоралы итеп

[1] 26 сентября 1800 года в возрасте 46 лет ушел из жизни Салават Юлаев, - тип яҙа И.М. Гвоздикова // Салават Юлаев. Энциклопедия. Уфа: Научное издательство Башкирская энциклопедия, 2004. С. 18 (*төҙөүселәрҙән*).

күтәргән: ул дошманға ҡаршы ҡылыс, мылтыҡ һәм пушка менән генә түгел, ә үҙенең шиғырҙары һәм йырҙары менән дә көрәшкән. Һәм уның был «күренекле тарихи роле, – тип дөрөҫ яҙа XIX быуат краеведы Р. Игнатьев, – уны халыҡ араһынан күтәрҙе, йырсы-импровизатор булыуы яғынан уның тураһында иҫтәлек һаҡланы, уның үҙен йырҙар геройы яһаны».

Халыҡ азатлығы өсөн күтәрелгән крәҫтиән һуғышында Салауат Юлаевтың йырсы-импровизатор булыуы яғынан ниндәй роль уйнауы башҡорт халыҡ ижадында ла шулай күрһәтелгән:

Салауаттың менгән кир аты
Батыр ғәскәрҙәргә юл башлай.
Кир ат өҫтөндәге Салауат
Яуға дәртләндереп, йыр башлай.

Ҡара ғына урман, ҡараңғы төн,
Йәшен генә йәшнәй ялтырап,
Салауат та батыр йыр йырлаһа,
Дошмандары тора ҡалтырап.

«Салауат йыр йырлаһа, – тип яҙа 1875 йылда Р. Игнатьев, яҙма һәм телдән һөйләнеп килгән иҫтәлектәргә таянып, – кешеләр һуғышҡа ҙур теләк менән барҙылар, яраланғанда ла һыҙланыу һиҙмәнеләр, аслыҡтан һәм һыуыҡтан ҡурҡмаҫ булдылар, үлгәндә лә шат үлделәр».

Ләкин элек башҡорт халҡының яҙмаһы булмағанлыҡтан һәм батша хөкүмәтенең ҡаты тыйыуы, эҙәрләүе арҡаһында, беҙгә Салауат Юлаевтың шиғырҙары һәм йырҙары үҙ оригиналендә – башҡорт телендә килеп етмәгән. Батша власы, репрессив саралар ҡулланып, халыҡ хәтеренән Салауаттың шиғырҙарын ғына түгел, хатта уның исемен дә сығарып ташларға, онотторорға тырышҡан. Бына шуға күрә беҙгә уның әҙәби мираҫының бары тик бер өлөшө генә – 1875 йылда Р. Игнатьев тарафынан «Рус География обществоһының Оренбург бүлеге яҙмалары»нда һәм 1880 йылда рус яҙыусыһы Ф. Нефедов тарафынан «Русское богатство» журналында руссаға юлын-юлға тәржемә итеп баҫылған шиғырҙары ғына билдәле. Улар: «Тыуған илем», «Уралым», «Яу»,

«Уҡ», «Егеткә», «Тирмәмдә», «Һандуғас», «Зөләйха». Был шиғырҙарҙан тыш, заманында баҫылмағанлыҡтан, Салауаттың тап үҙ ижады икәнлеге асыҡ билдәле булмаған, ләкин бик күптән бирле халыҡ араһында Салауаттыҡы тип йөрөтөлә торған «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып», иҙеүселәргә ҡаршы һуғышырға саҡырыуы һалынған:

Йөк күтәреп бил бөктөрмәй,
Хахылдап ҡан төкөрмәй,
Иҙел кисмәй, ут үтмәй,
Хәләл ҡаныңды түкмәй, -
Башҡортҡа тиң ирек бармы ни?

Күк ыласындың балаһы
Бауҙа үлә талпынып,
Яҡшы атаның балаһы
Шәһит була яу йөрөп.

Ҡарсыға үтмәҫ урмандан
Ыласын үтер таң менән,
Михнәт менән көн күргәнсе,
Яуҙа үләйек дан менән!

Салауат поэзияһының көсө һәм әһәмиәте – шиғырҙарының халыҡсан булыуында, тыуған илде һөйөү тойғолары үткәрелгән булыуында. Уның әҫәрҙәрендәге патриотик тойғо һәм уйҙар халыҡ ижадында ғәҙәттә тыуған ил, тыуған край образы булып һүрәтләнә торған Урал менән тығыҙ бәйләнгән:

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым, -
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем...

(«Тыуған илем»)

Шул уҡ ваҡытта Салауаттың тыуған илде һөйөүе феодаль-крепостнойлыҡ һәм колониаль иҙеүгә ҡаршы һуғышҡа күтәрелгән башҡорт хеҙмәтсән

массаларының азатлыҡ идеялары менән айырылмаҫ булып бәйләнгән. Салауаттың патриотизмының нигеҙендә бер бөтөн булып бер-береһенә ҡаршы ике тойғо ята: һөйөү һәм нәфрәт, – тыуған илде һөйөү, уның менән ғорурланыу һәм тыуған ил эсендәге феодалдарға, помещиктарға ҡаршы аяуһыҙ көрәш. Һәм тап бына шундай ысын париотизм крәҫтиән һуғышында Салауатты башҡорт халҡының данлы геройы, юлбашсыһы итеп, ялҡынлы шағиры итеп күтәргән. Тыуған иленә, халҡына бирелгән булғаны өсөн, халыҡ азатлығы, халыҡтар дуҫлығы идеяларына тоғро булғаны өсөн Салауат хыянатсы Абдраков кеүек башҡорт тархандарын халыҡ алдында язалаған һәм рус хеҙмәтсән массаһын, һеҙгә ҡаршы «беҙҙең күңелдәребеҙҙә уҫаллыҡ юҡ» тип, көрәшкә саҡырған һәм приказына «дуҫығыҙ Салауат» тип ҡул ҡуйыр булған[1].

Салауат үҙенең шиғырҙарында тыуған иле менән ғорурлана, Башҡортостандың матур тәбиғәтен данлап йырлай. Изге төйәк булған мөһабәт Урал шағирҙы ныҡ тәьҫирләндерә, унда тәрән тойғолар уята. Уралдағы һәр нәмә шағирға яҡын һәм ҡәҙерле. Тыуған крайҙың тәбиғәте бай һәм йәмле. Ләкин ундағы тормош тап киреһенсә – сиктән тыш ярлы һәм йәмһеҙ: хеҙмәтсән халыҡ икеләтә иҙелеп, хәйерселектә бөлгөнлөктә йәшәй. Шуға күрә лә Салауат атҡан уғы тәбиғәтте матурлап йөрөүсе ҡарлуғасҡа тейгәне өсөн үкенә. Ғәйепһеҙ ҡошто ҡыҙғана һәм атҡан уғым:

Ҡарлуғасҡай ҡошто үлтергәнсе,
Бер дошмандың йәнен өҙһәсе, –

тип, донъяның йәмен боҙоусы, хеҙмәт кешеһен тотҡон ҡош хәленән ҡотҡарыу өсөн ир-егеттәрҙе яуҙа дошманды «ҡош батшаһы ҡыйғыр-бөркөттәй» булып ҡыйратырға саҡыра.

Шул бөркөттәй, егет, батыр бул.
Тайғанында таян дуҫтарға.
Яуҙа арыҫландай ажғырып,
Йән аямай ташлан дошманға.

(«Егеткә»)

---

[1] Был турала 1952 йылда сыҡҡан «Салауат Юлаев» (тыуыуына 200 йыл тулыуға ҡарата) тигән китаптың 18, 27 биттәрен ҡарағыҙ.

Ләкин, Салауат бер үк ваҡытта шағир ҙа, Башҡортостандағы восстаниесыларҙың етәксеһе лә булғанлыҡтан, башҡорт иҙелгән массаларын крәҫтиән һуғышында дошманға ҡаршы йән аямай көрәшергә саҡырыу менән генә сикләнмәгән, бәлки уларға ни өсөн улай һуғышырға кәрәк икәнен дә төшөндөрөп биргән. Уның сәсәндәр һәм йырсылар аша килеп еткән «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» тигән ҡобайырында, телмәр рәүешендә, Пугачевтың башҡорттарға ҡарата сығарылған манифесының йөкмәткәһе бирелгән:

БыҒаулының ҡулынан
Бығауын йолҡам, тигән ул;
Тышаулының аяғынан
Тышауын йолҡам, тигән ул;
Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа
Ерен бирәм, тигән ул;
Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа
Һыуын бирәм, тигән ул;
Ҡол булып килгән башҡортҡа
Иркен бирәм, тигән ул.

Рус яҙыусыһы Ф. Нефедов үҙенең 1880 йылда баҫылған «Башҡорт батыры Салауат» тигән очергында Салауаттың дөрөҫ портретын биргән:

«Салауат халыҡ алдына килә. Ул ҡулын юғары күтәрә һәм урынлашҡан тынлыҡ эсендә:

– Башланды! – ти.

“Башланды!” тигән был хәтәр һүҙҙе әйткәндә, батырҙың тауышында, сырайында һәм ҡулы юғары күтәрелгән бөтә фигураһының ынтылышлы хәрәкәтендә ғәҙәттән тыш дәһшәтлелек бар ине».

Салауаттың поэтик тауышы ла тап ана шундай – крәҫтиән һуғышы башланғандағы һәм үҙенең ул һуғыштағы героик эшендәге кеүек үк – иҙеүселәргә ҡаршы дәһшәтле воин итеп күрһәтһә, һөйгәненә үҙенең мөхәббәт хистәрен әйтеп бирергә һүҙҙәре етмәүҙән зарлана:

Мин, бахыр, һине, Зөләйха, ныҡ һөйәм,

Әйтә алмайынса һүҙҙәремде, баш эйәм.

Һиңә дан йырлар өсөн телем зәғиф,

Һөйөүемде әйтергә һүҙем зәғиф.

(«Зөләйха»)

Салауат Юлаевтың мираҫы ҙур түгел. Ләкин ул үҙенең идея йүнәлеше менән, башҡорт әҙәбиәте тарихында тәүге поэтик памятниктарҙың береһе булып тороуы менән ҡиммәт.

Салауат беҙгә халыҡ азатлығының фиҙәкәр көрәшсеһе һәм йырсыһы булыуы менән яҡын.

Башҡортостандағы бөтә XIX быуат буйына, әҙәбиәт аренаһына Мәжит Ғафури килгәнгә тиклем, Салауат поэзияһында билдәләнгән азатлыҡ идеяһы мотивтарын үҫтереп алып киткән яҙыусы булманы.

Салауатты ирекле тормош өсөн ҡаты көрәшкә рухландырған һәм уның әҫәрҙәрендә үҙенең билдәле бер кәүҙәләнешен алған патриотизм һәм халыҡтар дуҫлығы идеяһы, гуманизм һәм азатлыҡ дошмандарына нәфрәт – башҡорт совет әҙәбиәтендә һәм искусствоһында үҫтерелә торған яҡшы милли традицияларҙың нигеҙен тәшкил итә.

2

Салауат халыҡ хәтерендә, уның ауыҙ-тел әҙәбиәтендә һәм музыкаһында йәшәй.

Элекке әкиәт һәм йырҙарҙа, легенда һәм ҡобайырҙарҙа социаль һәм колониаль иҙеү аҫтында яфаланып йәшәгән хеҙмәтсән массаларҙың уй һәм хыялдары, өмөт һәм теләктәре сағылған, азатлыҡ өсөн көрәшкән ир-егеттәрҙең батыр эштәре һүрәтләндерелгән. Башҡорт халыҡ ижадында, бигерә тә йырҙарҙа, хеҙмәтсән халыҡ массаларының түҙеп торғоһоҙ кабалаға ҡаршы көрәшәкә күтәрелеүе, ирек яулауы сағылдырылған. Был күтәрелештәрҙең күп ҡан ҡойҙороу менән баҫтырылыуҙары «Урал» тигән атаҡлы йырҙа айырыуса образлы итеп әйтеп бирелгән:

Ай Уралым, һинән ҡырҡып алһам

Ат ҡыуырҙай яңғыҙ талдарың,

Тамып та ғына ҡала, ҡырҡан саҡта,

Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Үҙенең көсөн һәм ғүмерен халыҡ азатлығы эше өсөн биргән ана шундай батырҙар араһында иң данлыһы, иң һөйөклөһө булып, фольклорҙа башҡорт халҡының тоғро улы, 1773–1775 йылғы крәҫтиән һуғышының юлбашсыһы Емельян Пугачевтың ышаныслы юлдашы Салауат Юлаев тора. Халыҡ уға арнап үҙенең иң яҡшы йырҙарын, көйҙәрен сығарған, легендалар тыуҙырған.

Ләкин, самодержавиеның ҡаты тыйыуы һәм эҙләнеүе арҡаһында, Салауат тураһындағы йырҙарҙың һәм башҡа фольклор әҫәрҙәренең бик күбеһе совет осорона тиклем килеп етә алмаған. Элек Салауат тураһында йыр йырлау, көй уйнау политик енәйәт итеп ҡаралған. Быны хәҙерге Салауат районы, Ҡыҙырбаш ауылының скрипкасы ҡарты Ғарифьян Солтановтың иҫтәлеге генә лә дөрөҫләп тора: уны 1890 йылда ауыл йыйынында «Салауат батыр» көйөн «һыҙҙырып ебәргәне өсөн» биш тәүлеккә ябып ҡуйғандар[1]. Бына шуның өсөн, элек башҡорт халыҡ музыкаһы менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа Салауат тураһындағы йырҙарҙы бик еңел генә яҙып ала алмағандар. 1895 йылда «Русское богатство» журналының 7-се номерында бер автор (П.Б.) үҙенең Көньяҡ Уралдағы промышленность тураһындағы очергында: «Үҙ һөнәренең иҫ киткес артисы булған бер ҡурайсыны тыңланым һәм көйҙәрен яҙып алдым, ләкин башҡорт халыҡ геройы Салауат тураһындағы йырҙарҙы ишетергә тырышыуым бушҡа ғына булды», – тип яҙа. Эҙәрләү менән йөҙәтелгән ҡурайсылыр хатта башҡорт көйҙәрен ихлас күңелдән яратып йыйыусы һәм өйрәнеүсе С.Г. Рыбаковҡа ла башта ышанып уҡ бөтмәҫ булғандар: уға, «Салауат» көйөн яҙҙырғанда, «Салауат Минзәлә өйәҙенең 27-се кантонында булған бер батыр ул», йәки «ҡырғыҙҙар менән булған бер бәрелештә етәкселек иткән батыр ул» тигән ялған мәғлүмәт биргәндәр.

Бер ниндәй тыйыуҙар ҙа, эҙәрләүҙәр ҙә Салауатты халыҡтан айыра алмаған, әлбиттә. Башҡорт халҡы үҙенең герой улы һәм йырсыһы тураһында иҫтәлеген күңелендә һәм музыкаль-поэтик ижадында ике быуат буйына һаҡлап алып килгән. Хатта восстаниеларға ҡаршы батша ғәскәрҙәренең командующие

[1] Коммуна газетаһы, 1940 йыл, 25 сентябрь.

Потемин үҙе лә Екатерина II яҙған бер донисениеһында «Салауаттың исеме ысынлап та башҡорт халҡының йөрәгендә булырға хаҡлы» тип танырға мәжбүр булған.

Тыуған иленә бирелгән Салауат үҙенең башҡорт һәм рус халҡының дуҫлығы һәм берҙәм көрәше менән рухландырылған героик эше менән ауыҙ-тел ижадында геройҙарҙың гүзәле булып һаҡланыу хоҡуғын алған. Йырсылыр, ҡобайырсылар хыялында Салауат йыш ҡына мифик геройҙар образы менән тиңләштерелә, башҡорт эпосындағы һыуҙа батмаҫ, утта янмаҫ батыр сифатында һүрәтләндерелә:

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине.
Яурынына уҡ тейһә,
Себен тешләй, тир ине;
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға тир ине ау,
Тирем сыға тир ине.

Башҡорт халыҡ сказдарында ла Салауат шундай ҡурҡыу белмәҫ һәм үлемһеҙ батыр итеп иҫкә алына. Мәҫәлән, 1875 йылда «Рус география обществоһының Оренбург бүлеге яҙмаларында» баҫылған бер сказда Салауат тураһында шулай хикәйә ителә:

«Ул күп ерҙәр һәм ныҡлы ҡалалар аша үтте. Ул үҙенең уҡтай атыла торған сапҡын аты менән һәр ерҙә лә дауыл булып йөрөнө. Ялтыр ҡылысының һәр бер һелтәнеше һәм ул атҡан һәр бер уҡ үлем килтерә ине. Уҡтай атылыр аты өсөн күлдәр ҙә, тәрән йылғалар ҙа бер ни тормай ине, – теләһә ниндәй ерҙән дә үҙенең батырын алып сығыр ат ине ул. Салауатҡа тейгән пулялар кире ҡаҡлыға ине».

Салауат тураһында йырҙарҙа башҡорт халҡының үҙ геройына булған мөхәббәте, ышанысы һәм уның менән ғорурланыу тойғоһо һалынған. Йырҙа, ысын герой үҙ халҡы менән айырылмаҫ берҙәм була, тигән идея үткәрелә, – Салауат халыҡҡа, халыҡ Салауатҡа таяна:

Яндар ҙа тарттым, уҡ аттым,

Беләккәйем ергә таянып,

Иҫ китерлек эштәр эшләнек,

Салауат тигән иргә таянып.

Бына шуның өсөн дә Салауат уға тиклем булған геройҙарҙың бөтәһенән дә хаҡлы өҫтөн ҡуйыла:

Салауат батыр ҡоралы

Еҙ башаҡлы ғына уҡ икән.

Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек,

Салауаттай батыр юҡ икән.

Революциянан күп элек сығарылған йырҙарҙа ла, совет осоронда ижад ителгән йырҙарҙа ла Салауаттың яҡты образы кәүҙәләндерелә. «Туйҙа, майҙанда көрәшеп, кеше йыҒыу менән генә батыр булып булмай, – тигән Салауат. – Үҙ артыңдан илеңде эйәртеп, ил ирке өсөн дошманыңды еңеп, ир күрке булыу – бына шул батырлыҡ». Салауат фольклорҙа азатлыҡ өсөн үҙе артынан ил халҡын эйәрткән ана шундай батыр һәм етәксе итеп кәүҙәләндерелә.

Халыҡ йырында Салауат крәҫтиән һуғышының етәксеһе Пугачев менән айырылмаҫ берҙәм булып йәшәй. Улар икеһе лә дошман өсөн берҙәй ҡурҡыныс, ә халыҡ массалары өсөн берҙәй яҡын итеп күрһәтелгән. «Бүгәсәү менән Салауат күп халыҡтарға баш икән», «Бүгәсәү менән Салауат дошман яуын ҡырҙы шаулатып», «Бүгәсәү ҙә менән ай Салауат Әрәсәйҙең аҫыл егете» һәм башҡалар.

Тарихи-героик темалағы йырҙарҙың күбеһенән Салауат тураһындағы йырҙар үҙ заманында бик ҙур общественный-политик әһәмиәткә эйә булыҙары менән айырыла: улар воиндарҙың патриотик тойғоларын ҡеүәтләндергән, халыҡ массаларын көрәшкә рухландырғандар, 1875 йылда Р. Игнатьев: «Салауат тураһынддағы йырҙар воиндарҙа батырлыҡ уты тоҡандырҙы» тип яҙа.

Йырҙарҙа Салауатың шәхси һәм боевой тормошоноң иң әһәмиәтле яҡтары үҙенең сағылышын тапҡан. Улар: Салауаттың семьяһы һәм уның солғанышы; Салауат – Пугачев бригадиры, 22 йәшлек батыр; уның һуғыш операциялары; үҙенә терәк булған тоғро юлдаштары: Юлай, Кинйә Арсланов, Ҡәнзәфәр Усаев һәм башҡалар; уның боевой ярҙамсылары: ат, ҡылыс, йыр; Салауаттың ҡулға

алыныуы һәм атаһы Юлай менән бергә Рогервикка ғүмерлек каторгаға ебәрелеүе; Салауаттың тыуған ил тураһында уйланыуы.

Бөтә был йырҙарҙа үҙенең эше менән үлемһеҙ Салауаттың образы күҙ алдына баҫа. Йырҙағы был поэтик образда легендар геройҙың шәхси сифаттары тормош ауырлығына, хоҡуҡһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшкән хеҙмәтсән массаларҙың героизмы менән, уларҙың һуғышсанлыҡ традицияһы менән бергә органик ҡушылып дөйөмләштерелгән. Салауат тураһындағы йырҙар колониаль һәм социаль иҙелеүҙән ҡотолоу өсөн күтәрелгән ҙур көрәш пафосы менән ялҡынланған, ҡаҡшамаҫ оптимизм менән һуғарылған, уларҙа халыҡтың һәм уның геройҙарының үлемһеҙ булыу идеяһы раҫлана:

Салауат батыр ир икән,
Теләккәйе уның бер икән:
Иректәрҙә йәшәү, аҡсабаҡтай,
Һыу-урмандар, ғәзиз ер икән.

Сал бөркөткәй ташҡа оя яһар,
Балаларын атып алһаң да.
Салауаттай ирҙәр баш эймәҫтәр,
Аяҡ-ҡулына бығау һалһаң да.

Ҡараңғы ла төндә юл яҡтыртҡан –
Салауат менгән кирҙең ҡашҡаһы.
Салауат батыр китеп, тыумаҫ тимәң
Арыҫландай ирҙең башҡаһы.

Салауат тураһындағы йырҙар – башҡорт халҡы поэтик ижадының һәм музыкаль классикаһының иң яҡшы өлгөләре. «Салауат хәрби кеше генә түгел, бәлки үҙ халҡының рухи юлбашсыһы ла ине», – тип яҙған тарихсы Н. Фирсов. Салауат халыҡ музыкаһында ла шулай һүрәтләндерелгән: бер көйҙә ул ҡурҡыу белмәҫ воин-герой булып, икенсе көйҙә – шағир һәм фекер эйәһе итеп күрһәтелә.

Салауат тураһындағы башҡорт халыҡ йырын тыңлап, яҙыусы Филлип Нефедов 1880 йылда «Русская мысль» журналында шулай тип яҙған:

«...Ямщик – Салауат тураһында, иң яратыла торған башҡорт геройы һәм батыры тураһында, йырланы. Егетең ниндәй дәрт менән, ниндәй ярһыу менән йырлауын әйтеп биреү мөмкин түгел. Йыр егетте бөтөнләй үҙенә тартты ла, алыҫҡа алып китте: ул үҙен, бөтә донъяһын онотто. Был йырҙың көйө үҙенә бер төрлө һәм сәйер. Унда ҡаҡшамаҫ энергиялы һәм батырлығы сикләнмәгән ирек тә, халыҡ юлбашсыһының һөрәнләп саҡырыуы ла ишетелде. ...Миңә иҫәпһеҙ-һанһыҙ ат тояҡтары тауышы, меңәрләгән дәһшәтле һыбайлыларҙың тауышы ишетелде, әйтерһең дә туп-тура миңә һәм тау тарлауыҡтары буйынса бер яҡтан икенсе яҡҡа: “Салауат килә! Әйҙә!” тигән көслө хор ташҡыны килә ине».

Салауат тураһында башҡорттар ғына түгел, бәлки рустар ҙа – Урал заводтарының крепостной эшселәре, Яйыҡ казактары ла йырҙар сығарған.

Халыҡ үҙенең йырҙарында, ҡобайыр һәм легендаларында Салауат Юлаевтың образын күп йылдар аша ана шулай һаҡлап алып килгән.

3

Салауаттың образы фольклорҙа ғына түгел, рус һәм башҡорт художестволы әҙәбиәтендә лә үҙенең һүрәтләнешен тапты. Гениаль рус яҙыусыһы А.С. Пушкин, үҙенең «Пугачев тарихы» тигән китабында, Пугачевтың воззваниеларында «халыҡ теленең иҫ киткес өлгөһөн» күреп һоҡланған кеүек үк, был хәрәкәттә бөтә ҡара халыҡтың Пугачев яҡлы булыуын ҙур тарихи әһәмиәтле факт итеп ҡарай һәм ана шул «ҡара халыҡтың» бер өлөшө булып азатлыҡ өсөн һуғышҡа күтәрелгән башҡорт халҡына һәм уның юлбашсыһы Салауат Юлаевҡа теләктәшлек күрһәтә. Пушкин Башҡортостанда восстаниеның күтәрелеүендә һәм уның Пугачев өсөн ҡеүәтле көс булып ялҡынланып китеүендә Салауат менән Юлайҙың роле ҙур булыуын билдәләп үтә. «Баҫынҡыландырылған тип әйтерлек башҡорттар яңынан тынысһыҙландылар, – тип яҙа Пушкин, – 1741 йылда язалап үлтереүҙәр ваҡытында ҡасып ҡотолған ҡарт мятежниктары Юлай үҙенең улы Салауат менән улар араһына килде. Бөтә Башҡортостан восстание күтәрҙе, һәм афәт тағы ла ҡеүәтлерәк көс менән ҡыҙып китте».

Рус яҙыусыһы һәм этнографы Ф.Д. Нефедов (1838–1902) Салауат образын һүрәтләндереүгә арнап, «Башҡорт батыры Салауат» тигән айырым очерк яҙған («Русское богатство» журналы, 1880 йыл, октябрь). Нефедовтың был очеркты яҙғанда ниндәй маҡсат ҡуйғанлығы уның түбәндәге һүҙҙәренән күренеп тора. «Ҡарап тороуға әҙәби материал күп булһа ла, – ти ул, – башҡорт геройының шәхесе билдәһеҙ булып ҡала килә: ул бер генә яҡлап, тышҡы яҡтан ғына, йәғни бунтсы һәм мятежник булыуы яғынан ҡына кәүҙәләндерелә. Ләкин Салауат кеше булыу яғынан ниндәй булған, үҙенең “рәхимһеҙ” эшендә уны ниндәй мотивтар етәкселек иткән, – беҙ уны белмәйбеҙ, ә һиҙенә генә алабыҙ». Бына шуға күрә Нефедов, «официаль сығанаҡтарҙан алынған яңы факттар, шулай уҡ башҡорттарҙың үҙҙәренең риүәйәттәре, хикәйәләре һәм йырҙары» ярҙамында «халыҡ геройы менән яҡыныраҡ танышырға» уйлай, Салауаттың «кеше булыуы яғынан ниндәй булыуын», иҙеүселәргә ҡаршы көрәшәкә күтәрелгәндә уны «ниндәй мотивтар етәкселек иткәнен» күрһәтергә тырыша һәм шуның менән ул Салауат шәхесен кәүҙәләндереүҙәге «бер яҡлыҡты» бөтөрөүгә булышлыҡ итергә уйлай.

Бына шул яҡтан, – Салауаттың биографияһын эсенә алған ваҡиғаларҙы һүрәтләндерергә тырышыу юлында асылда беренсе тәжрибә булараҡ, – был очерктың ҙур ғына әһәмиәте бар. Әлбиттә, Нефедов Салауатты аяуһыҙ көрәшкә күтәргән мотивтарҙың бер генә яғын күрә. Билдәле, бындай бер яҡлылыҡ тарихи дөрөҫлөктө боҙоп аңлатыуға килтерелгән. Нефедов крәҫтиән һуғышының состав өлөшө һәм серьез көсө булған башҡорт восстаниеһының бары тик антиколониаль характерын ғына күрә алмаған көрәшсе итеп һүрәтләндергән.

Шуға ҡарамаҫтан, Нефедовтың очергы беҙгә Салауат тураһында күп кенә нәмә белергә ярҙам итә. Академик Н. Дубровин был очеркта «Салауаттың һәм уның атаһы Юлайҙың биографияһына бәйле ентекле мәғлүмәттәр күбеһенсә халыҡ йырҙарына һәм Салауаттың үҙе ижад иткән йырҙарға нигеҙләнгән»

булыуын күрһәтә[1]. Ысынлап та, Нефедов тарихи документтарға, халыҡ ижады материалдарына һәм Салауаттың үҙ шиғырҙарына таянып, Салауаттың бала һәм үҫмер сағын, ул тәрбиәләнеп үҫкән среданы ышандырырлыҡ итеп күрһәтә алған. Ул беҙҙең күҙ алдыбыҙға үҙенең тыуған илен, туған халҡын ысын күңелдән һөйгән, шуға күрә азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелеп, үҙе артынан халҡын эйәртә алған батыр «тиҙ тәьҫирләнеүсән, дәртле һәм поэтик натуралы» Салауат образын баҫтыра. Слауат шиғырҙарының үҙҙәрен дә беҙ Нефедов арҡыры уның ана шул очергы буйынса беләбеҙ.

Азатлыҡ өсөн көрәшкән, шуның өсөн һәләк булған Салауат үҙенең дөрөҫ баһаланыуын һәм искусствола дөрөҫ күрһәтелеү, киң полотнола биреләү мөмкинлеген Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына тапты. Совет әҙәбиәтендә һәм искусствоһында Салауат, үткәндәге данлы геройҙарҙың береһе булараҡ, шаҡтай киң урын алды. Салауат үҙенең эше менән СССР тарихы буйынса китаптарға, дәреслектәргә инде. Күренекле рус совет яҙыусылары уның образын тыуҙыралар: Степан Злобин «Салауат Юлаев» тигән роман яҙҙы, Вячеслав Шишков «Емельян Пугачев» тигән тарихи романында Салауаттың дөрөҫ образын күрһәтте, Павел Бажов уның тураһында «Ҡарт тауҙар бүләге» тигән хикәйә яҙҙы, Я. Апушкин Салауат образын сәхнә әҫәрендә күрһәтте. Башҡортостан темаһына эшләнгән тәүге кинофильм да Салауат тураһында булды. Башҡорт совет яҙыусылары, композиторҙары һәм художниктарының ижадында ла Салауат образының сағылышы бар. Бында, бөтәһенән дә элек, Баязит Бикбайҙың «Салауат» тигән тарихи драмаһын күрһәтергә кәрәк.

В. Шишков үҙенең «Емельян Пугачев» эпопеяһында Салауат тураһында бик аҙ яҙһа ла, уның үҙ халҡының боевой етәксеһе булыуы яғынан дөрөҫ һәм шаҡтай бөтөн образын бирә алған. Ул Салауаттың һәм ул етәкселек иткән хәрәкәттең көсөн социаль һәм колониаль иҙеүгә ҡаршы рус халҡы менән бергә, ҡулға-ҡул тотоношоп көрәшеүҙә күрә. Салауат эксплуататорҙар өсөн ҡурҡыныс көстөң сығанағы булған ана шул дуҫлыҡты тәрән аңлаусы, уға таяныусы, уны үҫтереүсе һәм нығытыусы булып кәүҙәләнә. Элекке восстаниеларҙа «беҙ

[1] Дубровин Н. Пугачев и его сообщники, том III, С.-Петербург, 1884. 388-се бит.

иҙеүселәргә ҡаршы яңғыҙ барҙыҡ, һәм улар беҙҙе ҡыйраттылар, ә хәҙер беҙҙең менән үҙебеҙ кеүек үк йәберләнгән рустар бар, – тип аңлата Салауат. – Уларҙың көсө иҫәпләп бөткөһөҙ. Бына беҙ дөрөҫлөктө улар менән бер булып эҙләйбеҙ. Һәм табырбыҙ ҙа!»

Был йәһәттән Ст. Злобин романы менән П. Бажов хикәйәһе серьез тәнҡиткә мохтаж. Злобин, Салауат етәкселек иткән восстаниеның үҙенсәлеге башҡорттар менән рустар араһындағы дуҫлыҡта, уларҙың берҙәм көрәшендә икәнен яҡшы белә тороп, Салауатты һүрәтләгәндә йыш ҡына ана шул дөрөҫлөктән ситләшә, хатта «төрөк байрағы» аҫтында хәрәкәт иткән реакцион Ҡараһаҡал менән Салауат араһында ниндәйҙер идея яҡынлығы барлығын танырға итә. Злобин һүрәтләүендә Салауат йыш ҡына үҙенең реаль ерлегенән айырылып, яҙыусының ижади фантазия томанында йәки экзотика эсендә бирелә. Романдың уңышлы яҡтары ни тиклем мауыҡтырғыс итеп яҙылмаһын, уның серьез етешһеҙлектәре һәм хаталары Салауат Юлаев образын дөрөҫ аңлауға ҡамасаулыҡ итәләр. Әлбиттә, был әҫәр бынан егерме дүрт йыл элек яҙылған, һәм ул Салауат тураһындағы тәүге роман. Шулай ҙа беҙ уны бөгөнгө кеше булып уҡыйбыҙ, һәм Салауатты бөгөнгө аңлауыбыҙса баһалайбыҙ.

Ҙур художник Павел Петрович Бажовтың «Ҡарт тауҙар бүләге» бик оҫта яҙылған хикәйә, унда әкиәт формаһында бик тәрән мәғәнә әйтелгән. Ләкин шул уҡ ваҡытта Салауаттың һәм ул етәкселек иткән восстаниеның еңелеү сәбәбен аңлатыуҙа Бажов тарихи дөрөҫлөккә ҡаршы килә, хата ҡараш тора. Бажовса, Салауат етәкселек иткән восстание Салауат хаталыҡ яһаған өсөн еңеүгә килтермәгән: йәнәһе ул бөтә халыҡ интерестарын үҙенең тыуған ырыуы интерестары менән алмаштырған – үҙенең ырыуҙары һәм бисәләре һүҙен тыңлап, Салауат заводты һәм унда эшләүсе рус эшселәренән торған ике ауылды яндырған, һәм шул көндән алып Салауаттың ҡарт тауҙар бүләге итеп бирелгән серле ҡылысы йәшен утын сығармаҫ булған, көсөн юғалтҡан. Ҡарт тауҙар бүләге артынан килгән ҡыҙ, был ҡылыс һинең өсөн түгел, ә «халыҡ теләген бер ваҡытта ла, бер нисек тә таптамаҫ кеше өсөн яһалған ул» тип, Салауат ҡулынан серле ҡылысты кире алып китә.

Ваҡиғаларҙы үҙ дөрөҫлөгө менән аңлатыусы совет тарих фәне бының тап киреһен раҫлай. Үҙ ырыуының интерестары эсендә бикләнеп ҡалмайынса, бөтә иҙелгән башҡорт халыҡ массалары интересын күҙәткәне өсөн дә, үҙ ырыуҙаштарының ғына түгел, ә бөтә башҡот халҡын һәм рус булмаған башҡа халыҡтарҙы үҙе артынан эйәртеп, рус халҡы менән берҙәм көрәшкә алып барғаны өсөн дә Салауат Башҡортостанда ул саҡтағы азатлыҡ хәрәкәтенең юлбашсыһы, уның милли геройы була алған. Заводтарҙы, рус ауылдарын яндырмау ғына түгел, ә уларҙы һаҡларға тырышҡаны өсөн, «беҙҙәрҙең күңелдәребеҙҙә уҫаллыҡ юҡ, беҙҙәргә бер-беребеҙ илә спорлашып, бер-беребеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгелдер» тип, рус крәҫтиәндәрен феодалдарға, дворяндарға ҡаршы берҙәм көрәшкә саҡырғаны һәм шуға ирешкәне өсөн дә Салауат ҙур прогрессив деятель.

Салауат етәкселек иткән күтәрелештең еңелеү менән тамамланыуының сәбәптәре бөтөнләй башҡа нәмәлә. Крәҫтиән восстаниеларының ни өсөн еңеүгә килтермәү һәм килтерә лә алмау сәбәптәрен, юғарыла инде күреп үтеүебеҙсә, иптәш Сталин асыҡ итеп әйтеп биргән.

«Совет патриотизмында, – тине иптәш Сталин, – Советтар Союзындағы халыҡтарҙың милли традициялары һәм ундағы бөтә хеҙмәтсәндәрҙең тормош өсөн иң мөһим уртаҡ интерестары гармониялы рәүештә бергә ҡушыла»[1].

Тап бына шуға күрә лә башҡорт халҡының милли традицияларының кәүҙәләнеше булған Салауат образы бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, совет халҡының Тыуған илде немец-фашист илбаҫарҙарынан ҡотҡарыу интерестары менән, фронт һәм тыл кешеләренең патриотик тойғолары менән бергә ҡушылып, яңы көс менән яңғыраны. Башҡортостан хеҙмәтсәндәре үҙ аҡсаларына танк, самолет һәм бронепоезд һатып алып, уларға Салауат исемен бирҙеләр. Шулай итеп Салауат:

Урал бөркөтөнә оя булған
Күккә ашҡан
Күкһел таштарҙан

[1] Сталин И.В. Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында, 5-се баҫма. 160-сы бит.

Бронепоезд булып,

Күкрәп килде

Ҡанлы алыш барған яҡтарға.

(Х. Кәрим, «Салауат тураһында баллада», 1943)

Һәм шул уҡ Салауат:

Ҡырҡ өсөнсө йылда

Ул, танк булып,

Фашист ордаларын ҡыйратты.

Ошо иптәште беҙ

Танк итеп тә,

Йыр итеп тә бик ныҡ яраттыҡ.

Ҡырҡ өсөнсө йылда

Ул, йыр булып,

Яуға өндәне беҙҙең һалдатты.

(Р. Ниғмәти, «Салауат иптәш», 1952)

Башҡорт поэзияһында Салауат тураһындағы шиғырҙарҙың бер өлөшө ана шулай, Салауаттың «Бөйөк Ватан һуғышына ҡатнашыу» темаһына, башҡорт халҡының боевой традицияларына тоғро булыу һәм уны ил яҙмышы хәл ителгән саҡта яңыртып үҫтереү темаһына яҙылған. Бындай шиғырҙар иҫәбенә, юғарыла өҙөктәре килтерелгән Хәниф Кәрим һәм Рәшит Ниғмәти шиғырҙары менән бергә, Сәйфи Ҡудаштың «Минең ауылдашым», «Әсә һүҙе» тигән шиғырҙары, Ҡадир Даяндың композитор Х. Әхмәтов тарафынан көйгә һалынған «Салауат батыр» тигән йыры һәм башҡа ҡайһы бер шағирҙарҙың әҫәрҙәре инәләр.

Шул уҡ ваҡытта Салауат тоҡомдарының Ватан һуғышында батыр һуғышыуҙары тураһында рус яҙыусылары ла яҙҙылар. Константин Симонов 1942 йылдың 31 июлендә «Красная звезда» газетаһында баҫылған «Башҡорт дивизияһында» тигән очергында: «Пугачев менән бергә рус еренең азатлығы өсөн һуғышҡан Салауат Юлаевтың тоҡомдары менән бер рәттән тороп, үҙ тыуған илдәренең азатлығы һәм намыҫы өсөн һуғышалар», – тип яҙҙы. Дүрт айҙан һуң Илья Эренбург «Башҡорттар» тигән очергында («Красная звезда» 2 декабрь, 1942), совет патриотизмы менән рухланған Салауат тоҡомдарының

дошманға ҡаршы аяуһыҙ һуғышыуҙарын яҙып, был турала немец газетаһының отзывын килтерҙе: «Дейче Цейтунг фюр Остланд» газетаһында Мейер тигән ниндәйҙер бер докторҙың “Дон далаларында ҡырағай кешеләр менән, ләкин ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәй торған башҡорт тоҡомо менән һуғышырға мәжбүр булыуыбыҙҙы ла өҫтәргә кәрәк”, тип яҙыуы һис ғәжәп түгел... Мейер яңылышмай: башҡорттар батыр халыҡ улар».

Хәҙер Салауат тоҡомдары, күп йылдар элек азат һәм бәхетле тормош өсөн көрәштә үҙенең Салауатын милли геройы итеп күтәргән башҡорт халҡы, Ленин-Сталин партияһы етәкселегендә илебеҙҙә коммунизм төҙөү өсөн көрәшәләр. Элек Пугачев менән Салауат ҡанлы һуғыш алып барған башҡорт далаһында, «михнәт менән көн күргәнсе, яуҙа үләйек дан менән» тип, «ир-егеттәр ятып ҡалған бүтәгә үләнле буҙ яландарҙа» Салауат менән Юлайҙы ҡамсы менән һуҡтырып йөрөткән ауылдарҙа хәҙер бөтөнләй икенсе тормош – гениаль Сталин аҡылы менән төҙөлгән бәхетле һәм ирекле тормош сәскә ата. Хәҙер унда яңы кешеләр йәшәй. Хәким Ғиләжев үҙенең «Салауат ерендә» шиғырында был яңылыҡты бик дөрөҫ күргән:

Яңыса яңғырай иҫке исемдәр,  
Яңы тоҡом Салауат ерендә.  
Кешеләр ҙә яңы, уйҙар ҙа  
Салауат ерендәге тауҙарҙа.

Фәйзи Бикбов Салауаттың иҫтәлеген һаҡлаған, уның данлы эштәренең шаһиты булған Йүрүҙән буйҙарының бөгөнгө яҡты көнөн йырлай:

Көнө яҡты, тормошо ҙур  
«Салауат» колхозының.  
Ләкин баҫыуҙар онотмай  
Батырҙың данлы юлын.

Салауаттың данлы юлы үткән Башҡортостан яландарында, уның тураһында күп иҫтәлектәр, легендалар һаҡланған, уның батырлығы һәм патриотик подвигтары менән ғорурланған бөгөнгө шат кешеләр араһында Ленинград шағиры Михаил Дудин Салауаттың тере образын күрә:

По степям проходит не спеша

Друг степей, живая их душа,

Весел, коренаст и рябоват,

Бронзовый от солнца Салават.

Үҙендә быуаттар буйы ирек өсөн көрәшкән башҡорт халҡының иң яҡшы черталарын кәүҙәләндергән Салауаттың исеме бөгөн, халыҡтарҙың юлбашсылары Ленин-Сталин етәкселегендә һәм уларҙың туранан-тура ярҙамы, хәстәрлеге арҡаһында ирекле һәм бәхетле тормош менән шат йәшәүсе Башҡорт совет республикаһында ана шулай ғорур яңғырай, уның образы халыҡ һәм яҙыусылар ижадында яңы кәүҙәләнеш ала.

1953

## «Әйләндерелгән» китаптар битенән[1]

Ҡунаҡтарға киҫәкләп бирелә торған докторҙы йәки битенә маңлай үҫкән кешене күргәнегеҙ бармы? Юҡтыр, әлбиттә. Бындай күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән нәмәләрҙе бары тик Өфөлә сыҡҡан китаптарҙа ғына осратырға мөмкин.

Факттар кәрәк, факттар! – тиһегеҙме? Була ул. Факт тигәнең тауыҡ сүпләп бөтөргөһөҙ ул беҙҙең китаптар донъяһында.

Иң күренекле рус классиктарынан биш бөйөк яҙыусының башҡортсаға тәржемә ителгән, дөрөҫөрәк итеп әйткәндә, әйләндерелгән биш китабын алайыҡ. Улар: Пушкиндың «Һайланма әҫәрҙәр»е, Салтыков-Щедриндың «Ҡырағай алпауыт» тигән әкиәттәр йыйынтығы, Некрасовтың «Шиғырҙар»ы, Л. Толстойҙың «Севастополь хикәйәләре» һәм Горькийҙың «Ялсылыҡта» китабы. Бына ошо китаптарҙың теләһә ҡайһы битен, әйтәйек, һәр береһенең дә 22-се битен асып уҡыйыҡ. Унда бына ниндәй ғәжәп хәлдәр бар:

«Йөрәктәге намыҫ ялҡынын, дуҫым, бағышлайыҡ илгә күңелдәге гүзәл ярһыуҙы» («Чаадаевҡа»).

«Был көндө дежур старшина булған доктор П ҡунаҡтарҙың бөтәһенә лә берәр киҫәктән бирелеүен хәстәрлек менән күҙәтеп йөрөнө» («Ҡырағай

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 115-116-сы биттәр.

алпауыт»),

«Тик ул ғына, кем барыһын баш эйҙергән» («Тыуған урын»).

«Был офицерҙың тар маңлайлы йәмһеҙ бите уның аҡыл һәләтлегененң тупаçлығын... күрһәтеп торалар ине» («Севастополь хикәйәләре»).

«Минең битемә балауыҙ, йылы серек һәм тупраҡ еçе бәрҙе» («Ялсылыҡта»).

Күрәһегеҙ, уҡып була, ә төшөнөп булмай.

Әйтергә кәрәк, китап «әйләндереүселәр» бигерәк тә Пушкинды боҙоуҙа һәм, шуға бәйләп, башҡорт әҙәби телен пыран-заран килтереп емереүҙә айырыуса ҙур тырышлыҡ күрһәтәләр. Боҙмағас, емермәгәс, тәржемә буламы ни ул!

Ғибрәт өсөн «әйләндереүселәр» тарафынан рисуай ителгән бөйөк шағирҙан бер нисә миçал килтерәйек. Бына улар:

«Мин булһа ла тик бер ҡошсоҡто иркенлеккә алам сығара» (36-сы бит).

«Шашып диңгеҙ ҡоторғанда ҡая ташта шәл ябынып?» (51).

«Ҡурҡмағыҙ, беҙ ҡаты һис түгел әле» (127).

«Миңә яманһыу: бейек өйгә тик ҡырын һалам күҙ. Гөрләүен янғындың ошо саҡта ғына өйҙә күрһәм мин, рәхәтләнеп ҡарар ине ялҡынды күҙҙәр» (129).

«Мейес янында бөтә ҡышҡы төн, йәки яҙ көнө буйлап урман-ялан, рус ҡыҙы йырлай» (130).

«Күрәһең имеш, ҡыҙҙарҙан, йөрәктән ихтыярлы түгел княздар һөйөргә» (191).

«Ул минән һаман һорай, йыйып бир, тип, һыуҙың төбөнән ҡасандыр ул беҙгә – һыуға ырғытҡан аҡсаларын» (207).

Һөҙөмтә асыҡ булһа кәрәк: «әйләндерелгән» китаптар – һыуға ырғытҡан аҡсалар. Ала алмаһа ла, йыйып хәҙер Башҡортостан китап нәшриәте һыуға ырғытҡан аҡсаларын дәүләттең, әйтеп була «өйләндереү» өсөн был биш китапты сама менән күпме аҡса киткән һыуҙың төбөнә. Биш классиктың биш китабын үрҙә күрһәтелгән «телгә» әйләндереп һалыусыларға йөҙ мең һумлап гонорар, йәғни «тәржемә» хаҡы түләнгән. Ә был бракты китап итеп баçтырып

сығарыу өсөн нәшриәт менән типография нисә меңлек ҡағыҙ һәм башҡа материал тотҡан, күпме кешегә эш хаҡы түләгән – быныһының инде, «ҡышҡы тон йәки яҙ көнө буйлап» иҫәпләһәң дә, осона сығырлыҡ түгел.

1956

## Рәхмәт һиңә, шағир! (Рәшит Ниғмәтиҙе ерләгәндә)[1]

Халыҡ үҙенең яҙыусыға булған ҡарашын һәм хөрмәтен уның әҙәбиәттәге хеҙмәтенә ҡарап билдәләй. Башҡортостан яҙыусылары араһында Мәжит Ғафуриҙан һуң халыҡтың иң ҙур хөрмәтен һәм баһалауын күреү бигерәк тә Рәшит Ниғмәтигә насип булды.

Беҙҙең хәтеребеҙҙә: был ҙур хөрмәттән тулҡынланған шағир бынан бер нисә ай элек, үҙенең юбилейына йыйылған халыҡ алдына баҫып, телмәр тотоу урынына:

– Бөтәһе өсөн дә мин һеҙгә тәрән баш эйәм, ҡәҙерле иптәштәр, – тигәйне.

Был Рәшит Ниғмәтиҙең ысын күңелдән әйткән рәхмәт һүҙе ине. Бәлки, уның үҙ уҡыусылары, үҙ дуҫтары менән хушлашыуы ла ошо булғандыр. Сөнки бынан һуң ауырыу Рәшит аяҡҡа баҫа алманы.

Шағир беҙҙең сафта ҡалған хәлендә арабыҙҙан китте. Беҙ, Рәшит Ниғмәти китаптарынан тәьҫирләнеүселәр, уның иптәштәре һәм яҡын дуҫтары, шағирҙың яҡты образы алдында тәрән баш эйәбеҙ һәм уның үҙ һүҙҙәрен үҙенә ҡабатлап әйтәбеҙ:

Бөтәһе өсөн дә рәхмәт һиңә, халыҡтың һөйөклө шағиры!

Рәшит Ниғмәти үҙенең ижады менән башҡорт поэзияһын бейеккә күтәрҙе. «Йәмле Ағиҙел буйҙары» тигән поэмаһы менән ул үҙе иҫән сағында үҙенә һәйкәл ҡуйҙы. Ә беҙ шағирҙың есемен үҙе йырлаған ана шул йәмле Ағиҙелдең бейек ярына, ул үҙе яратҡан баҡсаға, бынан ҡырҡ ете йыл элек, «ысын башҡорт рухы вә башҡорт моңо менән йырланған йырҙар» яҙмышы хаҡында тәрән уйҙарға бирелеп, төптәрендә бөйөк Туҡай ятҡан ағастар араһына ҡуйҙыҡ.

---

[1] Харисов Ә.И. Әҙәби күренештәр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1963. 234-235-се биттәр.

Республикабыҙ хөкүмәтенең, баш ҡалабыҙ Советының һәм йәмәғәтселектең шағирҙы ерләү буйынса күрһәткән был хөрмәтендә һәм ололауында ана шундай символик мәғәнә бар.

– Хуш, Рәшит дуҫ, хуш, шағир, хуш, иптәш! Һинең исемең беҙҙең күңелдәрҙә нык һаҡланыр. Ҡәләмдәштәрең башҡорт совет әҙәбиәтенең байрағын һинең һымаҡ юғары тоторҙар.

1956

## Поэзия ҡаһарманы[1]

Бер заман, 1908 йылдың көҙөндә, Ҡазандың «Болғар» номерҙарында бер-береһенән бер нисә бүлмә аша ғына ике бәһлеүән тора. Береһе – Никитин циркындағы сығыштары менән Ҡазан сауҙагәрҙәренең, Бесән баҙары һәм «Көфөр босмағы» әһелдәренең мосолманлыҡ хистәрен ҡытыҡлаған, «дини вә милли» тойғоларын ҡеүәтләндергән көрәшсе батыр – «бик оҙон, бик көслө, ғәйрәтле, йыуан» Ҡарахмәт. Икенсеһе – бәләкәй буйлы,ябыҡ, үпкә ауырыуынан ыҙаланыусы Ғабдулла Туҡай – татар халҡының иң көслө һәм иң һөйөклө шағиры.

Туҡай үҙенең «Бесән баҙары, йәки яңы Киҫекбаш» тигән атаҡлы поэмаһының беренсе юлынан уҡ ана шул «мосолман бәһлеүәненән» әсе көлә. Поэма донъяға сыҡҡас, Туҡайҙың иптәштәре: Ҡарахмәт әҫәрҙең авторына бер-бер яуызлыҡ ҡылып ҡуймағайы, тип борсолалар. Баштараҡ Туҡай үҙе лә: был фәсле батыр туҡмаҡтай йоҙроҡтары менән минән «бифштекс яһамағайы», тип шөрләберәк йөрөй. Ләкин бушҡа ғына. Көрәштә берәүгә лә буй бирмәгән Ҡарахмәт, был юлы үҙен Туҡайҙан хурлыҡлы рәүештә еңелгән тип танып, күрәһең, тиҙҙән Ҡаҙанды ташлап китергә мәжбүр була. Нисек кенә булмаһын, Бесән баҙарының ҡуҡыр бәһлеүәне халыҡтың ҡаһарман шағирына ҡаршы тора алмаған.

Киң билдәле махсус бер башҡорт халыҡ бәйетендә бик теүәл әйтелеүенсә:

Шағырҙарға шағир ине

[1] Харисов Ә.И. Әҙәби күренештәр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1963. 220-227-се биттәр.

Ул, Туҡай, заманында.

Ҡурҡып тормай әйтер ине

Яҡшыһын, яманын да.

Яҡшыны һәм яңыны яҡлау, яманды һәм иҫкене күрә алмау – Туҡайҙың төп ижад принцибын тап бына ошо ике мөһим элемент, йәғни киң мәғәнәләге һөйөү менән нәфрәт тәшкил итә. Был уңай менән татар әҙибе Ямалетдин Вәлидиҙең образлы юлдарын хәтерләмәй үтеү яҙыҡ булыр төҫлө. «Туҡаевты шиғыр донъяһында береһе ҡыйнай торған, икенсеһе һыйпай, һөйә торған ике ҡанат осора ине, – тип яҙған ул 1941 йылда. – ...Уны шул ике ҡанат күккә осорҙо, шулар уға исем вә шөһрәт бирҙе. Ул инде китте. Ләкин уның кескәй кәүҙәһе генә китте. Уның ул бөйөк ҡанаттары һаман ҡалды. Улар әле лә әүәлге мөһабәт вә бөйөклөгө менән беҙҙең әҙәбиәт күгебеҙҙә ҡағынып йөрөйҙәр, берәүгә мәдех вә маҡтау уҡыйҙар, берәүҙәрҙән һаман көләләр, сәнсәләр вә һөжүм итәләр»[1].

Был бынан күп йылдар элек нисек булһа, хәҙер ҙә шулай. Заманында, үҙе әйткәнсә, Пушкин менән Лермонтовтан нур алып балҡыған Туҡай бөгөн дә әҙәбиәт күгендә якты йондоҙ булып яна, Туҡай бөгөн дә хәрәкәттә, ул бөгөн дә әҙәбиәт арсеналында әүҙем көс – уның аҫыл традицияларын татар һәм башҡорт совет яҙыусылары артабан ижади үҫтерәләр. В.И. Лениндың, милли мәҙәниәт хаҡында аталарса хәстәрлек күрһәтеп: «Шағирҙың эшен лайыҡлы дауам иттереүселәр бармы һуң?»[2] тип һорауында Туҡайҙы, шикһеҙ, тап бына ошондай үҫештә күрергә теләү ята ине.

Туҡайҙың замандашы хаҡлы: уның кескәй кәүҙәһе генә китте, ә оло ижады йәшәй һәм, ҡабатланмаҫ сәнғәт булараҡ, үҙенең тарихи хеҙмәтен үтәй. Беҙ бөгөн дә уның музаһы алдында баш эйәбеҙ, поэзияһына тағы бер тапҡыр һоҡланабыҙ, унан зауыҡланабыҙ.

Үҙҙәре татар була тороп та, татар халҡына, уның милләтенә, нисектер, ситтән, бер яҡ ҡырыйҙан килеп ингән йәки бөтөнләй «өҫтән» килеп төшкән яҙыусылар XX быуат башында аҙ түгел ине. Туҡай улар һымаҡ ситтән килеп

[1] Вәлиди Я. Туҡаев хаҡында бер нисә һүҙ. Туҡай тураһында замандаштары. Ҡазан, 1960. 263-сө бит.
[2] Бахметьев Вл. Онотолмаҫ осрашыу. Шунда уҡ, 29-сы бит.

инмәне, «өҫтән» дә төшмәне, ә халыҡтың үҙе эсенән, уның күптән көткән тоғро һүҙле улы булып, уның милли тауышы һәм моңо булып, ижтимағи зары һәм фекере булып күтәрелде.

Туҡай ысын халыҡ шағиры ине. Ул иҙелгән халыҡтарҙы ирекле һәм мәҙәниәтле итеп күрергә ашыҡты, милләт мәнфәғәтен ҡайғыртты. Бөтәһенән дә элек «милләт образованный кешеләргә һәм халыҡ файҙаһын һәр төрлө үҙенең шәхси мәнфәғәтенән вә ҡорһаҡ файҙаһынан өҫтә тота торған, милләт файҙаһын күҙ өҫтөндәге ҡашы дәрәжәһендә ғәзиз тота торған милләт арыҫландарына мохтаж, – тип оран һалды ул. – ...Беҙҙең милләт тә Пушкиндарға, Лев Толстойҙарға, Лермонтовтарға мохтаж. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең милләт тә башҡа милләттәрҙең алға китешенә сәбәп булған ысын яҙыусыларға, художниктарға, яңы-яңы милли шиғырҙарға, музыкаларға һәм башҡаларға мохтаж»[1].

Туҡай – ҡыйыу һәм тәрән аҡыллы шағир. Әммә поэзияла ул, үҙ һүҙҙәре менән әйтһәк, «ҡойоп ҡуйған» шағир ғына түгел, ә «сәйәси ижтимағи эшмәкәр ҙә». Тап бына шуның өсөн ул башҡа бик күп яҙыусылар күреп һәм белеп еткерә алмағанды күрә, белә, һиҙенә, төҫмөрләй һәм төшөнә алған. Буржуаз йәмғиәт шарттарында хеҙмәтсән халыҡ социаль һәм милли яҡтан иҙелеп, ҡараңғылыҡта томаланып йәшәргә дусар ителгән; фанатик динселәр, схоластик мәҙрәсәләр, буш ҡыуыҡ милләтселәр, һәр төрлө «Һоро ҡорттар» халыҡты ана шул ыҙалау режимында тоторға ярҙам итәләр. Туҡай быны яҡшы аңлай һәм хеҙмәт кешеһен талап йәшәүсе «туймаҫ ҡорһаҡтарҙы» тотоп ярырға саҡыра:

Ярайыҡ, дуҫтар, ярайыҡ, тим,
Сөнки беҙҙең бәхетебеҙ шунда;
Шулар йотҡан беҙҙең киләсәкте,
Бер ҙә ҡыҙғанмай,
Һөжүм кәрәк ишандарға –
Һоро ҡорт, гөмбә баштарға;
Бөтөр, һындыр, ҡырып ташла,
Ҡысҡырып ур-ра һәм дә банзай!

*(«Һоро ҡорттарға», 1906)*

---

[1] Туҡай Ғ. Әҫәрҙәр, 3-сө том. Ҡазан, 1956. 90-сы бит.

Шағир «капитал ҡорһағын» ярыу эше еңел түгеллеген дә белә. Шуға күрә ул ир-егеттәрҙе ауырлыҡҡа бирешмәҫкә, көрәштә сабыр, түҙем һәм тәүәккәл булырға өндәй:

Йыһанда үлмәй һәр бер ыңғырашҡан,
Вә юлды тапмай ҡалмай һәр аҙашҡан,
Көрәш юлында ары, тал, тирлә, имгән,
Өмөт итмә булышмаҡты ләимдән...

*(«Тормош», 1908)*

Туҡай шиғырҙарының инҡилаби рухы һәм шағир үҙен «шимал төркө» итеп түгел, ә Рәсәй гражданы итеп танытыуы, уның рустарға «ят бауыр» кешеләре тип түгел, бәлки «беҙ тыуған бер епкә теркәлеп», «рус менән тормош кисерҙек һайрашып» тип, дуҫтарса ихтирам менән ҡарауы, рустарҙы бөйөк халыҡ итеп, бай һәм өлгө булырлыҡ мәҙәниәт эйәһе итеп танытыуы буржуаз милләтселәргә һис тә оҡшамай ине, әлбиттә. Улар Туҡайҙы «һин мосолманды мосолманға ҡаршы һуғышырға саҡыраһың! Мосолман башын мосолмандан киҫтерергә итәһең!» – тип ғәйепләмәк булдылар. Бындай «мосолман бәғерле» бәндәләр Туҡайҙан фәҡәт ул ғына, татар шағирҙарынан бары тик Туҡай ғына бирә алыуы мөмкин булған яуап алдылар. «Капиталистический строй бөтөп, донъяға социалистический тормош сыҡмайынса, – тине Туҡай уларға, – капиталдың һәр хәҡиҡәткә пәрҙә булып тороуы бөтмәйенсә, мин үҙебеҙҙе мосолман тип йөрөүҙә бер мәғәнә лә тапмайым»[1].

Бындай ҡыйыу инҡилаби ҡараштағы кешеләр, билдәле, самодержавие өсөн иң ҡурҡыныслы шәхестәр ине. Уларҙы эҙәрләнеләр, гел генә күҙәттеләр. Улар һәләк булғанға, бигерәк тә царизмдың «милли лакейҙары», һәр төрлө «Һоро ҡорттар» шатландылар. Әммә Туҡайҙың һәләк булыуы батша режимы һәм уның таянысы булған татар буржуазияһы өсөн артыҡ ҙур шатлыҡ килтермәне: шағирҙың азатлыҡ эшенә дәртләндереүсе шиғырҙары ябай халыҡ күңелендә тороп ҡалды.

---

[1] Туҡай Ғ. Әҫәрҙәр, 3-сө том. Ҡазан, 1956. 118-се бит.

Туҡай поэзияһы үҙенең йөкмәткеһе һәм идея-эстетик йүнәлеше менән генә халыҡсан түгел, бәлки теле, стиле, художество алымдары менән дә өлгө булырлыҡ халыҡсан ижад ине. Туҡай, татар тарихында беренсе булараҡ, «төрки» исеме менән йөрөгән, ябай халыҡҡа аңлайышһыҙ «иҫке китап» телен бөтөнләйгә кире ҡағып, әҫәрҙәрен үҙенең туған татар телендә яҙа башланы. «Эй туған тел, эй матур тел» тип, үҙ халҡының йәнле теленә тәү башлап гимн йырлаған яҙыусы ул булды. Шағир тел байлығына, һүҙ сәнғәтенә халыҡ әҙәбиәтенән, бигерәк тә уның йырҙарынан өйрәнде.

Һүҙ ыңғайында әйтергә кәрәк, Туҡай башҡорт йырҙарын да яратып тыңлар һәм уларҙан илһамланыр булған. Өфөгә килгән сағында, мәҫәлән, Фаиз Даутов йырлаған башҡорт халыҡ йырҙарынан Туҡай шул тиклем тәьҫирләнә, хатта «мин ундай йырсыны бөтә ғүмеремә тыңлар инем», ти. һәм шунда уҡ: «Әгәр Фаиз әфәнде кеүек ысын башҡорт рухы вә башҡорт моңо менән йырланған йырҙар ҙа граммафондарға алынып ҡалһа, бының аҙмы әһәмиәте булыр ине! Ләкин милләтебеҙ диңгеҙенең ынйылары төптә тып, «ул-был»дары ғына өҫкә ҡалҡа шул»[1] тип, был хазинаға бер кемдең дә иғтибар бирмәүе өсөн ҡайғыра. Ҡаҙанға ҡайтҡас та, Туҡайға башҡорт йырҙары тынғы бирмәй, йыш ҡына: «Башҡорт балаһы, – ти торғайны ул миңә, гәрсә Өфө яғы, Урал буйы типтәре булһам да – «Ашҡаҙар»ҙы йырла әле». – «Шағир үҙе лә йырға ҡушыла», – тип иҫкә ала Исмәғил Рәмиев[2].

Ғабдулла Туҡай бик аҙ йәшәне – егерме ете йәше лә тулмаҫ борон үлде. Ул ни бары һигеҙ генә йыл яҙҙы. Әммә ошо ҡыҫҡа ғүмере эсендә лә ул үҙен бөйөк яҙыусы итеп, үҙенән һуңғы татар һәм башҡорт шиғырҙарының, бигерәк тә өлкәнерәк быуын вәкилдәренең остазы итеп танытырға өлгөрҙө. Туҡай иҫән саҡта уҡ Шәйехзада Бабич үҙен уның шәкерте тип иҫәпләне һәм 1911 йылда оло шағирҙың поэзияһына һоҡланыу хисе менән «Ғабдулла әфәнде Туҡаев» тигән шиғырҙарының береһен яҙҙы. Сәйфи Ҡудаш 1916 йылда яҙған «Йәш шағирҙың һүҙҙәре» шиғырында үҙенең әҙип булып танылыуы өсөн Туҡайҙан

[1] Туҡай Ғ. Әҫәрҙәр, 4-се том. Ҡазан, 1956. 148-149-сы бит.
[2] Рәмиев И. Хәтеремдә ҡалғандарҙан // Туҡай тураһында замандаштары. Ҡазан, 1960. 136-сы бит.

өлгө алыуҙың шарт булып тороуын таныны. Дауыт Юлтый: «Миндә шиғыр ижад итеү һәүәҫе Туҡай, Ғафури һәм С. Рәмиев әҫәрҙәрен яратып уҡыу арҡаһында тыуҙы, ә иң тәүге шиғырҙарымды туранан-тура Туҡайға эйәреп яҙҙым», – тине.

Туҡай ғәйәт ауыр һәм ҡатмарлы ижтимағи-сәйәси шарттарҙа йәшәне һәм ижад итте. Уның идея дошмандары күп ине. Ләкин уны асыҡтан-асыҡ күрә алмаусылар ғына түгел, хатта уға, алдынғы шағир булараҡ, теләктәшлек күрһәтеүселәр араһында ла уны аңлап бөтөрмәүселәр әҙ булманы: Туҡайға, нисектер, татар донъяһына «ваҡытынан элегерәк» килеп сыҡҡан, хәҙергә «перспективала» йәшәргә тейеш булған шәхес итеп ҡарау бар ине. Үтә һиҙгер күңелле шағир өсөн бындай мөнәсәбәт булған тиклеменән дә ҙурыраҡ булып тойолдо, хатта уға бөтә татар милләте үҙенең татар улын кире ҡаға, уны ят күрә, күкрәгенә уҡ атырға әҙер тора һымаҡ күренде. Быға үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, Туҡай «Торған ерем тар булһа ла, һөйгән халҡым татар булһа ла ҡурҡмайынса йырлай бирәм», – тине. Шул уҡ ваҡытта унда йәшәп килгән ижтимағи тәртиптәргә риза булмау, милләт менән «ярашмау» тойғоһо көслө ине, һәм был тәрән рухи кисерештәр ваҡыты-ваҡыты менән шағирҙы күңел төшөнкөлөгөнә лә килтерҙе:

Осто донъя ситлегенән,
Тарһынып, күңелем ҡошо:
Шат ятаһа ла, йыһанға
Ят яраҡан раббыһы.
Күпме моңланһам ҡунып
Милли ағастар өҫтөнә, –
Барыһы ҡороған, бер генә юҡ
Йәнлеһе, япраҡлыһы.

*(«Өҙөлгән өмөт», 1910)*

Был шиғырҙы уҡығас, А.М. Горький: «Аслыҡтан һәм чахотканан үлгәндә, Ҡазан татарҙарынан бер шағир «Осто донъя ситлегенән, тарһынып, күңелем ҡошо!» – тип, бик шәп әйткән, – тип яҙҙы. – Сөнки «был донъя рәссамдар өсөн түгел, унда һәр ваҡыт уларға ҡыҫынҡы һәм уңайһыҙ булды, шуға күрә уларҙың

роле маҡтаулыраҡ та, батырыраҡ та». Артабан А.М. Горький, Туҡай поэзияһының төп мәғәнәһе һәм тенденцияһы булған тормошто, йәшәүҙе раҫлағандай, «осто» һүҙендә «мин шатлыҡ ишетәм. Әммә мин үҙем йәшәү шатлығын, әлбиттә, артығыраҡ күрәм, ғәжәп ҡыҙыҡ ул йәшәү!» – ти[1].

Туҡайҙың исеме – хаҡлы рәүештә илебеҙ халыҡтарының бөйөк һәм иң күренекле яҙыусылары сафында. Ул, инҡилапҡа тиклемге татар яҙыусылары араһында беренсе булып: «Иң бөйөк маҡсат беҙҙең – хөр мәмләкәт, хөр Россия!» – тине һәм үҙенең бөтә талантын, барлыҡ көсөн ошо изге маҡсатҡа арнаны. Ул һуңғы һулышына тиклем халыҡтың тап үҙе теләгән йырсыһы булып ҡалды. Шағир хаҡындағы башҡорт бәйетендә аныҡ әйтелгән:

«Йырлай-йырлай үлермен мин,
–Тине Туҡай, – үлгәндә лә...»
Тере ҡалды йыры менән,
Есемен ергә күмгәндә лә.

Туҡайҙың халыҡ өмөтө, халыҡ дәрте һәм ихтыяр көсө булып яңғыраған көр тауышлы йыры, тәбиғи, емерелергә хөкөм ителгән буржуаз йәмғиәттең «ҡыҫынҡы һәм уңайһыҙ» бинаһына һыйманы – уны аяуһыҙ шыңғырата биреп, тышҡа бәреп сыҡты. Йыр көслө һәм матур ине, шуға күрә ул бик алыҫҡа ишетелде, изге маҡсат өсөн көрәш юлына баҫҡандарға йән аҙығы булды. Туҡай йыры кешене аяҡ аҫтына ҡарап түгел, ә алға, күтәрелгән ҡояшҡа ҡарап барырға саҡырҙы. Тап бына шуға ла йырсының даны социалистик инҡилаптың бөйөк юлбашсыһы В.И. Ленин һәм бөйөк дауыл хәбәрсеһе А.М. Горькийға тиклем барып етте.

Туҡайҙың мөҡәддәс моңло сазы бөгөн дә, аккорд булып, ул көткән хөр Рәсәйҙең еңеүселәре музыкаһына ҡушылып яңғырай.

*1961*

[1] А.М. Горькийҙың С.Н. Сергеев-Пенскийға яҙған хатынан // Туҡай тураһында замандаштары. Ҡазан, 1960. 30-сы бит.

## Урал бөркөтө[1]

Ҡоштарға киңлек кәрәк. Бөркөткә, быныҢ өҫтөнә, бейеклек тә зарур. Мөһабәт пар ҡанат юғары күтәрә мәғрур бөркөттө. Күҙҙәре бик алыҫтан күрә уның, һәм бына ғәйрәтле бөркөт, шыҡыя биреп, ерҙәге йыртҡыс дошманына ташлана...

Башҡорт-татар ижтимағи тормошонда бөркөттәй инҡилапсылар, алыҫ күрер фекер эйәләре, башҡа бик күптәрҙең, бөркөт һымаҡ, юғары күтәрелер шағирҙар, яҙыусылар, танылған тарихсылар, телселәр, күренекле мәғариф һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре элек тә бар ине. Әммә бына ошо аҡыл һәм талант хеҙмәтенең һәммәһен бер юлы үҙендә тулы кәүҙәләндергән ғәжәйеп шәхес юҡ ине әле.

Был айырыуса оло шәхес – Ғәлимйән Ибраһимов – беҙҙең быуаттың тәүге ун йылында, донъя Европа менән Азияға бүленгән ерҙән күтәрелеп сыҡты. Бер ҡанаты нәфис һүҙ, икенсе ҡанаты ғилем булған Ғәлимйән-бөркөт бөтә төрки халыҡтар донъяһын һоҡландырып осто. Осҡан һайын, аҫыл әҙип-рәссам булып, уҡыусылар күңеленә кире сыҡмаҫ өсөн инә барҙы, тарихсы булараҡ, ул ижтимағи хәрәкәт үҫешен яҡтыртты, инҡилапсы һәм ижтимағи-сәйәси эшмәкәр булыуы менән социализмдың еңеүе өсөн фиҙаҡәр көрәште. Телсе булып та, әҙәбиәттең теоретигы, тарихсыһы һәм тәнҡитсеһе булараҡ та, ул бына тигән әҫәрҙәр ижад итте.

Мин бәләкәйҙән үк Ғәлимйән Ибраһимовтың гүзәл хикәйәләре, романдары менән әҫәрләнеп үҫтем. Уны үҙемдең бөйөк остазым итеп күрәм һәм татар әҙәбиәтендәге шундай данлы бөркөттөң башҡорт еренән күтәрелеүенә һәм ижадында бер ваҡытта ла тыуған тупрағынан айырылмауына ғорурланам. Матур әҙәбиәт һөйөр ҡорҙаштарым кеүек, мин дә Башҡортостан тәбиғәтенең йәмен, уның алсаҡ кешеләрен, көрәшсе йәштәрен, уларҙың рухи хәятын тәү башлап Ғәлимйән Ибраһимовтың ҡабатланмаҫ әҫәрҙәрендә күреп һоҡландым.

1967

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 114-се бит.

## Һеҙгә әйтер һүҙем бар, йәш дуҫтар[1]

Элекке заманда һеҙҙең олатайҙарығыҙ, ҡәҙерле йәш дуҫтар, иртән иртүк эшкә йыйыныу мәлен «икенсе этәс ваҡыты» тип йөрөтөр булғандар. Хәҙер бөтөнләй башҡаса. Ата-әсәләрҙе – эшкә, ә уҡыусы балаларҙы мәктәпкә «икенсе этәс» түгел, ә радио – Өфө радиоһы уята һәм бөтә Башҡортостан өҫтөндә яңғырап торған йыр-музыка оҙатып ҡала, оҙатып бара. Ә шәфәҡ батҡас, этәстәр төнәгәс инде, йыр һәм музыка яңынан башлана. Өлкәндәрҙе лә, кеселәрҙе лә ләҙҙәтләндерә, дәртләндерә ул йырҙар. Тамам уйландыра, тойғоландыра улар.

Ысынлап та, аҡылын алҡындырып, донъяны һоҡландырып, халҡыбыҙ ни ҡәҙәр иҫ киткес йыр, бөгөн дә әле күбеһе үҙенә тиң белмәҫ көй сығарған! Ауыҙ-тел поэзияһының башҡа төрҙәре буйынса ла ниндәй генә һоҡландырғыс әҫәрҙәр тыумаған да, быуындан-быуынға күсә килмәгән!

Бына ошо йәһәттән, йәш дуҫтар, минең һеҙгә әйтер һүҙем бар.

Һәр колхоз йыл һайын, мәҫәлән, бойҙай сәсә. Бына бойҙай шытып сыға, күкрәп үҫә, баш ҡоҫа, һеркә осора һәм тамам өлгөрөп етә. Игенсе яҡшы белә: бойҙайҙан да, башҡа ашлыҡтан да түкмәй-сәсмәй уңыш алайым тиһәң, уны үҙ ваҡытында урырға кәрәк. Һуңға ҡалдыңмы – бойҙай ергә йығыла башлай, сыуалсыҡлана, урыуҙы ҡыйынлаштыра, ә тағы ла һуңлай төшһәң инде – бойҙай башағынан ҡойола башлай.

Йыр ҙа бойҙай һымағыраҡ ул. Бойҙай тән аҙығы булһа. Йыр-моң – йән аҙығы; йыр ҙа, бойҙай шикелле, тәүҙә «шытып сыға» (уны кемдер сығара), шунан йырланып йөрөй башлай, күңелгә оҡшаһа – «баш ҡоҫа», «һеркә осора», йәғни тамам формалашып һәм танылып өлгөрә лә тирә-яҡҡа, хатта бик алыҫҡа тарала.

Йырҙы ла ваҡытында йыйып алырға кәрәк. Юғиһә, ул да йығыла, орлоғо бөтөнләй ҡойолоп, әрәм була. Дөрөҫ, ул ҡойолған ерҙә йәренгә яңы йыр үҫеп сығырға мөмкин. Әммә ул теге юғалған (хәҙер инде йырланмай башланған) йыр түгел инде, яңы быуын, яңы заман йыры, ә йыш ҡына ул ғөмүмән «тыу йыр» –

[1] Пионер, 1969. № 4. 20-25-се биттәр.

«әтәмбай көй» булыуҙан ары китмәй.

Халыҡ йырҙарын – иҫкеһен дә, яңыһын да – йыйыу, йәғни халыҡтан яҙып алыу – бөтәһенән дә элек һеҙҙең эш ул, ҡәҙерле уҡыусы дуҫтар.

– Йырҙар йыйыу ниңә кәрәк һуң? – тигән һорау була ҡалһа инде, ундай һорауға шағирҙарҙың шағиры Ғабдулла Туҡай бик теүәл яуап биргән.

«Халыҡ йырҙары – беҙҙең бабаларыбыҙ тарафынан ҡалдырылған иң ҡәҙерле вә иң баһалы мираҫтыр, – тигән ул. – Эйе, был ҡәҙерле мираҫ!.. Халыҡ йырҙары гәүһәр вә яҡуттарҙан да ҡиммәтле бер нәмә булғаны өсөн дә уларға әһәмиәт бирергә кәрәк. Уларҙы юғалтмаҫҡа, иждиһат итергә кәрәк. Белергә кәрәк ки, халыҡ йырҙары – халҡыбыҙ күңеленең һис тутыҡмаҫ вә күгәрмәҫ, саф раушан[1] көҙгөһөлөр».

Ысынлап та шулай ул. Миҫал өсөн боронғо башҡорт йырҙарынан «Урал» менән «Салауат»ты, «Азамат» менән ты «Байыҡ»ты, «Сибай» менән «Ҡолой кантон»ды, «Буранбай»ҙы, «Ғилмияза» менән «Таштуғай»ҙы йәки «Һандуғас» менән «Ирәндек»те иғтибар менән тағы бер тапҡыр тыңлап ҡарағыҙ. Күпме мәғәнә һәм тойғо, күпме моң һәм гүзәллек бар уларҙа! Һәр береһе йырға-көйгә һалынған бер тарих, бер яҙмыш ул.

Был йырҙар һәм улар ише тағы күп кенә өлгөләр башҡорт халҡының милли йыр-көй классикаһы тип йөрөтөлә. Улар бер ваҡытта ла «йығылмай» һәм «ҡойолмай» торған, халыҡ күңелендә мәңге сыҡмаҫ өсөн урын алған музыкаль-поэтик әҫәрҙәр. Былдай йырҙар күп тапҡырҙар яҙып та алынған, баҫып та сығарылған.

Әммә «гәүһәр-яҡуттарҙан да ҡиммәтле» йырҙар былар менән генә сикләнмәй. «Халҡыбыҙ күңеленең һис тә тутыҡмаҫ һәм күгәрмәҫ, саф һәм яҡты көҙгөһө» булған йырҙарҙың бик күбеһе әле бер кем тарафынан да яҙып алынмаған. Һүҙ ана шул йырҙарҙы йыйыу тураһында бара.

«Эште нимәнән башларға? Нимә яҙырға һәм нисек яҙырға? Яҙып алған йырҙарҙы һуңынан ни эшләтергә?» – тип һорауҙар яуҙырыуығыҙҙы ла алдан белеп торам.

[1] Раушан – яҡты.

«Кәзә салыуҙың да үҙ рәте бар», – ти торғайны минең атайым. Йыр яҙып алыуҙың да үҙ рәте, үҙ тәртибе бар ул.

Һеҙ инде дәреслектән уҡып, класта өйрәнеп, йырҙың нимә икәнен, башҡорт йырҙарының оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙарға төркөмләнеүен, темалары яғынан уларҙың бик күп төрлө булыуын беләһегеҙ. Ә күп кенә йырҙарҙың әллә ҡасан инде яҙып алыныу ғына түгел, хатта баҫылып сығыуын барығыҙ ҙа белмәй торғандыр әле. Бер яҙып алынған йырҙы икенсе тапҡыр яҙыуҙың артыҡ хәжәте юҡ. Тимәк, иң тәүҙә һеҙгә йырҙарҙың баҫылыу-баҫылмауын белергә кәрәк. Ә бының өсөн һеҙ «Башҡорт халыҡ ижады» китабының 1-се (1954) һәм 3-сө (1955) томдарында баҫылған йырҙарҙы иғтибар менән ҡарап сығырға тейеш булаһығыҙ. Бына ошо томдарға инмәгән йырҙарҙы яҙып алырға тырышырға кәрәк.

Йырҙарҙың исемлеһе һәм исемһеҙе була. Әйтәйек, «Урал», «Салауат» – исемле йырҙар. Бындай йырҙарҙың мотлаҡ үҙҙәренә генә хас көйҙәре бар. Шуға уларҙы үҙҙәренә айырым көйлө йырҙар тип тә йөрөтәләр. Исемһеҙ йырҙар – дүртәр юллыҡ ҡына оҙон йә ҡыҫҡа йырҙар улар. Быларҙың үҙҙәренә айырым көйҙәре булмай, теләһә ниндәй көйгә йырланып йөрөйҙәр. (Бындай йырҙарҙың боронғораҡ өлгөләре «Башҡорт халыҡ ижады»ның 1-се томында, ә совет заманына ҡарағандары 3-сө томында бирелгән.)

Йыр йыйыуҙы класс менән, ойошҡан рәүештә, туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы етәкселегендә, уның кәңәштәрен тотоп, алып барырға кәрәк. Һеҙҙең был файҙалы эшегеҙ мәктәптә кластан тыш эшләнә торған эш булып планлаштырылырға һәм үтәлергә тейеш.

Һәр ауылда, һәр ҡалала боронғо йырҙарҙы ла, беҙҙең заман йырҙарын да күп белгән кешеләр бар; ҡурайсылар, гармунсылар иһә йырға-көйгә айырыуса бай булалар. Бөтәһенән дә элек ана шуларға мөрәжәғәт итегеҙ.

Йыр яҙыу өсөн һәр берегеҙҙең махсус дәфтәре булырға тейеш. Иң элек уның тышына ошолай тип яҙып ҡуйырға кәрәк:

«Халыҡ йырҙары. Яҙып алыусыһы: Башҡортостандың фәлән районындағы фәлән ауыл (йәки ҡала) урта мәктәбенең фәлән класс уҡыусыһы,

әйтәйек, Рөстәм Сабиров».

Йырҙар фәҡәт ҡара менән, асыҡ итеп яҙылырға тейеш. Яҙғанда, йырҙың бер һүҙе лә төшөп ҡалмаҫҡа, үҙгәртелмәҫкә, шулай уҡ үҙеңдән бер ни өҫтәлмәҫкә тейеш. Нисек йырлана – шулай булһын. Йырҙың тексы тотошлай түгел, ә юлы-юлға яҙыла. Былар өҫтөнә һәр строфанан (ғәҙәттә дүрт юлдан) һуң, ҡағыҙҙы йәлләмәй, бер буш юл ҡалдыра ла барғанда, яҙыу шарты тамам еренә еткереп үтәлгән булыр ине.

Уңайлыҡ өсөн йыр дәфтәрендә ошондай бүлектәр булдырырға кәрәк:

I. *Боронғо йырҙар:*

1. Исемле (үҙ көйҙәре булған) йырҙар.

2. Исемһеҙ (төрлө көйгә йырлана торған) йырҙар.

*II. Совет йырҙары:*

1. Исемле (үҙ көйҙәре булған) йырҙар.

2. Исемһеҙ (төрлө көйгә йырлана торған) йырҙар.

Дәфтәрегеҙҙә йырҙың ҡасан, ҡайҙа, кемдән яҙып алынғаны әйтелергә тейеш. Йырҙың һүҙҙәрен яҙҙырған кешенең тыуған йылын (ә йәшен түгел) һәм кем булып эшләүен дә мотлаҡ күрһәтергә кәрәк. Бәлки, ул үҙе йырлаған (һүҙҙәрен әйткән) йырҙың тарихын да белә торғандыр. Шуныһы ла дәфтәргә төшөрөлһөн ине. Был ҡағиҙәләрҙе тулыһынса һаҡлап эш итеүҙе күрһәтер өсөн, ошондай бер өлгө килтерәйек. Әйтәйек. Һеҙ «Айсыуаҡ» тигән боронғо бер йыр яҙып алдығыҙ, ти. Шунан йыр тексының аҫтында уҡ, биттең уң яҡ яртыһында ошондай белешмәләрҙе бирерһегеҙ:

**«Фәлән районның фәлән ауылы, Сәлим Мансуровтан 1969 йылдың 17 майында яҙып алдым. С. Мансуров 1924 йылда тыуған. Механизатор. (Йәки: 1900 йылда тыуған. Колхозсы-пенсионер).**

**Көйҙөң тарихы.** Борон фәлән ауылда Айсыуаҡ тигән бер ҡыйыу кеше булған. Ауыл халҡын яҡлап, батша түрәләре менән һүҙгә килешкән. Хатта һуғышҡан да, тиҙәр. Шунан уны һөргөнгә ебәрергә хөкөм иткәндәр. Ә ул, урман араһына ҡасып, ҡотолоп ҡалған. Был йыр ана шул Айсыуаҡ ҡасҡын тураһында сығарылған».

Йыр дәфтәре бына шул рәүешле бер-бер артлы тулғас, һәр уҡыусы үҙенекен үҙе айырым рәүештә йәки бөтә класс менән бергәләп «Пионер» журналы редакцияһына йәиһә СССР фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына (Өфө, Пархоменко урамы, 121 «а») ебәрергә тейеш. Институт башҡорт халыҡ ижадының 10 томдан торған йыйынтығын баҫып сығарырға әҙерләй. Һеҙ ебәргән материалдарҙы, яҙып алыусының һәм яҙҙырыусының исем-фамилиялары күрһәтелеп, шул томдарҙың береһенә индереү күҙҙә тотола.

Башҡорт халҡының рухи культура хазинаһы булған был ун томлыҡҡа элекке һәм хәҙерге фольклорҙың бөтә төрҙәре, барлыҡ жанрҙары ла индерелә. Шуның өсөн һеҙ, уҡыусы дуҫтар, йырҙар йыйыу менән генә сикләнмәһәгеҙ ине. Беҙҙең заманда яңы әкиәттәр, яңы ҡобайырҙар, шулай уҡ эпик поэмалар ижад ителмәй, һуңғы осорҙа яңы бәйеттәр ҙә аҙ осрай. Ә иҫкеләре аҙмы-күпме йәшәп ята. Фольклорҙың ана шул иҫке, хәҙер инде үҫмәй торған жанр әҫәрҙәрен яҙып ҡалырға өлгөрөргә кәрәк. Бында ла һеҙҙең актив ярҙамығыҙ көтөлә.

Мәҡәл менән әйтемдәргә, шулай уҡ йомаҡтарға килгәндә инде, улар һаман үҫә, ишәйә бара. Әммә халыҡ ижадының был аҫыл ынйылары ла әле тейешенсә йыйылмаған. Ошо эште лә уҡыусылар һәм уҡытыусылар ярҙамынан тыш йәйелдереп ебәреү мөмкин булмаясаҡ.

Минең һеҙгә әйтер һүҙем ошо ине, йәш дуҫтар.

Һеҙҙең был маҡтаулы эшегеҙ бер йыл тигәндә, В.И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу көндәренә, үҙенең бай һөҙөмтәләрен бирер тип ышанғы килә.

1969

## Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ[1]

### 1

Халыҡта йыр ҙа, башҡа әҫәр ҙә тиктәҫкә генә сыҡмаған һәм сыҡмай. Ул берәй кеше йәки ваҡиғаға арналып, ижтимағи йә иһә тәбиғи күренештәргә, ғаилә тормошона: бәйле рәүештә, урғылған тойғо-хистәрҙең нимәгәлер барып

[1] Ағиҙел, 1971. № 5. 112-119-сы биттәр.

«төртөлөүе» һәм шунда моң-көй булып сиселеп китеүе һөҙөмтәһендә тыуа. һәр йыр-көйҙөң биографияһы, үҙ тарихы бар. Тик ул беҙгә генә һәр саҡ мәғлүм түгел, ә күбеһе, айҙың теге, яҡтыртылмаған яғы һымаҡ, ғөмүмән серле, ябыҡ. Хәҙерге фән һәм техника айҙың теге яғын да белеүгә өлгәште. Әммә беҙҙең фольклористикала бик күп башҡорт халыҡ йырҙарының «теге» яғы – барлыҡҡа килеү тарихы һаман әле асылмаған, билдәһеҙ булып ҡала килә.

Республикабыҙ матбуғаты, бигерәк тә, «Совет Башҡортостаны» гәзите менән «Ағиҙел» журналы, халыҡ ижадын йыйыу һәм өйрәнеү эшенә элек-электән ҙур иғтибар биреп килә. 1967 йылдың мартынан башлап «Совет Башҡортостаны»нда «Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ» тигән махсус бүлек асылды. Унда даими рәүештә башҡорт халыҡ йырҙарының текстары һәм уларҙың тарихтары, легендалары баҫыла. Бүлектә йырсылар, ҡурайсылар, уҡытыусылар, студенттар, театр эшмәкәрҙәре, ғөмүмән, йыр-музыка менән ҡыҙыҡһынған һәүәҫкәрҙәр райондарҙа яҙып алған ҡыҙыҡлы материалдар менән сығыш яһайҙар. Киң таралған йырҙарҙың бығаса матбуғатта билдәле булмаған варианттары йәки уларҙың тулыраҡ тарихтары урынлаштырыла. Уҡытыусы-пенсионер Ғ. Биишев, мәҫәлән мәшһүр «Сибай» йырының геройы Сибайҙың шәхесен билдәләүсе ифрат әһәмиәтле мәғлүмәттәр тапҡан. Башҡорт дәүләт университеты студенты М. Юлмөхәмәтов «Томан» йырының тулы тексын һәм ҡыҫҡа, әммә бығаса билдәһеҙ булған легендаһын баҫтырған. М. Нурмөхәмәтов Ҡурған өлкәһендә «Юрка-Юныс» йырының, шулай уҡ тарихының яңы, камилыраҡ вариантын яҙып алған. Н. Шоңҡаровтың «Сәсән янында биш көн» тигән мәҡәләһе бигерәк тә Ырымбур өлҡәһе Медногорск районы Беләүтамаҡ ауылындағы ҡарт йырсы һәм сәсән Яхъя Аҡмурзиндан яҙып алған «Буранбай», «Шаһибәрәк», «Кәмәлек» кеүек атаҡлы һәм «Бәҙиғол», «Ғәрипҡол», «Вәхит» тигән бик аҙ билдәле йырҙарҙың ғәжәп һәйбәт текстары һәм көйҙәренең юғары профессиональ кимәлдә үтәлгән ноталары менән баҫылған булыуы иғтибарҙы тарта.

Быға тиклем дөйөм йыр-көй репертуарынан ситтә ҡалған йырҙарҙың гәзит биттәрендә урын ала барыуын хупларға кәрәк. Уҡытыусы һәм ҡурайсы

К. Дияров баҫтырған «Кәтинкә» («Катенька»), «Етем ҡыҙ Хәтирә», уҡытыусы-пенсионер Х. Ҡускилдин тапшырған «Хөнәш» йырҙары һәм уларҙың тарихтары – көньяҡ төбәк йыр-музыка ижадының шаҡтай характерлы боронғо ҡомартҡылары улар.

Мансур Әюповтың «Дим буйында тыуған моңдар», артист Насретдин Сыртлановтың «Боронғоларҙан ҡалған ҡомартҡы» тигән сығыштары халҡыбыҙҙың тупланған йыр мираҫына «Шарлы урман», «Хәжғәле», «Дим буйы түрәкәйе», «Өйҙөрәк», «Муса», «Ыласын» кеүек Дим буйы башҡорттары ижадына ҡараған йырҙарҙы өҫтәүҙәре менән ҡиммәт. Был әҫәрҙәрҙең барлыҡҡа килеү тарихы буйынса әһәмиәтле белешмәләр ҙә бирелгән. Артист Зәйни Иғдәүләтов баҫтырған «Ағиҙел моңдары» легендаһы ла бик оригиналь. Унда ғәйәт үҙенсәлекле «Ҡыуғынсылар йыры»ның тексы бирелгән, фажиғәле тарихы тасуир ителгән.

Республика гәзитенең «йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ» бүлеге аша алып барылған эшкә хәҙер ҡайһы бер йомғаҡ яһарға ла мөмкин инде. Өлгәшелгән уңыштарҙы таныу, улар өсөн ҡыуаныу менән бергә, булған етешһеҙлектәргә күҙ йомоу ҙа ярамаҫтыр.

**2**

Башҡорт халыҡ йырҙарының төп фондына ингән ҡомартҡыларҙың һәм уларҙың тарихтарының барлыҡҡа килгән төбәктәре фәнгә билдәһеҙ түгел. «Ҡолой кантон», мәҫәлән, Арғаяш яғында, «Буранбай» менән «Ғилмияза», «Сибай» менән «Ирәндек» Баймаҡ тирәһендә, Һаҡмар буйында тыуған; «Ашҡаҙар» – Стәрлетамаҡ, «Таштуғай» – Хәйбулла яғында сыҡҡан, «Рәзәренйе» – Сәҙе буйы (элекке Саратов губернаһы, «Зәлифәкәй» – Ырғыҙ-Кәрәлек (элекке Һамар губернаһы) башҡорттары араһында ижад ителгән.

Ҡайһы саҡта был тәңгәлдә «аңлашылмаусанлыҡ» та булғылай. Бер төбәктә сыҡҡан йыр бер үк ваҡытта икенсе ерҙә барлыҡҡа килгән булып та йөрөргә мөмкин. Быға дәлил итеп ике «оя» күргән бер үк йырҙың һүҙҙәрендә лә, көйөндә лә бер ни тиклем айырма барлығына һылтаналар, бигерәк тә йыр легендаһының ике вариантта йөрөүенә таяналар. Бындай хәлдә йырҙы яҙып

алыусы шуны айыра белергә тейеш. Тыумышы менән икенсе төбәктән булған ошо йыр һәм уның легендаһы был яҡ ерлегендә ысынлап та халыҡтың поэтик фантазия емеше булып ҡабат барлыҡҡа килгәнме, йәғни халыҡтың үҙ ижады булып донъя күргәнме, әллә кемдеңдер ирке һәм теләге менән генә был төбәктеке тип иҫәпләнгән күренешме? Беренсе осраҡта былдай йырҙы һис шикһеҙ танырға һәм яҡларға тейешбеҙ. Икенсе осраҡта ундай «тырышлыҡтың» йыр мәҙәниәте үҫеше өсөн бер ниндәй ҙә әһәмиәте юҡлығын күрһәтергә кәрәк.

Был икенсе осраҡҡа миҫал итеп «Зәлифәкәй» йырының тарихы тип тәҡдим ителгән тексты күрһәтеп булыр ине. («Совет Башҡортостаны», 20.05.70.) Бүгәсәү (хәҙерге Куйбышев өлкәһе) башҡорттары ижады булып киң таралыш тапҡан, бынан илле йыл элек Ырғыҙ-Кәрәлек буйында яҙып алынған был йыр уйламағанда Ағиҙел бөгөлөндәге Һыртлан ауылы ижады тип иғлан ителде, ә йырҙың героиняһы – Кәрәлек ҡыҙы Зәлифә – Һыртлан ауылыныҡы итеп күрһәтелде. Ҡыҙҙың легендала хикәйә ителгән тормошо ла ифрат шикле фажиғәләр дүңгәләгенән, нисектер, яһалма михнәттәр теҙмәһенән тора.

Башҡорт халыҡ йырҙарын иң күп белеүсе күренекле йырсы һәм ҡурайсы, талапсан сәхнә эшмәкәре Ғата Сөләймәновта, «Зәлифәкәй» көйө легендаһын яҙып алғанда, тәнҡит тойғоһо ситтәрәк тороп ҡалған, күрәһең. Ә бына ул баҫтырған «Сәлимәкәй» йырының тарихы үҙенең объективлығы һәм ышандырыуы көсө яғынан ысынлап хуплауға лайыҡ. Баймаҡ-Әбйәлил тирәһендә барлыҡҡа килгән был боронғо йырҙың легендаһы боҙолмай, халыҡ араһында йәшәгәненсә яҙып алынған тип әйтеп була. Ғ. Сөләймәнов яҙмаһындағы «Шафиҡ» йыры тарихы иһә хатта үҙенә бер бөтөн сюжетлы әҫәр – хикәйәт мәғәнәһен алған. Шулай уҡ Сафа Ғәлимов тарафынан баҫтырылған «Үткән ғүмер» йырының кескәй генә легендаһы ғәжәп оригиналь булыуын әйтергә кәрәк. Унда халыҡ аңына хас тәбиғилек, элекке бер ҡатлылыҡ, поэтик таҫыллыҡ үҙен ныҡ һиҙҙерә, йөкмәтке халыҡ эпосында күренеүсән мотивтар, ярым легендар эпизодтар ярҙамында бирелгән. Оҙон-оҙон һөйләү бында бөтөнләй юҡ.

Айырым шәхестәргә арналған йырҙарҙан бигерәк тә «Абдулла ахун» йырының гәзиттә бирелгән тарихында реаллектең бик самалы булыуы көйөндөрә.

Тарихи материалдарҙан билдәле булыуынса, Абдулла Дәүләтшин (1883 йылда үлгән) башта Ырымбур янындағы Себенле ауылында мулла, ахун булған. Артабан унынсы кантон башлығы итеп ҡуйыла. Халыҡ унан «салмалы кантон, ҡылыслы ахун», тип көлә. Ул батша власы алдында үҙен үтә тоғро хеҙмәтсе итеп күрһәтергә ратҡан дин әһеле һәм түрә була. Тиҙҙән уның хаҡында сатирик йыр сыға. Бер строфаһы түбәндәгесә:

Тынғы бирмәҫ ахун инең,
Күстеңме ни тыныҫҡа,
Йәшел мәсет таяғынды
Алмаштырып ҡылысҡа?!

Был юлдарға бик тапҡыр, образлы мәғәнә һалынған. Легенданы төҙөүсе быны үҙенсәрәк аңлаған, күрәһең: Абдулла Дәүләтшинды диненән дүнгән түрә һымағыраҡ итеп һынландырған. Бына мәсеткә йыйылған халыҡ дин башлығы Абдулла ахунды көтә. Ахун юҡ та юҡ. Бер заман ғибәҙәтселәр, баштарын күтәреп, мөнбәргә ҡараһалар: «өҫтөнә хәрби форма, башына фуражка кейгән, биленә ҡылыс таҡҡан, ҡамсыһын ҡулына алған, уң ҡулын бөйөрөнә таянған килеш, ахун түгел, Абдулла кантон ултырғанын күрәләр».

Был хәлгә ышаныу ҡыйын, әлбиттә. Ғәскәри кейемдә – башына рус фуражкаһы кейеп, ҡорал аҫып мәсеткә инеүгә, етмәһә, мөнбәргә менеп ултырыуға ислам бер ҡасан да юл ҡуймаған, һәм был низамды боҙорға баҙнат итеүсе лә булмағандыр.

Ысынбарлыҡ менән ярашмаған ошо факт үҙе генә лә Абдулла ахун тураһында әйтелгәндәргә ҡарата ныҡ икеләнеү, һағайыу тойғоһо тыуҙыра.

Халыҡ ижадында, айырым алғанда йырҙа, хикәйә ителгән хәл һәм ваҡиғаларҙың реаллеген һаҡлап торған бер үлсәү бар. Ул да булһа – сама. Йырҙа ла, уның легендаһында ла самаһыҙ бер нәмә лә булмай. Был, бер ҡарағанда, ғәжәберәк тә булып күренергә мөмкин. Сөнки фольклорҙың барлыҡ

жанрҙары өсөн дә бөтәһенән дә элек гипербола (арттырып, самаһыҙ көсәйтеп һүрәтләү) хас. Ә шуға ҡарамаҫтан, халыҡ ижады әҫәрҙәрендә логик сама һаҡлана, боҙолмай, унда урынһыҙға шапыртып, шаштырып хикәйә итеү булмай.

Йыр тарихын халыҡтан яҙып алып «эшкәртеүселәрҙе» йәки, билдәле булған мәғлүмәттәрҙән сығып, тарихты үҙҙәре төҙөүселәрҙе тап ана шул сама тигән нәмәне онотоу мотлаҡ уңышһыҙлыҡҡа килтерә. «Абдулла ахун» йыры легендаһы шуның миҫалы. Унда Абдулла Дәүләтшиндың тиҫкәре образы, халыҡта булған самаһынан шаштырып ебәргәнлектән, кеше ышанмаҫ хәлгә килтерелгән.

Быға тиклем йырҙа һәм легендала үҙ дөрөҫлөгө үҙ самаһы менән йәшәп килгән Буранбайҙы тағы ла «шәберәк» итеп күрһәтеү теләге уҡытыусы С. Ғәлинды (Белорет районы, Уҫманғәле мәктәбе) «Буранбай» йыры легендаһын уйҙырма факттар менән хикәйәләүгә дусар иткән. В.Г. Короленконың «Соколинец» хикәйәһендәге Буран образында беҙҙең Буранбай кәүҙәләндерелгән тип ышандырмаҡсы С. Ғәлин бер ниндәй дәлилһеҙ-ниһеҙ, Сахалинда текә бер тау өҫтөндәге билдәһеҙ ҡәбер «башҡорт халҡының ятраҡан улы Буранбай ҡәберлеге түгелме икән?» – тигән фекергә килә.

Был рәүешле фараз итеүҙәре, үтә субъектив ҡараштарҙы тарихи һәм ғилми дөрөҫлөк менән яраша тип әйтеп булмай, әлбиттә. Кеше ғәҙәттә үҙе теләгән, үҙе көткән нәмәгә ышаныусан, тиҙәр. Бында ла шул ғына.

Батша Рәсәйендә берәмләп тә, күмәкләп тә «ышаныcһыҙ» кешеләрҙе Себергә, Алыҫ Көнсығышҡа һөргөнгә ебәреү ғәҙәти хәл булған. Башҡортостандан йөҙәрләгән ир-егеттәр, Буранбай һымаҡ, ситтә һәләк булған. Ҡобайырҙа әйтелгәнсә: «Яғаһына ҡош оялап, яңағына себен-серәкәй балалап, ир-егеттең башы ҡайҙа ятып ҡалмаған!» Арала, һис шикһеҙ, Буранбайға ҡарағанда ла ҡыйыуыраҡ, халыҡ мәнфәғәте өсөн киңерәк масштабта һәм әүҙем көрәшкән, самодержавиеға ҙурыраҡ ҡурҡыныс һалған батыр ирҙәр ҙә булғандыр. Әммә уларҙың бөтәһенә ҡарағанда ла Буранбайҙың яҙмышы бәхетлерәк булып сыҡҡан: уның әллә ни ҙур ҡаһарманлыҡтар менән

билдәләнмәгән баҫалҡы образы иң гүзәл башҡорт халыҡ йырҙарының береһендә мәңгеләштерелгән.

Йыр легендаһын яҙыусыларҙа, темаға туранан-тура ҡыҫылышы булмаһа ла, юлайҡан «асыш» яһап үтергә тырышыу осраҡтары булғылай. Бындай экспромт «асыш» ғәҙәттә уңышлы һөҙөмтә бирмәй. «Ашҡаҙар» йыры тарихының ҡыҫҡаса ғына тексын башлап Ғабдулла Туҡай баҫтырған. Артабан матбуғатта сыҡҡан легендалар асылда Туҡай яҙғанды киңәйтеү, тәфсилләү иҫәбенә үҫтерелгән тип әйтергә мөмкин. Т. Мөхтәр, Ашҡаҙар йылғаһы исеменә аңлатма биреп, легендаға үҙ «өлөшөн» индермәксе булған. Бынан бик күп йылдар элек ошо һыу буйына ике мосафир килеп сыҡҡан, ти ул. Береһе: «Был йылғаға ниндәй исем ҡушабыҙ?» – ти. (Әйтерһең, йылғаны ике яҡлап ултырған халыҡ шул тиклем башһыҙ булған, хатта ошо ике юлсы килеп сыҡмаһа, үҙҙәре эскән һыуға исем дә бирә белмәгәндәр). «Ашҡаҙар тип ҡушайыҡ», – ти икенсе мосафир. Ни өсөн тиһәң, ошо йылғаға килеп юлыҡҡансы беҙ ашҡа зар булып йөрөнөк, тик ошонда ғына балыҡ тотоп аш, бешереп туҡландыҡ, ти.

Бындай аңлатманың ниндәйҙер ғилми нигеҙе бар тип булмай, әлбиттә. 20-се йылдарҙа Будапешт ҡалаһының исемен татарса «бу да пеште» тигән ике һүҙҙән яһалған тип аңлатырға маташыусылар бар ине. Ашҡаҙар исемен төшөндөрөү ҙә, тап шуның һымаҡ, һүҙҙәрҙең тышҡы оҡшашлығына ғына ҡоролған.

### 3

С. Ильясовтың «Азамат»мы, әллә «Хәжирәкәй» тигән мәҡәләһе («Совет Башҡортостаны», 6.04.67) көйҙәрҙең «буталыу» фактын күтәреүе менән иғтибарға лайыҡ. «Азамат» исемле атаҡлы йыр үҙ көйөнә түгел, ә «Хәжирәкәй» көйөнә йырланып йөрөй, «Азамат»тың үҙ көйө – «Азамат кантон» тигән йырҙың көйө булырға тейеш, ти С. Ильясов, был йырҙарҙың үҙ көйҙәре үҙҙәренә ҡайтарылһын ине, тип хәстәрлек белдерә ул.

Бындай күренешкә артыҡ ғәжәпләнергә һәм хәүефләнергә ярамайҙыр. Йыр фольклоры стихияһында осрай торған хәл ул. Һәм, ғәҙәттә, бының менән ризалашырға тура килә. Сөнки халыҡ аңында һәм практикала күптән

урынлашҡан, тамам күнегелгән, әллә ҡасан инде музыкала дөйөм бер тәбиғи күренеш итеп ҡабул ителгән популяр йырҙы, айырыуса тарихындағы сетерекле яҡ бик аҙҙар өсөн генә мәғлүм булған көйҙө, иң тәүге хәленә ҡайтарып, элекке атамаһы менән йөрөтөп булмай һәм бының хәжәте лә юҡ. Шулай икәнен хатта С. Ильясов үҙе үк раҫлап тора. «Хәжирәкәй»ҙең көйө «Азамат» йырының һүҙҙәренә шул тиклем ҡулайлаштырылған, композиторҙарса шул тиклем ныҡ эшкәртелгән, – ти ул, – «Хәжирәкәй»ҙең һағышлы, нескә йөрәк хистәре урынына көйгә ғорурлыҡ, мөһабәтлек, иреклек образын сағылдырған интонациялар килеп ингән». Шулай булғас, былар икеһе лә үҙ аллы көй булып сыға түгелме?

«Хәжирәкәй» йыры (һүҙҙәре) С. Ильясов тарафынан гәзиттә баҫылғас ҡына киңерәк йәмәғәтселеккә билдәле булды. Һәр хәлдә, «Хәжирәкәй», «Азамат» һәм хәҙер инде бер ҙә йырланмай торған «Азамат кантон» һәр ҡайһыһы үҙенә айырым йыр. Өсөһөнөң дә үҙҙәренә генә хас һүҙҙәре бар. Көйҙәрендә уртаҡлыҡ күҙәтелә икән – зарар юҡ. Был яғын көй тарихсылары тикшерһендәр, ҡайһыһының көйө элегерәк тыуыуын билдәләһендәр, бер көйҙөң икенсе йыр һүҙҙәренә йырланыу сәбәптәрен аңлатһындар.

Әйтелгәндәрҙән теләгән бер йырҙы бөтөнләй башҡа йыр һүҙҙәре менән йырлап йөрөүҙе хупларға кәрәк икән, тигән хата һығымта сығарырға ярамай, һәр көйҙөң үҙ тексы бар, ул бер ҙә башҡа йыр һүҙҙәренә йырланыуға ла, кемдеңдер «төҙәтеп» башҡарыуына ла мохтаж түгел. Ә беҙҙә йырсылар араһында, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, йырҙың тексын үҙ белдегең менән алмаштырып йәки үҙең теләгәнсә үҙгәртеп йырлау күренештәре, аҙ булһа ла, бар әле. Бының аяныс миҫалдары «Совет Башҡортостаны»нда күрһәтелде лә инде. С. Ғәлин менән М. Биктимерова «Йыр һәм йырсыларыбыҙ тураһында» тигән, А. Рямов «Иғтибарлыраҡ булыу кәрәк» исемле мәҡәләләрендә, урынлы хафаланыу тойғоһо менән, хатта республиканың ҡайһы бер атаҡлы йырсылары ла «Байыҡ»ты З. Исмәғилевтең Ҡ. Даян һүҙҙәренә яҙылған «Наҙлы ҡатын» тигән йыры тексына йырланыуҙарын, «Сәлимәкәй»ҙе «Сибай» һүҙҙәренә башҡарыуҙарын, «Уйыл» йырын «Төйәләҫ» һүҙҙәре менән бутауҙарын,

«Тәфтиләү»ҙең тарихи йөкмәткеле тексын ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышын сағылдырған йыр һүҙҙәре менән алмаштырыуҙарын, ә «Ғилмияза»ның айырым һүҙҙәрен мәғәнәһеҙ рәүештә үҙгәртеүҙәрен әйткәйнеләр. Быға тағы пластинкаға яҙылған «Зөлхизә» йырында «түтә» һүҙенең «үтәм» тип боҙолоуын өҫтәргә кәрәк.

Халыҡ йырын, ғөмүмән йырҙы, матур һәм көслө тауыш менән йырлау – ярты оҫталыҡ әле ул. Бөтөн һәм камил оҫталыҡҡа өлгәшеү өсөн йырҙың көйө лә, һүҙҙәре лә тап үҙ дөрөҫлөгөндә, асыҡ һәм тамам еренә еткереп башҡарылырға тейеш.

**4**

Һуңғы йылдарҙа «Перовский» тигән башҡорт халыҡ бейеүен, халыҡ ижадынан айырып алып, уны башҡарыусы авторлығына ҡаратырға тырышыу кеүек ғәҙелһеҙлек күренеше урын алды.

1798 йылдан алып алтмыш биш йыл буйына башҡорт халҡының тулыһы менән ғәскәри ҡатлам хәлендә тотолоуы бейеү көйҙәренең, бигерәк тә хәрби бейеүҙәрҙең, ифрат йылдам үҫеүен билдәләй. Рус бейеү музыкаһы мәҙәниәтенең билдәле бер йоғонтоһо аҫтында башҡорт халҡының милли марш һәм бейеү классикаһы барлыҡҡа килә. Был алтын фондта башҡорт атлыларының ҡыланып бейеүе (русса «изобразительный танец» тип йөрөтөлә) айырыуса әһәмиәтле. Шул һандағы гүзәл бейеүҙәрҙең береһе – «Перовский». Был бейеүгә башҡорттар үҙҙәре генә түгел, рустар ҙа һоҡланып ҡарар булған. Лев Толстойға ул бик оҡшаған. «Ул башҡорт егеттәре бейеүен ярата торғайны, – тип иҫтәлек ҡалдырған, Кәрәлек буйы башҡорто Ишбулды Сафин. – Бер мәл шулай «Перовский» көйөнә егеттәр бейеп алғас, ул бик ҡыҙыҡһынып: «Көйө башҡортса, ә исеме русса – «Перовский». Ниңә улай ул?» – тип һорашты. Мин: «Был көйҙө Ырымбурҙағы генерал-губернатор Перовскийға арнап бер башҡорт һалдаты сығарған», – тип, ишеткәнемсә һөйләнем». (Лев Толстой башҡорттар араһында. Иҫтәлектәр, – Өфө, 1970, 104-се бит.)

Был бейеү көйөнә Толстой ғына түгел, хатта Перовский үҙе лә һоҡланыр булған. Был турала ҡыҙыҡлы мәғлүмәт Д. Мәһәҙиев менән Б. Мәһәҙиевтең

гәзиттә (24.07. 69) баҫылған «Перовский» тигән белешмә мәҡәләһендә килтерелгән. «В.А. Перовский, – тип яҙа был ике автор, – күңел асҡан саҡтарҙа ҡурайсылар төрлө башҡорт көйҙәрен уйнағандар. Ләкин генералдың иң яратҡаны үҙ исеменә сығарылған көй булған. «Ҡурайсылар күмәкләшеп “Перовский”ҙы уйнай башлаһа, янарал менгән ат, көй ыңғайына баҫып, бейеп тора торғайны, тип һөйләй ине ҡарттар» тип, өлкән быуын ауылдаштарыбыҙ ул туралағы иҫтәлектәрҙе беҙҙең заманға ла еткерҙеләр».

«Перовский» бейеү көйөн беренсе башлап С.Г. Рыбаков XIX быуат аҙаҡтарында нотаға яҙып алған һәм «Музыка и песни уральских мусульман» тигән китабында баҫтырған (Санкт-Петербург, 1897). Унан һуң был көй А.С. Ключаров, Н.В. Салтыков, Л.Н. Лебединский һәм башҡа музыканттар тарафынан яҙып алынған. Әлбиттә, бейеүҙең башҡарылышын 30-сы йылдарға тиклем яҙып алыусы булмаған. Кем белһен, «Перовский»ҙы үҙ осоронда, бәлки, хәҙергегә ҡарағанда ла оҫтараҡ башҡарыусылар булғандыр.

Шуныһы сәйер, беҙҙең көндәрҙә, бер ҙә көтмәгәндә, «Перовский» ваҡытлы матбуғатта Әнүәр Әхмәҙиев ижады тип иғлан ителде, һәм был бейеүсе хаҡында «Совет Башҡортостаны»нда (25.03.69) «Перовский» бейеүенең авторы» тигән махсус мәҡәлә лә баҫылды. Нисек инде авторы булһын? Уның берҙән-бер авторы халыҡ та баһа.

Һүҙ юҡ, 30-сы йылдарҙа Ә. Әхмәҙиев «Перовский»ҙы иң оҫта башҡарыусыларҙан булған. Уның башҡарыуы аша был бейеү республика сәхнәләренә таралған. Әммә һаман ул башҡорт халҡының бейеү сәнғәте өлгөһө булып ҡала килгән. Сөнки халыҡ тыуҙырған әҫәрҙе бейеүсе ни тиклем генә ҙур оҫталыҡ менән, хатта уға үҙенсәрәк трактовка биреп башҡармаһын, ул барыбер, ижадсы халыҡты һыҙып ташлап, авторлыҡҡа дәғүә итә алмай. Улай була торған булһа, күптән инде башҡорт бейеүенең иң ҙур, иң күренекле оҫталары булған Фәйзи Ғәскәров менән Мөхәммәт Иҙрисовты үҙҙәре киң донъяға сығарған халыҡ бейеүҙәрен ижад иткән авторҙар тип билдәләргә кәрәк булыр ине. Башҡорт халҡының бейеү сәнғәтен байыҡтырыуҙа, уны артабан үҫтереүҙә һәм

камиллаштырыуҙа был белгестәр, шулай уҡ башҡа оҫталар күпме көс һалмаған тиһең.

Совет осорона тиклем башҡорт бейеүҙәре береһе лә хореографик күренеш булараҡ яҙып алынмаған. Әммә ижадсы халыҡ быға артыҡ бошонмаған да, аптырап та ҡалмаған: талантлы бейеүселәр, музыкаль һәм поэтик ижадтағы ҡурайсылар, йырсылар һәм сәсәндәр кеүек үк бейеү әҫәрҙәрен быуындан-быуынға тапшыра килгәндәр. Беҙҙе бөгөн дә әле һоҡландырыусы боронғо егеттәр бейеүе лә, ҡыҙҙар бейеүе лә, ҡарттар бейеүе лә фәҡәт шул юл менән һаҡланған һәм килеп еткән.

Әхмәҙиевтең дә бурысы, талантлы халыҡтың талантлы бер вәкиле булараҡ, боронғо халыҡ бейеүен, үҙенсәлеген һаҡлап, мөмкин тиклем байыҡтырыуҙан, камиллаштырыуҙан торған, һәм ул ошо бурысты уңышлы үтәгән дә. Шулай ҙа бейеүсе «Совет Башҡортостаны»нда (25.08.70) баҫтырылған мәҡәләһен «Перовский» бейеүе нисек тыуҙы?» тип атаған. Быны теүәл атама тип булмай, әлбиттә. Сөнки «Перовский»ҙың көйө лә, бейеүҙең үҙе лә, юғарыла күреп үтеүебеҙсә, Әхмәҙиев бейей башлағанға ҡәҙәр йөҙ йыл элек тыуған. «Перовский» бейеүе нисек камиллашты? тигәндә дөрөҫөрәк тә, баҫалҡыраҡ та булыр ине.

Был уңай менән РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәйзи Ғәскәровтың «Гүзәллек традицияларын һаҡлайыҡ» тигән мәҡәләһенә туҡталғы килә. (Ул гәзиттең 1970 йыл 29 ғинуар һанында баҫылғайны.) «Миңә, башҡорт профессиональ хореографияһының тәбиғәтенә беренсе үтеп инеүсе кешегә, – ти ул, – башҡорт халыҡ бейеүҙәренең ынйыларын йыйырға тура килде. Башҡорт ансамбле репертуарында хәҙер халыҡтың, ваҡыттың һынауын үткәргән бейеүҙәр – “Гөлнәзирә”, “Ете ҡыҙ”, “Өс таған”, “Байыҡ” һәм башҡалар бар. Уларҙы беҙҙә генә түгел, бәлки Европала, Азияла, Африкала һәм Америкала ла яҡшы beләләр».

Күрәһегеҙ, оло оҫта, был әҫәрҙәр – мин үҙем тыуҙырған бейеүҙәр, мин үҙем ижад иткән хореография шедеврҙары, тип бармай. Уларҙы халыҡ милкенән, халыҡ сәнғәтенең гүзәллек традицияларынан айырмай.

Бында уңыштың сере нимәлә һуң, тигән һорауға мәҡәләнән ошондайыраҡ яуап килеп сыға.

Халыҡ бейеүен киң масштабта танытыу өсөн сәхнәгә «ҡуйыусымын», «эшкәртеүсемен» тигән һөнәрмән бейеүҙең схемаһын һәм хореографик формаһын ғына түгел, ә иң ҡәҙерле күҙәнәктәре, иң ҡиммәтле элементтары аша унаң сәнғәт әҫәре булараҡ төп асылын, милли характерын асып һалырға тейеш, бейеүҙе халыҡса бөтә булмышы менән яңынан тергеҙергә тейеш. Ә халыҡ, элеккесә, был бейеү тулыһы менән минеке, ул боҙолмаған ғына түгел, бәлки тағы ла һәйбәтләнә, байыға төшкән, тип баһа бирһә инде, – һөнәрмән-ҡуйыусы өсөн шул еткән, сөнки уға бынан да ҙур дан юҡ. Был эштә халыҡ менән өлөш «бүлешеү» килешмәй, авторлыҡҡа йәки, икенсе төрлө әйткәндә, халыҡ менән «соавторлыҡҡа» дәғүә итеү юлына баҫыу бер кемде лә матурламай.

«Совет Башҡортостаны» гәзитендә «Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ» бүлеге аша алып барыла торған эш һәр яҡлап хуплауға лайыҡ. Уны артабан да дауам иттерергә кәрәк. Бүлектең эшмәкәрлеген уңышлыраҡ, ойоштороу өсөн иң элек баҫырға яраҡлы материал әҙерләп тапшырыусылар даирәһен ныҡ ҡына киңәйтеү хәстәрлеген күрергә ине. Шул уҡ ваҡытта халыҡ йырҙарын һәм уларҙың тарихтарын йыйыу эшен үҙ яйына ғына тапшырыу ярамай. Был эштең райондарҙағы энтузиастарына, һәүәҫкәрҙәргә гәзит аша ваҡыты-ваҡыты менән ғилми-методик консультация биреүҙе тәҡдим итке килә. Уларға мөмкин булған юлдар аша тейешле йүнәлеш биреп барырға тырышырға кәрәк. Бының өсөн Өфөләге белгестәрҙе бик киң файҙаланып булыр ине.

Халҡыбыҙҙың боронғо йырҙары, аҫыл көйҙәре беҙҙе бөгөн дә тәьҫирләндерә, бөгөн дә зауыҡландыра, улар – хәҙер ҙә беҙҙең өсөн рухи аҙыҡ, эстетик хазина. Улар иҫкереүҙе белмәй, сөнки, элекке бер хикмәт эйәһе әйтмешләй, иҫке бер ҡасан да иҫкермәй, яңы иҫкерә.

Дәртле һәүәҫкәрҙәргә йыр-көй йыйыу эшендә талапсанлыҡты көсәйткәндә һәм уларға билдәле бер методик ярҙам күрһәткәндә, башҡорт халыҡ йырҙары һәм уларҙың тарихтары, бигерәк тә киң йәмәғәтселеккә әле аҙ билдәле йәки бөтөнләй билдәһеҙ булғандары, тейешле сифатта яҙып алыныр

һәм баҫылыр ине. Унның шулай булырына ышаныу өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр бар.

1971

## Босфор ике ағымлы[1*]

### *Анкара*

Ике сәғәт тә ҡырҡ минут тигәндә Мәскәүҙән Стамбулға юл тотҡан ТУ-134 самолеты Төрөк республикаһының баш ҡалаһы Анкарала туҡталды. (1920 йылда яңы Төркиәнең тәүге дипломатик миссияһына Анкаранан Мәскәүгә барыу өсөн ике ай кәрәк булған). Минең менән төшөүселәр күп булманы. Ғөмүмән, пассажирҙар бик аҙ ине. Самолеттан сығыр алдынан ТАСС хәбәрсеһе Попов – ул ҡатыны һәм кескәй ҡыҙы менән Анкараға килә ине: «Абайлабыраҡ ҡарағыҙ, тап ошо урындарҙа 1402 йылда Тимур османлы төрөктәрен еңгән һәм Баязит солтанды әсиргә алған. Баязит хурлыҡтан үҙен-үҙе үлтергән. Шуныһын да хәтерегеҙгә төшөрәйем: Анкара бик боронғо ҡала, уға бынан ике мең ете йөҙ йылдар самаһы элек Фригия батшаһы Мидас нигеҙ һалған», – тине.

Мине Советтар Союзының Төркиәләге илселегенең ике хеҙмәткәре ҡаршы алды.

Анкараға инер алдынан ҡалала 1 миллион 209 мең кеше йәшәүен күрһәткән транспарант ҡуйылған. Бына ҡала үҙе. Ултырған урыны соҡор ҙа саҡыр, ҡалҡыу ҙа түбәләс. Үргә менәһең дә түбән төшәһең. Тар урамдар. Миңә торор урын «Дедеман» тигән бер ҡунаҡхананан алынған икән. Шунда алып барып урынлаштырҙылар.

Мин Анкараға килгән көндө – 4 март ине, был – Болгария илселеге бинаһында башҡа социалистик илдәрҙең илселектәре ҡатнашлығы менән Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөн байрам итеү булды. Мине лә шунда саҡырҙылар. Болгария илсеһенең ҡатыны рус телендә ҡыҫҡа ғына, әммә бик

---

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 79-113-сө биттәр.

[*]Мәҡәләнең үҙ заманы идеология системаһы талаптарына яраҡлаштырып яҙылғанлығын тойоуы ҡыйын түгел, һүҙ ирке, демократия шарттарында автор ҡайһы бер мәсьәләләргә, күренештәргә бүтәнсәрәк бағыр, Абдулҡадир Инан кеүек шәхестәргә һәм уларҙың эшмәкәрлегенә киңерәк, ғәҙелерәк баһа бирер ине, моғайын (М.Х. Нәҙерғолов).

йөкмәткеле доклад һөйләне. Унан һуң инде үҙешмәкәр йырсылар, бейеүселәр, декламаторҙар репертуарынан торған концерт булды. Оҫталыҡтарын күрһәтеүселәрҙең ҙур өлөшө һәр ҡайһыһы үҙ әсә телендә сығыш яһаған уҡыусы балалар ине. Аҙаҡтан ҡатын-ҡыҙҙар хөрмәтенә байрам табыны уҙғарҙылар.

Анкарала ете урында ете баҙар бар. Һәр ҡайһыһы аҙнаһына берәр генә көн – үҙенә билдәләнгән көндө генә эшләй. Килеүемдең икенсе көнөндә шул ете баҙарҙың иң ҙурында – ял көнө эшләй торғанында булдым. Нимә генә юҡ был асыҡ күк аҫтындағы баҙарҙа! Йәшелсә лә, емеш-еләк тә, өҫ һәм аяҡ кейеме лә, мең төрлө көнкүреш, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары ла – һәммәһе лә – һәммәһе бар. Ҡаҙаҡ менән һабындан алып, Лев Толстойҙың «Дерелеш» («Воскресение») романына саҡлы һаталар. Баҙар шау-гөр килеп тора. Туҡай әйтмешләй: «Ҡайһыһы һатмаҡталыр, ҡайһыһы ала. Береһе алдай шунда, береһе алдана». Шуныһы ла ҡыҙыҡ, һатыусылар бүртенгәнсе ҡысҡырышып, бындағы баҙар йолаһына хас үҙенә бер шау-оран һалып, тауарҙарын тәкдим итәләр. Беренсе ҡарашҡа тауар эйәләренең төп бурысы башҡаларҙан мөмкин ҡәҙәр шәберәк һәм оҙағыраҡ ҡысҡырынып бөтә баҙарға шау һалыу, шунан ҡалған арала ғына һатыу менән шөғөлләнеү икән тигән уйға киләһең.

Был баҙар көнөнән һуң Анкара (ә унан киткәс, Стамбул) менән танышыу Төркиә сит ил эштәре министрлығының мәҙәниәт эштәре департаменты тарафынан төҙөлгән программа буйынса үтте. Тәү башлап мине, Совет илселегенең секретары менән бергә, ана шул департаменттың башлығы ҡабул итте. Быға тиклем Төркиә менән СССР араһында мәҙәниәт, фән бәйләнештәре һәм хеҙмәттәшлеге әүҙем төҫ ала алмағайны. Хәҙер ике яҡты ла ҡәнәғәтләндерерлек әүҙем бәйләнештәр планының проекты төҙөлдө, тине ул.

Ошо осрашыу артынса ул Милли мәғариф министрлығының китапханалар бүлеге башлығы ла ике ил араһында күҙ уңында тотолған бәйләнеш һәм хеҙмәттәшлекте ихлас хуп күреүен белдерҙе. Беҙгә былай ҙа Советтар Союзының донъяны хайран иткән фән һәм техника асыштары, шулай уҡ мәҙәниәт ҡаҙаныштары яҡшы билдәле ине. Бәйләнеш һәм хеҙмәттәшлек

ныҡлап урынлашҡас инде, фән һәм мәҙәниәт кешеләренә туранан-тура аралашыу, тәжрибә алышыу мөмкин булыр, тине.

Ошондай уҡ хуплау һәм теләк һүҙҙәрен миңә ғалимдар араһында ла, музейҙарҙа ла һәм китапханаларҙа ла ишетергә тура килде.

Анкара халҡының тормош кимәле хаҡында яңы рәсми белешмәләр юҡ. 1964–1965 йылдарҙа үткәрелгән социологик тикшеренеүҙәр биргән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, баш ҡалала йәшәүсе һәр 100 ғаиләнән 13 ғаиләнең айлыҡ; килеме – 1500 лиранан[1] уҙмай, 33 ғаиләнеке – 1000 лираға тиклем, 20 ғаиләнеке – 1500 лираға ҡәҙәр, 10 ғаиләнеке – 2000 лираға саҡлы, ә 24 ғаиләнең айлыҡ килеме 2000 лиранан артыҡ. Аҙ килемле ғаиләләрҙең бөтә аҡсаһы таҡы-тоҡо туҡланыуҙан һәм торлаҡ өсөн түләүҙән артмай, хатта уға ла етмәй. Ауырып китһәң, дарыуын да бик ҡиммәт хаҡҡа табырға кәрәк.

Медицина хеҙмәтләндереүе нигеҙҙә дәүләт больницалары (хәстәханалар) һәм поликлиникалары аша алып барыла. 1967 йылғы рәсми статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Анкарала 25 дәүләт больницаһы (6483 койкалыҡ) һәм 6 хосуси больница (104 койкалыҡ) эшләй. Әммә пациенттарҙың 70 процентҡа яҡын өлөшө баш ҡала кешеләре түгел, ә ситтән килгән ауырыуҙар, сөнки Анкара вилайәтенең башҡа ҡалалары, шулай уҡ бөтә ауылдары өсөн ни бары 4 кенә больница эшләй. Анкарала 2300 врач бар. Был һандар бер ҡала өсөн ярайһы уҡ күренһә лә, ил күләмендә алғанда, 9 мең кешегә бер врач тура килә.

Ишле һәм ярлы ғаиләләрҙең байтағы балаларын уҡыта алмай. Төркиәлә башланғыс белем мәжбүри, балалар түләүһеҙ уҡытыла. Шулай булһа ла Анкарала йәшәүселәрҙең 22 проценты уҡый-яҙа белмәй. Ил халҡының 49 проценты ғына грамоталы.

Ә шул уҡ ваҡытта Анкарала, Стамбулда һәм башҡа, ҡалаларҙа ҙур-ҙур юғары уҡыу йорттары эшләй. Студенттарҙың бәләкәй бер өлөшөнә хөкүмәт йәки айырым ойошмалар стипендия бирә. Мәҫәлән, Анкара университеты студенттарының 14 проценты стипендия алып уҡый. Был университеттан тыш

[1] Лира – Италияның һәм ҡайһы бер башҡа илдәрҙең, аҡса берәмеге.

баш ҡалала тағы ун дүрт дәүләт һәм өс хосуси юғары уҡыу йорто бар. Шулар араһында: Урта Көнсығыш техник университеты (уҡытыу күбеһенсә инглиз» телендә алып барыла), Медицина университеты; Экономика һәм коммерция академияһы, Социаль хеҙмәтләндереү академияһы, Дәүләт консерваторияһы һ.б.

Мин Анкара университетында булдым. Унын ун факультеты бар. Егерме меңдән ашыу студент уҡый. Уҡытыусылар һаны 1300 кешегә етә. Филология факультеты менән яҡынырак таныштым. Декан кабинетында булып үткән осрашыу ваҡытында профессорҙарҙың, дөйөм алғанда, Советтар Союзындағы юғары уҡыу системаһында, ғилми эштәрҙе ойоштороу формаһына ыңғай ҡараштары беленде. Ике арала ныҡлы һәм даими бәйләнеш булдырыу, китаптар алмашыу практикаһын киңәйтеү теләктәрен әйттеләр. Төрөк филологтары араһында, күп булмаһа ла, рус телен яҡшы ғына белгәндәре лә бар икән.

Анкарала китапханалар байтаҡ. Шулар араһында айырыуса ҙурҙары икәү. Береһе – Милли китапхана. Унда 600 мең томдан артыҡ китап һәм гәзит-журнал тупланған. Эргәһендә Библиография институты бар. Ул Төркиәнең бөтә китапханаларына ғилми систематизация һәм каталогизация ысулдарын индереү эшен алып бара, китап [йылъяҙмаһы, шулай уҡ гәзит-журнал мәҡәләләре йылъяҙмаһы төҙөй һәм баҫып тарата. Икенсе ҙур китапхана – Анкара университеты китапханаһы. Университеттың факультеттары эргәһендә лә китапханалар бар.

Анкара – Төркиәнең Стамбулдан ҡала икенсе нәшриәт үҙәге. Унда 200 китап, гәзит һәм журнал типографияһы эшләй. 63 гәзит (шуның 22-һе көн һайын) сыға. 191 журнал баҫыла (103-сө ай һайын сыға). Төп ижтимағи-сәйәси гәзиттәр: «Барыш» («Именлек» – Халыҡ республика партияһы органы), «Зафәр» («Еңеү» – Ғәҙеллек партияһы органы), «Йәмһүриәт», «Хөрриәт», «Аҡшам», «Донъя», «Тәржеман» кеүек иң күп тиражлы гәзиттәр, шулай уҡ бәләкәйерәк тиражлы гәзиттәрҙең күпселеге элек-электән Стамбулда сыға.

Былар бөтәһе лә буржуаз органдар. Айырма шунда ғына: береһе уң йүнәлешле, икенсеһе һулғараҡ тарта.

Төркиәлә фәндәр академияһы юҡ. Ғилми-тикшеренеү эштәре төрлө ойошмаларҙа, юғары уҡыу йорттарында алып барыла. Анкара университетының күпселек факультеты ҡаршыһында ғилми-тикшеренеү институттары бар. Стамбул университетында ла шундай уҡ хәл. Мәҫәлән, унда төрөк филологияһы факультетының Төркиә тигән институты эшләй.

Шулай ҙа тарих, филология өлкәләрендә академия учреждениеларының функцияһын Анкаралағы ике ғилми йәмғиәт – Төрөк тарих йәмғиәте (Төрк тарих куруму) менән Төрөк тел йәмғиәте (Төрк дил куруму) уңышлыраҡ үтәй булһа кәрәк. Был йәмғиәттәр 1931-1932 йылдарҙа төҙөлгән һәм Ататюрк васыят итеп ҡалдырған аҡсанан килгән килем иҫәбенә йәшәйҙәр. Төрөк тарих йәмғиәтенең дә, Төрөк тел йәмғиәтенең дә уставтары бар. Улар шул уставтарға таянып эшләйҙәр. Йәмғиәт ағзаларының дөйөм йыйылышында (Тарих йәмғиәтенең, мәҫәлән, 600 ағзаһы бар) 35 кешенән торған ғилми совет һайлана. Совет бер нисә кешенән ғибәрәт башҡарма идара төҙөй. Бына ошо идара йәмғиәттең бөтә ғилми эшмәкәрлегенә һәм һәр төрлө ойоштороу эштәренә етәкселек итә. Һәр идара ағзаһының үҙ вазифаһы билдәләнгән. Бының, өсөн улар эш хаҡы алалар.

Баҫма библиографик белешмәләренә ҡарағанда, Тарих йәмғиәте лә, Тел йәмғиәте лә айырыуса һуңғы ун йылда Төркиә археологияһы һәм боронғораҡ дәүерҙәр тарихы, шулай уҡ төрөк теле, әҙәбиәте һәм фольклоры буйынса байтаҡ һанда әһәмиәтле ғилми хеҙмәттәр баҫтырып сығарған, төрлө-төрлө ғилми сессиялар, конференциялар үткәргән.

Алдынғы ҡарашлы төрөк тарихсылары һәм филологтары СССР Фәндәр академияһының Мәскәүҙәге Көнсығыш институтын һәм уның Ленинградтағы бүлеген, шулай уҡ «Наука» нәшриәтен төрөк тарихына, этнографияһына, теленә һәм әҙәбиәтенә ҡараған ғилми монографиялар, текстологик йыйынтыҡтар әҙерләгән һәм баҫып сығарған өсөн рәхмәт һүҙе менән телгә алалар.

Мин булған көндө (7 мартта) Тарих йәмғиәтенең рәйесе Кансу өйҙә юҡ ине, мине йәмғиәттең генеральный мөдире, бер нисә идара ағзаһы менән бергә, ҡабул итте. Әңгәмәләшеп ултырғандан һуң, мин уларға үҙем алып килгән китаптарҙы бирҙем. Улар ҙа, бүләккә ҡаршы бүләк итеп, йәмғиәт баҫтырған ҡайһы бер китаптарҙы бирҙеләр. Мөдир бер китапты аҙаҡҡараҡ ҡалдырып:

– Ә бына быныһы милләте менән башҡорт, профессор Абдулҡадир Инандың китабы була. Башҡортҡа башҡорт китабын бирәйем, рәхим итеп алығыҙ, – тине.

Рәхмәт әйтеп бүләкте алдым. Яҡшы ҡағыҙға баҫылған ҡалын китап. Ледерин[1] тышлығына «Макалелер ве инжелемелер» тип яҙылған, йәғни «Мәҡәләләр һәм тикшеренеүҙәр» була. 1968 йылда Анкарала сыҡҡан. Китапты асҡас та авторҙың тулы битте алып торған һүрәте баҫылған.

Мин Анкараға килеү менән был китап хаҡында ишеткәйнем инде. Номерға ҡайтҡас, төн ауышҡансы шуның менән мәшғүл булдым. Мәҡәләләр һәм тикшеренеүҙәр алты бүлек итеп бирелгән: төрөк ҡәүемдәре, фольклор, дастандар, ышаныу һәм инаныуҙар, археология һәм тарих, төрөк телендәге айырым һүҙҙәргә аңлатмалар. Ереле-ваҡлы был мәҡәләләр һәм тикшеренеүҙәр ғилми яҡтан ни тиклем нигеҙле, тарихи йәһәттән ни ҡәҙәр объектив яҙылғандыр, – ентекләп өйрәнмәйенсә тороп уларға хөкөм сығарыу мөмкин түгел.

Был урында китаптың бик сәйер булып күренгән бер яғын ғына әйтке килә. Унда ҡырғыҙ халҡының «Манас» эпосы тураһында туғыҙ мәҡәлә индерелгән, СССР-ҙағы башҡа төрки халыҡтарҙың да, шулар араһында яҡут, тува, хакас кеүек, Инан, ихтимал, үҙе лә күреп белмәгән халыҡтарҙың этнографияһы һәм фольклоры хаҡында айырым мәҡәләләр бирелгән. Ә бына Инандың туған башҡорт халҡы, уның тарихы, көнкүреше йәки бай ауыҙ-тел ижадына ҡарата ошо 712 битлек китапта бер генә мәҡәлә лә юҡ. Юрамал яҙмаған булһа кәрәк. Шуның менән ул төрөктәргә: бына күрегеҙ, миндә башҡорттоң әҫәре лә юҡ, мин һеҙгә ниндәйҙер бер башҡорт килмешәге түгел,

[1] Тире менән йәки ҡағыҙ нигеҙендәге, тирегә оҡшатып эшләнгән материал (*төҙөүселәрҙән).*

артымдан бер ни ҙә эйәреп йөрөмәй, торғаным менән ысын төрөкмөн мин, тимәксе, ахырыһы.

***«Тимербай ҡурайсы» хикәйәһенең авторы***

Ишекте ҡыҫҡа буйлы йәш кенә бер ҡатын асты. Инеүгә коридорға ике бала йүгереп сыҡты. Береһе – дүрт-биш йәшлек ир бала, икенсеһе – ҡыҙ бала. Икеһе лә, беҙгә ишек асҡан ҡатын һымаҡ, ҡара сәсле, ҡара күҙле. Ҡулдары әсәләренең итәгендә, күҙҙәре беҙҙә, ят ҡунаҡтарҙа. Өҫ кейемдәребеҙҙе һалғас, бүлмәгә уҙҙыҡ. «Хуш гелдиниз», – тип, ҡарт ҡаршы алды. Быныһы Абдулҡадир Инан үҙе ине. Әммә ул кисә мин рәсемен китабында күргән Абдулҡадирҙан аҙ тигәндә утыҙ-утыҙ биш йәшкә өлкән ине. Хәҙер ул һикһән дүрт менән бара. Мине машинала йөрөтөүсе Хәйри арҡылы көн элгәре һөйләшеү буйынса, бөгөн ошо урында киске алтыла осрашыуҙы Инан үҙе тәғәйенләгәйне. Исемемде онотоп та өлгөргән.

– Аффынызы диләрем, адынызы унуттум, – тип ғәфү үтенде.

– Әхнәф, – тинем мин.

– Әвәт, Әхнәф, – тип дөрөҫләне лә төпкө бүлмәгә үтеүебеҙҙе һораны. Үттек, ултырыштыҡ. Минең һул ҡолағым ғына ишетә тип, Абдулҡадир уң яғымдан ултырҙы. Хәйри ҡаршынан урын алды. Уртала үҙе кескәй, үҙе бөтөнләй тәпәш хәҙерге заман өҫтәле. Ултырышыу менән, төрөк йолаһы буйынса, хужа сәй килтерәйемме, ҡәһүәме, тип һораны. Ҡәһүә, тинек. Шунда уҡ алға кофе килтереп ҡуйылды. Бына шунан һуң инде, мин көткәнсә үк булмаһа ла, әңгәмә башланып китте.

– Абдулҡадир әфәнде, ниндәй телдә һөйләшәбеҙ? Мин башҡортса, татарса, русса беләм. Төрөксә аңлаһам да, анһат һөйләшә алмайым, – тинем.

– Тыумышым менән мин башҡортмон, әммә туған телемде лә, мәҙрәсәлә уҡыған татар телен дә онотҡанмын тип әйтерлек, рус телен дә белмәйем хәҙер, һәр хәлдә ул телдәрҙә еңел һөйләшерлек түгелмен, – тине ул. – Һеҙ башҡорт менән татар телдәрен төрөксәгә һуҡтырып һөйләгеҙ, ә мин төрөк телен татар-башҡорт һүҙҙәре менән буташтырырмын. Шайәт, аңлашырбыҙ, – тине.

Беҙ бер сәғәттән артыҡ ана шул боламлыҡ телдә аңлаштыҡ. Төрөк Хәйри көлөп ултырҙы. Әңгәмә тамамланыуғараҡ ҡайтып ингән Абдулҡадирҙың Йәшәр исемле улы ла беҙҙең һөйләшкәнде сәйерһенеп тыңланы, һүҙҙе Абдулҡадир үҙе башлап алып китте:

– Башҡортостанда саҡта мине Фәтхелҡадир Сөләймән тип беләләр ине. Төркиәгә килгәс, Абдулҡадир Инан булып киттем. Олатайым Сөләймәндең атаһы Пугач менән Салауат яуынан һуң да оло ҡатай ырыуын ташлап, Арғаяш яғына күсеп киткән. Атайым Мостафа үҙенең Шиғай тигән тыуған ауылында мулла булып торған. Мин шул Шиғайҙа тыуғанмын. Хәҙер Стамбулда торам. Был квартир улымдыҡы. Анкараға килгән арала бына ошонда, улымда туҡталам... Рәсәйҙән китеүемә бик күп заман үтте инде, әфәндем...

Ул йәнә исемемде онотто.

– Әхнәф, фамилиям Харисов, – тинем ҡысҡырыбыраҡ.

– Әвәт, Әхнәф. Ә ниңә Харисов? «овһыҙ» ғына булмайҙыр шул? Рус ҡойроғо бында ла килеп ҡыҫылған икән, – тине. Русты беренсе тешләүе шул булды.

– Мин бит Төркиә кешеһе түгел, Абдулҡадир әфәнде, Рәсәй кешеһе. Беҙҙә элек-электән шулай ҡабул ителгән.

– Ярай, уныһы һеҙҙең эш. Мин Харисов та, Харис та тимәм. Әхнәф әфәнде тип кенә өндәшермен.

– Әвәт, – тинем. Төрөктәр был һүҙҙе үтә йыш ҡулланалар. Беҙҙеңсә «ярай», «әйбәт», «яҡшы» мәғәнәһендә йөрөй.

Мин бында ҙурыраҡ өмөт менән килгәйнем. Абдулҡадир үҙе тыуып-үҫкән Башҡортостан хаҡында, заманында хикәйәләр, шиғырҙар бағышлап яҙған башҡорт халҡы тураһында һораша-һораша мине аптыратып бөтөрөр тип уйлағайным. Хатта уның ниндәй һорауҙар ҡуйырын, уларға нисегерәк итеп яуап бирергә кәрәклеген дә сама менән билдәләгәйнем. Үҙемдең дә унан яуап алырға теләгән күп кенә һорауҙарым бар ине. Шуларҙың иң мөһимдәрен, онотола күрмәһен тип, ҡағыҙға ла төшөрөп ҡуйғайным. Әммә быларҙың береһе лә кәрәк булманы. Абдулҡадир үҙенең тыуған илен, тыуған төйәген тамам

оноҡкан, уларҙы һағыныу тойғоһо бөтөнләй һүнгән әҙәм булып сыҡты. Шул ҡыҫҡа ваҡытлы ултырышыуыбыҙҙа ла ул үҙен СССР-ға, айырыуса рустарға нәфрәт менән ҡараған ҡарт панисламист һәм пантюркист итеп танытты. Нимәләргә табыныуын ул үҙе әйтеп бирҙе.

– Мин өс нәмәгә инанам, – тине. Береһе – ислам дине, икенсеһе – ғилем, өсөнсөһө – бөйөк төрөк милләте. Инан тигән фамилиям ана шул өс көскә инаныуҙың билдәһе ул. Мине капитализм да, коммунизм да ҡыҙыҡһындырмай, – тигән була. – Мин шаманизм менән мәшғүлмен. 1945 йылда «Тарихта һәм бөгөн шаманизм» тигән китап сығарғайным. Хәҙер шуның яңы баҫмаһы өҫтөндә эшләп ятам. Шулай, Башҡортостандан айырылыуыма илле йыл инде, – тип һүҙен дауам итеп алып китте. Төркиәгә килеп эләгеү «бәхетен» тасуир итергә тотондо. – Большевиктар менән килешерлек булмағас, тәүҙә Ташкентҡа, унан һуң Сәмәрҡәндкә киттем. Ташкентта аҙ-маҙ уҡытыусылыҡ итергә лә тура килде, шунда сыҡкан «Аҡъюл» гәзитендә Йылҡыбай имзаһы менән мәҡәләләр ҙә баҫтырҙым. Артабан инде сит илдәр: Афғанстан, Һиндостан, Франция, Германия. Ниһайәт, 1925 йылда Стамбулға килеп урынлаштым. Артабан күберәге Анкарала эшләнем. 1935 йылда Ататюрктың туранан-тура үҙ хәстәрлеге менән мине Анкара университетында төрөк теле профессоры иттеләр. Был вазифамда туғыҙ йыл эшләнем. Шулай ҙа яҙғандарымдың ҙурыраҡ өлөшө төрки халыҡтарҙың этнографияһы менән фольклорына ҡарай...

Абдулҡадир Инандың был автобиографик белешмәләрен белеү ҙә артыҡ түгелдер, моғайын. Әммә улар минең өсөн яңы түгел ине инде. Мин быны бөтәһен дә «Мәҡәләләр һәм тикшеренеүҙәр» китабында яҙылған баш һүҙҙән уҡып белгәйнем инде. Инанды үҙе йәшәгән элекке Башҡортостанға, шул замандың ижтимағи-әҙәби мөхитенә яҡыныраҡ килтереп һөйләтергә тырышып ҡараным. Тыуған иле, туған халҡы һәм уның мәҙәниәте тураһында ниндәйерәк тойғо менән йәшәй икән был һикһән дүрт йәшлек «Урал төрөгө». Шул ҡыҙыҡһындыра ине мине.

– Абдулҡадир әфәнде, башҡорт әҙәбиәте тарихы менән таныш кешеләр һеҙҙе иң элек яҙыусы итеп беләләр. «Шура» журналында һеҙҙең «Тимербай

ҡурайсы», «Үләт» тигән хикәйәләрегеҙ баҫылған. «Салауат батыр» исемле пьеса ла яҙғанһығыҙ. Шул замандың әҙәби тормошо, айырым яҙыусылары, мөхәррирҙәре, ғалимдары хаҡында мәғлүмәттәр ҙә хәтерҙә һаҡланған булырға мөмкин, һеҙҙән ошоларға бәйле бер нисә һүҙ ишетеп булмаҫмы?

– Булмаҫтыр, ахырыһы, – тине өҙөп кенә. – Йәшлек заманы ла, шул заманда яҙған нәмәләрем дә үткән төш кеүек кенә хәҙер. Иҫкә алып һөйләрлек сәхифәләр юҡ. Салауат... Салауат... булған шул Урал төрөктәрендә шундай бер батыр!

– Беҙ ул бөйөк милли батырыбыҙҙы иҫтән сығармайбыҙ. Салауат тураһында сәхнә әҫәре лә бераү генә түгел хәҙер.

– Рустар нисек ҡарайҙар һуң Салауатҡа?

– Нисек ҡараһын, хөрмәт менән ҡарайҙар.

– Ул рустарҙы ҡыйратҡан даһа.

– Уға китһә, рус Пугачев үҙе үк рус баярҙарын ҡыйратҡан. Салауат Юлаев, рус ярлылары менән дуҫ булып, һәр төрлө иҙелеүгә, самодержавиеға ҡаршы һуғышҡан беренсе башҡорт батыры. Шуға бөтә халыҡтар өсөн дә ҡәҙерле шәхес ул. Рус яҙыусыһы Степан Злобин Салауат батыр хаҡында роман яҙған. Кинофильм да бар. Хәҙерге Башҡортостандағы иң матур яңы ҡалаларҙың береһе Салауат исемендә. Уның тыуған районына Салауат исеме бирелгән. Өфөлә Салауатҡа гүзәл һәйкәл ҡуйылды. Бына мин һеҙгә «Уфа» тигән китап алып килдем, шунда Салауат һәйкәлен күрерһегеҙ. Ә быныһы башҡорт балы. Уның һауытына ла шул уҡ һәйкәлдең һүрәте төшөрөлгән.

Китапты ла, балды ла урталағы тәпәш өҫтәлгә ҡуйҙым. Инан бүләктәрҙе тотоп та, уҡып та ҡараманы. Бер аҙ уйға батып торҙо. Күҙлеген һөртөп кейҙе лә алдындағы «Уфа» китабын асып ҡараны, балды ҡулында әйләндергеләне.

– Гүзәл һәйкәл икән, –тине. – Ә Салауат тоҡомонан булған Урал төрөктәре, йәғни башҡорттар, үҙҙәре нисегерәк йәшәй инде? Һеҙ үҙегеҙ ниндәй эштә? – тип һораны.

Һиҙелеп тора, былар бал менән китап бирҙергән һорауҙар ине. Мин тәүҙә үҙемдең ҡайҙа эшләүемде, Төркиәгә ниндәй йомош менән килеүемде әйттем. Шунан:

– Салауат тоҡомдары, илебеҙҙең бүтән халыҡтары кеүек, һәйбәт йәшәй, – тинем. – Һеҙ «Тимербай ҡурайсы», «Үлət» хикәйәләрендә тасуир иткән фажиғәле тормоштоң эҙе лә ҡалмаған инде. Башҡорт халҡын үлемесле хәлдән Октябрь инҡилабы ҡотҡарҙы. Хәҙерге Башҡортостан һәр йәһәттән һоҡландырғыс бай һәм юғары мәҙәниәтле республика ул. Уның ауылдарында һәм 17 ҡалаһында 4 миллионға яҡын кеше йәшәй; 4 мең 305 башланғыс һәм урта мәктәп, 65 техникум, 10 юғары уҡыу йорто гөрләп тора. СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы, унан тыш йәнә 28 ғилми-тикшеренеү институты һәм 26 конструктор-проект ойошмаһы эшләй. Милли мәҙәниәт, матбуғат, сәнғәт һәм әҙәбиәт тә бик алға киткән. Беҙҙең яҙыусыларыбыҙ әҫәрҙәрен сит илдәрҙә лә уҡыйҙар. Башҡорт бейеүселәре ярты донъяны урап сыҡты. Быйыл декабрҙә СССР-ҙың төҙәлөүенә 50 йыл тула. Илебеҙҙең бөтә республикалары, барлыҡ халыҡтары шул бөйөк байрамды ҡаршылау өсөн әҙерләнәләр. Бына шундай ул бөгөнгө Башҡортостан һәм уның халыҡтары, ғөмүмән Советтар иле.

Күреп торам, был мәғлүмәттәр Инанда ҡыуаныс тойғоһо уятманы. Киреһенсә, ул үҙенең шелтәле ҡарашын белдерҙе.

– Шулай булыуы ла мөмкин. Әммә һеҙ, ғалим була тороп, большевик һүҙен һөйләйһегеҙ һымаҡ, – тине.

Большевиктың ғалим булыуын һәм шундай бер большевиктың бына әле үҙ эргәһендә ултырыуын йә ул башына ла килтермәй, йә иһә, быны бик яҡшы аңлаған-белгән хәлдә лә, коммунизм менән коммунистарға ҡаршы әсе нәфрәт булып йөрәгенә ятҡан асыу тойғоһо большевиктарҙың ижади эшен хупламау өсөн уға һис тә юл ҡуймай ине.

Инандың большевиктар тураһындағы ҡарашы миңә генә түгел, үҙенең улы Йәшәргә лә оҡшаманы. Быға тиклем беҙҙең менән иҫәнләшеүҙән башҡа ауыҙ асып һүҙ әйтмәйенсә, беҙ һөйләшкәнде тыңлап ултырған Йәшәр:

– Бабам, һин шулай тиһең дә бит, большевиктар иле донъяның иҫен китәреп ята. Гагарин уларҙан ине, айҙың икенсе яғын да башлап рустар күрһәтте, ә ай өҫтөндә кеше эшләмәҫ эште шул большевиктар машинаһы эшләп йөрөнө...

Йәшәрҙең тағы ла әллә нимә әйтергә уйы бар ине лә атаһы ирек ҡуйманы:

– Етте, улым, ҡыҫылмай тор. Һин йәш кеше әле, күп нәмәне белмәйһең. Донъя һәм тарих ҡатмарлы нәмә ул, һинең урманың түгел! – тине асыулана биреп. Шунан миңә ҡарап: – Йәшәр урмансылыҡ инженеры булып хеҙмәт итә, – тип аңлатма бирҙе.

Әҙерәк тымып торҙоҡ. Әңгәмәне нисегерәк дауам итергә икән һәм бындай хәлдә уны дауам итеүҙең ғөмүмән кәрәге бармы әле, тип уйланып торған арала, Инан һүҙҙе өҙөлгән еренән ялғап алып китте. Мин милләтебеҙҙең атаһы Ататюрк менән бик яҡшы мөнәсәбәттә инем, яңы Төркиәләге мәҙәниәт төҙөлөшө мәсьәләләре буйынса байтаҡ йылдар Ататюрктың асылда кәңәшсеһе һәм унын ҡушҡандарын үтәүсе булып килдем, тип шапырына башланы. Ул һөйләне, мин бүлдермәнем, берәй ергә барып терәлер әле тип аҙағын көтөп ултырҙым. Ниһайәт, барып терәлде. Бына шул урында беҙҙең осрашыу ҙа тамам булды.

### *Анкаранан Стамбулға*

Анкаранан Стамбулға тиклем 450 километр. Асфальт юл тауҙар араһынан төньяҡ-көнбайышҡа ҡарай һуҙыла. Тәүге бер сәғәт буйы гел генә шул тауҙар ҡыҫымында бараһың. Ауыл-фәлән күренмәй. Ике яғында боронғо төрөктәрҙең үҙҙәре һымаҡ, ҡаҡ башлы тауҙар ҙа сағылдылар. Артабан инде «сәсле» баштар ҙа күренә башлай: һирәк кенә булып үҫкән үҙе нәҙек, үҙе ҡыҫҡа шыршылыҡ йәйелеп китә.

– Чок урман, – тигән була Хәйри.

Нимәһе урман, етмәһә чок ҡуйы булһын инде.

Быларҙы, бик оҙаҡ ҡыҫып килдем, әҙерәк иркенлек биреп алайым тигәндәй, тауҙар ике яҡҡа айырылып китте, күҙ күреме ерҙә офоҡ менән тоташты. Юлдың ике яғында йорт түбәләре гел генә ҡыҙғылт черепица менән

ябылған эреле-ваҡлы ауылдар, поселоктар китә. Туғыҙ-ун йорттан ғына торғандары ла бар. Әммә барыбер ун беренсе бина – нескә генә манаралы ябай мәсет. Түбәләре, итәктәре әле бөтөп етмәгән ҡарҙан ала-ҡола булып ятҡан Аҡъярма һәм Болу тауҙарын үткәс инде, киң яланлыҡ йәйелә, ауылдар йышая бара. Беҙ әленән-әле һыйыр малы тейәлгән ҙур-ҙур йөк машиналарын уҙып китәбеҙ. Күрәһең, яҡын тирәлә ит комбинаты эшләйҙер. Ғөмүмән, был тирәлә гел генә малсылыҡ менән шөғөлләнәләр. Төп кәсеп – ит етештереү, һөт, май, сыр һәм башҡа шундай ашамлыҡтар әҙерләү, тире-яры эшкәртеү. Гәрәдә, Ениса күлдәре буйындағы поселоктар, шунан алыҫ түгел йәнә Мәнгән поселогы – төрөктәр уларҙы ла шәһәр тип йөрөтәләр – малсылыҡ хужалығы биргән продукттарҙы эшкәртәләр. Был тирәлә бойҙай баҫыуҙары ла бар.

Бына Болу тигән ҡала урмандарынан үтеп киттек. Күҙгә ташланғаны һуңғы йылдарҙа төҙөлөп, гел быяланан тип әйтерлек торған мәсет булды.

– Модерн ями, – ти Хәйри.

Стамбулға 130 километр ҡала Сапая күле башлана; 30 километрға һуҙылған иҫе күренеп тора – аръяҡта, күҙ күреме ерҙә, бейек тауҙар һыҙатлана. Был тирәлә инде ала-ҡола ҡарҙар бөтөнләй юҡ. Күл бөтөүгә уң яҡта – киңлек, тигеҙлек, ә һул ҡулда Мәрмәр диңгеҙе башланып китә. Тимәк, тиҙҙән Стамбул. Юҡ, Измир ҡалаһын үтәһе бар икән әле. Юлдың уң яғына, тау итәгенә, йәбештерелгән был ҡала ғәжәп оҙонға һуҙылған. Шулай ҙа архитектура ҡомарҡыһы булырлыҡ йорттар күренмәй. Хәйри: бында балыҡ ашамлыҡтары етештерәләр, туҡыма фабрикаһы эшләй, ти. Ҡаланың урта еренәрәк ҡуйылып, Стамбулға 89 километр юл ҡалғанын күрһәтеүсе билдәне үтә төшкәс инде, автомашиналар ағымы көсәйеп китә.

Стамбулдың һыҙатланышы асыҡ билдәләнмәгән әле. Әммә күккә һуҙылған манаралар, боронғо ҡаланың беренсе билдәләре беҙ булабыҙ тигәндәй, әллә ҡайҙан һерәйешеп торалар. Яҡыная барған һайын бейек-бейек модерн «шырпы ҡаптары» айырылып тора.

Ниһайәт, Стамбулдың Азияға ҡараған өлөшөнә килеп индек һәм Мәрмәр диңгеҙен Ҡара диңгеҙ менән тоташтырған боғаҙҙа – Босфор буйы майҙанында

туҡтап ҡалдыҡ, Бында, алты рәт булып теҙелгән еңел машиналар колоннаһында, паром менән Босфорҙың теге яғына Европаға сығыр өсөн бер сәғәт сират көтөргә кәрәк булды. Босфорҙың бик сәйер бер үҙенсәлеге бар икән: ул ике – өҫкә һәм аҫҡы – ағымлы һыу. Өҫкә ағымы Ҡара диңгеҙҙән Мәрмәр диңгеҙенә килә, аҫҡы ағымы кирегә – Мәрмәр диңгеҙенән Ҡара диңгеҙгә бара. Өҫкөһөнөң һыуы аҙ тоҙло һәм шәберәк ағышлы, аҫҡыһы ныҡ тоҙло һәм аҡрын ағышлы. Температуралары ла ике төрлө. Босфор балығының айырыуса тәмле булыуы ошо шарттарҙан килә, тиҙәр.

Сират көткән арала беҙҙе малай-шалай һырып алды. Майҙанда йөҙләгән машина. Машина һайын әллә нисә йәбешмәк малай. Ҡояшта йөрөү өсөн төрлө-төрлө күҙлектәр, зажигалка, авторучка, сәғәт, тағы әллә нимәләр тәкдим итәләр. Кескәй генә аҫылма батмусҡа ҡайнар сәйле йәки кофелы ваҡ ҡына туҫтаҡ теҙеп алғандар. Тартмаларын артмаҡлап, ҡулдарына щетка тотоп алғандары хеҙмәттәрен айырыуса тауышланып тәкдим итәләр. Беләгенә ап-аҡ таҫтамалын һалып, ике ҡулына бөтә приборын тотоп алған ир уртаһы парикмахерҙар ҡысҡырып йөрөй. Әйтерһең, Азиянан Европаға сығыр алдынан юлсыларға быларҙың бөтәһен дә мотлаҡ ҡабул итергә кәрәк. Машинаның алғы тәҙрә эргәһенә бер теләнсе лә килеп баҫты. Хәйри ҡыуа. Теләнсе китмәй, ҡартмын, бер аяғым юҡ, ти. Бик йәл булып китте был миңә. Егерме бишәр курушлыҡ[1] ике аҡса бирҙем. Стамбулға килгәс, тәүге сығымым шул булды.

Аръяҡҡа сыҡҡас, Хәйри мине туп-тура «Дильсон» тигән ҡунаҡханаға алып барҙы. Алтынсы ҡаттағы бер ҡупшы бүлмәгә урынлаштырҙылар. Хәйри төнгөләккә ҡайҙалыр икенсе урынға китте.

Стамбул – төрөктәрҙең иң ҙур һәм иң матур ҡалаһы. Унда йәшәүселәр Анкараға ҡарағанда ике тапҡыр күберәк. Стамбул төрөктәр ҡулына 1453 йылда күскән. Уға тиклем Константинополь исемендә йөрөгән һәм мең дә бер йөҙ егерме өс йыл буйы Византияның баш ҡалаһы булған. Ул Босфорҙың ике яҡ ярына, Анкара һымаҡ уҡ, тигеҙһеҙ ергә ултырған. Төп өлөшө Европала, бәләкәй киҫәге Азияла. Илдәге сәнәғәттең ҙур өлөшө, мәҙәниәт һәм матбуғат

---

[1] Куруш – төрөк лираһының йөҙҙән бер өлөшө.

ойошмаларының күпселеге ошо ҡалала тупланған. Бер үк ваҡытта Стамбул – донъялағы иң ҙур порттарҙың да береһе. Унан, сит ил флагтарын елберләтеп, ай һайын бер меңгә яҡын пароход үтә.

Стамбул – музей-ҡала, тамаша урыны, туристар төйәге. Унда Византия дәүеренән үк ҡалған гүзәл архитектуралы һәм зиннәтле һарайҙар, һуңыраҡ осорҙарҙа һалынған мәсеттәр бар. Мәҫәлән, Долмабахче исеме бирелгән һарайҙың эске стеналарын рококо стиле менән биҙәкләү өсөн генә лә ун дүрт тонна ярым алтын тотолған. Стамбулды манаралар ҡалаһы тиҙәр. Унда нисә йөҙ манара күккә һуҙылғандыр, – иҫәбен, белгән кеше осратманым.

Боронғо архитектура сәнғәте ҡомартҡыларының береһе – донъяла иң бейек һәм иң киң көмбәҙле Аясофия храмы. 532-537 йылдарҙа һалынған. XV быуат уртаһында төрөктәр ҡулына күскәс, манаралар ҡуйылып, мәсеткә әйләндерелгән. Хәҙер музей. Эске яғы төҫлө мәрмәр менән ҡапланған һәм ғәжәйеп мозаикалар менән биҙәлгән. Уның бер үк заманда *Византиялар* тарафынан төҙөлгән Ергә батҡан һарайы ла – боронғо сәнғәттең аҫыл бер әҫәре. Ошо йорттан бер быуат элек барлыҡҡа килгән һәм, өҫтәмә биналар менән киңәйә торғас, XIX быуатта инде дүрт корпуслы комплексҡа еткерелгән Топкопы һарайында бөгөн Төркиәнең генә түгел, донъяның иң бай тарих музейҙарының береһе урынлашҡан. Ғәрәп хәлифтәре Әбүбәкер, Ғәли, Усман һәм Ғүмәрҙәрҙең ҡылыстары эленгән, төрлө дәүерҙәге төрөк батшаларының, ғәскәр башлыҡтарының, башҡа атаҡлы шәхестәрҙең йорт йыһаздары, кейем-һалымдары, ҡоралдары, алтын-көмөш әйберҙәре ҡуйылған, һарайҙа йәриәләр йәшәгән шарттар күрһәтелгән. Яҙма ҡомартҡылар ҙа байтаҡ. Мәҫәлән, 656 йылда Ҡөрьән уҡып ултырған ерендә сәнсеп үлтерелгән ғәрәп хәлифе Усмандың ҡан сәсрәгән Ҡөрьәне ҡуйылған. 1750 йылда яһалған бер ҙур сәғәт һаман әле ваҡытты дөрөҫ күрһәтеп йөрөп ята.

Урта быуаттарҙан һуң Византия традицияларын киң файҙаланып, төрөктәр күп кенә һарайҙар, мәсеттәр һәм башҡа биналар төҙөгән. Уларҙың байтағында хәҙер музей. Гүзәл архитектура өлгөләре булараҡ иң әһәмиәтлеләре: Баязит ямие (1505 йылда төҙөлөп бөткән).

Тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыһы булған һәр бинаның тип әйтерлек үҙенә хас легендаһы бар. Мәҫәлән, төрөк батшаһы Солтанәхмәт: «Үҙе ҙур, үҙе гүзәл бер мәсет һалығыҙ, алтын манаралы булһын», – тигән әмер биргән. Оҫталар мәсетте һалалар. Әммә, самалап ҡарайҙар, манара өсөн алтын етерлек түгел. Ни булһа ла булыр тиҙәр ҙә алты манара ҡуялар. Солтанәхмәт мәсетте ҡабул итергә килә. «Ҡайҙа мин әйткән алтын манара?» – ти. Төҙөүсе оҫталар: «Эй батшабыҙ, ғәфү итә күрегеҙ, ғәйеп беҙҙә. Һеҙҙең «алтын манара» тигәнегеҙҙе беҙ «алты манара» тип хата аңлағанбыҙ. Шуға күрә алты манара ҡуйҙыҡ», – тигән булалар. Батша, был көйө лә йыһанда бер икән был мәсет, тип ғәфү иткән, ти, төҙөүселәрҙе. Солтанәхмәт Мәсете ысынлап та донъяла алты манаралы берҙән-бер мәсет, тиҙәр.

Стамбулда 33 китапхана бар. Шуларҙың иң тәүгеһе 1661 йылда, икенсеһе 1669 йылда эшләй башлаған. Китапханаларҙың иң ҙурҙары: Баязит китапханаһы, Сөләймәниә китапханаһы, Университет китапханаһы. Мин ошо күренекле китапханаларҙа ҡаҙындым. Уларҙа, баҫма китаптар менән бергә, дини һәм донъяуи темаларға арналған ғәжәп күп ҡулъяҙма әҙәрҙәр тупланған. Был бай ҡулъяҙма мираҫ фондында, шикһеҙ, «Урал төрөктәренең» – башҡорттарҙың үткән тарихына, мәҙәниәтенә ҡараған ҡайһы бер материалдар ҙа барҙыр. Әммә хәҙергә быны белеү мөмкин түгел. Сөнки ҡулъяҙмаларҙы тикшереү, классификациялау, уларға ғилми тасуирлама үткәреү хәтһеҙ элек башланһа ла, был эштең осо-ҡырыйы күренмәй әле. Боронғо текстар өҫтөндә эшләүселәр Урал-Волга буйына ҡағылышлы материалдар хаҡында өҙөп кенә бер ни ҙә әйтә алманылар. Ҡулъяҙма ҡомартҡылар каталогын төҙөү, ул каталогты том-том итеп баҫтырырға әҙерләү эше Стамбулда яңы башланып тора. Шулай ҙа беҙҙең өсөн әһәмиәте булған айырым ҡулъяҙма текстарҙы осратырға мөмкин.

### *Мөғтәбәр башҡорттар*

XIII быуатта Египетта мәмлүктәр сифатында башҡорттарҙан ике күренекле эшмәкәр булғаны беҙгә билдәле ине инде. Уларҙың береһе – шунда

әмир булып торған Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди, икенсеһе – шағир Насретдин ан-Насри.

Стамбул университеты китапханаһында һаҡланған бер тарихи ҡулъяҙмала был икәүҙең реаль шәхес булыуҙары раҫлана, шулай уҡ әлегәсә беҙгә мәғлүм булмаған тағы бер нисә юғары дәрәжәле боронғо башҡорт эшмәкәрҙәре күрһәтелә. Шуларҙың икеһе тураһында әйтелгән ҡыҫҡаса белешмәләрҙе килтерәйек:

Боронғо документтарҙың шаһитлыҡ итеүенә ҡарағанда, «башҡорттарҙан бөйөк һәм мөғтәбәр әмирҙәр Иранда илсе хеҙмәтендә булғандар. Шуларҙың Ғазанхан тигән бер башҡорт генералы, 1299 йылда Анатолияла булған Сөләмеш күтәрелешен тасуир иткән Ҡотлоша Наян һәм Жобан Ноян менән бергә, өсөнсө бөйөк әмир булараҡ телгә алына, йәнә Олжайту хан заманында Сыраҡан Башҡорт исемле бер бөйөк башҡорт генералы булғанлығы мәғлүм. Уны улустан килгән тиҙәр, йәғни Джучи улусынан килгән була».

Был ҡулъяҙма материалда «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының тарихи ерлеген анығыраҡ билдәләү һәм Иҙеүкәйҙең, шулай уҡ уның улы Мораҙымдың шәхесен асығыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн ярҙам итә торған мәғлүмәттәр ҙә бар. Был мәғлүмәттәр, йыйып әйткәндә, түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала.

XIV быуаттың өсөнсө сирегендә Башҡортостанда монгол нәҫеленән булған томан бейҙәренең хакимлығы көсәйә. Икенсе яҡтан, күсмә ҡәбиләләрҙең дүрмән ырыуы күтәрелә. Мәхмүдәк тигән бер бей – Ҡанбай исемле хандын улы – бик күп ырыуҙарҙы үҙенә буйһондороп, абруйлы хан булып китә. Ҡаңғырат һәм Салйыуыт бейҙәре Мәхмүдәктең яу башлыҡтары булараҡ дан ҡаҙаналар. Мәхмүдәк хан төмән бейе Тайбуғаның улы Ядигәр мырҙаны ла еңә. Әммә төмәндәрҙең манғыт ҡәбиләһенән күтәрелеп сыҡҡан Нуретдин (Нурадин) бей береһенә лә бирешмәгән. Ул – Еҙеге (Иҙеүкәй) улы. Нуретдин, йәки Нурадин, сәсәңдәрҙең сәсәне Ҡатай Ғәли бейҙе үҙе менән бергә алып йөрөр булған һәм ғүмере буйы башҡорттар араһында йәшәгән. Башҡорттар Нурадинды Мораҙым тип атағандар, уның хаҡында әҫәрҙәр сығарғандар. Мораҙым үҙе лә шиғырҙар ижад иткән.

Шул рәүешле Нуғай урҙаһы көсәйеп китә. Мораҙымдан һуң бөтә Башҡортостанда уның улдары һәм ейәндәре хакимлыҡ итә. Ейәндәре: Муса мырҙа, уның улдары – Шихмамай, Исмәғил; Исмәғилдең улдары – Урус, Тәнәхмәт; Тәнәхмәттең улы – Иштирәк мырҙа.

Шихмамай үҙенең атаһы Муса мырҙа хаҡында ошондай ҡобайыр ҡалдырған:

Идел басы Ирәнмән тау
Мәнем атам Мусадың
Иле ҡунған жире иде;
Жайыҡ басы ҡара урман
Мәнем атам Мусадың
Яз яйлаған жире иде;
Ҡыҙыл, Өйшүк, Бестамаҡ
Мәнем атам Мусадың
Ҡыс ҡыслаған жире иде...

Бында шуныһы ла ҡыҙыҡ һәм иғтибарға лайыҡ, мин 1970 йылда Миәс ҡалаһында йәшәүсе, хәтерендә күп кенә боронғо поэтик ҡомартҡыларҙы һаҡлаусы Хәҙисә Ҡусабаеванан «Мамай хан хикәйәте» исемле быға тиклем мәғлүм булмаған бер ҡобайыр яҙып алғайным. Ул үрҙә исемләнгән Шихмамай тигән нуғай мырҙаһы хаҡындағы әҫәр булып сыҡты. Юғарыла туғыҙ юллыҡ шиғыр Ҡусабаеванан яҙып алынған ҡобайырҙа ла бар. Ул унда Шихмамайҙың үлем язаһын ҡабул итер алдынан әйткән һуңғы һүҙе рәүешендә бирелә.

Ҡульяҙмаға ҡарағанда, Муса мырҙаның улдары һәм ейәндәре хатта XVII быуат башына ҡәҙәр Башҡортостанда үҙҙәренең ханлыҡ династияһын һаҡлап килгәндәр: улдары – Садиҡ мырҙа (1540 йылға тиклем), Шихмамай (1540-1548 йылдарҙа), Йософ мырҙа (1548-1555), Исмәғил мырҙа (1555-1563); уларҙан һуң Исмәғилдең улы –Тәнәхмәт мырҙа (1563-1580); уның улы – Урмамбәт мырҙа (1580-1601) асылда Башҡортостанда идара итәләр.

Был мырҙалар шул тиклем абруйлы булалар, хатта Ҡазан, Әстрхан, Себер, ҡаҙаҡ, үзбәк хандары улар менән яҡындан аралашырға, ҡан ҡәрҙәше булырға тырышҡандар. Күчүм хан үҙе, мәҫәлән, Тәнәхмәттең кейәүе булған.

Стамбул университеты китапханаһындағы тарихи ҡульъяҙмала башҡорт ғәскәрҙәренең 1812 йылғы Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтарына юғары баһа бирелә. Был хаҡта ҡайһы бер немец һәм француз шағирҙарының, әҙиптәренең, шулай уҡ рәссамдарының үҙ заманында ҙур ҡыҙыҡһыныу менән яҙыуҙары әйтелә. Бөйөк немец шағиры Гете башҡорт атлылары менән Веймар ҡалаһында күрешкән, һәм был унда Көнсығыш менән ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуға сәбәпсе булған, тиелә. Башҡорт уҡсылары Веймар театрына баралар, шунда уларҙы Гете үҙе тәбрик итә. Башҡорттар, күрһәтелгән оло хөрмәткә яуап итеп, Гетеға уҡ менән йәйә бүләк итәләр. Ошо иҫтәлекле бүләкте бөйөк шағир һәр ваҡыт үҙ өйөндә тотор булған, хатта, инде олоғайған булыуына ҡарамаҫтан, баҡсаһына сығып йөрөгәндә ул үҙе менән башҡорт уҡ-йәйәһен алыр, уҡ атып күңел асыр булған. Башҡорттар менән, ә улар аша башҡа Көнсығыш халыҡтары менән дә Гетеның ихлас ҡыҙыҡһыныуы хаҡында шағирҙың дуҫы Каммерман да яҙған, тип әйтелә.

Башҡорт ғәскәрҙәре араһында ҡайһы бер уҡымышлылар үҙҙәре лә 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһында шиғри хаттар рәүешендә иҫтәлек ҡалдырырға тырышҡандар, Ғәскәри мулла Яҡшығол Ейәнсура улы, мәҫәлән Париждан тыуған иленә, Муса тархан Кучук улы тигән кешегә шиғыр менән хат яҙған. Шул хаттың түбәндәге дүрт юлы килтерелгән:

Аһ, дәриға, безне илебездән жода ҡылдың, фәләк,
Әйләнеп, баш, ҡайт, диеп, һәр көндә йөз-мең ғәм йәмәк
Без тәүәккәл әйләдек, башны ходаға тапшырып,
Нә ачып, яр булса безгә һәфти асмандин мәләк.

Хәҙерге телгә күсергәндә:

Аһ, аяныс, беҙҙе илебеҙҙән айырҙың, яҙмыш,
Әйләнеп, баш, ҡайт, тип, һәр көн йөҙ-мең теләк теләйбеҙ.
Беҙ тәүәккәл иттек, башты хоҙайға тапшырып,
Ҡурсалаһын беҙҙе фәрештә, ете ҡат күген асып.

Ҡульъяҙма, был шиғырҙы яҙыусы Яҡшығол Ейәнсура улы – заманына күрә ярайһы уҡ шағир, ә Муса тархан Кучук улы шиғыр һөйөр уҡымышлы кеше булған, тип фараз ителә.

***Алты ук***

Босфор ике ағымлы, тигәйнем. Әммә бер Босфор ғынамы һуң! Бөтә Төркиә ике ағымлы. Ҡапма-ҡаршы ике социаль-сәйәси ағымдың бәрелеше ни ҡәҙәр көслө, ни тиклем аяуһыҙ икәнен илдең бөгөнгө хәле аныҡ күрһәтеп: тора.

XX быуаттың тәүге сирегендә, 1918–1923 йылдарҙа, бөтә Төркиәне солғап алған милли-азатлыҡ көрәше тарихи еңеүгә килтерҙе. Һөҙөмтәлә быуаттар буйы йәшәгән феодаль-монарх ҡоролошо емерелә, республика ҡоролошо урынлаша. Яҡын һәм Урта Көнсығыш дәүләттәре араһында тәүге парламент барлыҡҡа килә.

Дөрөҫ, был осорҙа әле Төркиәлә эшселәр синыфы бик аҙ һанлы һәм сәйәси яҡтан йомшаҡ була. Шуға күрә төрөк халҡының милли-азатлыҡ көрәшенә буржуазия етәкселек итә, сәйәси етәкселектең башында генерал, инҡилаптан һуң Төрөк республикаһының беренсе президенты, Халыҡ-республика партияһының лидеры Мостафа Кемал паша тора, артабан ул Ататюрк тигән фамилия менән дан ала. (Ататюрктан һуң килгән дүрт президенттың да өсөһө генерал була: Иненю, Гюрсель, Сунай.)

Кемал инҡилабы исеме менән аталып киткән 1923 йылғы буржуаз инҡилап илдең иҡтисади һәм мәҙәни тормошон яңы, алдынғы йүнәлештәге юлға күсерә. Күпме ғүмер бөтә Османлы империяһын ҡаплап торған ҡара төн – мосолманлыҡ фанатизмы төнө – шулай үтә, бик үк аяҙ булмаһа ла, халыҡ өсөн көн тыуа. 1924 йылдың 3 мартында һуңғы төрөк хәлифе Абдулмәжит, ярғанат һымаҡ, ана шул ҡараңғы төн менән бергә китә. Ошо мәлдән алып, дини мәҙрәсәләр ябыла, ислам мәҙһәптәре туҡтатыла, шәриғәт урынын гражданлыҡ кодексы ала. Төрөк яҙыуы ғәрәпсәнән латин хәрефтәренә күсерелә, хатта Ҡөрьәнде лә төрөк теленә тәржемә итәләр, һәм уны мәсеттәрҙә ғәрәп телендә уҡыу тыйыла. Фәс тигән баш кейеме «төрөклөк билдәһе» булыуҙан туҡтай, ә сәллә фәҡәт дин әһелдәре өсөн генә ҡалдырыла; ирҙәр өсөн күп ҡатын алыу тыйыла, ҡатын-ҡыҙ бөтөнләйгә бөркәнсеген һала. Йома көн урынына йәкшәмбе ял көнө итеп иғлан ителә. Инҡилап фәс менән бөркәнсектән мәғарифҡа,

әҙәбиәткә, сәнғәткә күсә, ижтимағи үҫештең һәр күҙәнәгенә үтеп инә. Барыһын да хәрәкәткә килтерә.

Төрөк инҡилабы характеры һәм нәтижәһе менән буржуаз-демократик түңкәрелеш булһа ла, Бөйөк Октябрь социалистик инҡилабының туранан-тура тәьҫире аҫтында барлыҡҡа килде. Киҫкен ижтимағи һынылыш булараҡ ул, тәбиғи, төрөк йәмғиәтенең үҙе эсенән, бары тик уның үҫеш ҡанундары нигеҙендә, шул ҡанундарҙың логик эҙемтәһе булып килеп сыҡты. Беренсе донъя һуғышы осоронда уҡ инде Төркиәлә монархия менән хеҙмәтсәндәр араһында, дин менән сәйәсәт араһында ҡаршылыҡтар ифрат киҫкенләшкән була. Быны, мәҫәлән, Фатих Кәримиҙең «Стамбул мәктүптәренән» дә шаҡтай асыҡ күрергә мөмкин.

Ырымбурҙа сыҡҡан «Ваҡыт» гәзитенең мөхәррире Фатих Кәрими 1912 йылдың ноябренән алып 1913 йылдың мартына ҡәҙәр Стамбулда була, ошо осор эсендә «Ваҡыт»та уның көн һайын тип әйтерлек «Стамбул мәктүптәре» тигән исем менән очерктары баҫыла. Ф. Кәримигә шул заманда уҡ Лотфи Фекри тигән ҡыйыу сәйәсәт ҡарашлы бер нәшир һәм мөхәррир, әлбиттә, үҙе ише башҡа бик күп күптәрҙең дә уйын белдереп, ҡатын-ҡыҙға азатлыҡ бирмәй тороп, динде сәйәсәттән һәм дәүләтте идара итеү эшенән айырмай тороп, Төркиә лә, бүтән телә‍гән бер мосолман иле лә бер ҡасан да ижтимағи прогресс юлына баҫа алмаясаҡ, тигән һәм үҙенең бөтә эшмәкәрлегендә ошо алдынғы ҡарашлы идеяларҙы үткәргән.

Төрөк инҡилабы, айырым алғанда, бына ошондай ғәҙел һәм тәүәккәл ижтимағи фекерҙәрҙең кәүҙәләнеше ине.

Буржуаз-демократик инҡилап нәтижәһендә барлыҡҡа килгән яңы төрөк дәүләтенең ҡоролошон һәм уның үҫеш идеяһын сағылдырыуы яғынан Халыҡ-республика партияһының 30-сы йылдар башында ҡабул иткән эмблемаһы бик характерлы. Ул алты уҡ һүрәтенән тора. Һәр уҡ партия программаһының төп пункттарынан береһен символлаштыра. Беренсе уҡ – республикасылыҡ – Төркиә өсөн республика берҙән-бер ҡулай дәүләт формаһы тигәнде аңлата; икенсе уҡ – милләтселек – төрөк милләтенең бойондороҡһоҙлоғо һәм

күтәрелеше өсөн көрәшкә әҙер булыу билдәһе; өсөнсө уҡ – халыҡсылыҡ – синыфтарға «бүленеүҙе белмәç» дөйөм халыҡ суверенитетын һүрәтләндерә; дүртенсе уҡ – дәүләтселек – иҡтисадта, бигерәк тә сәнәғәттә, дәүләт секторын үçтерергә тырышыуҙы, йәғни дәүләт капитализмын нығытырға ынтылыуҙы күрһәтә; бишенсе уҡ – донъяуисылыҡ – дәүләттең дини принциптарға түгел, ә донъяуи нигеҙҙәргә ҡоролғанлығын символлаштыра; алтынсы уҡ – инҡилаплылыҡ – Кемал Ататюрк етәкселегендә булдырылған инҡилап идеяларына тоғро булыуҙы аңлата.

Халыҡ-республика партияһының эмблемаһы Ататюрк доктринаһының асылына бик ярашлы. Ә был доктринаның асылы Төркиә «үҙенә айырым» юл менән, синыфҡа-нигә «бүленеүҙе белмәç» республика булып үçергә тейеш, тигән концепцияға ҡайтып ҡала. Партияның программаһында шулай тип яҙылған да ул. «Беҙ, – тиелгән унда, – Төрөк республикаһының халҡын айырым синыфтар ҡушылмаһы итеп түгел, ә хосуси һәм ижтимағи, тормошто хеҙмәт бүленеше принциптары буйынса һәр төрлө профессияларға бүленмәле бер бөтөн итеп ҡарайбыҙ».

Халыҡ республика партияһы ла, башҡа буржуаз партиялар ҙа ана шулай ҡарай һәм билдәләй, ә ул билдәләгәнде – «социаль гармония» идеяһын – алты уҡ һынландыра. Әммә ысынында барыбер ярашыу юҡ; алты уҡ алты яҡҡа «һерәйеп тора», ә Төркиә үҙ яйына, шул уҡ бер капиталистик юл менән, буржуаз йәмғиәттең Маркс һәм Ленин асҡан закондары буйынса үçә бирә. Синыфтар алыша. Синфи көрәш ҡыҙа һәм киçкенләшә бара. «Гармонння» тигәндең бөгөнгө Төркиәлә әçәре лә юҡ. Әлбиттә, ул элек тә булмаған.

Алдынғы төрөк яҙыусылары, бигерәк тә яңы реалистик әҙәбиәттең тәүге биттәрен асҡан Садри Эртем, Сабахатдин Али, Сәит Фаик кеүек иң күренекле әҙиптәр, төрөк буржуазияһы тылҡыған «социаль гармония» идеяһын 30-сы йылдарҙа уҡ инде пыран-заран килтергәндәр.

«Европа кешеһе, – тигән яҙыусы-философ Садри Эртем, – йә астар синыфына, йә туҡтар синыфына ҡарай. Уның зауығы ла, фекере лә шуға ярашлы... Байҙар зауығы менән астар зауығы араһында идеологиялар, билдәле

философик системалар тора... Идея ағымдары һәм сәнғәт теориялары, хатта жанрҙар ҙа бөгөн «инҡилап» һәм «реакция» төшөнсәләре менән бәрелешәләр.

«Төрөк Прометейы» тигән исем бирелгән Сабахатдин Али әҫәрҙәрендә капитал баш булған йәмғиәттең тап ана шул асы менән туғы ғәжәп дөрөҫ тә, аныҡ та һүрәтләнгән. Был бөйөк яҙыусының һәр әҫәре, мәҫәлән, совет уҡыусыларына яҡшы таныш «Арба», «Төшөмлө йорт», «Айран», «Ҡаҙҙар», «Ҡайнар һыу», «Дошмандар» хикәйәләре, – буржуаз Төркиәләге фажиғәле социаль тормоштоң асыҡ сәхифәһе ул. Инҡилаптың төп социаль мәсьәләләрҙе, айырым алғанда аграр проблеманы, хәл итмәүе утыҙынсы йылдар башында уҡ инде С. Али лирикаһын ауыр тойғоло иткән. Анкаралағы Милли китапханала «Атсыз мәжмуа» («Исемһеҙ йыйынтыҡ») тип аталып утыҙынсы йылдарҙа айға бер сыҡкан альманахтың 1932 йылғы февраль һанын ҡарап ултырғанда, С. Алиҙың «Ҡара язы» («Ҡара яҙмыш») тигән шиғыры күҙгә ташланды. Унда, мәҫәлән, буржуаз инҡилабынан һуң да хеҙмәт кешеһенең ҡара яҙмышлы булып ҡалыуы әйтелгән:

Үтмәне дуҫҡа һүҙебеҙ,
Юлдарҙа ҡалды күҙебеҙ,
Ергә төбәлде йөҙөбөҙ,
–Шунда ҡара яҙмышыбыҙ.
Шишмәләр эселмәҫ булды,
Сәскәләр асылмаҫ булды,
Дуҫ беҙгә бер көлмәҫ булды, –
Шундай ҡара яҙмышыбыҙ.

Төркиәләге инҡилап, буржуаз характерҙа булғанлыҡтан, тарихи сикләнгән инҡилап ине. Ул төрөк йәмғиәтенең социаль-иҡтисади нигеҙҙәренә ҡағылманы. Шулай ҙа ул алдынғы күренеш, йәмғиәт үҫешендә ныҡлы бер аҙым алға китеү ине.

Икенсе донъя һуғышынан һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә власть башында Демократик партия (Мендерес хөкүмәте) торған 1950–1960 йылдарҙа, Төркиәлә өлгәшелгән инҡилаби ҡаҙаныштарҙан ныҡ ҡына артҡа сигенеү барлыҡҡа килә. Илдә реакция көсәйә. Был сәйәсәтте лә, иҡтисадты ла Америка Ҡушма

Штаттары мәнфәғәтенә буйһонороуҙан килеп тыуған хәл ине. Үткәнгә боролоу күренештәре идеология һәм мәҙәниәт өлкәһендә айырыуса асыҡ сағыла. Мендерес хөкүмәте, мәҫәлән, намаҙҙы ғәрәп телендә уҡыуҙы ҡайтанан индерә, аҙнаһына өс көн радио аша Ҡөрьән уҡыуҙы ҡанунлаштыра, башланғыс һәм урта мәктәптәрҙә дин дәресе уҡытыла башлай, юғары уҡыу йорттарында ислам тәғлимәте факультеты эшләй. Илленсе йылдарҙа Төркиәлә биш мең яңы мәсет төҙөлә, шул уҡ ваҡытта ун алты мең ауыл мәктәпһеҙ ултыра бирә. Панисламистар хәрәкәте көсәйә, улар иҫке ғәрәп алфавитына кире ҡайтыуҙы күтәреп сығалар. Дөрөҫ, үтә реакцион хөкүмәт түңкәрелгәс (премьер-министр Аднан Мендересҡа үлем язаһы бирелгәс), илдең иҡтисадын һәм мәҙәниәтен үҫтереүҙә Кемал Ататюрк принциптары әҙме-күпме яңынан тергеҙелә. Әммә АҠШ үткәргән реакцион сәйәсәткә таянған ҡара груһсылар[1] ҙа бирешергә уйламай. Шуға күрә Төркиә ҡалаларында, бигерәк тә Анкара менән Стамбулда йәштәр ҡуҙғалышы, студенттарҙың полиция отрядтары менән ҡораллы бәрелеше булғылап тора. Анкара университеты студенттарының 1971 йылдың майындағы ҡоралы күтәрелешендә ике яҡтан да яраланыусылар, үлеүселәр булған. 350 кеше ҡулға алынған. Баш бирмәҫ студенттарҙы артабан «теҙгенләр» өсөн Анкаралағы Урта Көнсығыш техник университетына ректор итеп хәрби түрә – генерал-лейтенант Шәүкәт Ренцу ҡуйылған. Телевидение һәм радиола ла башлыҡ булып генерал Муса Огунь ултыра. Быныһы «Милләт» гәзитендә (1 февраль, 1972), эште үҙгәртеп ҡороп булманы, быйыл август айында отставкаға китәм, тип белдереү яһарға ла өлгөргән инде.

Ә хөкүмәт башлыҡтары? Улар ҙа оҙаҡ ултырмай. Илдең төп районларына уҙған йылдың апрелендә индерелгән ғәҙәттән тыш хәл һаман дауам итә әле, ә шунан бер ай элек хөкүмәт башына килгән премьер-министр Нихат Эрим бер йыл тулып үтеүгә отставкаға ла китте.

***«Аяҡтары, ҡулдары бағланған»***

Анкара ла, Стамбул да Төркиәнең башҡа ҡалалары ла банк исемдәре менән ҡапланған. Атлаған һайын шуларҙы уҡыйһың. Ниндәй генә банкылар юҡ

[1] ГРУ – Баш разведка идаралығы (*төҙөүселәрҙән*)

бында: «Төрк тижарәт банкасы» («Төрөк сауҙа банкыһы»), «Төркиә иш банкасы», «Япы вә креди банкасы» («Төҙөлөш һәм кредит банкыһы»), «Османлы банкасы», «Анадолу банкасы» («Анатолия банкыһы»), «Гаранта банкасы», «Акбанк», «Өгрәтмәнләр банкасы» («Уҡытыусылар банкыһы»)... Капитализм донъяһының күҙгә ташланып торган тәүге тышҡы билдәләре шул булалыр инде.

Шулай ҙа иҡтисади йәһәттән Төркиә ҡеүәтле капиталистик илдәрҙән һаналмай. Етештереүсе көстәр шәбәйеп үҫеп китә алмаған. Дәүләттең эске баҙары ла, тышҡы баҙары ла, алға киткән илдәр менән сағыштырғанда, байтаҡ ҡайтыш, тиҙәр белгестәр. Бөтә Төркиәне эре һәм урта «хәлле», шулай уҡ ваҡ буржуазия, шуларҙың эреле-ваҡлы фирмалары баҫып алған. Сәнәғәт тиһеңме, ауыл хужалығын алаһыңмы, төҙөлөш эшенә йәки юл хужалығына ҡарайһыңмы, сауҙа селтәренә күҙ һалаһыңмы – бөтәһе лә ана шул фирмалар ҡулында. Әйтерһең, бөтә Төркиә фирмаларға тыңҡыслап индерелгән. Төркиә фирмаларға һыймай ыҙалана.

Шул уҡ ваҡытта Төркиәлә «етмәгән», уны бәләкәй күргән компаниялар ҙа юҡ түгел. Былар инде ғәләмәт ҙур һәм ҡеүәтле сауҙа-сәнәғәт берекмәләре. Шуларҙан халыҡ-ара капитал донъяһында киң билдәлелек алғаны – Ваһби Коч тигән төрөк монополисыныҡы. Уның берекмәһенә йөҙләп сауҙа һәм сәнәғәт фирмалары ҡарай. Иң эреләре Стамбулда урынлашҡан. Был миллиардерҙың һуңғы йылдарҙағы байлығының теүәл иҫәбен белеүсе лә юҡ тиҙәр. 1965 йылда ул дәүләткә 13 миллион 883 мең лира керем һалымы түләгән. Бына ошоға ҡарап, эре капиталистарҙың йыллыҡ керемен күпмелер күҙ алдына килтерергә мөмкин.

Кочтың аппетиты ҙур. Уға Төркиә генә етмәй, был ғына аҙ уға. Ул АҠШ-тағы «Дженерал электрик» тигән монополистар берекмәһенең Төркиә филиалын ойоштorған, һәм электр лампалары етештереүҙә ул үҙ илендә байтаҡ йылдар буйы монополист булған.

Үҙенең кеше йәнле «халыҡ» капиталисы икәнен күрһәтергә йомартланып, шуның менән ил эсендә лә, ил тышында ла абруй ҡаҙанырға тырышып, Коч 21

уҡыу йортона 106 «В. Коч стипендияһы» тәғәйенләгән. 1960 йылғы дәүләт түңкәрелеше лә, унан һуңғы үҙгәрештәр ҙә Кочҡа ел-ямғыр тейҙермәгән.

Тәбиғи, буржуаз Төркиәләге хосуси капитал сит ил капиталы менән тығыҙ бәйләнештә үҫә бара. Бер Стамбулда ғына ла 700-ҙән артыҡ экспорт, 1500-ҙән ашыу импорт фирмалары бар. Эреле-ваҡлы ошо фирмалар бөтә Төркиәләге экспорт-импорт фирмаларының яртыһынан ҙурыраҡ өлөшөн тәшкил итә. Сауҙа мөнәсәбәттәре менән башланып киткән был бәйләнеш производство сфераһына ла барып ингән, һөҙөмтәлә төрөк илендә сит ил монополияларының, айырыуса Америка монополияларының, эшмәкәрлеге үтә әүҙемләшкән. Төркиә өсөн кәрәкле нефттең, мәҫәлән, һигеҙҙән ете өлөшөн сит ил компаниялары эшкәртә, нефттән етештерелгән әйберҙәрҙең ундан алты өлөшөн Төрөк республикаһында һатыусылар – американдар. Эре сәнәғәттең башҡа күп кенә мөһим тармаҡтары ла асылда сит ил монополияларының туранан-тура ҡыҫылышынан башҡа үҫмәй. АҠШ экспансияһы Төркиә хөкүмәтенә, уның бөтә иҡтисади сәйәсәтенә көслө тәьҫир иткән. Республиканың етәксе даирәләре асылда дәүләт ойошмаларын аҡрынлап хосуси капиталдан йотторoу юлына баҫҡандар. Нәтижәлә Төркиә сит дәүләттәргә, иң элек АҠШ-ҡа, муйындан бурысҡа батҡан.

Төрөк хеҙмәтсән халҡы элек тә тынғы-рәхәт күрмәгән, хәҙер ҙә уны белмәй. Төрөк иле әллә ҡасан инде донъя империализмының Яҡын Көнсығыштағы киҫкен ҡаршылыҡтары усағына әүерелгән. Быуаттың унынсы йылдарында публицистик мәҡәләләр ебәреп ятҡан Фатих Кәрими ысынында инде үҙ иркен юғалтҡан Төркиә хаҡында: «Бер яҡтан, иҫке ғәһеднамәләр[1] менән, – тип яҙған үҙе редакторы булған «Ваҡыт» гәзитендә (1913, 4 ғинуар), – икенсе яҡтан, иҡтисад, тижарәт вә сәнәғәт йәһәттәренән булған төшөнкөлөк менән Төркиәнең аяҡтары, ҡулдары бағланған. Ул үҙе теләгәнсә эш йөрөтә алмай, йөрөтөргә ирек бирмәйҙәр».

Бөгөнгө Төркиәгә ҡарата быңдай билдәләү айырыуса тура килеп тора. Халыҡ-ара империализмдың агрессив пландарына ҡатнашыуы менән, ил һәм

[1] Ғәһеднамә – договор, йөкләмә.

халыҡ теләмәгән договорҙарға ҡул ҡуйып үҙен бойондороҡло итеүе менән ысынлап та Төрөк республикаһының «аяҡтары, ҡулдары бағланған. Ул үҙе теләгәнсә эш йөрөтә алмай, йөрөтөргә ирек бирмәйҙәр». Төркиә бары тик 1923–1939 йылдарҙа ғына бойондороҡһоҙ ил булып йәшәп ҡалған.

Хәҙерге көндә был илдә капитал капиталды йота. Капиталды ғынамы һуң әле, дәүләттең үҙен дә, уның халҡын да йоторға әҙер ул. Йотоусылар төркөмө төрөк эшсеһен, крәҫтиәнен һәм урта интеллигентын ифрат ауыр иҡтисади хәлгә ҡуйған. Шуға күрә алдынғы көстәр үҙҙәрен гел генә социаль мәнфәғәт көрәшендә итеп һиҙәләр, синфи орандарын әленән-әле ишеттереп, хәрәкәт-сығыштарын гел генә ҡабатлап торалар, һуңғы осорҙа эшселәр һәм йәштәр хәрәкәте ифрат көсәйгән. Бигерәк тә аҡыл хеҙмәте кешеләре араһында, студенттар мөхитендә социалистик идеялар киң тарала башлаған.

Төркиәлә йәшәүсе халыҡтың дөйөм һаны 35 миллион самаһы. Хеҙмәт йәшендәге кешеләрҙең 20 процентын ҡала һәм ауыл пролетариаты тәшкил итә. Производствола эш өҫтөндә имгәнеүселәр һаны буйынса Төркиә донъяла беренсе урында тора. Был факт үҙе генә лә эш шарттарының ни ҡәҙәр хәтәр икәнен күрһәтә. Хатта шул хәтәр шарттарҙа эшләргә риза булып эш таба алмай ыҙаланыусылар ҙа саманан тыш күп. Хәҙерге көндә Төркиәлә эшһеҙҙәр һаны өс миллионға етеп бара. Ҡыҙыу ураҡ өҫтөндә лә бер миллиондан ашыу ауыл батрагына эш табылмай. Бәхет эҙләп сит илдәргә китеү бында ғәҙәти хәлгә әйләнгән. «Аҡшам» (5 ғинуар, 1971) һәм «Адалет» («Ғәҙелиәт», 23 февраль, 1972) гәзиттәрендә бирелгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, һуңғы йылдарҙа 600 мең төрөк эшсеһе эш эҙләп сит илдәргә сығып китергә мәжбүр булған. 1972 йыл башында инде ситкә, күбеһенсә ГФР-ға, Голландияға, Бельгияға һәм Францияға китеү өсөн сираҡка яҙылыусыларҙың һаны 1 миллион 114 меңгә еткән. Шуларҙың 850 меңе квалификацияһыҙ, 264 меңе квалификациялы эшселәр. Әммә ул илдәргә ситтән 65 мең генә эшсе кәрәк икән.

Үҙ илендә эшләр эше булғандарҙың да тормош хәле еңел түгел, әлбиттә. Эш хаҡы түбән. Дәүләт ойошмаларында хеҙмәт итеүселәрҙең дә, уҡытыусыларҙың да алған эш хаҡы йәшәү минимумын тәьмин итә алмай.

Уҡытыусыларҙың Стамбул йәмғиәте баҫтырған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ҡалалағы һәр 100 уҡытыусының 75-е 400 лиранан түбән айлыҡ эш хаҡы ала.

Йыртҡыс һәм йотҡос капитал төрөк ауылының да елеген һура. АҠШ-тың мутлыҡ менән ирекһеҙләп таҡҡан «ярҙамы», Төркиәнең донъя империализмының агрессив пландарына ылыҡтырылыуы республиканың бөтә иҡтисадын ҡаҡшата, социаль тормоштоң нигеҙҙәрен өйкәй, ҡаланы ла, ауылды ла берҙәй бөлдөрә. Ауыр социаль-иҡтисади хәл төрөк эшселәрен, крәҫтиәндәрен һәм интеллигенцияһын оҙайлы һәм дәһшәтле фетнәләргә күтәрелергә мәжбүр итә. Гәзиттәрҙән килтерелгән түбәндәге хәбәр өҙөктәре буйынса ғына ла бөгөнгө Төркиәнең көсөргәнешле социаль-сәйәси хәлен аҙмы-күпме күҙ алдына килтерергә мөмкин.

1971 йылдың 11 айында тормош хаҡы Анкарала 20 процентҡа, Стамбулда 18,1 процентҡа күтәрелгән. («Барыш» – «Именлек», 1 февраль, 1972.)

1972 йыл Төркиә өсөн тыныс башланманы, һәр ҡайҙа бомбалар ярылды, динамиттар шартлап, демонстрациялар, забастовкалар үткәрелде. Төркиә эске граждандар һуғышына табан атлай. («Милләт», 4 ғинуар, 1972.)

Уҡытыусылар профсоюзы эше буйынса хөкөмгә тартылған 18 кешенең 8-е туғыҙар йылға хөкөм ителде. (Тәржеман», 23 февраль, 1972.)

Хөкөмдән йәшеренеп йөрөүселәрҙе тотоуҙа ярҙам күрһәтеүсе граждандар өсөн 100 мең лираға тиклем аҡсалата бүләк билдәләнде. («Милләт», 5 ғинуар, 1972.)

Кисә Анкараның 11-се һанлы ғәҙәттән тыш судында «Дев генч» («Бөйөк йәшлек») ойошмаһының 227 ағзаһын хөкөм итеү процесы башланды. 43 ғәйепләнеүсенең күпселеге «Профессияғыҙ?» – тигән һорауға: «Инҡилапсы», – тип яуап бирҙе. Б. Эрдумду менән О. Чалышлар: «Беҙ марксист-ленинсылар», – тип яуап бирҙе. «Дев генчтың» генеральный председателе: «Судта миңә фәҡәт хаҡ демократ Атилла Сарп тип өндәшегеҙ, документтарығыҙға ла шулай яҙығыҙ», – тип ныҡышты. («Милләт», 22 февраль, 1972.)

Сталиндың «Марксизм һәм милли мәсьәлә» тигән китабын төрөк телендә баҫтырып сығарғаны өсөн Әҙәбиәт нәшриәтенең мөхәррире Мозаффар Эрдост 7

йыл ярым ҡаты режимлы төрмәлә ултырырға хөкөм ителде. («Зөфәр» – «Еңеү», 1 февраль, 1972.)

### *Йомортҡа баштар*

Америка империалистары, «Йомортҡа тауыҡты өйрәтмәй» фәлсәфәһенә таянып, алдынғы фекерле кешеләрҙе, үҙ иленең ысын патриоты булып ҡыйыу сығыш яһар яҙыусыларҙы, ғалимдарҙы, ижтимағи эшмәкәрҙәрҙе «йомортҡа баштар» тип йөрөтәләр икән. АҠШ-тың үҙендә лә, уның «ярҙамына» дусар булған башҡа илдәрҙә лә «йомортҡа баштарҙың» эшмәкәрлеге үҙенә бер дәһшәтле көс әһәмиәтен алған. Был көстөң хеҙмәтсән халыҡҡа тәьҫире ифрат ҙур икән.

Анкарала ла, Стамбулда ла физаҡәр «йомортҡа баштар» күп. Ҡайһы берҙәре, эҙәрләүҙән ҡасып, ваҡытлыса үҙ илен ташлап китергә мәжбүр булған. Шундайҙарҙың береһе – күренекле шағир һәм публицист, йәмәғәт эшмәкәре Невзат Устюн. Советтар Союзының дуҫы Устюн 1968 йылда Башҡортостанда, Мостай Кәримдә ҡунаҡта булып та киткәйне. Уның Стамбулда сыҡҡан «Төркиәдәге Америка» тигән китабы «Америка и американцы в Турции» исеме менән беҙҙең илдә лә баҫылған (Мәскәү, 1971). Был тиклем дә ҡыйыу фекерле китап булыр икән! Гел генә факттарға нигеҙләнеп сәйәси памфлет формаһында яҙылған ошо китап американдарҙың Төркиәне иҡтисади-сәйәси һәм хәрби йәһәттән үҙҙәренә тамам буйһондороу юлында ике яҡлы (асыҡтан-асыҡ һәм йәшертен) алып барған эштәрен фаш итә, Төркиәлә хөкүмәт башындағы һәм хөкүмәт тирәһендәге кешеләрҙең Америка империалистары өсөн ҡоро ҡурсаҡ ҡына икәнен күрһәтә. Невзат Устюн китабының аҙағында, йомғаҡ рәүешендә яҙған юлдарҙа, бына нәмә ти:

«Америка һәм американдар Төркиәлә! Был темаға тағы ла әллә нисә йөҙ факт килтереп булыр ине. Американдар беҙгә генә түгел, бөтә донъяға ҡурҡыныс һалалар. АҠШ бөтә планетаны үҙ иҡтисади мәнфәғәте өсөн файҙаланырға ынтыла. Төрөк халҡын бәхетле итеү өсөн беренсе кәрәкле шарт – АҠШ-ты Төркиәнән айырыу. Америка дуҫлығы беҙҙең өсөн үтә ҡимммәткә төштө: милли ғорурлығыбыҙ тапалды, нефтебеҙ – американдар ҡулында,

йәштәребеҙ полиция таяғы аҫтына ҡуйылды! Был «дуҫлыҡ» күбебеҙҙең ғүмерен киҫте. Беҙ артабан үҫеү өсөн үҙебеҙ теләгән юлды һайлау мөмкинлеген юғалттыҡ, һәм иң аянысы – Төркиә империализмдың ҡара уйҙарын үтәүсе ҡоралға әүерелде.

Әммә беҙ баштарыбыҙҙы эймәнек һәм бер ҡасан да эймәбеҙ ҙә».

60-сы йылдар эсендә Төркиәлә сағыштырмаса уңайлыраҡ ижтимағи-сәйәси шарттар булып үтеүе нәфис әҙәбиәт өсөн дә эҙһеҙ ҡалмаған. Көнсығыш әҙәбиәте белгестәре шул осор Төркиәләге әҙәби процесҡа үҙенә бер боролош килтерҙе, әҙәбиәт яңы юл менән үҫә башланы, тип баһалайҙар. Ысынлап та, төрөк әҙәбиәтенең, айырым алғанда, поэзияның, тормошҡа яҡынайыуы, гражданлыҡ йүнәлешенә төшөп алыуы һиҙелә, поэзияның ижтимағи яңғырашы, идея пафосы ғәйәт аныҡ икәне беленә.

Илдә ижтимағи фекерҙең шаҡтай ҡыйыуланыуы, Назим Хикмәт традицияларының тәрәнәйә барыуы, марксистик әҙәбиәтте һәм донъяның алдынғы әҙәби художество өлгөләрен күпләп тәржемә итеү, әҙәбиәттәге «йомортҡа баштарҙың» реалистик ижад өсөн ҡаһармандарса көрәше һәм, шулар һөҙөмтәһендә, 50-се йылдарҙа дөрләп алған модернизм усағының хәҙер инде һүрелеүе, ә уҡыусыларҙың һаман талымһыҙлана барыуы – былар бөтәһе ла төрөк демократик әҙәбиәтендә артабан хәрәкәт итеү өсөн киң перспектива аса, уның төп үҫеш тенденцияларын билдәләй.

Замандың алдынғы шағирҙары үҙҙәренең әҫәрҙәрендә социаль мәсьәләләрҙе күтәреп сығалар, хеҙмәт кешеләренең ауыр тормошон һүрәтләйҙәр, уй-тойғоларын, теләктәрен сағылдыралар, социаль яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшкә саҡыралар. Шундай шағирҙарҙың иң күренеклеләре: Фазыл Хөсню Дагларжа, Омар Фаруҡ, Топрак, Жаһид Колеби, Жәйхун Атуф Ҡансу, Невзат Устюн, А. Ҡадир, Хәсән Хөсәин, Хәсән Ғиззетдин Динамо, Жаһид Ырғат, Мәлих Жәүдәт Андай, Оҡтай Рифат һ. б.

Төрөк дәүләтендәге киҫкен сәйәси хәлде үҙ дөрөҫлөгөндә асып биреү ҡыйыулығы һәм маһирлығы, ватандың яҙмышы өсөн бөтә йөрәктән борсолоу һәм шомланыу айырыуса Невзат Устюн поэзияһы өсөн хас. Шағир, тап аяу

белмәҫ публицистикаһындағы кеүек, шиғырҙарында ла асылда «аяҡтары, ҡулдары бағланған» Төркиәнең әсе яҙмышы өсөн американдарҙы йәне-тәне менән күрә алмай. Устюн үҙ уҡыусыларына: бына ҡарағыҙ, беҙҙе кәм-хур итеүселәр американдар улар, тип бармаҡ менән төртөп күрһәтә. Уның бер шиғырҙар йыйынтығы «Эй һин, америкалы!» («һей сен, америкалы!») тип атала ла. Унда, мәҫәлән, шундай юлдар бар:

Һин таланың,
Әйләндерҙең үртәлгән бушлыҡҡа
Ғишыҡты,
Баланы,
Дәртте;
Һин таланың,
Әйләндерҙең үртәлгән бушлыҡҡа
Иң ямғырлы болотто.

Мәлих Жәүдәт Андай кеше һәм йәмғиәт темаһына яҙған тәрән философик йөкмәткеле һәм юғары поэтик формалы «Быгауланған Одиссей» китабы менән бөгөнгө төрөк поэзияһы өсөн ваҡиға булырлыҡ әҫәр тыуҙырҙы, тиҙәр. Андай һымаҡ уҡ күренекле шиғыр оҫтаһы Оҡтай Рифат, модернистик мауығыуҙарынан төңөлөп, демократик поэзияның өлгөһө тип баһаланған «Ҡулдары бар азатлыҡтың» («Әлләре вар өзгүрлүгүн») тигән шиғырҙар китабы менән дан алған.

Бөгөнгө Төркиәлә модернизм поэзияһы ла көйрәй әле. Уның шиғирҙары донъяның фанилығы хаҡында яҙалар, тормоштоң дәһшәтле яғын ҡабартып күрһәтәләр, кеше ғүмеренең йөкмәткеһе мәғәнәһеҙлек тип ышандырмаҡ, кешене азатлыҡ көрәшенән биҙҙермәк булалар.

Әммә демократик йүнәлешле, реалистик әҙәбиәттең нигеҙе ныҡлы, киләсәге өмөтлө. Был уңай менән ҡыҙыҡлы бер фактты әйтеп үтергә кәрәк. Бынан бер нисә йыл элек үҙҙәрен «яңы реалистар» тип атаған бер төркөм йәш яҙыусылар күтәрелеп сыҡҡан. Программаларына: беҙ ижадыбыҙҙа марксистик философияға нигеҙләнәбеҙ, хеҙмәт кешеләре мәнфәғәтен күҙәткән, ижтимағи прогресҡа ярҙам иткән нәфис әҙәбиәтте үҫтереү бурысын ҡуябыҙ, тип яҙғандар.

Ижад ысулдарын «ғилми реализм» тип атағандар. Әммә артабан ныҡлап тамыр йәйгән реакция шарттарында был изге ниәтте ғәмәлгә ашырыу өсөн мөмкинлектәр булмаған.

Был хәл, тәбиғи, алдынғы уйлы «йомортҡа баштарҙы» бошондора. Улар хөкүмәттең шовинистик милли сәйәсәте менән дә риза түгелдәр, әлбиттә. Әммә буржуаз ҡоролош йәшәгән заманда милли мәсьәләне ғәҙел хәл итеү мөмкин түгел.

Төрөк теле – боронғо тел, матур яңғырашлы һәм Төркиәләге телдәрҙең бөтәһенә ҡарағанда ла еңел тел һанала. Шулай ҙа Советтар Союзынан барған төрки телле кеше өсөн төрөк менән аңлашыуы бер ҙә анһат түгел. Сәбәбе ябай уның. Беҙҙә халыҡтар, бигерәк тә ҡәрҙәш телле халыҡтар, тығыҙ аралашып, иҡтисад һәм мәҙәниәт йәһәтенән тәжрибә алышып, байлыҡтарын уртаҡлашып йәшәйҙәр.

Төрөк теле бүтән төрки телдәрҙән айырымланып йәшәй, бөтөнләй икенсе орбитала хәрәкәт итә, башҡа ориентация менән үҫә. Шул уҡ ваҡытта, нисек кенә берҙән-бер дәүләт теле булмаһын, үҙен солғап алған төрлө системлағы башҡа телдәрҙең йоғонтоһон кисерә. Белгестәр төрөктәрҙең һөйләү телендә ғәрәп-фарсы һүҙҙәре дөйөм лексиканың 30 процентын, әҙәби телдә 50 процентын тәшкил итә тиҙәр. Был әле кемалсыларҙың 20–30-сы йылдарҙа төрөк теленән ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен ай-вайлап «ҡыуғандан» һуң ҡалған проценттар. Ул йылдарҙа халыҡ теленә әллә ҡасан инеп үҙләшкән «мәктәп» һүҙен дә сығарып ташлағандар. Уның урынына «окул» тигән яһалма термин индергәндәр. «Окул» окумик (уҡыу) һүҙенән «эколь» (мәктәп) тигән француз өлгөһө буйынса яһалған. Байтаҡ ваҡыт ябай төрөктәр «окулды» аңламай йонсоған, заманса уҡытыуҙың берәй яңы төрө булалыр инде был тип «окул мәктәбе» тип йөрөткәндәр.

Төрөк телен, ғөмүмән мәҙәниәтен, байыҡтырыуҙа күрше грektарҙың ҡатнашлығы ифрат ҙур булған. Халыҡ хужалығының бөтә тармағында, фән һәм мәҙәниәттең һәр өлкәһендә борон-борондан урын алған грек төшөнсәләре, грек һүҙҙәре тулып ята. Грек теле аша күп кенә итальян һүҙҙәре, бигерәк тә диңгеҙ

хужалығына, балыҡсылыҡ эшенә бәйле һүҙҙәр килеп ингән. Кемал инҡилабынан һуң төрөк лексикаһына Көнбайыш Европа телдәренең йоғонтоһо ла көсәйеп китә. Тәбиғи, Төркиәнең үҙендә йәшәүсе халыҡтарҙың да, гректарҙан ҡала бигерәк тә курдтарҙың, төрөк теле үҫешенә тәьҫире бик ҙур.

Әммә, үткәрелеп килгән милли сәйәсәттән күренеүенсә, Төрөк хөкүмәте һәм буржуаз партиялар илдәге вағыраҡ милләттәрҙең тарихи миссияһы шуның менән тамам, хәҙер ул милләттәрҙең һүҙҙәрен генә түгел, үҙҙәрен дә «үҙләштерергә» – йоторға ваҡыт етте, тип ҡарайҙар. Буржуаз Төрөк республикаһы барлыҡҡа килгәндән бирле аҙ һанлы милләттәрҙе төрөкләштереү бик ҡыҙыу бара. 1927–1965 йылдар эсендә Төркиәлә дөйөм халыҡ иҫәбе байтаҡ артыуға ҡарамаҫтан, грекса, әрмәнсә, грузинса, лазса, йәһүдсә һәм башҡа телдәрҙә һөйләүселәрҙең һаны ике тапҡырға кәмегән. Ошо телдәрҙә һөйләшеүселәр Төркиә халҡының биштән бер өлөшөн тәшкил итә һәм ил территорияһының дүрттән бер өлөшөн алып тора. Әммә был телдәрҙә милли мәктәп тә, милли матбуғат та юҡ, радио тапшырыуҙары һәм телевидение фәҡәт төрөк телендә генә. Стамбулда бер нисә грек, әрмән, йәһүд мәктәптәре барлыҡҡа бар, ләкин улар башланғыс һәм урта мәктәптәр генә. Шулай уҡ Стамбулда ошо аҙсылыҡ халыҡтар телендә гәзиттәр сыға. Һан яғынан төрөктәрҙән ҡала икенсе урында торған, сағыштырмаса ҙур (өс миллионлы) курд халҡының үҙ милли телендә бөтөнләй бер ни ҙә юҡ. Илдәге аҙсылыҡ милләттәрҙе төрөкләштереү, уларҙы төрөк милләтенә ҡушыу – бөгөнгө Төрөк республикаһы етәкселегенең милли мөнәсәбәттәр өлкәһендәге сәйәсәте ана шул. Хәйер, ул бөгөнгө сәйәсәт кенә лә түгел, электән килә. Күптән инде ул практикаға әйләнгән һәм уның һөҙөмтәләре лә һиҙелерлек хәҙер.

Тәбиғи, төрөк милләтенә йотолмаҫҡа тырышыу теләге лә көслө.

### *Ҡазанһыҙ «Ҡазан»*

Киске сәғәт һигеҙҙәр тирәһе булғандыр, кемдер ишек шаҡыны.

– Буюрун, –тинем.

Номерға олпат кәүҙәле, төҙөк һынлы бер ҡарт инде. Ҡарар күҙгә етмеш өҫтөндә булыр. Ысынында уға һикһән бер йәш булып сыҡты.

– Әхнәф әфәнде Харисов сез буласызмы? Мин аны күрер өчен дип килгән идем, – тине ҡарт саф татар теләндә. Эйе, нәҡ үҙе булам. Үтегеҙ.

Ҡарт еңелсә генә пальтоһын, эшләпәһен һалды, һирәк кенә аҡ сәстәрен һыйпап ҡуйҙы. Бүлмәгә уҙып диванға ултырҙы ла һөйләп алып китте:

– Минең исемем Әхмәтвәли була. Фамилиям Ибраһимов ине. 1937 йылда Төркиәгә килгәс, төрөктәр ҡанунына буйһоноп, үҙ фамилиям менән хушлашырға тура килде. Ата-бабам йәшәгән Менгәр ауылының исемен алып фамилия иттем. Менгәр Ҡазандан ҡырҡ саҡрым самаһы ерҙә. Мин үҙем Петропавловскиҙа тыуып үҫкәнмен. Шала ҡаҙаҡтар араһында. Тыуған йылымды ла әйтәйем, был ҡарт нисә йәштә икән тип, башығыҙҙы ватмаҫ өсөн: 1891 йылда донъяға килгәнмен. Хәҙер эштәр ҡарттарса, шулай ҙа сәләмәтлегем зарланырлыҡ түгел әле. Ҡатыным үҙемдән ун йәшкә кесе, Башҡортостандың Бөрө ҡалаһында тыуған...

– Һеҙ Советтар Союзынан шулай 1937 йылда ғына киттегеҙме ни?

– Юҡ, мин Рәсәйҙән 1913 йылда уҡ сығып киткәйнем. Башта Монголияла, Манжурияла булдым, шунан оҙаҡ йылдар Ҡытайҙа йәшәнем. Америка менән Германияла ла ике йыл тороп алдым. Аҙаҡ килеп, 1937 йылда бөтөнләйгә Төркиәгә күстем, 1939 йылдан бирле Стамбулдамын.

Был ҡарттың әллә ни ғүмер илдән илгә күсеп йөрөүенә минең артыҡ иҫем китмәне. Илле туғыҙ йыл буйы ситтә йәшәп тә, уның үҙ әсә телен онотмауы, улай ғына ла түгел, татар әҙәби теленең сафлығын һаҡлап һөйләшеүе ғәжәпләндерҙе. Абдулҡадир Инанды аңлап та булмай – төрөктөң төрөгө булған, ә Менгәр Ҡазан татарымы ни. Был турала һорашҡас, ул: «ҡайһы ғына илдә йәшәһәм дә, мин гел генә татар сауҙагәрҙәре араһында булдым, татар уҡымышлылары даирәһендә аралаштым, хатта миңә татар телендә мәжмүғәләр, журнал кеүек нәмәләр сығарышырға ла тура килде, әле лә шулай», – тине.

Әхмәтвәли Менгәр һөйләргә бик әүәҫ кеше икән. Бәлки уның шул сифаты ла татар теленән айырылмаҫҡа ярҙам иткәндер.

– Ғәфү итегеҙ, – ти ул, – бер башлағас, һөйләйем инде. Һеҙ, әлбиттә, ниндәй генә мохтажлыҡ был ҡартты минең янға килтерҙе икән, тип уйлай

торғанһығыҙҙыр. Әйтһәм, әйтәйем; бер генә мохтажлығым бар. Рухи зауыҡты ҡандырыуға бик тә мохтажыбыҙ бар. Мин дә, ҡатыным да хосусән башҡорт халыҡ көйҙәрен үлеп яратабыҙ. Бында Өфө радиоһын тотоп булмай. Мәскәү радиоһын тотабыҙ. Ҡыш көндәрендә Ҡазан да эләгә. Шулар аша ара-тирә башҡорт йырҙары бирелә. Беҙ йотлоғоп, тамам ләззәтләнеп тыңлайбыҙ. Йырсы инде Мәғәфүр Хисмәтуллин йәки Фәриҙә Ҡудашева ла булһа, бил-ҡолли һуштарыбыҙ алына. Йыры булмаһа ла, ҡымыҙы булһын тип, ҡымыҙ яһатып ҡараным. Хәҙер мәшәҡәтләнмәҫкә булдым инде. Бында бейәләр башҡорт ҡымыҙы кеүек ҡымыҙ бирмәй. Үләне килешмәй торғандыр инде. Шулай, матди яҡтан мохтажлығым юҡ, ә бына хоҙай беҙҙе милли моңдан мәхрүм икән.

Әхмәтвәли Менгәр шулай хисле бер татар байы булып сыҡты. Икенсе йыл инде үҙ аҡсаһына өс айға бер тапҡыр «Ҡазан» тигән журнал сығарыша. Мин унда саҡта бөтәһе биш һан сыҡҡайны. Шуларҙың бишеһен дә ул миңә бүләк итеп алып килгән. Журнал һандарына өҫтәп, ә бына былары 1914 йылда Ҡазанда музыка оҫтаһы Ғиләжетин Сәйфуллин баҫтырған татар-башҡорт көйҙәренән алты үрнәк – ноталары һәм һүҙҙәренең фотокүсермәләре, рәхим итеп алығыҙсы, һеҙгә, халыҡ әҙәбиәтен өйрәнеүсе кешегә, бәлки, хәжәте булыр, тине.

Мин, рәхмәт белдереп, бүләктәрҙе алдым. Үҙем дә, бурыслы булып ҡалмаҫҡа тырышып, үҙебеҙҙең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты сығарған кескәй генә «Башкиры» тигән китап менән бер һауыт башҡорт балы бирҙем. Менгәр мәмнүн булды. Балды әйләндергеләп ҡараны ла, һыбайлы һүрәткә күрһәтеп:

– Был кем була? – тип һораны.

– Салауат Юлаев була.

– Ошо икән Салауат батыр, – тип йөҙөндә ниндәйҙер кинәнеү ғәләмәте белдерҙе, шунан балды ҡуйҙы ла: – Бер заман Салауатты үҙенең иң ғәййәр яугирҙары менән бергә Мәскәүгә тотоп килтерәләр. Шунда әбей батша... – тип миңә инде бер аҙнанан бирле таныш легенданы һөйләй башлағайны, мин:

– Ғәфү итегеҙ, Әхмәтвәли әфәнде, мин һеҙҙе бүлдерергә уйлайым. Ҡаршы

килмәһегеҙ, һеҙ башлаған кескәй легенданы үҙем аҙағына еткерер инем, – тип, яҙыу дәфтәремде сығарҙым да уҡып алып киттем: «...халыҡ әбей батша тип йөрөткән Екатерина II балкондан тороп үҙенең хитап һүҙен әйткән. Салауатҡа һәм уның ун алты яугирына ҡарап: «Пугачев бер боласы ул. Ә ни өсөн һеҙ шул бола күтәреүсегә юлдаш булдығыҙ?» – тигән. Салауат: «Рус хөкүмәтенә ҡаршы баш күтәреүҙәрҙә беҙ һәр ваҡыт ҡатнашып килдек, артабан да шулай итәсәкбеҙ», – тип яуап биргән. Шунан һүҙен дауам итеп: «Рус хөкүмәте беҙҙе христианға әйләндерергә, мәсет һәм мәктәптәребеҙҙе ҡыйратырға, дини китаптарыбыҙҙы яндырырға юл ҡуйып килде. Үлергә әҙербеҙ, әммә арабыҙҙа хаҡ эш өсөн әҙер торған меңдәрсә башҡорт, татар, ҡырғыҙ һәм нуғайҙар бар», – тигән. Шулаймы һеҙ һөйләргә теләгән хикәйәт?

– Эйе, шулай, һеҙ ҙә беләһегеҙ икән шул уны.

– Төркиәгә килмәһәм, белмәҫ инем. Анкарала һеҙҙең «Ҡазан» журналының бишенсе һанын һатып алғайным. Башҡа һандары булманы, һатылып бөттө, тинеләр. Шунда баҫылған бер мәҡәләлә – ә уның авторы һеҙ булып сыҡтығыҙ, – Салауат хаҡындағы ошо легенда киҫәгенә күҙем төштө. Ҡалағыҙҙа ғәҙәттән тыш хәл булғас, кистәрен сығып йөрөмәйем, номерҙа ултырам. Көндөҙ күргән-белгәнде барлауҙан башҡа эш юҡ. Бер кисте мәҡәләгеҙҙең Салауатҡа ҡараған ошо юлдарын башҡортсаға тәржемә итеп ташланым. Иртәгеһен уны бер иптәш ярҙамында дөрөҫләп, төҙәтеп сыҡтым. Дөрөҫ, был тарихта булған ысын хәл түгел. Екатерина Салауат менән осрашмаған. Осрашҡан хәлдә лә ул балкондан тороп һөйләшмәҫ ине. Хикәйәттең үҙен дә Салауаттың төп эшмәкәрлеге менән ярашлы фольклор әҫәре тип әйтеп булмай. Салауат ислам динен яҡлаусы, шуның өсөн көрәшеүсе итеп кенә күрһәтелә. Ә ул иҙелгән халыҡтың социаль теләктәре өсөн һуғышҡан. Уны шуның өсөн яратҡандар ҙа. Һеҙ был хикәйәтте ҡайҙа, ҡасан һәм кемдән ишеткәнһегеҙ йәки яҙып алғанһығыҙ, – ҡыҙғанысҡа ҡаршы журналда был хаҡта бер ни ҙә әйтелмәгән.

Әхмәтвәли Менгәр: «Мин ул яғына бер ҙә әһәмиәт бирмәгәйнем. Уныһы ла кәрәк икән дәһә», – тине. Был легенданы бер ҙә үҙе уйлап сығармағанын

әйтте, унының сығанағы хаҡында түбәндәгеләрҙе һөйләне:

– Мин бик йәшләй сауҙагәр булып киттем. 1911–1913 йылдарҙа өс йыл буйы тотошлай Петропавловскиҙан Уралдағы атаҡлы Эрбет йәрминкәһенә сауҙа менән барҙым. Беренсе барыуымда Ғайса исемле бер башҡорт муллаһы менән таныштым. Икенсе һәм өсөнсө барыуымда ул мулла һүҙ ҡуйышыу буйынса килде. Ғайса мулла һирәк осрай торған оҫта йырсы ине. Башта, ҡыйыулана төшһөн, муллалығын ситкәрәк ҡуйып торһон өсөн, сәйенә коньяк тамыҙып алабыҙ. Шунан һуң инде, теге тамам өлгөрөн еткәс, йырлауын үтенәбеҙ. Оҙаҡ ялындырып тормай, башҡорттоң оҙон көйлө йырҙарын береһе бөтөүгә икенсеһен башлап алып китә. Был ҡәҙәр ҙә йырға маһир булыр икән. Петропавловскиҙа ла матур йырлаусы башҡорттар бар ине. Әммә Ғайса мулла ишене минең үҙ ғүмеремдә тыңлағаным булманы. Бөгөн дә әле мине хайран итә торған башҡорт моңона беренсе һоҡланыу тойғоһон ана шул йырсы Ғайса мулла тыуҙырҙы. Салауат хаҡындағы кескәй хикәйәтте лә миңә ул һөйләгәйне.

Әхмәтвәли Менгәр башта уҡ, мине һеҙҙең менән күрешергә рухи зауыҡ мәсьәләһе әйҙәне, тигәйне. Бөтә һөйләгән һүҙе лә шул зауыҡ тирәһендә булды. Үҙенең һис тә сәйәсәткә ҡыҫылмауын, унан алыҫ булырға тырышыуын, бары тик милли мәҙәниәт, милли музыка мәсьәләләрендә генә маҙаһыҙланып йөрөүен ҡат-ҡат әйтте. Шулай тиһә лә, сәйәсәттән бик үк алыҫ түгел ине. Ул, әлбиттә, минән үҙе күтәргән «зауыҡ проблемаһы»на бәйле берәй төрлө кәңәшме, ярҙаммы көтә ине.

– Әхмәтвәли әфәнде, – тинем мин, – һеҙҙе һәм Төркиәләге һеҙҙең кеүек башҡаларҙы йонсотҡан милли-рухи зауыҡты ҡәнәғәтләндереү мәсьәләһе айырым кешеләр ярҙамы менән генә хәл ителә торған мәсьәләләрҙән түгел. Быны өсөн иң элек ике дәүләт араһында рәсми рәүештә урынлашҡан мәҙәни бәйләнештәре булырға, шул бәйләнештәрҙе тормошҡа ашырыуҙың ике яҡ та хуплаған конкрет планы төҙөлөргә тейеш. Хәҙергә Советтар Союзы менән Төркиә араһында, беҙҙең яҡ быны күптән теләһә лә, дәүәт кимәлендәге мәҙәниәт бәйләнештәре ныҡлап урынлашмаған әле. Шулай ҙа миңә Анкарала саҡта яуаплы кешеләр: беҙҙең дәүләттәр араһындағы күп төрлө мәҙәниәт

бәйләнештәре документының проекты төҙөлдө, тиҙҙән ул хупланырға һәм үҙ көсөнә инергә тейеш, тинеләр. Был бәйләнештәр, шикһеҙ, һеҙ яратҡан башҡорт көйҙәрен дә килтерер.

Әхмәтвәли Менгәр киткәс, ул килтергән «Ҡазан» журналының 1–4-се һандарын күҙҙән кисереп ултырҙым. Тышлыҡтары шул уҡ, мин уҡыған 5-се һандағыса, стандарт: Ҡазандағы Сөйөмбикә манараһы төшөрөлгән, иң өҫкә ваҡ хәрефтәр менән «Ҡазан төркләре культур вә ярдамлашма дәрнәге» («Ҡазан төрөктәренең культура һәм ярҙамлашыу йәмғиәте») тип яҙылған. Аҙаҡта, тышлыҡтың эске яғында, журналдың, Төркиәнән тыш, Финляндияла, Японияла, Американа һәм Германия Федератив Республикаһында таралыуы әйтелгән, ул илдәрҙә журналды һатыу урындарының адресы күрһәтелгән, һәр һандың күләме 64 бит, йәғни теп-теүәл дүрт баҫма табаҡ.

Эстәлегенә килгәндә инде, ул журналдан бигерәк йыйынтыҡҡа оҡшаған. Төрөксә «дәрге» һүҙе журнал мәғәнәһендә лә, йыйынтыҡ мәғәнәһендә лә йөрөй. «Ҡазан» исеменең аҫтына яҙылған «Үч айлык дәрге» тигәнде «Өс айлыҡ йыйынтыҡ» тип алғанда, бәлки, дөрөҫөрәк тә булыр ине.

Хикмәт терминда түгел, әлбиттә. Тышлығына «Әдәбият, фекер вә культур дәргесе» тип яҙылған булһа ла, «Ҡазан» бер ҙә позитив фекер уятмай. Журналдың хәҙерге заман менән һис бер алыш-биреше юҡ, ул бөтөнләй артҡа, күптән үткән замаға ҡараған, бөгөнгө тормошҡа елкәһе менән тора. Был, ни тиклем генә сәйер тойолмаһын, журналдың төп идея-бурыстарына тулыһынса ярашлы. Ә уның төп бурыстары түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала.

Төркиәлә һәм «Ҡазан» тарала торған башҡа илдәрҙә ғүмерҙәренең һуңғы көндәрен кисереүсе Волга-Урал буйынан килгән татар эмигранттарының рухи дәртләндереү, уларҙа, әгәр тамам һүнеп өлгөрмәгән булһа, «татарлыҡ» хисен көйрәтеү, ә йәштәрендә шул хисте тоҡандырырға тырышыу. Ошо юл менән Октябрь инҡилабы емергән йәмғиәт ҡоролошона, шул замандың милли-дини мәҙәниәтенә ҡарата «ғорурлыҡ» тойғоһон ҡайтарырға теләү. «Ҡазан» үҙ маҡсатына ярашлы рәүештә, тәүге биш һанында төп материал итеп Шиһабетдин Мәржәни, Заһир Бигиев, Сәғит Рәмиев, Дәрдмәнд, Риза

Фәхретдинов, Садри Мәҡсуди, Абдулкадир Инан (Фәтхелҡадир Сөләймән) һәм башҡа шулар ише XIX быуат аҙағындағы – XX быуат башындағы яҙыусылар хаҡында биографик белешмәләр, уларҙың татар телендә һәм төрөксә тәржемәлә шиғырҙары йәки башҡа әҫәрҙәренән өҙөктәр бирелгән. Бик күбеһенең фоторәсемдәре лә баҫылған. Ғабдулла Туҡай, Мәжит Ғафури, Нәжип Думауи, Зариф Бәшири, Зия Йәрмәкәй, Әхнәф Танғатаров, Мирхәйҙәр Фәйзи, Фәтхи Бурнаштарҙы ла «Ҡазан» журналы «үҙ» әҙиптәре итеп тәҡдим итмәксе. Улар хаҡында ла белешмәләр бирелгән, әҫәрҙәре, баҫылған һүрәттәре төшөрөлгән.

Шулай итеп, 1970 йылдың сентябренән башлап Стамбулда Октябрь инҡилабына тиклемге татар йәмғиәтенең, бер өлөшө менән башҡорт йәмғиәтенең дә, мәҙәни күренештәрен үҙенә ҡулайлаштырып сағылдырған «Ҡазан» исемле журнал сыға. Ҡазанһыҙ «Ҡазан», татарһыҙ «татар» журналы.

Бөгөнгө Төркиә, Босфор һымаҡ, ике ҡаршы ағым көрәшен кисерә. Илдә ижтимағи-сәйәси хәл ифрат ҡырҡыулашҡан. Өсөнсө йыл инде һул көстәр, бигерәк тә уларҙың экстремист йәштәрҙән торған өлөшө, империализмға ҡаршы йүнәлешкә йөҙ тотоп, Төрөк республикаһын алға әйҙәй, азатлыҡ яулай, уң көстәр илде артҡа һөйрәй, уны эске һәм тышҡы капиталдан аяҡ-ҡулы бәйле хәлендә тоторға тырыша. Ағымдар бәрелеше халыҡтың демократик көстәргә теләктәшлеген арттыра, синфи аңын күтәрә, шуға бәрәбәр реакция ҡоторона, эҙәрләүҙәр көсәйә, төрмәләрҙә урын ҡыҫылғандан-ҡыҫыла бара, хөкүмәт алмашына.

Күренекле «йомортҡа баштарҙың» береһе, элекке хөкүмәт составында иҡтисади мәсьәләләр буйынса эш иткән.

Ҡараосманоғлу иҫәпләүенә ҡарағанда, Төркиә артабан да бөгөнгө темпы менән бара торған булһа, Европаның алдынғы капиталистик илдәрен ҡыуып етер өсөн уға 2359 йыл кәрәк. Күрәһең, был һандар нигеҙһеҙ әйтелмәгәндәр. Төркиәнең 3 миллиард ярым доллар дәүләт бурысы ғына бар. Республиканың иҡтисадында дәүләт секторы ныҒытылмай, ә хосуси сектор үҫкәндән-үҫә. Аграр реформа, үрҙә әйтелгәнсә, һаман үткәрелмәй, ауыл хужалығының үҫеше бөтөнләй сикләнгән. Төрөк иле НАТО ситлегендәге ҡош хәлендә.

# ИКЕНСЕ БҮЛЕК. НӘФИС ӘҪӘРҘӘР

## **Зәңгәр күҙҙәр**[1]

Мине резинка туп бик ҡыҙыҡтырҙы. Шундай тубым булһа ине! Нисек беҙ Сабир ағайым менән күңелле уйнар инек!

Атайымдан ситләтеп кенә һораша башланым:

– Ниналарҙыҡы кеүек туп ҡиммәт торамы икән, атай?

Ул мине ҡулына алды ла маңлайымдан үпте. Үҙенән ат тире еҫе килеп тора.

– Ҡыҙым, һиңә тупҡа тиклем күлдәк яғын ҡайғыртырға кәрәк әле! – тине ул.

– Тубым булһа, күлдәкһеҙ ҙә йөрөр инем әле! – тим мин.

Ул мине арбаға ултыртты ла тәмәке төрөргә тотондо.

– Хаҡы артыҡ ҙур түгелдер уның, ҡыҙым. Шулай ҙа миңә ике-өс көн ат ҡарарға кәрәк. Ундай артыҡ көндәр юҡ бит, ҡайҙан алаһың уларҙы? Бындай эш көндәренән алған аҡса ашарға ла етмәй. Ә туп уйнарға ғына ярай. Һеҙ ағайың менән шулай итеп ҡарағыҙ: бөгөн баярҙың утауы бөтә, ағаң да, әсәң дә аҙыраҡ бушап торорҙар. Сабир менән икәүләп балыҡ тотоғоҙ. Ике-өс көн йөрөһәгеҙ, бер туплыҡ булыр. Алдағы аҙнала мин баярҙы ҡалаға алып барам, шунда балығығыҙҙы һатырмын да туп алып ҡайтырмын. Ләкин баяр йылғаһына бара күрмәгеҙ. Андрей үҙегеҙҙе һыуға батырып ҡуйыр! Эҙләгән кешегә үҙебеҙҙең тирәлә лә балыҡ бөтмәгән.

Шатлығымдан туп кеүек һикергеләнем. Өйгә лә туп кеүек осоп ҡайттым. Ағайым кис менән утауҙан ҡайтҡас, баяр урманынан ҡармаҡ сыбығы ла урлап ҡайттыҡ. Ә иртән иртүк балыҡҡа киттек. Беҙгә тиклем инде ҡармаҡлы малайҙар яр буйын һырып та алғайнылар. Юл уңманы. Төшкә тиклем йөрөп, икебеҙгә ни бары бишәрҙе генә алып ҡайта алдыҡ.

Төштән һуң ҡасып ҡына баяр йылғаһына барҙыҡ. Ҡыуаҡлыҡ араһына инеп боҫтоҡ та ҡармаҡтарҙы һыуға һуҙҙыҡ. Ҡармаҡты батырырға ла

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап», 1997. 117-132-се биттәр.

өлгөрмәйһең, ҡомһоҙ балыҡтар шунда уҡ килеп ҡаба. Андрей беҙҙе күрмәне. Беҙ үҙебеҙ ҙә балыҡ кеүек бит! Ҡояш кискә боролғанда инде беҙҙең ун ҡаҙаҡтан артыҡ балығыбыҙ бар ине. Шул уҡ йылғаның беҙҙең ауыл эргәһенән аҡҡан ерендә был тиклем балыҡты биш көн эҙләһәң дә таба алмайһың.

Төнөн һаташып бөттөм... Ут кеүек янып торған тупты күккә сөйәм, ул ергә төшә лә балыҡ була. Балыҡты Андрей тотоп ала, ә ул яңынан тупҡа әйләнә...

Иртән иртүк мине ағайым уятты.

– Әйҙә тағы балыҡҡа киттек! –ти.

– Андрей тотһа?

– Кисә күрмәне бит!.. Бынныһына миңә Витяныҡы кеүек наган алырбыҙ!

– Уға ике бот балыҡ кәрәктер тағы?

– Булһа ни, балыҡтар аҡсаһыҙ ҡабалар бит. Ем генә булһын уларға!

Беҙ әсәйҙән ҡасып киттек. Кисәге ҡыуаҡлыҡтар араһына боҫоп ултырҙыҡ та балыҡ сирттерергә тотондоҡ. Берҙе ҡаптырҙыҡ, икене ҡаптырҙыҡ, ләкин өсөнсөһөнә үҙебеҙ ҡаптыҡ. Андрей күҙәтеп торған икән.

– Сығығыҙ әле бында, маңҡалар! – тип ҡысҡырып ебәрҙе ул.

Ҡулыбыҙҙағы ҡармаҡ сыбыҡтары һыуға төшөп китә яҙҙы. Йөрәктәребеҙ ҡармаҡҡа ҡапҡан балыҡтай һикерә. Ҡурҡып ҡына Андрей янына сыҡтыҡ. Ҡасырлыҡ түгел. «Үлтермәһә генә ярар ине», – тип торабыҙ.

– Кем балығын урлайһығыҙ һеҙ, шайтан балалары? Баяр балығын түгелме?!

– Исеме яҙылмаған! – тине ағайым. Унын бындай яуабына үҙемдең дә асыуым килде. Кеше үлем алдында тора, етмәһә, телләшкән була.

– Әһә, һеҙгә исеме лә кәрәкме әле! Бына һеҙгә уның исеме! – тип, икебеҙҙе лә сикәләй башланы.

Яр башында Витя менән Нина беҙгә ҡарап көлөшөп торалар. Андрей беҙҙе шунда алып менде. Ҡармаҡ сыбыҡтарын ентекләп ҡараны.

– Бынныһы ла беҙҙең урмандан! Кисә лә балыҡ урлағанһығыҙ! Үлтерәм бит, собакалар!

– Ҡалдыр инде, ағаҡайым, бынан тыш һис тә килмәбеҙ! – тип илаша башланыҡ.

– Андрей сабаҡтыҡы кеүек ҡыҙыл күҙҙәрен аҡайтты, аҫҡы иренен сәйнәне. Йөҙөнә йыртҡыслыҡ билгеләре сыҡты! Ул ҡармаҡтарҙы сыбыҡтарынан өҙөп алды ла, ҡулындағы мылтығын ергә ҡуйып, беҙҙең ҡаршыға килеп баҫты. Ҡуҙғалмағыҙ, юҡһа, быуып үлтерәм!

Беҙ шәм кеүек ҡатып ҡалдыҡ. Андрей имәндән ҡаты ҡулдары менән икебеҙҙе лә бер юлы тотоп алды ла ҡармаҡтарҙы ҡолаҡ иттәребеҙгә батырҙы. Беҙ бөтә йәнебеҙ менән һөрән һалып ҡысҡырҙыҡ, бөтә көсөбөҙ менән тыбырсындыҡ. Ысҡына алманыҡ. Ул ҡармаҡ ептәрен Витяға тотторҙо. Үҙе ҡулына мылтығын алды.

– Барығыҙ, ҡайтығыҙ! Артығыҙға боролоп ҡарамағыҙ, атып үлтерермен!

Беҙ илай-илай йүгерәбеҙ. Втя беҙҙең арттан ҡалмай, етмәһә, «Арыҫландың аттары, һулдан бара саптары», – тип мыҫҡыллай. Ҡармаҡ йөрәк итенә ҡаҙалған кеүек, шундай ауырттыра. Боролоп ҡарарға ҡурҡабыҙ. Витя ҡулындағы епте шул тиклем ныҡ тартып ебәрҙе – беҙ ысҡынып киттек. Үҙе Андрей ҡырына кире йүгерҙе. Беҙ, бөтөнләй хәлһеҙләнеп, йығылып ҡалдыҡ.

Мин ҡолағымды тотоп ҡараным. Ҡармаҡ юҡ ине, тик муйыным буйлап ҡып-ҡыҙыл эҫе ҡан аға. Ҡолағым ғына түгел, бөтә тәнем ут кеүек яна. Ағайыма ҡараным: уның ҡолағында ҡармаҡ ысҡынмаған, ебе генә өҙөлгән...

...Биографияһының был урынынан Тамара тыныс ҡына үтә алманы. Ауыр көрһөнөп ҡуйҙы, тауышы киҫелде. Күңеленең йомшарыуы һүҙ менән генә түгел, бер-ике минутлыҡ пауза арҡылы аңлашылды. Юрий ишкәктәрҙе кәмәнең ситтәренә эләктереп ҡуйҙы.

– Тамара, – тине ул баҫалҡы тон менән, – күңелле лә, ҡыҙғаныс та миңә һине тыңлауы. Биографияңда минең өсөн уртаҡ булған эпизодтарҙы ла күрҙем... Һин минең Кубань буйынан булыуымды ғына беләһең. Башҡаһын белмәйһең әле. Ҡыйынлыҡта уҙған бала сағымды хәтерләттең һин. Ләкин, ни өсөндөр, белмәйем, биографияңдың ҡалған өлөшө минекенә бөтөнләй оҡшар төҫлө. Мин һинән аҙағына тиклем һөйләүеңде һорар инем!

Тамара сәғәтенә ҡараны. Ваҡыт ун икенсе ине. Күҙҙәренә ышанмайса, Юрийҙың шырпы һыҙыуын һораны. Ләкин сәғәт шул уҡ ваҡытты күрһәтте.

– Юра, һин шуны әйт әле: беҙ ҡайҙа барабыҙ былай? Нисек ҡайтыуҙы уйлайһыңмы һин? Киткән һайын алыҫаябыҙ!

Һин юҡҡа борсолма, Тамара, – тине Юрий, – юғалмабыҙ! Кәмә менән ҡайтыу мөмкин түгел, әлбиттә. Ағымға ҡаршы барыу – ике метр алға, өстө артҡа китеү тигән һүҙ. Былай итәбеҙ: яңынан ярты сәғәт самаһы барырға кәрәк. Шунан һуң кәмәнән сығабыҙ. Кәмә яр буйында ҡала, ә беҙ поездға ултырабыҙ. Төшәсәк ярҙан разъезд ун-ун биш минутлыҡ юл. Ризамы шуға?

– Башҡаса юл булмағас, риза булмай, нишләйһең! Шулай ҙа артығыраҡ киткәнбеҙ... Һин ҡайҙан беләһең, Юра, был ерҙәрҙе?

– Уҙған йыл мин бында ял иттем. Бынан алыҫ түгел генә ял йорто бар. Был тирәләге һәр ер миңә таныш!

Төн айһыҙ. Бармаҡ менән генә һанарлыҡ йондоҙҙар күк төбөнән ҡарай, әйтерһең уларға йәшеренер өсөн киң бушлыҡҡа урын етмәй ҡалған. Ҙур-ҙур болот киҫәктәренең дә уҙғандары һиҙелә. Ара-тирә йәшен дә сағылып ҡуя. Ямғыр булыр, ахыры.

Тамара күҙ ҡараштарын Юрий ауыҙындағы папиростың бер ҡыҙара, бер юғала торған утлы нөктәһенә төбәне. Үткән ҡәһәрле тормош тураһындағы иҫтәлек йомғағы яңынан һүтелә башланы. Йомғаҡ бәләкәйләнгән һайын, ҡыҫыҡ һәм ҡараңғы көндәрҙә яҡтылыҡ һәм иркенлек уттары ҙурая, көсәйә барҙы. Ул уттар Тамараның бала сағын оҙатып килделәр ҙә дөрләп ялҡынланып киттеләр.

– Туғыҙ йәшемдә ҡолағымда шундай яра ҡалды. Ағайыма ун ике йәш ине. Ҡармаҡ уның ҡолағын бөтөнләй үк йыртып сыҡманы. Әсәйемдең беҙҙе ҡосаҡлап илауы минең һаман күҙ алдымдан китмәй әле. Атайымдың Андрейға булған асыуы эсенә һыймай башланы, уның менән бәрелешергә һылтау ғына эҙләп йөрөй ине.

Бер ваҡыт, кис менән, Андрей атайым ҡырына ат һарайына килеп ингән дә:

– Хәҙер үк ала айғырҙы ек! – тигән.

– Һуң, үҙең күреп торҙоң бит, – тигән атайым, – ала айғырҙы төнгөлөккә баҫыуға илтеп килдем. Бына көрән атты егәм.

– Юҡ, мин ала айғырҙы теләйем, хәҙер үк алып ҡайт!

Атайыма был етә ҡалған. Кеше аттарҙы ҡалдырып ҡайтырға ла өлгөрмәһен, яңынан барып алһын имеш! Алып ҡайтҡас, ала айғыр оҡшамаһа, уны тағы итеп ҡуйһын, ти!

– Һиңә ала айғыр кәрәкме?

– Ала айғыр!

– Бына һиңә ала айғыр! – Атайым Андрейҙы йыға һуҡҡан, өҫтөнә атланып ултырған да хәлһеҙләндергәнсә туҡмаған.

– Һиңә ала айғыр кәрәкме, баяр эте?

– Көрәне лә ярар!.. – тигән Андрей.

– Бына быныһы көрән ат булыр! – тип, атайым тағы өҫтәгән, һуңынан Андрейҙы ярым үлек хәлдә һарайҙа ҡалдырып киткән.

Аҙағы атайым көткәнсә булды: эштән сығарҙылар, ун биш көнгә эш хаҡын бирмәй ҡалдырҙылар, судҡа ла бирҙеләр. Ләкин көтөлгән суд булалмай ҡалды: көҙөн, ноябрь айында, баярҙарҙың бөтәһенә лә бер юлы ҡаты суд булды!

Сентябрь айының төнө ине. Мин уянып киттем. Өҫтәлдә бармаҡ буйы ғына шәм яна. Аяҡ осонда атайымдан башҡа тағы ике кеше ултыра. Береһе рус. Ул ағайҙы ла таныйым, атайым урынында баяр аттарын ҡарай ул. Икенсеһе баяр малдарын көтөүсе Кинйәбай. Атайымдың тишек сәкмәне аҫтынан бөтәһен дә күрәм, ишетелер-ишетелмәҫ һүҙҙәрҙең нәмә тураһында икәнеп генә төшөнә алмайым. Етмәһә, русса ҡатнаштырып һөйләшәләр.

– Урман йәл бит әле! – ти атайым.

– Ничево, – ти Максимыч, – ел урман яғынан, һаҙлыҡҡа табан. Боролмаҫ әле. Боролһа тағы, черт с ним!

– Суҡындырырға кәрәк! – ти Кинйәбай.

– Улай булһа, мин ҡаршы түгел, – ти атайым, – халыҡ ҡына түгел, ел дә беҙҙең яҡлы!

Икенсе төндө генә мин был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңланым. Таң алдынан

ҡаты тауышҡа уянып киттем. Ниндәйҙер һыбайлы ауыл буйына сабып, ҡысҡырып йөрөй:

– Янғын! Янғын!!!

Атайым өйҙән сығырға ҡушманы. Ҡарындыҡ тәҙрә аша ғына ҡарап торҙоҡ. Урман эсендә ялҡын күтәрелгән, уттың ҡыҙыл телдәре күккә һуҙыла. Баяр утары яна!

Теге һыбайлы кеше беҙҙең тураға килеп туҡтаны, тауышы ҡарлығып бөткән. Уҙып барыусы урам ҡарауылсыһын туҡтатты ла, ҡамсыһы менән төртөп күрһәтеп, екеренде:

– Ниңә халыҡты уятмайһың, күрмәйһеңме ни, баяр яна! Ниңә бер кем дә һүндерешергә бармай!

Ҡарауылсы ғәмһеҙлек менән янғынға ҡараны.

– Иҫең киткән икән юҡҡа, янып бөткәс туҡтар әле! Ҡысҡырынып йөрөмә, йоҡо ҡасырып! Тик бына урман ғына... – тип һелтәгән ҡамсы теймәһен өсөн ситкә тайпылды.

Зиннәт байҙыҡыларҙан тыш беҙҙең остан баярҙы ҡотҡарырға барыусы булманы. Баярҙың айырым торған бер өйөнән башҡалары янып бөттө. Ләкин уттың урманға зарары булманы: һүндерергә барыусыларҙың күпселеге баяр йорттарын түгел, урманды һаҡлап алып ҡалырға тырыштылар.

Ул төндө баҡаларҙың тауышы сыҡманы. Ләкин баяр йоҡоһоҙ ине, ул керпеген дә ҡаҡманы. Иртәгеһенән алып баҡалар ярыла яҙып баҡылданылар. Ҡурҡытыусы кеше булманы. Кисен ауылға ҡоралланған һыбайлылар килде. Оҙаҡ торманылар, дүрт кешене тотоп, волосҡа алып киттеләр. Береһе атайым ине. Ләкин атайым шул төндә кире ҡайтты: урманды үткәндә, ҡасып ҡотолған. Кешегә күренмәне.

...Ҡышын бынан да көслө янғын булды. Октябрь инҡилабының ҡаты дауылы Тарханов урмандарын да айҡаны. Һаҡсылары ергә йығылдылар, аҫылыныр өсөн урманда ағас таба алманылар: ағастың һәр бер төбө ысын хужаларына ҡайтты. Ерҙәрҙең һәр аҙымы баярға эҫкерт-эҫкерт иген өйөүселәргә, ашлыҡ сәсеп, ас ултырыусыларға бирелде... Яҙын баярҙар ҡасып

өлгөрҙө. «Баҡалар батшаһы» Ивандың үлек кәүҙәһен, ауыҙына баҡа ҡаптырылған хәлдә, һаҙлыҡтан таптылар... Шундай көслө булды был янғын!

Атайым көнсығыш фронтта ине.

1919 йылдың июнь аҙағында унан ошондай хат килде:

«...9 июндә Колчак армияһының уты аҫтында, Өфөнө ҡотҡарыу өсөн Ағиҙелде аша сыҡтыҡ. Чапаев үҙе лә беҙҙең менән ине. Генерал Каппелдең офицерҙарҙан ғына торған һайланма ғәскәре менән ҡаты бәрелеш булды. Барыбер көлдәрен күккә осорҙоҡ! Шунда үлмәй ҡалған офицер Евгений Тархановичты осраттым. Пуля әрәм итеп торманым – Иҙелгә күтәреп бәрҙем үҙен... Кисен Өфөнө Колчак ҡулынан ҡотҡарҙыҡ...».

Өс айҙан һуң атайымдың икенсе хатын алдыҡ. Быныһы Себерҙән ине.

«...Бер тура килһә, килә икән ул! Сәләймән баярҙы Колчак артынан ҡасып барған еренән тотоп алдыҡ. Дөмөктөрҙөк үҙен... Ғаиләһенең ҡайҙалығын һорарға үҙен тонсоҡторғас ҡына иҫкә килде. Белмәй ҡалып хата иткәнбеҙ. Шул тиклем ҡаныбыҙ ҡыҙған...».

Егерменсе йылдың йәйендә атайым үҙе лә ҡайтты. Миңә күҙ нурын алып торған ҡыҙыл резинка туп та алып ҡайтҡайны.

– Мә, ҡыҙым, ҡурҡмай уйна, донъя беҙҙеке хәҙер! Һыуҙағы балыҡтар ҙа беҙҙеке, йылғаның теләгән еренән тотоғоҙ! Урмандар ҙа беҙҙеке, ҡармаҡ өсөн сыбыҡтарҙы үҙегеҙгә оҡшағанын һайлағыҙ! – тине.

Ләкин тыныслыҡ юҡ ине әле. Тирә-яҡ урмандарға бандиттар шайкаһы тулды. Ауылдарҙы килеп таланылар, кешеләрҙе һуйып китә башланылар. Урманға барыу ҡурҡыныс ине. Атлы уҙғынсылар урманды, таланған килеш, буш ҡул менән үттеләр. Йәйәүлеләр бөтөнләй юғалдылар. Зиннәт байҙың ике улы, Ярулла менән Юрмат, бандиттар шайкаһының атамандары ине. Уларҙың исемдәре халыҡ йөрәгендә сикһеҙ үс тыуҙырҙы.

Бандиттарҙы юҡ итеү кәрәк ине. Был эшкә башлап атайым тотондо. Ауыл ярлыларынан шуларға ҡаршы партизан отряды төҙөнө. Башта ҡырҡ кешенән генә торған ярым ҡораллы отряд арта, ишәйә барҙы. Бандиттарҙың эҙҙәренә төштөләр.

Үҙенең отряды менән атайым бер йыл буйы Урал урмандарын айҡап йөрөнө. Ҡамауҙа ҡалған саҡтарҙа Ҡыҙыл Армия частары ҡотҡарҙы. Ярулла отрядынан бер бандит та ҡалманы, Юрматтыҡы тар-мар ителде, тик атаман үҙе генә ҡулға эләкмәне.

Егерме беренсе йылдың көҙөндә атайым бөтөнләйгә беҙҙең ҡырға ҡайтты. Уның һул ҡулы юҡ ине, ләкин ул дан алып ҡайтты: партизандар отряды командиры Арыҫлан Юлдашевтың исеме балаларға тиклем таныш булды. Әсәйемдең генә сәләмәтлеге ныҡлы түгел: ике көн йөрөһә, өс көн ҡуҙғала ла алмай ята.

Ләкин яҙын атайымдан бөтөнләйгә айырылдыҡ.

Апрель аҙаҡтары ине. Атайым ниндәйҙер эш менән волосҡа китте. ВИК председателе бүлмәһендә ултырғанда тәҙрәнән ҡараһа, урамда шау-шыу, һәнәкле, балталы кешеләр көтөүе волость йортон ҡамап алған. Кулактар баш күтәрә. Нишләргә? Нисек ҡотолорға һәм нисек уларҙы тиҙ генә юҡ итергә? Бер фекергә лә килә алмай торғанда, ишек асыла. Бүлмәгә баштан-аяҡ ҡоралланған ике бандит инә. Береһе – Сөләймән баярҙың элекке управляющийы Андрей Зубатый.

– Ну, большевиктар, – ти ул, – беҙ һеҙҙең менән эште бөтөрөргә килдек! Тороғоҙ, һеҙҙе тышта халыҡ көтә!..

Тәҙрә аша нимә тура килһә, шунын менән ҡоралланған төркөмдән башҡа, Андрейҙың язалау отряды ла күренә. Ат өҫтөндә яланғас ҡылыстар ялтырай.

Андрей Зубатый һәр бүлмә ишеге төбөнә ҡоралды һаҡсылар баҫтыра. Урамға иң тәүҙә волостың биш коммунисын сығарта, алтынсыһы – атайым. Телеграм бағаналарына бауҙар эленә, һәнәкле кешеләр түҙемһеҙлек менән уларҙың муйындарға һалыныуын көтә. Бер минут... һәм алты коммунистың хеҙмәтсәндәр ирке өсөн көрәшкән ғүмерҙәре арҡандар менән быуыла. Улар үлемдән ҡурҡмайҙар, муйындарына бау кейҙерелгәндә лә үҙҙәренең большевик булып үлеүҙәрен онотмайҙар:

– Йәшәһен коммунистар партияһы! Йәшәһен Ленин! Бөтһөн йәлләттәр! Бөтһөн!..

...Шул уҡ бағаналар буйлап һуҙылған сыбыҡтар аша йәшен тиҙлегендәге һүҙҙәр үтәләр: «Ашығыс ярҙам! Волоста – бандиттар!.. Кулактар баш күтәрә! Тиҙ!! Тиҙ!!»

Андрей Зубатый волостың бөтә ҡалған работниктарын алып сығырға бойора. Биш минут тигәндә волость йорто буш ҡала. Хатта иҙән һепереүсе ҡатындарҙы ла урамға сығаралар. Андрей уларҙан ҡайҙа ниндәй ҡорал барлығын һорай. Кәрәкле яуап ала алмай.

Андрей уйлай: «Хәҙер бағанаға аҫыуҙың ҡыҙығы бөттө. Былар менән башҡаса эш итергә кәрәк». Ул күтәренке кәйеф менән төрөпкәһен тарта. Төтөнгә уралын ҡара уйҙар сыға:

– Ат ҡойроҡтарына тағығыҙ быларын! Ҡойроҡ етмәгәндәрен ботарлап үлтерегеҙ!

Яуыздарҙың күҙҙәре маңлайҙарына менә. Шаулашалар. Волость урамынан дүрт атты етәкләп сығаралар.

Ләкин атамандың приказы үтәлмәй ҡала: ауыл осонан, атылған кеүек, һыбайлы ҡыҙыл армеецтар күренә. Ҡара өйөр бутала башлай. Паника күтәрелә. Бер минут... һәнәкле һәм салғылы кулактар ҡырылған үлән кеүек ергә ауалар. Андрейҙың язалау отряды ла тар-мар ителә. Үҙе урманға ҡарай ҡаса. Ләкин алыҫ китә алмай, атынан, түшәмдән төшкән ҡара тараҡандай, тора алмаҫлыҡ рәүештә ҡолай...

Атайымдан һуң әсәйем дә күп торманы. Сөләймән баярҙың ҡәһәрле эшенән ҡалған ауыр йөк сәләмәтлеген баҫты, физик яҡтан уны күтәрә алманы. Ләкин мин уның баяр ҡулында үлмәүенә бик шатмын. Ғүмеренең һуңғы көндәрендә булһа ла, бәхетле тормоштоң иртәһен үҙ күҙе менән күрә алды. Батырҙарҙың ирек һәм бәхет даулауын үҙе һөйләгән әкиәттәрҙә түгел, тормошта күреп үлде ул.

Сабир ағайым менән беҙ икәүҙән-икәү тороп ҡалдыҡ. Ул да ике-өс айҙан һуң үҙ теләге менән Ҡыҙыл Армияға китте. Уға ун һигеҙенсе генә йәш ине әле. Мин яңғыҙым ҡалдым. Шул йылды көҙ миңә лә ауылдан китергә тура килде. Тәүге осраған поезд ҡайҙа барһа, мин дә шунда киттем. Поезд Украинаға алып

барҙы, Харьковта туҡтаны, мин дә шунда туҡтап ҡалдым. «Тел Киевҡа ла еткерә» тиҙәр, мин телһеҙ көйгә Харьковҡа уҡ барып еттем. Был ҙур ҡала урамдарында күп йөрөнөм мин. Вокзалдарында миңә таныш булмаған урын юҡ ине. Мин бер үҙем түгел инем.

Беҙҙе тотоп, Харьковтан алыҫ түгел балалар колонияһына оҙаттылар. Ундағы тормош үҙе ҙур роман ул. Шунда мин рабфакка әҙерләндем. Унан һуң медицина институты. Институтты уҙған йыл тамамланым. Хәҙер врач, ҡайҙа эшләүем һиңә билдәле. Ә ағайым Алыҫ Көнсығышта, сик һаҡсыһы. Күкрәгендә – Ленин ордены, ә һул ҡолағында, минеке кеүек, бала саҡты онотолмаҫлыҡ тамғаһы йөрөй...

Юрийҙың кәмәне тейешле еренә килтереп туҡтатыуына сәғәттән артығыраҡ ваҡыт үткәйне инде. Тамара быны һиҙмәне. Ул Клязма йылғаһында түгел, киң диңгеҙҙә, үткән тормоштоң шаулы тулҡындары өҫтөндә йөҙә ине. Көслө ине, ҡурҡыныс ине ул тулҡындар. Тамараның атаһы шулар араһында ҡурҡмай йөҙҙө, шунда һәләк булды... Ана шул тулҡындар аша нисек үлеүен Тамара Юрийга бөтә дөрөҫлөгө менән хикәйә итергә тырышты. Ләкин күҙ алдында йәнләндererлек итеп, матур һөйләүгә маһирлығы юҡ ине уның. Быны өсөн рус телен яҡшы белеү генә етмәй, һәр врач та Чехов кеүек художник түгел бит.

Уның хикәйәһендә ҡабартып һөйләүҙәр булманы. Тик ул Юрийға, язалау отряды начальнигы Андрей Зубатый үҙе күтәргән кулактар фетнәһе ваҡытында үлде, тип кенә дөрөҫөн әйтмәне. Кисә кино ҡарар алдынан Тамараның буфетта күргән кешеһе ана шул Андрей Зубатый ине. Юрий менән бер үк поезда Мәскәүгә килеүе лә шул бандитты осратыуы буйынса булды. Тамара Юрийҙы ни тиклем генә яратмаһын, был турала һүҙ ҡуҙғатманы, белгертмәне. Ләкин уларҙың ҡыҙыу мөхәббәттәренә ҡара тап булып йәбешеп ҡалырмы һуң был?

– Йә, килеп еттек! – тигән тауыш Тамараны һиҫкәндереп ебәрҙе. Ул шул саҡта ғына кәмәнең яр буйына туҡтағанлығын аңланы.

Юрий шырпы һыҙып, сәғәтенә ҡараны. Ваҡыт беренсе егерме минут. Ярты сәғәттән һуңғы дачный поезд үтә, өлгөрөргә кәрәк!

Кәмә яр аҫтында ҡалды. Улар өҫкә менделәр.

– Ҙур рәхмәт һиңә, Тамара, һөйләүең өсөн! Миндә онотолмаҫлыҡ тойғо ҡалды. Мин шуны ғына әйтә алам: һинең кеүек ҡыҙҙы һөйөүем менән үҙемде бәхетле һанайым!

Улар урман аша үткән тар юлдан бара. Төн ҡараңғы. Баш өҫтөндә, төн пәрҙәһен йыртырға теләгәндәй, күк күкрәп ҡуя. Ел дә ҡуҙғалды, йәш ағастар ергә бөгөлдө.

– Ниндәй ҡурҡыныс, Юра!

– Һин быңдай ҡурҡыныстарҙан ғына үткән ҡыҙ, ҡурҡма юҡҡа!

Һуҡмаҡ тимер юлға алып сыҡты. Улар уңға боролдолар һәм рельстар буйлап ҡайтыр яҡҡа – алдағы разъезға табан атланылар. Алда ниндәйҙер кешеләр тап булды, Тамара ҡаушап китте, ләкин төндөң ҡараңғы булыуы уның ҡурҡынған йөҙөн йәшерҙе. Кешеләр унлап бар. Һәр береһенең ҡулында кескәй сумаҙан.

– Әйтегеҙсе, – тине береһе, – ял йорто ҡайҙараҡ? Поездан, белмәгәнлектән, элегерәк төшкәнбеҙ. Хәҙер эҙләп йөрөйбөҙ.

– Һеҙгә алғы разъезға тиклем барырға кәрәк әле! Унан алыҫ түгел, һорашырһығыҙ! — тип яуап бирҙе Юрий.

Сумаҙанлы кешеләр йүгерә-атлай үҙ юлдары менән киттеләр.

Ун биш минуттан поезд үтә. Разъезд күренмәй...

– Алыҫмы әле?

– Хәҙер етәбеҙ, Тамара.

Күҙҙәре менән төн ҡараһын тишеп, ҡаршыға автомобиль килә. Бына ул Тамара менән Юрийҙы, улар юл буйындагы ҡыуаҡлыҡ аша үткәндә, уҙып та китте. Тамара машинаны, артындағы кескәй генә ҡыҙыл күҙҙәре юғалғансы, боролоп ҡарап торҙо.

Ун минуттан поезд үтә...

Уларҙы теге сумаҙанлы кешеләр ҡыуып еттеләр. Кире боролғандар. Береһе Юрийҙың эргәһенән үк бара башланы.

– Иптәш, һеҙ ҙә яңылышҡанһығыҙ, – тине ул, – унда бер төрлө лә йорт

юҡ! Беҙ уҙып барыусы машинаны туҡтатып, шоферҙан һораштыҡ. «Ял йортон әллә ҡасан уҙып киткәнһегеҙ инде», – ти.

Юрий быны белә тороп, шулай эшләгәйне.

– Улай булһа, ғәфү итегеҙ! – тине ул һәм уларҙы тағы берәр яҡҡа алдап ебәреп, айырылыу өсөн план ҡора башланы.

– Һеҙ төшкән разъезға күп бармы әле? – тип һораны Тамара ят кешеләрҙең береһенән. Ләкин теге кеше яуап бирергә өлгөрмәне: арттан килгән машинаға юл бирергә ашығып, ситкә тайпылды. Машина уҙманы. Туҡтаны. Шофер кабинкаһының ишеген асты.

– Юра, һора әле, беҙҙе лә алып ҡайтмаçмы икән?

Ләкин шофер Юрийҙың үҙен саҡырып алды:

– Йәш кеше, бер минутҡа ғына килегеҙ әле, ошо адресты белмәçһегеҙме икән?

Юрий машина алдына барҙы, шофер уға керләнеп бөткән блокноты эсенән бер ҡағыҙ сығарып һуҙҙы. Юрий яҙыуҙы күңелдән генә ҡат-ҡат уҡыны, һуңынан аҙыраҡ уйлап торҙо ла, шоферҙың күҙҙәренә тултырып ҡарап:

–Беләм! – тине.

Машинаны ҡамап алған кешеләр ял йортон һорашырға тотондолар, ләкин шофер улар бая бер тапҡыр туҡтатып һорашҡан кеше булып сыҡты.

– Мин һеҙгә бер тапҡыр әйттем бит инде, уҙып киткәнһегеҙ, – тип ҡырҡыу яуап бирҙе шофер.

– Әйҙә ултыр, Тамара, – тине Юрий. – Һис тә уйламағанда машиналы булдыҡ! Ҡайтабыҙ!

Биш минуттан поезд үтә. Ләкин уның кәрәге юҡ ине инде...

Бер аҙ барғас та машина туҡтаны, – ҡуҙғалманы. Аптырағас шофер артына боролдо һәм Юрийҙың кәйефһеҙ ултырыуын һиҙҙе. Ул һуларға һауа етмәгән кешегә оҡшап ултыра ине. Шофер уны борсомаçҡа теләне, күрәһең,. Тамараға ҡарап:

– Минең машинаның ҡайсаҡ шулай капризлана торған ғәҙәте бар! Мөмкин булһа, бер генә минутҡа бынау штучканы баçып тороуығыҙҙы һорар

инем, ә мин моторҙы ҡарайым! – тине.

Тамара ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Шофер эргәһенә сығып ултырҙы ла бармағын, тырышлыҡ менән, ул күрһәткән ниндәйҙер бер кнопкаға баҫты. Мотор геүләй ҙә башланы. Хеҙмәте менән ҡәнәғәт булған Тамара йылмайып ҡуйҙы. Юлда һис кем булмаһа ла, шофер машинаны ике тапҡыр ҡысҡыртып алды.

Һуңғы поезд уҙып китте...

– Рәхмәт һеҙгә, – тине шофер Тамараға ҡарап, – бармағығыҙҙы алырға мөмкин хәҙер!

Машина осҡан кеүек бара ине. Тамара Юрийға боролдо. Йәшен тиҙлеге менән килеп сыҡҡан күренеш башына һуҡҡандай тәьҫир итте. Күҙҙәренә ышанмай аптырай ҡалды. Бер ағарынды, бер ҡыҙарынды, эҫеле-һыуыҡлы булып китте: Юрийҙың ике яғында ике кеше ултыра. ГПУ работниктары. Юрийҙың йөҙө үҙгәргән. Өндәшмәй.

– Гражданин Тарасов, – тине уң яҡтағыһы, – һеҙ ҡулға алындығыҙ!

– Мин... Юрий Тарасов. Шаяртмағыҙ, егеттәр! – Ул һүҙҙәрен йылмайып әйтергә тырышты, ләкин ҡурҡынған йөҙөндә ул бөтөнләй яһалма сыҡты. Ҡаушамаҫҡа тырышҡанлығы һиҙелә ине.

–Эйе, һеҙ!.. Беҙ шаярыр өсөн килмәнек! Күтәрегеҙ ҡулдарығыҙҙы!

Тамара шунда ғына машинаның «каприз»ын һәм һис тә кәрәге булмаған кнопканы баҫып тороуын аңланы. Юрий эргәһендәге урындарҙы кемдәр өсөн бушатып, шофер янына сығыуын төшөндө.

Юрий теләмәҫтән генә ҡулдарын юғары һуҙҙы, һул яғынан ултырған кеше уның салбар кеҫәһенән браунинг тартып сығарҙы.

– Башҡа ҡоралығыҙ бармы?

– Юҡ.

– Документтарығыҙҙы сығарығыҙ!

Юрий ашыҡмай ғына кеҫәһен ҡапшан башланы. Башта бумажнигын сығарҙы. Эсендә паспорт һәм командировка ҡағыҙы бар ине. Уң яҡтағы кеше шуны уҡыны ла икенсе яғын әйләндерел ҡараны. Унда: «Килгән урынына,

Мәскәүгә, китте. 5 июль, 1932» тип яҙылған, өҫтөнә түңәрәк мисәт баҫылған.

– Бөгөн нисәһе?

– Дүрте.

– Һеҙ булған ерҙәрҙә числолар алдараҡ йөрөй икән шул! Аңлашыла.

Юрий бер һүҙ әйтмәне. Башын эйҙе.

– Тағы нимәләрегеҙ бар?

– Юҡ.

– Ә бына был ҡалҡып торған?

– Папирос.

– Сығарығыҙ!

Юрий салбарының уң яҡ кеҫәһенән «Казбек» сығарҙы. Формалағы кешеләрҙең береһе уны асып ҡараны: ике геиә папиросы бар. Унан һуң ул ҡаптың аҫтын әйләндерҙе һәм күҙҙәре йәшел ҡара менән аҫтына һыҙылған «25 шт.» цифрына туҡталдылар.

– Записканы бирегеҙ!

– Ниндәй записканы?

– Шофер биргән!

Юрий костюмының түш кеҫәһенән баяғы яҙыуҙы сығарып бирҙе. Унда былай тип яҙылған:

«Юра!

Операцияның кәрәге юҡ. Мин быны һиңә старший хирург булыуым яғынан бойорам. Бәхеткә ҡаршы эш уҙмаған булһа, хәҙер үк ошо машина менән ауырыуыңды оҙатып ҡуй ҙа ҡайт.

Андрейҙы больницаға алып киттеләр.

Сариман».

Юрий быны Сарим Маннанов яҙыуына һис тә шикләнмәне: һүҙҙәр ҙә уныҡы, почерк та уныҡы. Тик быны килтергән шоферҙың ғына үҙ кешеһе булып сыҡмауын башына һыйҙыра алманы. Асыуынан Юрий үҙен-үҙе өҙгәләрҙәй булды.

ГПУ работниктары телһеҙ ултырған Тамараға ҡаранылар.

– Йә, иптәш Юлдашева, төшөнәһегеҙме?

Иптәш һүҙен ишетеү Тамараның намыҫына әллә нисек тәьҫир итте. Күңеле йомшарҙы. Ул үҙен был исемде бысратҡан кеүек, уға торорлоҡ түгел кеүек хис итте. Етмәһә, фамилияһын да беләләр.

– Бер нәмә лә аңламаным! – тине ул.

– Беләһегеҙме хәҙер, егетегеҙ кем?

– Улайҙыр, тип башыма ла керетмәгәйнем мин!..

– Тимәк, һаман уның кемлеген белмәйһегеҙ әле? Улай булһа, таныш булығыҙ: был ҡарға – Виктор Сөләймәнович Тарханов! һеҙгә билдәле баяр малайы. Ул һеҙҙе поезд аҫтына ташларға тейеш ине. Өлгөрмәй ҡалды... Шулаймы, господин Тарханов?

– Шулай икәнен белгәс, ниңә һорап тораһығыҙ?

Тамараның йөҙө үҙенеке түгел ине. Юрийға булған мөхәббәте бер төрлө лә үлсәүгә һыймаҫлыҡ нәфрәткә әйләнде, уны белдерергә һүҙ таба алманы, асыуы тамағына тығылғандай булды. Тештәре ҡыҫылды. Уның менән уҙҙырған көндәрен боҙ аҫтында ҡалған сәскәгә оҡшатты; ялған күҙҙәрен соҡоп алғыһы килде. Йөрәгендә урын таба алмаған асыу тышҡа бәреп сыҡты.

– Ах һин, йылан! Кеше ҡиәфәтендәге йыртҡыс икәнһең һин! Ҡәбәхәт! Мин Виктор икәнлегеңде белгән булһам, күҙҙәреңде энә менән соҡор инем! – Тамара уның йөҙөнә төкөрҙө. Ҡоторонған асыуының уты шуға ҡушылып сыҡҡандай булды.

Тамара оҙаҡ ваҡыт үҙен ҡулға ала алмай торҙо.

– Мнн һеҙгә, –тине ул тынысланғас, ГПУ работниктарына ҡарап, – ғүмеремде ҡотҡарыуығыҙ өсөн ни генә лә тиергә белмәйем. «Рәхмәт» һүҙе генә мин белдерергә теләгәндәрҙе һыйҙыра алмай! Ни тиергә һуң һеҙгә бының өсөн?

– «Рәхмәт» тиеүегеҙҙән беҙ һеҙҙе аңлайбыҙ, иптәш Юлдашева, шул еткән.

Бынан ике сәғәт элек Сарим Маннанов ҡулға алынды. Ул Волков ҡырынан өйөнә ғәҙәттән тыш борсолоулы йөҙ менән ҡайтты. Андрей Зубатыйҙың ҡулға алыныуы унда ҙур ҡурҡыныс тыуҙырҙы, ул үҙен ҡыл өҫтөндә генә баҫып торған кеүек һиҙә ине. Бына-бына ул ҡыл өҙөлөп китер ҙә,

Маннанов капут! Унын артынан бөтә ҡалған ҡороткостар.

Асыуынан Маннановтың ерән мыйығы тырпайҙы, ҡаҡ башы еүешләнеп, тағы ла ялтырай төштө. Уны бер үк уйҙар иҙҙеләр: «Тамараны хәҙер поезд аҫтына ташлауҙан, зыяндан башҡа, файҙа булмаясаҡ, үҙебеҙҙе фаш итергә юл ғына асып бирәбеҙ беҙ. Ҡалдырып торорға кәрәк. Барыбер беҙҙең ҡулдан үтәсәк ул. Һәм ул, Волковтын ризалығынан тыш, Тархановты кире ҡайтарырға булды. Шунда уҡ үҙенең таныш шоферына шылтыратты ла, яҙырға тотондо.

«Юра!

Операцияның кәрәге юҡ. Мин быны...»

Яҙыу әҙер, ә шофер һаман юҡ. Асыуы Маннановты аяҡтарына баҫтырҙы, ишекле түрле йөрөттө.

Һәм ул кире уйланы:

– Волковса булһын, дөмөкһөн әйҙә! Йә пан, йә пропал! – Ҡағыҙҙы асыу менән усына йомарланы. Шул минутта ишекте шаҡылдатҡан тауыш ишетелде.

– Әһә, шофер! – Маннанов записканы өҫтәлгә ырғытты ла, шул уҡ йоҙроғо менән, шоферҙы ҡаршыламаҡ булып, ишекте асты. Ләкин ул яңылышты – ишектән ГПУ работниктары инделәр.

Маннанов ҡулға алынды. Ҡағыҙҙары араһында иң кәрәклеһе – юҡ ителмәй ҡалған ана шул записка булды.

Рельстарҙан һуңғы дачный поезд үтергә ун минут ваҡыт ҡалғас, был записка үҙенең адресатын тапты. Ләкин уны килтереүселәр записканы уҡыусының үҙ кешеләре булып сыҡманылар.

Бүлмәлә телефон шылтыраны. Шуны ғына көтөп ултырған кеше трубканы алды.

–Тыңлайым! Мин – Волков... Иҫәнмеһегеҙ, иптәш Тайфунов! Өсөнсө тапҡыр?.. Мин өйҙә юҡ инем шул... Яңы ғына ҡайттым!.. Ун минуттан... Ашығығыҙ, көтәм!

Ун минут та үтмәне, бүлмәгә ҡара плащ кейгән Тайфунов килеп инде. Уға утыҙ биш йәштәр бирергә мөмкин. Йөҙө – больницаға ашығыс ярҙам каретаһы артынан килеүсе кешенеке кеүек, көтөлмәгән хәбәр барлығын белдереп тора.

Тынын йыш ала. Ул өҫтөн дә һалып торманы. Волков менән көрештеме юҡмы, һораһаң, уны ла әйтә алмаҫ ине.

– Ишеттегеҙме? – тип һораны ул күптәндән таныш кеше кеүек.

– Юҡ, ни бар?

– Андрейҙы ла, Саримды ла ҡулға алғандар.

– Ҡулға алғандар?

– Эйе.

– Да-а... Ә мин һеҙҙе күңеллерәк хәбәр менән көткәйнем!

Улар диванға ултырҙылар, һүҙ урынына ауыҙҙан папирос төтөнө урғылып сыға башланы. Тынлыҡты башлап Тайфунов боҙҙо:

Ғәйеп Андрейҙың үҙендә. Быҙау ул. Имеш, культуранан артҡа ҡалмаҫҡа тырыша. Бандит исеме алған кеше өсөн ундай культура ниңә кәрәк һуң! Киноға ҡалыу уға ниңә инде? Кеше кереп бөткәс кенә, һуңға ҡалған булып бар ҙа, һөйләш рәхәтләнеп буфетсың менән! Ә ул Юлдашеваның шул дачала икәнен белә тороп, етмәһә, ул отпускыла бит әле, кино ҡарар өсөн ҡалаға барып йөрөймө ни ул, шунда була, әлбиттә – әҙерәк шикләнергә лә уйламаған. «Таныш булығыҙ, мин һеҙҙең атағыҙҙы аттырыусы, һеҙҙең ҡолағығыҙға ҡармаҡ ҡаптырыусы Андрей Зубатый булам, хәҙер Зубатов булып киттем!» тип кенә әйтәһе ҡалған. Тамараның башына ла тай типмәгән бит, шул төндө үк еткергән. Теге группаны тоттороуҙа ла ул ҡыҙҙың ҡатнашлығы бар ине. Бынһы ла унан башланды. Хәҙер уны поезд аҫтына түгел, йәһәннәм төбөнә ташлаһаң да, ни файҙа. Әллә ҡасан уҡ дөмөктөрөргә кәрәк ине!..

– Ярай, – тине Волков, – булған эш тураһында фәлсәфә һатыу – хәҙер урынһыҙ. Провал башланды. Ысулды тамырынан үҙгәртергә, юлды икенсе ерҙән ярырға кәрәк. Ҡулға ла төшмәҫкә!

– Нишләргә һуң?

– Буфетсыны бөгөн үк күрергә кәрәк!

– Уны күрәһе юҡ, бында ул. Продукты алырға килгән, төнгө поезға өлгөрмәй ҡалды. Миндә ҡунып китергә булды.

– Ә һеҙ, ҡулға алыныу ҡурҡынысы морон аҫтында ғына торғанда, шуны

ҡундырып ятаһығыҙмы?

– Бер ни ҙә булмаҫ, тағы ике сәғәттән китә бит ул!

– Һеҙгә хәҙер үк бер ергә барырға кәрәк!

– Ҡайҙа?

– Ҡоралығыҙ бармы?

– Бар.

– Күрһәтегеҙ!

Тайфунов кеҫәһенән шымарып бөткән браунинг сығарҙы. Волков уны ҡулына алды ла, әйләндергеләп, ҡапшап ҡараны, асып, патронын тикшерҙе; һуңынан асыу менән өҫтәлгә ырғытты.

– Шуның менән кеше үлтермәксе булып йөрөйһөгөҙмө? Ҡорал түгел, ерунда бит был!

Тайфуновтың кәйефе төштө.

– Ерунда булһа ла, – тине ул, – пулялары тейгән кешенең иҫән ҡалғаны юҡ ине әле. Миндә ул ун ике йыл инде. Йөрөтөргә лә уңайлы, еңел, бәләкәй...

– Ҡоралды йөрөтөр өсөн генә бирмәйҙәр уны! Бына мин һеҙгә бер атыу менән кеше «әһ» тә итергә өлгөрә алмай торғанын бирәм!

Волков урынынан торҙо һәм тиҙлек менән өҫтөндәге еңел генә кейемен һалды ла, кеҫәһенән наганын сығарып, Тайфунов ҡаршыһына килеп баҫты.

– Бына ул ҡорал нисек була?

Тайфуновтың ҡыҫыҡ күҙҙәре йыртыла яҙып аҡайҙылар. Маңлайынан тир бөртөктәре бәреп сыҡты, һөйәп ҡуйған ағас һымаҡ хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалды.

– Йә, ниңә телегеҙҙе йоттоғоҙ?

– Сөнки мин үҙем дә йотолдом.

Теге кеше, һалып ташлаған кейемен үҙ урынына элер өсөн, гардеробты асты. Шул секундта уҡ Тайфунов мыштым ғына торҙо ла эргәһендәге өҫтәлгә ташлаған браунингка үрелде, һиҙҙермәй генә, бапдиттарса етеҙлек менән ҡулына эләктерҙе һәм уның елкәһенә тоҫҡаны.

– Йүнһеҙ нәмә йүнһеҙ кешеләрҙе ҡаҙалдырырға йөрөй ул! – тип ҡысҡырғанда, курокты биш-алты тапҡыр тарткайны инде. Ләкин шартламаны.

Асыуланып, иҙәнгә күтәреп бәрҙе.

Теге кеше иҙәндә ятҡан браунингты кеҫәһенә алып һалды ла:

– Иҫәр һин! – тине ул, – мин әйттем бит инде, ул нәмә менән патрондары булғанда ла, кеше үлтереп булмай тип! Һин атҡан булаһың. Ә мин пуляларын үҙ күҙ алдында алдым. Ниндәй бандит һин, шуны ла һиҙмәгәс? Ну, гражданин Юрмат Зиннатович Ғәйфуллин, киттек! Беҙҙең беседа бөттө булһа кәрәк! Волков менән һөйләшергә һуңғараҡ ҡалдың!

Тышта, юлдағы бөтә бысраҡтарҙы йыуып бөтөрөргә теләгәндәй, ҡойоп ямғыр яуа ине.

## Тормош яңынан башлана[1]

«Тормошҡа бер юл бар. Ул немец мәйеттәре өҫтөнән бара».
*И. Эренбург*

1

Ҡаланың дошман ҡулынан ҡотҡарылыуына ике генә аҙна. Ул үҙенең күренеше менән рәхимһеҙ туҡмалыуҙан һуң әле генә башын күтәргән ауырыу кешене хәтерләтә. Элек урамдан уҙыусыларҙың иғтибарын үҙенә тартҡан ҡупшы йорттарҙың күбеһе таш-кирбес өйөмөнә әүерелгән, йәки селтәрләнгән стеналары ҡуҡрайып торалар. Улар менән аралаш төҙөк йорттар ҡаланың батыр ҡорбандары иҫтәлегенә күтәрелгән памятник тора.

Ҡала өҫтөнән үлем үткән. Ҡалаға йән яңы инә. Тырыш кешеләр уны аяҡҡа баҫтырыу, төҙөкләндереү эшенә бирелгәндәр.

Ҡалаға йән яңы инә. Бынан ун биш көн элек ҡаланы томалап торған немец ҡараңғылығы алынған. Шул көндө, иҫән ҡалған әсәләр һәм балалар йөҙөндә тәү башлап йылмайыу күренгән. Һәм ана шул көндө Ҡыҙыл Армия частәрен сабырлыҡ менән көткән ҡала кешеләре, тормоштоң яңынан башланыу билдәһе итеп, бейек урындарға ҡыҙыл ҡомас[2] киҫәктәре элгәндәр. Улар ҙур түгелдәр. Был бәләкәй ҡыҙыл яулыҡтарҙың ирекле елберҙәүҙәрендә ниндәй ҙур көс барлығын ҡалының иҫән ҡалған кешеләре генә беләләр.

---

[1] Харисов Ә.И. Тормош яңынан башлана. Өфө: Башгосиздат. 1945, 3-11-се биттәр.
[2] Асыҡ ҡыҙыл төҫтәге кизе-мамыҡ туҡыма (*төҙөүселәрҙән*).

Мин ҡаланың «Советский» урамын эҙләйем. Ләкин урамдарҙың исемдәрен әйтеп тороусы ҡалайҙарҙы күрмәйем: улар йәбештерелгән ҡойма һәм ҡапҡа бағаналары, йорт мөйөштәре емерелгәндәр, йәки янғын ҡара күмергә әйләндерелгән. Төҙөклөгөн юғалтып бөтмәгән урам исемдәре лә адрес эҙләп йөрөүселәргә бер нәмә лә бирмәй тип әйтерлек: улар немецса яҙылғандар. Өҫтәүенә хәрефтәре лә эреле-ваҡлы булып һыҙылғандар. Шуға күрә был яҙмалар тейешле атамаларҙы аңлатыуҙан бигерәк, яҙыусыһының тупаҫ ҡуллы былыуы тураһында һөйләйҙәр.

Өҙгөләнгән ҡаланың ун ике-өс йәшлек малайҙары, ана шул ят телдәге тупаҫ хәрефте алып ырғытып, һәр кешегә лә яҡын, элекке исемдәрҙә ҡаҙаҡлап йөрөйҙәр: «Ленин урамы», «Сталин урамы», «Т. Шевченко урамы».

Миңә «Советский» урамдағы илле дүртенсе йорт кәрәк. Мин шунда ашығам. Ике урамға мөйөш булған йорттоң бер яҡ ҡабырғаһына «Лазо урамы» тип яҙылған ҡалай таҡта ҡаҙаҡлап тороусы малайҙан:

– Ҡустым, «Советский урамы» ҡайҙа? – тип һораным.

Малай, стенаға һөйәлгән баҫҡысында торған килеш миңә боролоп ҡараны ла:

– Хәҙер, ағай, урамдарҙың бөтәһе лә советский! – тине. – Улар ҡыуылдылар инде, бүленеп ҡалғандары беҙҙең ҡалала эҙләгәндәрен таптылар! – тип өҫтәне.

Малайҙың был тапҡыр яуабы алдында мин һүҙһеҙ ҡалдым. Ул дөрөҫ әйтә: бөтә урам дә хәҙер советский, ҡалала немецтар ҡалдырған эҙҙе бөтөрөү бара.

Малай миңә «Советский урам»дың ҡайҙалығын өйрәтте, һәм мин уға яңылышмайынса барып сыҡтым. Бәхеткә ҡаршы, 54-се һанлы йорт төҙөк ине. Тик тәҙрәләре генә бомба яралыуынан тыуған һауа тулҡынынан ҡырылған булһа кәрәк, – быяла өлгөләре фанер таҡтаһы менән алышынып торалар. Парадный алдына килеп баҫтым да ишекте шаҡылдата башланым. Үҙем түҙемһеҙләнәм. Йөрәк, ҡулдарҙың ишеккә һуғыуына ҡарағанда ла, ҡатыраҡ тибә кеүек. Бына хәҙер Анна Михайловна килеп сығыр, һәм мин уны шатлыҡлы хәбәр алып килеүем менән ҡыуандырырмын. Шулай уйлайым мин. Ишекте

тағы ла ҡатыраҡ ҡағам. Ниңә ҡурҡып торорға, мин күңелһеҙ хәбәр килтереүсе кеше түгел бит!

Уйҙар томанында юғалып торғанда, ишек асылды. «Кем бар?» тип һорап та торманылар. Сөнки йорт хужаһы яҡшы белә: немецтар ҡыуылғандар, ҡала хәҙер совет ҡалаһы.

Минең ҡаршыға алтмыш йәштәрҙәге бер ҡарсыҡ сығып баҫты. Майорҙың әсәһе булырға тейеш. Дөрөҫөн әйткәндә, мин был әбей барлығын бөтөнләй иҫтән сығарғамын. Һүҙҙе хаттың адресатын исемләүҙән башларға булдым:

– Анна Михайловна Марченко бында торамы? – тип һораным.

– Анна? Бында тора, һеҙ уғамы? Әйҙәгеҙ керегеҙ, – тине әбей.

Мин эскә үттем. Йыйнаҡ ҡына тын бүлмәлә башҡа бер кем дә юҡ ине.

– Мин Георгий Ильич янынан. Хат ебәрҙе... Һеҙ уның әсәһе булаһығыҙ түгелме? – тинем.

Моңһоу әбейем бөтөнләй асылып китте. Шатлығынан илап та ебәрҙе. Уның йыйырсыҡлы йөҙөндә мин алып килгән һөйөнөслө хәбәргә тиң хеҙмәт күрһәтергә тырышыу һиҙҙем. Ләкин көтөлмәгән хәбәр әбейҙе ҡаушатып ебәрҙе. Шуға күрә ул был минутта ғына миңә ултырғыс күрһәтеүҙән башҡаны тәҡдим итә алманы.

Мин уға улының Тамбов ҡалаһында, госпиталдә икәнлеген әйттем. Уның уң аяғы минанан яраланғанлығын, хәҙер инде ҡултыҡ таяҡтары ярҙамы менән йөрөй алыу хәленә килгәнлеген һөйләп бирҙем. Әбей, улының иҫәнлеген белгәс, балаларса шатланды, үҙен:

– Батыр яраһыҙ булмаҫ инде, – тип тынысландырҙы.

Хаттың адресаты өйҙә түгеллеген белгәс, мин:

– Анна Михайловна үҙе өйҙә юҡ, күрәһең, – тинем.

Һорау әбейҙә киҫкен үҙгәреш тыуҙырҙы. Уның шатлыҡтан йәшләнгән күҙҙәре тағы ла еүешләнә төштө. Был инде ҡыуаныу билдәһе түгел ине.

– Эйе, ул өйҙә юҡ, һәм бер ваҡытта ла инде өйҙә булмаясаҡ, – тине әбей.

Мин күңелһеҙ хәлде һиҙенә башланым.

– Быны нисегерәк аңларға, әбей?

– Һөйөклө киленемде, һәм уның улы Валерикты немецтар...

Әбей һүҙен әйтеп бөтөрә алманы, ләкин уның сабый бала кеүек үкһеүенән «үлтерҙеләр» тигән мәғәнә аңлашыла ине.

Хәҙер инде әбейҙең күҙҙәренән йәш сыҡмай. Ул үҙенең әрнеүле кисерештәренән бушанырға тырыша. Миңә ҡыҙғаныс ул. Минең үҙемдең дә күңел йомшарҙы. Әбейҙе йыуатыу сараһын таба алмайынса, эреп ҡалыуыма асыуым килә. Мин шундай шул. Бындай эштә һис кенә лә һәләтлегем юҡ. Әбейгә урамда осраткан малайҙың «Улар ҡыуылдылар инде. Бүленеп ҡалғандары ҡалала эҙләгәндәрен таптылар. Хәҙер ҡала – советский», тигән һүҙҙәрен ҡабатлауҙан башҡа, күңел тынысларлыҡ яңы нәмә әйтә алманым булһа кәрәк.

Әбей, минең үҙ өйөндә икәнлекте яңы ғына һиҙгән кеүек урынынан торҙо.

– Һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ һуң, улым? – тине.

– Мин, әбей, улығыҙ ятҡан госпиталдән, өлкән лейтенант Нарбеков. Фронтта улығыҙ менән бергә булдыҡ, бергә яраландыҡ. Тик айырма шунда: минең ярам еңелерәк, тиҙ төҙәлде.

– Ә хәҙер тыуған ерегеҙгә ҡайтып бараһығыҙмы?

– Юҡ, кире фронтҡа, үҙемдең часҡа. Мин үҙем көньяҡ Уралдан. Ләкин Уралға ҡайтыр өсөн элек Кавказға барырға кәрәк. Минең иптәштәр шунда, немецтарҙы ҡыйраталар.

2

Мин төндө бында үткәреп китергә булдым. Мария Николаевна хәленән килгәнсә ҡунаҡ итергә тырышты. Мин быға ҡаршылыҡ күрһәтмәнем, күп яфа һәм михнәт кисергән ҡарсыҡтың хәтере ҡалыуҙан ҡурҡтым. Ул миңә килене Анна һәм алты йәшлек ейәне Валерикты немецтар ҡулынан үлтерелеүен һөйләне. Мин күңел тынлығын юғалтмай тыңларға тырыштым.

– Бынан бер йыл элек, ҡала немецтар ҡулына күсеп, бер ай самаһы ваҡыт үткәс, беҙгә ерән сәсле, күк күҙҙәре сығып китергә торған Шульц фамилиялы бер немец фельдфебеле килде. Килде лә хужа ла булды.

– Был хәҙер минең торлаҡ, – тине ул, – ә һеҙ икегеҙ минең хеҙмәтселәрем

булаһығыҙ!

Һәм беҙ шул көндән алып, бер йыл буйына немец фельдфебеленың бәхетһеҙ ҡолдары булдыҡ. Ҡолдар ҙа эшләмәгән эштең иң ауыры Аня елкәһенә төштө. Ул Шульцтың бойороғо буйынса утын яра, кис менән фельдфефебелдең итеген һалдыра, керен йыуа, мундирын таҙарта. Бахырым төндәрен дә йоҡоһоҙ үткәрә ине. Шульц күҙенә күренгән эштәр эшләнеп бөткәс, водопроводтың йортта булыуына ҡарамаҫтан, ситтән һыу ташыттыра. Алып ҡайтҡан һыуҙы ергә түгә лә, Аняны тағы ебәрә. Аня тамам хәлдән тайып йығылмайынса, һыу килтереп түктереүҙән туҡтамай. Үтәлгән эштең берәр ере Шульцтың күңеленә оҡшамаһы, Аняны туҡмай ине.

Бер ваҡыт шулай, төн уртаһы үткәс, фельдфебель ғәҙәттәгесә иҫереп ҡайтты. Койкаһына һуҙылып ятты ла итектәрен һалдырырға ҡушты. Тығыҙ итектәрҙе һалдырырға Аяның көсө етмәй. Шульц аҡырына:

– Нығыраҡ тарт тиҙәр һиңә, булдыҡһыҙ ҡатын!

Аня бөтә көсөн йыйып, фельдфебель аяғынан итеген тартты. Ләкин итек һалынманы, немец иҙәнгә шыуып төштө. «Әһә, һин мине аяҡтан һөйрәп төшөрөргә уйланыңмы «әле» тип һикереп торҙо ла Аняны тибеп туҡманы. Бахыр Аня сәғәттәр буйы һушһыҙ ятты.

Әсәнең немец аяғы аҫтында ыҙаланыуын күреп, тыйыла алмайынса үкһегән Валерик тә ҡыҙғыныс ине. Сабый минең муйынға аҫылыныр ине лә:

– Оләсәй, атайымды саҡырып ҡайтарайыҡ. Унның наганы бар бит, дөмөктөрһөн шул ерән фашисты! – тиер ине.

Мин уға бының мөмкин түгеллеген аңлатам; уны: «Атаң фронтта, Шульц кеүек ерән фашистарҙың көн һайын тиҫтәләгәнен дөмөктөрә», – тип йыуатам. Һәм уға Шульц алдында был турала һаҡ булырға кәрәклекте, атаһын телгә алырға ярамағанлыҡты тағы бер тапҡыр иҫкәртеп ҡуям. Сөнки беҙ Георгийҙың фронтта икәнлеген, унның майор булыуын Шульцтан йәшерә инек.

Ләкин, күп тә үтмәҫтән, Валерик атаһының кемлеген йәшерен сер итеп тотоу сиселде. Һәм был хәл беҙҙең ғаиләгә беренсе ауыр ҡайғыны килтерҙе.

Бер көндө Шульц ҡайҙандыр бер коробка шоколад алып ҡайтты. Төргәген

асып бер шаҡмаҡ шоколад сығарҙы ла, Валерикты саҡырҙы:

– Валерик аҡыллым, кил әле бында!

Беҙ былдай яғымлы һүҙҙе Шульц ауыҙынан тәүге тапҡыр ишетә инек. Шуға күрә Валерик ҡарышып торманы, бер әсәһенә, бер миңә ҡараны ла фельдфебель ҡаршыһына ҡыйыуһыҙ ғына барып баҫты. Шульц ҡулындағы шоколад киҫәген Валерик ауыҙы ҡырына уҡ килтереп:

– Был нәмә? – тине.

– Шоколад.

– Бирәйемме үҙеңә?

– Бир.

Валерик ҡулын һуҙҙы. Һәм шул ваҡытта револьвер шартланы. Бала әсе тауыш менән ҡысҡырып, иҙәнгә йығылды. Беҙ уға ташландыҡ. Шульц үҙе шарҡылдап көлә.

– Йөрәкһеҙ малай, наган шартлауынан ҡурҡаһың! Тейҙерергә атһам, шоколадтың тәмлеһе эләгер ине! Ҡара һин уны, немец ҡулынан шоколад ашағы килә! – тине.

Валерик бик ҡаты ҡурҡҡан. Сабый шунан һуң бөтөнләй ауырыны. Төндәрендә ҡурҡыуынан ҡысҡырып уяна торған булды. Атаһын, әсәһен бутап һаташа торған булып китте.

Һәм беҙ Валериктан бөтөнләйгә айырылдыҡ.

Беҙ икебеҙ ҙә өйҙә юҡ инек. Шульц шунан файҙаланып баланы үҙенә ҡаратҡан, сөсө телләнеп:

– Мин һине бер ваҡытта ла ҡурҡытмам инде. Хәҙер әсәйеңде лә туҡмамам. Мин хәҙер уҫал түгел инде. Һинең кеүек балаларҙы бик яратам мин, – тигән.

– Һин хәҙер советскиймы?

– Әлбиттә. Һинең атайың кеүек үк... Атайыңды һағынаһыңмы?

– Һағынам. Ул тиҙ генә ҡайтмай әле.

– Ни эшләп?

– Ул һуғыша. Майор ул. Өләсәйем әйтә, атайың, ти, ерән сәсле фашистарҙы үлтерә, ти.

– Ниндәй сәсле?

– Ерән.

– Минеке төҫлөмө?

– Түгел... Һин бит беҙҙең яҡлы.

– Ә һин үҫкәс, кем булаһың, полковникмы?

– Юҡ, майор булам. Фашистарҙы атам.

– Атаһың?

– Эйе.

– Юҡ инде, һиңә атырға тура килмәҫ, большевик бөрсәһе.

Шульц ҡабаланмай ғына револьверын кабураһынан сығара һәм, шундай уҡ тыныс ҡанлылыҡ менән Валериктың елкәһенә тоҫҡоп ата...

Мин быны Шульцтың үҙ ауыҙынан ишеттем. Ул Валерикты нисек атыуы тураһында осоноп-осоноп бер офицерға һөйләне.

Георгий улының алты йәшлек ғүмере бына шулай киҫелде. Немец фельдфебеле ирекһеҙ ғаиләбеҙҙең берҙән-бер ҡыуанысын әшәке ҡулдары менән тартып алды ла беҙҙең ҡурҡытылған керһеҙ йөрәктәргә төҙәлмәҫ яра һалды...».

Мария Николаевнаның ҡарт хәтерен ирекһеҙләп биләгән һағышлы иҫтәлектәр таҫмаһы талғын ғына һүтелә барҙы. Ҡайһы ваҡыт ул өҙөлөп китә лә, бер нисә секундҡа ҡарсыҡтың тәрән һулауы, ауыр көрһөнөүе менән алышынып тора. Бүлмәне ҡараңғылыҡ баҫҡанлыҡтан, мин хәҙер уның кисерешле йөҙөн күрмәйем. Һалмаҡ аҡҡан монотонлы тауышын ғына ишетәм. Әбей өҫтәлгә, яҡты биреүенә ҡарағанда күберәк бүлмәне төтәҫләндерә торған торбаһыҙ лампа яндырып ҡуйҙы. Яҡтыһы үҙ тирәһенән алыҫ китмәгән был лампа минең алға немец баҫҡынсылары алып килгән, ыҫлы тормоштоң образы булып баҫты. Мин Мария Николаевнаның ҡала ҡотҡарылғанға тиклем булған көндәрен ана шул зәғиф лампаның һүнер-һүнмәҫ янған утына оҡшатам.

Һуҡыр лампаның һарғылт яҡтыһында бөтәһенән дә элек күҙгә бәрелгән нәмә мин алып килгән хат булды. Ул, бөтөнләгә боҙолмай асылған конвертына

кире һалып ҡуйылған килеш, өҫтәлдә ята. Мария Николаевна хатты, уның һәр бер һүҙен танауы осонда ғына эләгеп торған күҙлеге аша үткәреп, үҙенә башҡа ниндәйҙер бер көйгә һалып, укып сыҡты. Хаттың тәүге юлдары хәтерҙә, конвертына яҙылған адресы кеүек үк. Нык һеңешеп ҡалғандар: «Минең һөйөклө Аням, ҡәҙерле әсәйем һәм күгәрсенем Валерик! Бәлки, һеҙ юҡтырһығыҙ ҙа инде, бәлки, берегеҙ булһа ла иҫән ҡалғандыр, ә бәлки... Эйе, майор ғаиләһенән берәү генә иҫән ҡалған. Икәүһе тураһында әбейҙең ауыр иҫтәлектәре бар.

...Фельдфебель Шульц, Аняның майор ҡатыны икәнен белгәс, бөтөнләй саяланып киткән. Әкиәттәгесә мәғәнәһеҙ эштәр эшләтә башлаған. Ғинуарҙың өсөнсө числоһына ҡаршы төндә Анянан таңға саҡлы һыу ташытҡан. Һәм һыуҙы ҡайнаттырып ҙур шанға ҡойҙорған. Шан эҫе һыу менән тулғас, бойороҡ биргән:

– Хәҙер һин ошо һыу менән ҡапҡаны һәм уның бағаналарын ҡырып йыуаһың. Был йортта саф ҡанлы немец тора, ә ҡапҡа таҙа түгел!

– Атһаң атырһың, мин бындай эште булдыра алмайым, – ти Аня.

– Мин һине атмайым, – ти Шульц күҙҙәрен алаландырып, – ҡапҡа бағанаһына аҫып ҡуям, йә муйыныңа арҡан һалам. Ике минут ваҡыт һиңә: йә бойороҡто үтәйһең, йә муйыныңа арҡан һалам.

Бахыр Аня, ғинуар һыуығында ҡапҡаны йыуа. Фельдфебель, кәбеҫтә кеүек ҡат-ҡат кейенеп, ҡапҡа алдына сығып күҙәтеп тора. Һәм ул, урамдан үтеп барыусыларҙы туҡтатып, Аняны үртәй торған һүҙҙәр ҡуша:

– Ҡарағыҙ, майор ҡатыны ни эшләй, немец фельдфебелена нисегерәк хеҙмәт итә! Яңы тәртип тиҙәр быны!

Был Шульцтың һуңғы тилереүе, ә Аняның уға һуңғы тапҡыр хеҙмәт итеүе булған. Көн уртаһы еткәндә урам мөйөштәренә, яғылмай торған ҡоймаларға приказ йәбештерелгән:

«Иртәгә, 4 ғинуарҙа ҡала комендатураһында регистрация үткән, шулай уҡ үтмәй ҡалған бөтә совет командирҙары ҡатындарына 9 сәғәткә, 30 килограмдан да кәм булмаған багаж менән станцияға йыйылырға. Квартальныйҙарға 10

минутҡа һуңлап килеүселрҙе шунда уҡ атырға, ә приказ үтәүгә ниндәй булһа ла ҡаршылыҡ күрһәтеүселәрҙе ғаиләләре менән бергә юҡ итергә рөхсәт итәм.

Ҡала комендаты капитан Вольфсон».

Өҫтәүенә повестка ла килтерәләр. Был әбей менән киленде эҫелеһыуыҡлы итә, өнһөҙ ҡалдыра. Улар бер-береһенә ҡарайҙар ҙа «Ни эшләргә?» тигән һорауға яуап эҙләйҙәр. Ләкин уны таба алмайҙар.

Анна Михайловна киткән. Уларҙы яғылмаған вагондарға ултыртҡандар ҙа «Германияға күсереләһегеҙ» тип оҙатҡандар. Ике сәғәттән һуң ҡалаға хәбәр тарала. Теге ике разъезды үткәс тә, состав туҡтаған, багаждарын ҡалдырып, ҡар өҫтөнә сығып теҙгәндәр. Һәм... бөтәһен дә автоматтан атҡандар. Буш вагондар алға табан һуҙылып киткәндәр, ғәйепһеҙ пассажирҙарҙың үлек кәүҙәләре ҡыҙарған ҡар өҫтөндә ятып ҡалғандар...

3

Фельдфебель Шульц ике ағаһының да Ленинград фронтонда үлеүе тураһында хат алған. Ана шул ҡайғыны араҡы менән йыуырға теләп, өйҙән сыҡмайынса эсергә тотонған. Иҫерек Шульц өс көн буйына Мария Николаевна алдында аунап ятҡан. Бына шул өс көн эсендә Ҡыҙыл Армия частары ҡаланы баҫып алғандар.

– Урамда ниндәй атыш ул? – тип һорай иҫерек фельдфебель.

– Һуғыш заманында ниндәй атыш була һуң? – ти Мария Николаевна.

– Кемдәрҙе аталар унда?

– Ҡалала французлар юҡ бит. Немецтарҙы аталар. Ҡала хәҙер беҙҙекеләр ҡулында.

Былай ҙа төҫө ҡасҡан Шульц ҡурҡыуынан ағарына, ҡалтырана, ҡабаланып һул итеген уң аяғына кейә. Мария Николаевна хәҙер унан ҡурҡмай.

– Господин фельдфебель, ялан аяҡ ҡына йүгереү еңелерәк булмаҫмы икән? – тип көлә.

Айнып етмәгән фельдфебель иҙәндә сайҡала, ерән сәстәрен бумаландырып, умывальникка килә.

– Әй һин, ҡарсыҡ, башта һалҡын һыу ҡой тиҙерәк! Айнырға кәрәк! – ти.

– Сабыр ит, хәҙер айнытам мин һине! – ти Мария Николаевна, һәм ишек төбөнән балта алып килеп, түтәһе менән Шульцтың башына һуға. Щульц яңынан ҡуҙғала алмаҫлыҡ булып иҙәнгә ауа.

Ҡаты асыуҙан тештәрен ҡыҫҡан әбей балтаһын ырғыта. Буш бүлмәлә уның:

– Эткә эттәрсә үлем! – тигән ҡысҡырыуы яңғырай...

Мария Николаевна һөйләгән ваҡиғалар йоҡлағанда ла минең күҙ алдымдан китмәнеләр. Өҙөк-өҙөк булып һынланып торҙолар.

Аня ашығып-ашығып йорт ҡапҡаһын йыуа. Ул ҡайғылы түгел, йылмая. Йыуғысы аҫтында дегет менән яҙылған ҡара тапты алдыра алмай. Шул ваҡыт Мария Николаевна Шульцтың үҙен тотоп килтерә. Һәм уның ерән сәстәрен услап йолҡа ла йыуғыс яһай. Аня шуның менән ҡапҡалағы дегет менән яҙылған фельдфебель исемен бөтөрә. «Немец бысрағын немец бумалаһы менән бөтөрөргә кәрәк», – ти ул ...

Бына ялан аяҡлы Шульц урам буйлап йүгерә-йүгерә ҡасып бара. Уның ҡулында Валериктың ботинкаһы менән ойоҡтары һәм ике аш ҡалағы. Шульцты бер ҡыҙылармеец тотоп ала.

– Ни эшләтергә был босякты? – тип һорай ҡыҙылармеец.

– Ни эшләтергә? Билдәле: эткә эттәрсә үлем! – ти Мария Николаевна.

– Шулай бит? – тип минең ҡабырғаға төртөп ҡуя..

Мин күҙҙәрҙе астым. Ҡаршымда Мария Николаевна баҫып тора. Һәм мин әбейҙең йомшаҡ ҡына итеп ҡабырғаға төртөүенән уянғанлығымды аңланым.

– Торорға ваҡыт, улым, поездан йоҡлап ҡала күрмә! – ти ул.

Мин тиҙ генә тора һалдым да кейенә башланым. Әбей дөрөҫ әйтә. Йоҡлап ҡалырға ярамай: тормош яңынан башлана.

## Иҫтәлек өсөн[1]

Загорная ауылы оло юл өҫтөндә. Ауылдың төньяҡ осондағы, башҡаларҙан бер ере менән дә айырылмаған һөҙәк ҡыйыҡлы йорт был юлдан үткән һалдат

[1] Харисов Ә.И. Тормош яңынан башлана. Өфө: Башгосиздат, 1945. 12-24-се биттәр.

һәм офицерҙарҙың бик күбеһе өсөн таныш. Һуғыш ҡырҙарының был яғына илбеҙҙең алыҫ мөйөштәренән килгән егеттәр донъяла Загорная тигән ауыл барлығын ана шул һөҙәк ҡыйыҡлы өйҙә ҡунып сығыу менән белаләләр; халыҡ йәшәүсе был пункты тураһында иҫтәлек – хужаһы һылыу киленле ҡунаҡсыл әбей булған ана шул йорт менән нығытыла.

Һуғыш Украинаның был өлкәһенә инеү менән, һис кис тип әйтерлек, өйҙөң ишеге ябылмаҫ булды: фронтҡа үтеүсе хәрби кешеләрҙе йылы мөйөш тарта ине. Загорная ауылы аша һанһыҙ орудиелар, вьюктарға нығытылған пулеметтар, миномет һалынған двуколкалар, танкылар һуҙылдар.

Төндәрен дә ҡар йырып алға үтеүсе йәйәүлеләр, күшеккән атлылар Загорная ауылында тәҙрә ҡаҡтылар, ишек шаҡылдаттылар.

Әбей өйөнә ҡарҙан еүеш йомшарған тышһыҙ тунлы, бәҫләнгән бүрекле, боҙланып ҡатҡан быймалы фронтовиктар тулалар. Офицерҙар араһында хром итеклеләр ҙә осрайҙар. Хужа ҡарсыҡтың йөҙөндә тынғы бирмәй торған һанһыҙ юлсыларҙан ризаһыҙлыҡ әҫәре күренмәй. Тыштан ҡапҡастар менән ябылған тәҙрә үтә фронт юлы ғөжләй, көрт йырыусы боецтарҙың ҡысҡырыныуҙары ишетелә, буксовать иткән йөк машиналары. Ҡапҡандан ысҡынырға теләгән ҡырағай йәнлек кеүек, ынтылып-ынтылып геүләй. Ә өйҙә йылы. Арыған һалдаттар иҙерәй башлайҙар. Ҡайһылары, сисенергә лә өлгөрмәйенсә, ултырған ерҙәрендә үк йоҡлап китәләр. Ҡайһылары тоҡсайҙарынан сығарып, өҫтәлдә икмәк ҡырҡалар, шәкәр ваталар, балыҡ турайҙар. Әбейҙең килене Надя, юлсыларҙың бейәләрҙең, быйма һәм силгауҙарын тығыҙ сафтар менән мейес башына теҙә. Ебегән тундарҙы иҙәнгә йәйә. Шаянпритаҡ егеттәр һылыу киленгә һүҙ ҡушалар.

Төн һәр ваҡыт шулай бер төҫлө үтә. Хатта стеналағы сәғәт тә бер үк ваҡытта туҡтай кеүек, һәр кемдер уны, үҙ сәғәтенә ҡарап, бер ваҡытта дөрөҫләп ебәрә кеүек. Бөгөн дә, кисәге кеүек үк, тығыҙ ятҡан һалдаттар үткән төндәгесә хырылдайҙар, ыңғырашалар, һаташалар. Яралары йоҡо бирмәгән боецтар тороп, мейес алдына килеп ултыралар. Быңдай ваҡытта әбей ҙә йоҡламай. Яраһы борсоған һалдат әбейгә Брянск урмандары тураһында һөйләй. Ельня

янындағы һуғышты хикәйә итә. Ләкин, ул да әбейҙең улдарын күрмәгән дә, осратмаған да булып сыға. Төн ауышҡанда беҙҙең самолеттар бомбежкаға осоп үтәләр. Улар һәр ваҡыт түбән, өйҙөң һөҙәк ҡыйыҡлы түбәһе өҫтөнән генә, ә йорттағы ҡырыҫыраҡ аттарҙы өркөтөп осалар. Был ваҡытта уяу ятҡандар әбейҙең ауыр һулап көрһөнөүен һәм мөйөштәге ыҫланған иҫке иконаға ҡарап табыныуын күрәләр: ҡарсыҡ летчиктарҙың иҫән-һау боролоп ҡайтыуҙарын теләй. Яҡтырыр алдынан моторҙар тағы геүләй: самолеттар үҙ базаларына ҡайталар...

Загорная ауылына ингәс тә уң яҡтағы беренсе йорт фронтҡа уҙыусы сикһеҙ кешеләр ағымын бына шулай үткәреп тора. Шаян һәм баҫалҡыларға ла, уйсан һәм моңһоуҙарға ла, рус һәм башҡорттарға ла өйҙөң ишеге асыҡ. Тик, өй шығырым тулғанлыҡтан, ятырлыҡ урын ҡалмағанда ғына, әбей тәҙрә ҡағыусыларға ишек асмай.

– Беҙҙә һалдаттар тулы, балаҡайҙар, боролор урын да юҡ, күршеләргә керегеҙ. Минең өй эсе йәл түгел, тик үҙегеҙ ҙә ял итә алмаҫһығыҙ, башҡаларға ла ла тынғылыҡ бирмәҫһегеҙ, – ти.

Йөк машинаһының шоферы старшина Искәндәр Йыһаншин, үҙенең капризлы машинаһы менән маҙа сигер, өс көн буйына ошо йортта ятты. Әгәр уҙғынсы шоферҙарҙан етешмәгән запчастар һорап алып ҡалмаған булһа, машинаны ҡуҙғалып китерлек хәлгә килтереү өсөн ҙур ғына ремонт кәрәк булыр ине. Ә был ваҡытҡа бәйләнгән.

Төҫ-башы менән һынлы, шаян һәм һәр ваҡыт шат егет Йыһаншинға ҡатын-ҡыҙҙың башын әйләндерергә күп ваҡыт кәрәкмәй. Был юлы ла ул килендең башын әйләндерҙе, ләкин унан бигерәк үҙенең башы әйләнде: ул Надяға, бөтөнләй ғашиҡ булды. Надяның оҙон керпекле тере, ҙур һоро күҙҙәре, түңәрәк аҡ йөҙө егетте бөтөнләй үҙенә ҡаратты. Йылмайғанда күҙ осоноң әллә нисек һөйкөмлө итеп ҡыҫылып ҡуйыуын шофер Надяның ысын күңелдән яратыуы итеп күрергә теләне. Искәндәр Надяның күңеле ҡауырһындай аҡ тештәре кеүек саф булыуына шикләнмәй ҡараны. Ул шулай ине лә. Надя Искәндәргә тыныс күңел менән ҡарауҙан алыҫ тора ине. Ҡатын тәүге көндән үк,

бит-ҡулдары майланып бысранған шоферҙың ҡар менән йыуынғанын күреп, өйҙән тиҙ генә йылы һыу алып сыҡты һәм уның ҡулдарына ҡойоп торҙо. Искәндәрҙең йыуыныуы үҙ-ара ситләтелгән мәғәнәле һүҙҙәр менән оҙатыла барҙы. Ә һуңыраҡ инде улар осраҡлы һәм ваҡытлы осрашыуҙан килеп тыуған яратышыу тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләштеләр. Күп һөйләшеүҙәрҙән һуң, яҡынлыҡ тойғоларының бергә төнләнеүе һуғыштан һуңғы, тыныс көндәргә ҡалдырылды.

Искәндәрҙең һуңғы төнө йоҡоһоҙ булды. Уның башы әллә ниндәй уйҙар менән томаланды. Ул мискә эсендәге селедкалар кеүек тығыҙ ятҡан боецтарҙың хырылдауы, ыңғырашыуҙары аҫтында, йоҡа таҡталы стена менән бүленгән бүлмәлә Надяның үкһеп илауын ишетте. Искәндәрҙең күңеле йомшарҙы. «Бахыр ҡатын, ауыр уға. Бынығы ла бар. Ире һуғыштың беренсе айында уҡ үлгән».

Старшина йомшаҡ ҡына итеп стенанан шаҡылдатты.

– Инергә рөхсәт итегеҙ!

«Керегеҙ» тигән яуап ишетелде. Искәндәр филтәһе баҫтырылған бишле лампаның зәғиф яҡтыһында ағас карауат өҫтөндә бер йәшлек балаһын күкрәгенә ҡыҫып йоҡлатҡан Надяны күрҙе. Ул әсәһенең йәшле күҙҙәренә тура ҡарамаҫа тырышып:

– Йоҡлап булмай, Надя, башҡа әллә ниндәй уйҙар килә, – тине һәм карауат ситенә ултырҙы.

– Ниндәй уйҙар?

– Ниндәй булһын: һуғыш, тормош, алыҫта ҡалған Урал, Надя...

Надя балаһын мендәр өҫтөнә һалды һәм лампаның филтәһен күтәрә төштө.

– Һуғыш бөтөр, Искәндәр, – тине ул, – һин тыуып үҫкән ереңә ҡайтырһың. Ә быңдай үтеп барышлай ғына булған мөхәббәт, ғәҙәттә, төнөн төшөп, иртән ирегән ҡырау кеүек ул, – онотороһоң.

– Юҡ, улай түгел, Надя. Беҙҙең урамда ла байрам булыр, мин бынан тығы үтермен әле. Һине алып китермен. Ысын күңелдән әйтәм мин быны. Миңә ышанырға мөмкин...

Иртә менән старшина Йыһаншин йөк тейәгән машинаһы менән алға, орудие тауыштары йышыраҡ һәм асығыраҡ ишетелгән яҡҡа китте. Өйҙәре шырпы ҡаптарына оҡшаш йортло украин ауылы артта ҡалды. Ләкин арғы остағы, машиналағы йөк кеүек, арттан ҡалмай килә һымаҡ ине. Шоферҙың күҙ алдында һаман Надя йылмайҙы, өҫтәлдәге зәңгәр клеенкаһының һалдат бысағы менән ҡыршылып бөтөүенә һис тә ҡарғана белмәгән йомарт әбей һаман мейес алдында йөрөнө. Искәндәр туҡтаған арала ҡуйын кеҫәһенән Надяның бәләкәй фоторәсемен сығарып ҡараны һәм артындағы «Урал егете Искәндәр Йыһаншинға иҫтәлек өсөн. Надя Левонюк» тигән һүҙҙәрҙе тағы бер тапҡыр уҡыны. Үҙ-үҙен «Тыныс тормош яңынан башланғас, ҡауышырбыҙ» тип тынысландырҙы.

...Һуғыштың беренсе ҡышы үтте. Шофер Йыһаншин фронт кәрәк-яраҡтары ташыны. Ләкин уға Загорная ауылынан тағы бер генә тапҡыр үтергә тура килде. Шулай ҙа Надянан хат алғылап торҙо. Ҡырҡ икенсе йылдың йәйе уңыш килтермәне: беҙҙең ғәскәрҙәр немецтарҙың өҫтөнлөк алған көсө алдында, ҡала һәм ауылдарҙы ҡалдырып сигенделәр. Загорная ауылы ла дошман ҡулында.

2

«Үсле йөрәктәрҙә һүнмәҫ ут яна. Аяҡтар
эҫе көлгә баталар. Һалдат юлға, таныш
хатанан ҡалған күмер өйөмөнә ҡарай...»
*Вас. Лебедев-Кумач.*

1943 йылдың сентябре. Өсөнсө ай инде Украина еренән немец баҫҡынсыларын күмәк рәүештә ҡыуыу, ҡырыу бара.

Нәҙек бүрәнәләр түшәлгән боҙоҡ оло юлдан көнө-төнө автомашиналар үтәләр. Улар, яҡ-яҡҡа сайҡалып барған өйрәктәр теҙеме кеүек, соҡорланған, ярым ағас юлдан көнбайышҡа ағылалар. Ауыр йөк күтәргән тәгәрмәстәр

аҫтында ваҡ бүрәнәләр, рояль клавишалары кеүек, мәтеле балсыҡҡа баталар, һикерә биреп тағы ҡалҡалар. Юлды ике яҡлап үҫкән ҡуйы дегәнәклек өҙлөкһөҙ сәсрәгән батҡаҡ менән ҡаплана. Алда Загорная ауылы. Немецтар уны һуңғы ҡаҙағына тиклем яндырып киткәндәр, халҡын Германияға ҡыуғандар.

Автобустар колоннаһы ауылға ингәс, аранан бер машина, уң яҡтағы беренсе көл-күмер ятымына ҡарай борола биреп юлдан сыҡты. Машина туҡтаны, кабинанан ике кеше төштө: элек береһе, уның артынан икенсеһе пилоткаларын һалдылар. Һәм улар янған урын алдында баштарын эйгән килеш ярты минут тын ғына баҫып торҙолар. Шунан һуң өлкәнерәге:

– Бында элек һөҙәк ҡыйыҡлы өй ине. Унда минең Надя тора ине; һиңә хаттарын уҡығайным бит, ана шул инде, – тине.

Ҡыҙыл йөҙлө йәш егет бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Былай ҙа аңлашыла ине: ул бындай эҙҙәрҙе ауыл һайын күреп үтә.

Искәндәр Йыһаншин берәй кешеһе күренмәҫме тип, тирә-яғына боролоп ҡараны, ләкин бер ниндәй ҙә йән эйәһе күҙгә салынманы, ҡарайып ятҡан йорт урындарында һәм уларҙы солғап алған әрем, алабуталар араһында тормош әҫәре һиҙелмәне.

– Киттек, Сережа, – тине Искәндәр. – Бында тере кеше ҡалмаған, ахыры.

Был халыҡһыҙ урынды үҙғас, машина күп тә барманы үргә күтәрелә алмайынса, туҡтаны.

Арттан, юл буйындағы, фил ҡолағы кеүек һалынып төшкән япраҡлы дегәнәлек араһынан, бала күтәргән ун-ун ике йәшлек малай килә. Баланың туҙандан ҡарайған ябыҡ биттәре йәш менән еүешләнгән.

– Ана машиналар һуғышҡа ба-ра-лар, – ти малай. – Улар немецтарҙы ҡыуып баралар.

– Икмә-әк би-ир! Икмә-әк! – тип ҡысҡыра бала. Күҙҙәренән мөлдөрәп йәш аға.

– Тиҙҙән әсәйе-ең ҡайты-ыр. Үҙеңә икмәк алып ҡайтыр. Шунан беҙҙе яңы өйгә алып китер, ҙу-ур йортҡа...

Бала илай, аяҡтары менән тыпырсына, ҡысҡыра:

– Икмә-әк! Икмә-әк бир!

Малай уның илауына иғтибар итмәй, һуҙып-һуҙып һаман үҙенекен һөйләй:

– Ә ана бер машина туҡта-ға-н. Ҡара әле, нисек гөрөлдәй: у-у-у... Ә төтөнө нисек сыға, төтөнө!

Радиаторҙан, самауырҙан сыҡҡан кеүек, пар бөркөлә. Майланып ҡайышланған гимнастеркалы ике шофер – Искәндәр һәм уның ярҙамсыһы – тирләп-бешеп машинаны ҡуҙғатырға маташалар, ләкин арҡылы һалынған ике ағас араһындағы соҡолған ергә төшкән тәгәрмәс, тирә-яҡҡа батҡаҡ сәсеп, бер урында әйләнә бирә.

– Барлыҡ һыу парға сығып бөттө, ысҡындыр моторҙы! – ти Искәндәр.

Сережа моторҙы ысҡындыра һәм еңе менән тирле маңлайын һөртөп, тирә-яҡҡа ҡарана. Дегәнәлек эсенән юлға параллель булып һуҙылған һуҡмаҡта бала етәкләгән малайҙы күреп ала һәм:

– Әй, малай яҡын-тирәлә ҡойо кеүек берәй нәмә юҡмы шунда! – тип ҡысҡыра. Малай, дегәнәлек араһында башы бер күренеп, бер күмелеп килгән баланы етәкләп, машинаға яҡынлаша: Сережа йылмая биреп:

– Исемең нисек? – тип һорай.

– Володя, – ти малай.

Искәндәр балаларға, бигерәк тә бәләкәйенә ҡыҙғаныу менән тултырып ҡарай.

– Ашағың киләме? – тип һорай бәләкәйенән. Бала өндәшмәй. Искәндәр, уның күҙҙәренең тилмереүле ҡарашын күреп, машинанан тиҙ генә тоғон алып сисә башлай. Бала тоҡтан күҙен алмай, ирендәре ҡыймылдай башлай, ауыҙынан тел осо күренә. Володя, иртәме, һуңмы уҙғынсыларҙың берәйһе ашығып китерен белгән кеүек, ғәжәпләнеү күрһәтә.

– Витя, рәхмәт әйт, – ти ул. Ләкин ауыҙынан инде икмәк менән тултырып алған Витяла уның ҡайғыһы юҡ ине.

Искәндәр ҡабатлап һорау бирмәй: балаларҙың ауыр кисерешле ваҡиғаны хәтерләттергеһе килмәй. Былай ҙа аңлашыла: «Әсәй бар ине, хәҙер юҡ инде, бахыр, немец үлтереп китте».

– Ә нисек йәшәйһегеҙ һуң? Торлағығыҙ ҡайҙа?

– Элекке артҡы урамда, ҡойоға ҡаршы бер землянкала торабыҙ. Һыуҙы ауыл артындағы шишмәнән барып алабыҙ. Ҡойоноң һыуы эсергә ярамай: немецтар бысратып киттеләр.

– Радиаторға ундай һыу ҙа ярай, – тине Сережа. Ҡулына биҙрә алды. – Әйҙә әле, Володя, шул ҡойоңа алып бар мине. Ә Витя минең янда ҡалһын, – тине Искәндәр.

Улар киткәс, Искәндәр Витяны машина өҫтөнә күтәреп ултыртты һәм уның артынан үҙе лә менде.

– Йә, Витя ҡустым, һөйләп ебәр, хәл нисек, бик ҡыйын түгелме? – тине ул. Һәм Витя автомат кеүек тытылдап һөйләп алып китте:

– Тиҙҙән әсәйем ҡайта, ул миңә күп итеп конфет алып ҡайта, ҡыҙылды, йәшелде, әтәс башлыны...

– Әсәйең ҡайҙа китте һуң?

– Яңы өй алырға китте: беҙ ҡалаға күсәбеҙ. Беҙҙең өйҙө немец яндырҙы...

– Әүәй, туғанҡай, һинең эштәр һыуға һәнәк менән яҙған кеүек булһа кәрәк!

– Нәмә нинең, ағай?

– Землянкала үҙегеҙ генә тораһығыҙмы, тим.

– Юҡ, крысалар ҙа бар. Володя уларға ҡапҡан ҡуйҙы.

– Эләгәләрме һуң?

– Юҡ, эләкмәйҙәр. Унда икмәк ҡуйырға кәрәк. Ә Володя иртәгә ҡуйырбыҙ, ти. Көн дә иртәгә лә, иртәгә ти.

Сережа менән Володя тулы биҙрә һыу алып килделәр.

– Мин унда, шишмә буйында яҡшы урын ҡарап килдем, – тине Сережа. – Машинаны ебәреп алайыҡ та, был шайтан төкөргән юлдан шунда күсәйек. Көн

дә кисегеп бара, ашағы ла килә, бутҡа бешереп алырбыҙ. Был ҡунаҡтарҙы ла туйҙырырбыҙ.

Һәм ярты сәғәттән һуң машина урынынан ҡуҙғалды, үргә менеп, тигеҙлеккә сыҡты. Володя нисек итеп шишмәгә сығыу юлын күрһәтеп барҙы.

Улар таш араһынан көмөш кеүек сылтырап ағып ятҡан шишмә алдына, ҡуйы йәшел үләнлеккә туҡтаны. Сережа ут яҡты һәм уның өҫтөнә һыулы котелок элде. Искәндәр ут ҡаршыһына ҡырын төшөп етте, оҙаҡ итеп тәмәке тартты. Ул бынан ҡуҙғалып киткәнсе Надя яҙмышы тураһында берәй нәмә белергә тейеш. Был турала, бәлки, Володя ла берәй нәмә әйтер ине. Унан һорарға ҡурҡа: «немецтар үлтерҙе ул ҡатында» тиер төҫлө. Искәндәр Володянан тура һорауға яуап рәүештә түгел, ситләтеп, мәҫәлән, үҙ әсәһе тураһында һөйләтеп, һүҙ ыңғайында, көтмәгәндәрәк Надя тураһында ысын хәбәр ишетергә теләне. Шулай еңелерәк төҫлө ине уға.

Урғылып-урғылып ҡайнаған һыу, котелоктан артылып, утҡа түгелә башланы. Утлы күмер сыжылдауы башын төпһөҙ уйҙар томалаған Искәндәрҙе ҡапыл айнытып ебәрҙе. Ул котелокка ярма, тоҙ һалды. Һуңынан балыҡ консерваны асты, икмәк ҡырҡты ла:

– Килегеҙ, ҡустылар, бутҡа бешкәнсе ашап алайыҡ, – тине. Биттәрен һалҡын шишмә һыуы менә йыуған өс ҡусты инәлтеп торманылар. Уларҙы күргәс, Искәндәр үҙе лә йыуынып килде.

Володя ла, Витя ла тартынмайынса ашанылар. Искәндәргә тағы бер балыҡ консерваһын асырға һәм икмәк ҡырҡып һалырға тура килде. Витяның төймәгә оҡшабыраҡ торған танауы өҫтөндә тир бөртөктәре лә күренә башланы. Искәндәр «сабыйҙың күптәнән бирле туйғансы ашағаны юҡ, күрәһең», тип уйланы. Һәм туйып алған Витя бутҡа бешкәнен дә көтмәй йоҡлап та китте.

Сережа котелокты уттан алып ергә ҡуйҙы һәм ҡайнар бутҡаны ҡалаҡ менән ҡалаҡ менән бутап һыуытырға тотондо. Һәм, күп тә үтмәҫтән, уртаға алынан котелокка өс яҡтан ҡалаҡтар һуҙылды.

Володяға ҡарап:

– Һөйлә әле, ҡустым, һеҙҙең ауылда немецтар нисегерәк йөрөнөләр? Әсәйең тураһында һөйлә, әсәйең кеүек башҡалар тураһында һөйлә, – тине.

Һәм малай ҡоро ғына итеп теҙә башланы.

– Минең әсәй колхоз идараһы ағзаһы ине. Бер көндө немецтар халыҡты идара баҡсаһына йыйылышҡа ҡыуып килтерҙеләр. Идара ағзаһы булған биш ҡатынды халыҡтан айырып, бер яҡ ҡабырғаға ултырттылар. Башта немец офицеры ни нәмәлер бығырҙап алды. Уның һүҙҙәрен берәү беҙҙеңсә әйтте:

– Һүҙ ике немец һалдатына бирелә. Улар оҙаҡ һөйләмәҫтәр. Мин һеҙҙе бик иғтибар менән тыңларһығыҙ тип уйлайым». Автоматлы ике немец алға сығып баҫты. Һәм офицер ҡапыл «Файр!» тип ҡысҡырҙы. Күҙ асып йомғансы биш ҡатын, шулар араһында минең әсәйем дә, мәйет булдылар!..

– Кемдәр ине һуң ул ҡатындар, исемдәре нисек ине?

Володя бармаҡтарын бөгә-бөгә һанап бирҙе.

– Татьяна Костюк, Ксения Зинченко, Галина Андрейчук, Мария Кравченко – быныһы минең әсәй, һәм Надя... Надежда Репина, эйе, Репина бахырҙың игеҙ балаһы ҡалды...

– Һөйлә, Володя, дауам ит.

– Шунан һуң мин бер үҙем ҡалдым, Яңғыҙ йәшәү ҡыйын булғас, бер туған апайым янына күстем. Уны ла немецтар тындырманылар. Иҫереп киләләр ҙә ятаҡ урынына күрһәтеп: «Ят!» тип аҡыралар. Апайым теш тырнағы менән ҡаршы тора, ысҡынырға тырыша. Ләкин уларҙан ҡотолоп буламы ни...

– Ә һеҙ һуң... һеҙ?... – тип һораны Сережа.

– Ә беҙ, Витя менән икәү баҡсаға сығып ултырабыҙ, өйгә немецтар киткәс кенә инәбеҙ. Ә бер көндө немецтар тиҙ киттеләр. Мин Витяны күтәреп өйгә индем. Күлдәге йыртылып бөткән апай карауатта тыныс ята. Тын алмай, немецтар быуып киткәндәр...

Шоферҙар Володяға тура ҡарамаҫҡа тырышалар. Былай ҙа улар малайҙың күҙҙәре йәшле икәнен беләләр; уның ҡысҡырып илап ебәрмәүе фәҡәт танауын йыш-йыш тартыуы менән генә бүленеп тора кеүек. Уйға талған Искәндәр, ҡулдары менән тубыҡтарын ҡосаҡлап ҡыҫҡан килеш тын ултыра. Ул

тубыҡтарын бер-береһенә ҡаты итеп ҡыҫа, әйтерһең, ни нәмәлер тотоп алған да, шуны ысҡындырмаҫ өсөн ҡалын бармаҡтары ауыртҡансы баҫып тора. Утыны инде янып бөткән утҡа сәнскеле үләндәр менән сыйылып бөткән аяҡтарын һуҙып, Витя йоҡлай. Ул бөтә донъяһын онотоп йоҡлай, әйтерһең, ул үҙ өйөндә, йомшаҡ мендәр өҫтөндә ята.

Сережа Витяға тип ҡалдырған бутҡаны утлы ҡуҙ өҫтөнә ҡуйҙы ла, Володяға әйләнеп:

– Апайыңды ерләй алдыңмы һүң? – тип һораны.

– Ерләнем, ләкин, ғәҙәттәгесә булманы, – тине Володя. Немецтар ауыл эсендә үлек күмдермәйҙәр ине. Ситкә сығарырға үҙем генә булдыра алманым. Күршеләрҙең исән ҡалғандарында ла бәхетһеҙлек артынан бәхетһеҙлек? Ҡәберҙе баҙға ғына ҡаҙыным да мәйетте шунда күмдем. Витяға әсәһенең үлтерелеүе тураһында әйтмәнем. Башта «уятмайыҡ, йоҡла» тинем. Һуңынан, уға күрһәтмәй генә күмеп алғас, «әсәйең фәлән ергә китте, төгән ергә китте, хәҙер ҡайта», тип йыуатым», ә йорт янғандан һуң «ул ҡалаға, беҙгә торор өсөн өй алырға китте, тиҙҙән шунда күсәбеҙ», ти башланым. Витя һаман шуға ышанып йөрөй әле.

Был ике етемдең хәле Искәндәрҙә лә, Сережала ла ҡыҙғаныу тыуҙырҙы. Улар Володяға ауыр ҡайғыһын еңеләйтерлек бер ниндәй кәңәш тә бирә алманылар. Һаман тыштан тын, ә эстән немецтан үс алыу тойғоларының ҡабарыуы аҫтында ҡалдылар.

Оҙаҡ ҡына паузанан һуң Искәндәр:

– Володя, һин Надежда Левонюк тигән ҡатынды белмәй инеңме? – тип һораны.

Ләкин һорауға яуап булманы: уның эргәһендә Володя юҡ ине. Ул ҡалдырылған бутҡаны буш консерва һауытына һалынған котелокты алып, йыуырға һәм һыу алып килергә, тип шишмәгә киткәйне. Малайҙың күптән инде йомарт шоферҙарға берәй файҙалы хеҙмәт күрһәткеһе килә ине. Бәләкәй генә был эште, әйткәнде лә көтмәйенсә һиҙеп алыуы өсөн үҙе лә бик ҡәнәғәт булды.

Шуға күрә, ул тышы дегет кеүек ҡара янған котелокты ҡом менән ышҡып йыуырға уҡ тотондо.

Искәндәр, үҙ эргәһендә малайҙың юҡлығын күргәс, үҙе лә шат булды. Сөнки Володя, Надяны белә торған булһа, «уны Витя әсәһе кеүек үк, немецтар көсләнеләр, һуңынан үлтерҙеләр», йәки «Германияға оҙаттылар» тип әйтер кеүек ине.

Сережа ла урынынан торҙо һәм машинанан бәләкәй мискә төшөрҙө, унан биҙрәгә тейешле нормала яғыулыҡ майы ҡойҙо. Искәндәр тәмәке төрҙө һәм уны күмерҙән көйрәтеп, тороп китер алдынан күҙе Володяның ҡабалан сисеп ырғытылған пиджагы янында «паспорт» яҙыулы ҡатырғаға төштө. Малайға күп булмаһа ун ике йәштер, ә кеҫәһендә паспорт йөрөтә! Ғәжәп.

Искәндәр ҡатырғаны ҡулына алды. Эсендә, ысындан да паспорт ине. Ҡыҙыҡһынып уҡый башланы, һәм уның күҙҙәре йәше етмәгән малайҙа паспорт булыуҙан дә ғәжәберәк күренеш күрҙеләр. Паспорттың эйәһе – егерме бер йәшлек Надежда Григорьевна Левонюк. Йәбештерелгән фоторәсеме лә Надяныҡы, Искәндәр белгән, ул һөйгән Надяныҡы. Искәндәр кеҫәһенән Надяның фоторәсемен алып, паспорттағы менән сағыштырып ҡараны – тап үҙе, шул уҡ рәсемдең бер данаһы. Надя үҙе ҡайҙа һуң? Уның паспорты ни эшләп Володя кеҫәһендә?

– Володя, кил әле бында тиҙерәк! – тип ҡысҡырҙы Искәндәр.

– Хәҙер, – тип яуап бирҙе Володя.

«Надя ҡайҙа?» Искәндәр паспорттың һәр бер яҙыуынан шул һорауға яуап эҙләне. Һәм бына икенсе биттәге яҙма Искәндәргә Володя ярҙамынан тыш та бөтә картинаны асып һалды. Унда Виктор Борисович Левонюк тигән баланың Надя улы икәнлеге күрһәтелә. Тимәк, ут ҡаршыһында йоҡлап ятҡан Витя – Надяның улы, ә Володя – бер туған энеһе. Тимәк... тимәк, бөтәһе лә асыҡ.

– Ниңә саҡырҙығыҙ, ағай? – тине ҡулына таҙартылған котелок тотҡан Володя.

– Был кем паспорты, һинең кеҫәнән төшкән булһа кәрәк?

– Эйе, минең кеҫәнән. Ул Витя әсәһенең – минең апайымдың паспорты ине. Унан ҡалған бөтә иҫтәлек шул. Һағынғанда, эсендә йәбештерелгән фоторәсеменә ҡарайым...

– Искәндәрҙең ҡан тамырҙарынан ток йүгергән кеүек булды. Йөҙө ағарынды, һәм үҙен Володяға тағы берәй һүҙ әйтер ҙә бөтөнләй ҡойолоп төшөрмөн, тигәндәй хис итте.

– Бар, аҡыллым, һыу алып кил, сәй ҡайнатырбыҙ, – тине ул.

– Бына бит һыу! – Володя һыу менән тулы котелокты күрһәтте.

– Ә-ә шулаймы, улай булһа, утын йыйыштырып килтер.

Володя утын эҙләп китте. Искәндәргә утындың килеүе түгел, Володяның китеүе, ғөмүмән, уның яңғыҙ ғына ҡалдырыуҙары кәрәк ине.

Искәндәр һаман йоҡлауын дауам иткән Витя эргәһенә килеп ултырҙы. Уның йомшаҡ, һары сәстәрен һыйпаны. Өҫтөнә Сережаның шинелын япты. Ул баланан бик оҙаҡ күҙҙәрен алмай торҙо. Надяның фажиғәле үлеме, был ике етемдең дегәнәлек араһында тороп ҡалыуҙары Искәндәрҙе бомба, мина ярылыуынан да көслөрәк ҡаҡшатты; был хәл ергә түшәлгән үлек кәүҙәләр аша снарядтар тейгән машина менән үтеүҙән дә аянысыраҡ ине. Эйе, бар ине һылыу һәм аҡыллы Надя, хәҙер ул юҡ инде: уның яҙмышын немец ҡулы өҙгән»...

Володяның сәйе ҡайнап сыҡҡанда, ергә ҡараңғылыҡ яткайны инде. Витя ла уянды. Уның беренсе һүҙе «һыу!» булды.

Фронт юлсылары һәм дегәнәк, алабута ҡаплаған ауыл урынын айҡап йөрөүҙән үтмәгән ике туған ҙур аппетит менән сәй эстеләр. Володя бутҡаның ҡалдырған өлөшөн Витяға ҡыҙҙырып та бирҙе.

Ут алдынан башлап тороусы Сережа булды.

– Йә, нишләйбеҙ, ҡуҙғалабыҙмы? – тип һораны ул. Ҡуҙғалып китеүҙе ул үҙе лә бик яҡшы белә; был һорау икенсерәк мәғәнәлә ҡуйылғайны: «был ике баланы ҡалдырып китәбеҙме, әллә башҡаса берәй нәмә уйлайһыңмы, Искәндәр?».

– Хәҙер китәбеҙ, Сережа, барыбыҙ ҙа китәбеҙ бынан.

Искәндәр урынынан тороп, машина янына килде.

– Володяны ла, Виктор Борисовичты ла үҙебеҙ менән алабыҙ.

– Һин уның атаһы исемен дә белеп алдыңмы ни әле? – тине Сережа.

– Эйе, туған, һин йоҡлап алған арала мин бик күп нәмәләр белдем. Беләһеңме, Володя һөйләгән ҡатын мин һөйгән Надя булып сыҡты, ә был Витя – уның улы. Ә бына был Надяның паспорты, уны Володя апайының иҫтәлеге итеп йөрөтә.

Сережа ғәжәпләнеүҙән ҡалтырана төшкән ҡулдары менән паспортты асып ҡараны.

– Бына ул нисек... Ҡара әле рәсеме лә һиндәге ише. Тик үҙе генә. Һинеке була алмай һәләк булған, бахырың... Һуғыш шул был, һуғыш заманында төрлө хәлдәр була тиҙәр ине...

Улар машинаны ҡороп ебәрҙеләр. Мотор, ысҡынып китергә теләгәндәй, ярһынып геүләй башланы.

– Ә һин, Искәндәр, Володяға үҙеңде таныттыңмы һуң? Ул һине күрмәһә лә, ишетеп белә торғандыр бит? – тине Сережа машинаға ултырыр алдынан.

– Юҡ, әйтмәнем әле. Надя һөйләгән булһа, белеүе мөмкин, – тине ул һәм ут яғына боролоп: – Әй, ҡустылар, килегеҙ бында, киттек! – тип ҡысҡырҙы.

Руль алдына Сережа ултырҙы. Уның йәнәшәһенә Володя урынлашты. Искәндәр Витяны шинелгә төрөп, алдына уңайлап, йөк өҫтөнә ултырҙы. Һәм машина ҡуҙғалып китте. Загорная үренән һуң башланып киткән ярым төҙөк таш юлға сығып, бер-бер артлы ағылған йөк автомашиналары артынан төшөп алды. Бутҡа бешергән, сәй ҡайнатҡан ут бәләкәйләнгәндән бәләкәйләнә барҙы. Искәндәр итәгендәге шинель төргәгенән башы сығып торған Витя:

– Ағай, беҙ ҡалаға барабыҙ, эйе? Әсәйем янына, эйе? – тине.

– Эйе... – Ҡалаға барабыҙ.

– Ә беҙҙән ҡалған утты, ағай, немец килеп һүндермәҫме?

– Юҡ, улым, юҡ! Беҙ ҡабыҙған утты бер кем дә һүндерә алмай уны!

## Ҡыйыу пионер[1]

### 1

Ил өҫтөндә дошман бомбалары ярыла башлаған көндәрҙә Павликка ун өс йәш тулды. Ул хәҙер үҙен бик ҙур үҫеп киткән кеүек хис итә, кеше араһында оло тәбиғәтле блып күренергә тырыша. Шуның өсөндөрмө инде, ҡайсаҡ кешеләр Павликка «һеҙ» тип өндәшәләр. Павлик бер иле үҫеп китә.

– Тимәк, мин хәҙер еткән егет. Халыҡҡа шулай күренәм, – тип эстән генә маһайып ҡуя.

Ләкин шунда уҡ икенсе берәүҙәр «һин» йәки «малай» тип өндәшәләр. Павлик өс иле кире сүккәндәй була. Был инде Павлика оҡшамай. Шулай ҙа күнергә тура килә. Олатаһы әйткән һүҙҙәр дөрөҫтөр, ахыры. Ул: «һиңә, кеше ауыҙынан «һеҙ» тип мөрәжәғәт итеүҙе ишетер өсөн, кәм тигәндә лә, кеҫәңә паспорт һалып йөрөрлөк йәшкә етергә кәрәк әле», –тигәйне. Нисек кенә булмаһын, Павлик ҙурҙар эшләй торған эштәрҙең күбеһен үтәй ала. Хатта ҡайһы ваҡыт ул башҡарған эште мыйыҡлы ағайҙарың да булдыра алмаҫтар кеүек.

Ватан һуғышының тәүге аҙнаһында уҡ Павликтың атаһы ҡулына ҡорал алды. Яҡындағы урман уның атаһы кеүек бик күптәрҙе үҙ ҡуйынына йәшерҙе. Павлик уларҙың урмандың ҡайһы ерендә ятыуҙарын да белә: унда йыш ҡына йөрөй. Атаһы ғына түгел, башҡа партизандар ҙа Павликты бик теләп ҡаршы алалар, сөнки ул бушҡа ғына йөрөмәй. Барған һайын:

– Фәлән ерҙә немецтарҙың ҡорал склады бар, төгән ергә аэродромдары урынлашҡан, – тигән кеүек хәбәр килтерә.

Бөгөн дә иртән иртүк Павлик урманға хәбәр менән килде. Ышаныслы кешеләрҙең әйтеүенсә, Павликтар ауылынан ун һигеҙ километр алыҫлығындараҡ Покровка поселогы тирәһенә дошман десант төшөргән. Хәбәрҙең партизандар өсөн яңы булыуы тураһында Павлик һис тә икеләнмәне. Бына, бына хәҙер Павликка бер-бер артлы һорауҙар яуа башлар, партизандар

---

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 152-157-се биттәр.

түҙемһеҙлек менән Павликтың яуап биреүен көтөрҙәр... Шулай уйланы ул. Ләкин киреһенсә булып сыҡты:

– Ул десант юҡ ителде инде. Һикһән кеше ине, береһе лә ҡалманы, –тине атаһы.

Бының өсөн Павлик шат. Ләкин отрядҡа билдәле хәбәрҙе яңы килеп һөйләп йөрөүе менән генә ҡәнәғәт түгел.

Ул үҙен туй үткәс дөмбөр ҡағып йөрөүсе кеше кеүек күрҙе.

Улының уңайһыҙ хәлдә ҡалыуын атаһы ла һиҙҙе булһа кәрәк:

– Бына нәмә, улым... – тип һүҙ башланы ул.

...Ҡалын һәм ҡараңғы урман артта ҡала бара. Тапалыуы етмәгән таныш һуҡмаҡ Павликты яланға, ауылдарына табан алып сыға. Урман эсе көҙ төҫөнә ингән. Ҡойолған һары япраҡтар ағас төптәренә түшәлгән. Тик шыршы, ҡарағай кеүек йылдың дүрт ваҡыты өсөн дә үҙгәрешһеҙ торған ағастар ғына тышҡы күренештәрен алыштырмағандар, шул уҡ осло энәләрен, дошман күҙенә сәнсергә әҙерләгәндәй, яҡ-яҡҡа тырпайтып торалар. Урман эсе тып ине, бер һайыҫҡан килеп сығып ҡына тауыш күтәрҙе. Павликтың ҡаршыһына төшөп алып, мәғәнәһеҙ шыҡырҙай башланы. Ҡасан ғына урманға килмәһен, уны һайыҫҡан күҙәтә. «Шул уҡ бер һайыҫҡандыр әле, ҡош ҡалдығы!» – ти Павлик. Был юлы һайыҫҡан Павлнктан көлгән, уны мыҫҡыллаған кеүек шыҡырҙап, «һин, малай, урманда иҫкергән хәбәрең менән буталып йөрөйһөң», тип таҡмаҡлаған кеүек.

Павлик был лығырҙыҡ ҡошҡа иғтибар итмәҫкә булды. Бирелгән заданиены уңышлы итеп үтәү тураһындағы уйға бирелде. Уйҙар Павликты атаһы эргәһенә илттеләр. Ә атаһы уға бик етди эш йөкмәтте:

–...Бөгөн нәҡ ун ете сәғәттә дошман эшелоны үтә. Роман туғайлығын уҙғас та, линия буйында 214-се номер һуғылған бағана бар. Тап шул бағана тәңгәлендә гайкалары бушаған рельстар ята. Һин шуларҙы һаҡлыҡ менән генә һүтәһең. Юлың арыш араһынан. Булдыра алырһыңмы?

– Булдырам, атай!

Ни эшләп булдыра алмаһын ти, Павликтың быңдай ҡыйыулыҡ һораған

эшкә тотоноуы тәү тапҡыр ғына түгел бит. Илдә тыныс тормош аҡҡанда ла зирәклеге, ҡыйыулығы менән танылған Павлик ул. Пассажирҙар поезын һәләкәттән ҡотҡарғаны өсөн бүләк итеп үҙ исеме яҙылған кеҫә сәғәте алған Павлик ул. Һөйөклө Ватанына яу ябырылып килгәндә телгә алырлыҡ эш күрһәтмәһә, Павликтың пионерлығы – һайыҫҡандың ыласын һәм бөркөттәр менән бер рәттән «ҡош» исемен күтәреп йөрөүе кеүек кенә булыр ине!..

Ауыл яғынан ишетелгән мылтыҡтан атыу тауыштары, ҡатын-ҡыҙҙарҙың, бала-сағаларҙың әсе итеп илашыуҙары Павликты һиҫкәндереп ебәрҙе. Уның уйҙары киҫелде.

**2**

Бер-ике сәғәт кенә элек Павликтан тыныс ҡалған ауыл дошман аяғы аҫтында аҙаплана. Ауыл ситендәге әремлектән дә был ҡара күренеш асыҡ күренә: урамдарға мотоциклдар тулған, немец һалдаттары, йорт һайын йөрөп, кеше талай; тупаҫ екеренеүҙәр ишетелә, мылтыҡтан атыу тауыштары яңғырай; ҡатын-ҡыҙҙар, йәш балалар үлем дәһшәте аҫтында әрнеүле тауыш менән ҡысҡырыша. Ауылдың төньяғынан көслө янғын да күтәрелеп сыҡты: колхозсылар, дошманға икмәк урынына көл ҡалдырыу уйы менән, ашлыҡ эҫкерттәренә ут төрткәндәр.

Павлик, баҡсалары аша шыуышып ҡына, йорттарына үтте. Ҡапҡа емерелеп ташланған. Йорт уртаһында уның һөйөклө олатаһы Тарас Иванович ята. Ул үлек, бөтә йөҙө, өҫ-башы ҡан эсендә, көрәктәй һаҡалының бер өлөшө төптән үк ите менән бергә йолҡоноп алынған. Ҡартты өйҙән һаҡалынан тотоп тышҡа һөйрәп сығарғандар. Язалап үлтергәндәр.

– Их, олатаҡай, бахыр олатаҡай!... – тине Павлик, башҡа һүҙ әйтә алманы. Уның ҡайнар йәш бөртөктәре Тарас Ивановичтың йөн баҫҡан күкрәгенә тамалар.

– Ә әсәй ҡайҙа?

Павлик йоҡоһонан ҡурҡып уянған кеше кеүек булды. Атылып өйгә инде. Иҙәндә ятҡан әсәһенә ташланды. Ул да хәрәкәтһеҙ.

– Әсәйҙе лә үлтергәндәр! –Ул әсәһенең күкрәгенә башын һалып, күҙ

йәштәренә ирек бирҙе.

– Һыу-у, һыу-у бир...

– Әсәй! Әсәй! Ой, әсәкәйем тере ҡалған!

Һыу эскәс, Марина Михайловна һушына килә башланы. Улы уны карауатҡа күтәреп һалды. Әсәһенең иҫән ҡалыуы шатлығынан ҡурҡыуҙы, күренмәҫкә кәрәклекте онотҡан Павлик тәҙрә ҡаршыһына килеп баҫты. Урам вәхшиҙәр станына әйләнгән. Ҡапҡа бағаналарына кешеләр аҫылған, канау буйҙарында мәсхәрәле рәүештә язаланып үлтерелгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың үлек кәүҙәләре ята. Иҫерек офицерҙар, аяҡ үрә ашанып йөрөүсе ас һалдаттар үтәләр. Аяҡ аҫтында кемдеңдер ыңғырашыуы ҡолаҡҡа бәрелә...

**3**

Дошман эшелоны үтергә бер сәғәттән артығыраҡ ваҡыт бар ине әле. Ә Павлик инде линия буйындағы урылмаған арыш араһында ята. Ҡаршыла, юлдың теге яҡ стендә, 214-се номер һуғылған бағана тора. Павлик шпалдарынан ысҡындырылырға тейешле рельстарҙың гайкаларын ҡарап килде. Һәр гайкаға сама менән нисә минут ваҡыт китәһен билдәләне.

Юл өҫтө тыныс ине. Тик бына яҡындағы кескәй генә әрәмәлеккә арҡаларына котомка аҫҡан, ҡулдарына кәрзин тотҡан бер әбей менән ҡыҙ туҡталды. Үҙҙәренең, һайыҫҡандай, лығырҙыҡтары сыға:

– Ташлап китәйек тим, әсәй, ошонда. Пикникка сыҡкан кешеләй кәстрүлдәр аҫып йөрөү ниңә кәрәк!

–Һөйләнмә әле юкты! Кәрәге булыр, – ти әсәһе.

Улар һыу буйындағы һуҡмаҡтан киттеләр. Павлик иркен һулыш алып ҡуйҙы.

Павлик эшкә тотонд о, һаҡлыҡ менән генә икешәр гайканы бороп сығара ла кире ҡуйы арыш араһына кереп йәшеренә. Сәғәтенә ҡарап ҡуя. Бөркөү көндә ашығыс эштән тирләгән йөҙөн ҙур ҡыҙыл яулығы менән һөртөп ала. (Павлик уҙған йылда бер поезды һәләкәттән ҡотҡарыу ваҡиғаһынан һуң кеҫәһенә һәр ваҡыт ҡыҙыл яулыҡ тығып йөрөй торған булды: ләкин поезд туҡтатырға тура килмәне: тимер юл линияһында һәләкәт тыуҙырырлыҡ урынды башҡаса

тапманы).

Павлик һуңғы гайканы бороп ятҡанда, һаҙлыҡтан арыраҡ ерҙә мылтыҡ атылған тауыш ишетелде, һиҫкәнеүҙән асҡысы ҡулынан төшә яҙҙы. Ул тиҙ генә арыш араһына боҫто, асҡысты йәшереп ҡуйҙы. Шулай ҙа күңел тыныс түгел: гайканы, ҡабаланыу арҡаһында, ситкә алып ырғытырға онотҡан. Бәләкәй генә бер тимер киҫәгенең эште боҙоуы мөмкин.

Хәтәр эштең эҙе күмелмәһә, уңышһыҙлыкты көт тә тор. Павлик та уңышһыҙлыҡҡа осраны. Күҙ көйөгө булып ятҡан шул гайканы юҡ итер өсөн линияға кире сыҡһа, – ҡаршыһына ят формалы бер һалдат килеп сыҡмаһынмы! Хәл әкиәттәге кеүек: кешеләрҙе баҫҡан еренән ебәрмәй, тыны менән тартып тороусы аждаһамы ни теге немец һалдаты! Павлик ни эшләргә лә белмәй тик тора. Ҡасыу – ҡурҡаҡлыҡ. Икенсенән, ул үҙенде фаш итеү ҙә булыр ине. Малай ерҙәге гайканы аяҡтары менән һиҙҙермәй генә күмеп ҡуйҙы.

Һалдат Павликтың ҡаршыһына уҡ килеп баҫты. Кеҫәһенән араҡы бутылкаһы күренеп тора, үҙе елкән кеүек сайҡала.

– Һин ни эшләйһең бында, хохол малайы, ә? – тип екеренде ул. Ике рельстың төҙөк түгеллеген дә күреп ҡалды.

Бер нәмә лә эшләмәйем. Поезд көтәм, – тигән булды Павлик.

– Был һинең эшме?

– Юҡ, һеҙҙең халыҡ һөнәре ул.

– Ә ниндәй поезд үтергә тейеш?

– Ниндәй булһын – советский.

– Һин шуны туҡтатаһыңмы?

– Әлбиттә. Бына! – Павлик кеҫәһенән ҡыҙыл яулығын тартып сығарҙы. – Ошоноң менән сигнал бирәһең дә...

– Поезд туҡтай?

– Эйе, туҡтай.

– Ә мин һине хәҙер атып үлтерһәм, поезд ни эшләй? Ни эшләй, тим, советский поезд?!

– Ни эшләй, һәләк була.

– Шулай тиген, хохол көсөгө!

Павлик һалдаттың ҡаты һуғыуынаи рельсҡа арҡыры йығылды. Ауыҙ-морононан ҡан бәреп сыҡты, һалдат револьверын сығарҙы, ләкин әҙерәк уйлап торгандан һуң кабураһына кире тыҡты.

– Әйҙә минең менән! – тип ҡысҡырҙы ул. – Ә советский поезд капут, сөнки хохол капут. Хохол капут, немец хужа булғанға!

Улар һаҙлыҡ буйындағы тар юлдан баралар. Юл «Октябрь» колхозына илтә. Бына улар юл өҫтөндә аунап ятҡан ниндәйҙер котомкаларҙы уҙҙылар. Ә алдараҡ, тәгәрмәс эҙе өҫтөндә, бер йәһүд ҡарсығының үлек кәүҙәһе ята. Йөҙө, ауыҙы ҡан эсендә. Эргәһендә генә яһалма тештәрҙе ауыҙ эсендә беркетеп тота торған коронка ята. Тештәре алтын булған, күрәһең. Тағы ла алдараҡ – өҫ-башы өҙгөләнеп бөткән бер ҡыҙ. Көсләгәндәр ҙә атып киткәндәр. Павлик быларҙың бая үҙе арыш араһында ятҡанда әрәмәлеккә туҡталып уҙған әбей менән ҡыҙ икәнен белде, һалдат мәйеттәрҙе иғтибар итерлек бер нәмә лә юҡ кеүек үтте. Павлик ҡына тыныс күңел менән ҡарай алманы.

«Октябрь» колхозының идара йортон дошман частары штаб иткәндәр. Павликты теге һалдат шунда алып килде.

Өҫтәл алдында ҡыҫҡа буйлы, ас яңаҡлы немец офицеры ултыра. Штаб начальнигы булһа кәрәк. Павлик офицерҙы һуғылыуҙан ауыҙы эскә батып торған иҫке кәрәсин бидонына оҡшатты.

– Господин офицер, хохол малайы!..

Һалдаттың йөҙөндә бер кем дә башҡара алмаҫлыҡ ҙур эште үтәүсе кешелә була торған кинәнеү, хеҙмәте өсөн кәрәгенән артыҡ ҡәнәғәт булыу сифаттары беленеп тора. Ул, инстинкт буйынса, тәмәке урарға уйлап, ҡағыҙ йыртты, кеҫәһенән кемдәндер таланып алынған, ләкин тәмәкеһе инде күптән бөткән портсигар тартып сығарҙы. Ләкин уны күнекмәгән бармаҡтар тейешһеҙ яғынан асып ебәрҙеләр. Өҫтәлгә алтын тештәр сәселеп китте.

– Былар ни нәмә?

– Алтын тештәр, господин офицер! Бер йәһүд бисәһенең ауыҙында йөрөгәндәр.

Офицер Павликты баштан-аяҡ ҡарап алды.

– Йә, нindәй малай был?

–Тимер юл буйынан тотоп алып килдем. Юлдың бер ерендә рельстар ватыҡ. Ә был малай поезды туҡтатырға тора. Ҡулында ҡыҙыл сепрәк.

Павликтың кеҫәһен аҡтарып ҡаранылар. Ҡыҙыл яулыҡ менән сәғәттән башҡа нәмә сыҡманы. Офицерҙың балыҡтыҡы төҫлө тоноҡ күҙҙәре сәғәт ҡапҡасындағы яҙыуға төштөләр: «Пассажир поезын һәләкәттән ҡотҡарғаны өсөн Павлик Руденкоға. 17 июль, 1940 йыл».

–Та-ак, – тине офицер сәғәттән күҙен алып, – нindәй поезд көтә инең һин, советскиймы?

– Мин ҡайҙан беләйем нindәй поезд килерен? Теләһә нindәй булһын, минең эш, ғәҙәтем буйынса, туҡтатыу, – тине Павлик күҙ буяр өсөн.

Офицер, ниҙер әйтергә уйлап, «ә» тип ауыҙын асҡайы, телефон шылтыраны. Штабҡа бынан ярты сәғәт элек, рельстарҙың алдан һүтелеп ҡуйылыуы сәбәпле, немец ғәскәри-эшелонының һәләкәткә осрауын хәбәр иттеләр.

Ағарынған офицер асыу менән трубканы шап иттереп урынына ҡуйҙы. Ҡабарынған күркә кеүек һалдатҡа ташланды.

– Һинең һарыҡ булыуыңдан тыуҙы был катастрофа! Тауыҡ мейеһе эскән нәмә! Совет малайының беҙҙең поезды һәләкәттән ҡотҡарыуы үҙе нимә тора ине! Эх, һин, һарыҡ баш!.. Мә, ал кәрәгеңде!

Һалдат тупаҫ тауыш сығарҙы һәм ҙур кәүҙәһе, сайҡала биреп, иҙәнгә ауҙы. Офицер, шул уҡ позаһын үҙгәртмәйенсә, ҡулындағы автомат-револьверы менән артҡа боролдо. Ләкин боролоуы бушҡа булды: Павлик сығып ысҡынғайны инде.

...Ике көндән һуң Павлик атаһы менән яңынан күреште һәм уның ҡулында кәүҙәһе кәрәсин бидонына оҡшап торған офицер алып ҡалған үҙенең исемле сәғәтен күрҙе.

## Дарыу[1]

Бәләкәй генә кәүҙәле был ҡартты колхозда Тиктормаҫ Ғәлиәкбәр тип йөрөтәләр. Ысындан да шулай: ҡушамат ҡарттың холҡона бик тура килеп тора. Халыҡ Ғәлиәкбәр ҡартты ҡушаматы менән бергә телгә алырға шул тиклем күнеккән, хатта ҡайһы берәүҙәр уның үҙе менән һөйләшкәндә лә Тиктормаҫ бабай» тип өндәшәләр.

Тиктормаҫ Ғәлиәкбәр бик ваҡсыл һәм бик тынғыһыҙ ҡарт. Уның эшләмәгән эше, ҡыҫылмаған ере, тығылмаған урыны юҡ. Барыһына ла етешә. Берәй эштә кәмселек күрҙеме, инде ул бөтөрөлмәй тороп, Ғәлиәкбәр ҡарттың йәне тынмай; эшләгән эш күҙгә күренеп тормаһа, уның күңеле булмай. Тиктормаҫ Ғәлиәкбәрҙең иң йән һөймәгән нәмәһе – бер эште ташлап, икенсеһен башлау. Ул быңдай эште «тырым-тыраҡай» тип йөрөтә. Ҡарт, колхозда еренә еткерелмәгән берәй эште эләктереп алһа, «тырым-тыраҡайлылар»ҙың теңкәһен ҡоротоп бөтөрә – ауырыуҙарҙы дауалаусы доктор кеүек, улар янынан китмәй.

Ғәлиәкбәр ғаиләлә лә тик тороусы ҡарттарҙан түгел. Ул бында үҙен бөтөнләй баш итеп ҡуйған. Йорттағы әһәмиәтһеҙ генә эштәр ҙә уның күҙәтеүенән ситтә тороп ҡалмайҙар. Өҫтәүенә ул бик һаҡ, хужалыҡсыл. Кеше күҙен ҡаратырлыҡ ҡиммәте булмаған ташландыҡ нәмәләрҙе лә аяҡ аҫтында яткырмай торған кеше. Әйтәйек, ул юлда берәй ҡаҙаҡ йәки тимер һынығы күрһә, табышҡа осраған кешеләрҙәгесә ҡәнәғәтләнеү менән алып, кеҫәһенә һала. Уның шундай осраҡлы нәмәләр өсөн махсус йәшниге бар. Ни нәмә генә юҡ ул йәшниктә! Тутыҡҡан шөрөптәр, һыныҡ асҡыстар, ишек тотҡалары, лампа баштары, бысаҡ һаптары... Ғәлиәкбәр ҡарттың фронттағы уртансы улының улдары Зөфәр һәм Рәшит көн һайын ишәйә барған был тимер-томорҙарға тыныс күңел менән генә ҡаран алмайҙар – һорашалар, төпсөйҙәр.

– Олатай, был иҫке бизрә ҡолағы ниңә кәрәк ул? Нисә генә һораһаң да, ҡарттың яуабы бер:

– Ята бирһен, ашарға һорамай бит! Ҡайһы ваҡыт Тиктормаҫ ҡарт балалар ҡыҙығырлыҡ берәй ҡорос киҫәген Рәшит йәки Зөфәр ҡулында күреп ҡала.

---

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 157-164-се биттәр.

– Ҡайҙан алдығыҙ быны? – тип һорай ул.

Балалар, олатайҙарынан алдашып ҡотолоу мөмкин түгеллеген яҡшы белгәнгә, туп-тура әйтәләр:

– Һинең теге ашарға һорамай торған нәмәләр йәшнигенән алғайныҡ.

– Хәҙер кертеп ҡуйығыҙ!

Улар ҡорос киҫәген йәшниккә илтеп һалалар ҙа олатайҙарының бынан да яҡшыраҡ уйынсыҡ булырлыҡ башҡа берәй табышын сәлдерәләр.

Тынғыһыҙ Ғәлиәкбәр сит кешенең күрһәтеп тороуы һис тә һоралмаған эшкә лә тығылырға ярата, «шулай итергә кәрәк» тип ҡолаҡ төбөндә лығырҙанып торорға бик әүәҫ. Ҡатыны Сәмиғә ҡарсыҡса әйткәндә: «кешегә һабаҡ уҡып торорға» бирелгән кеше. Мәҫәлән, ул табаҡ-һауыт йыуа торған һыуҙың әҫеһе бармаҡты бешереп тороуҙан да түбән булмаҫка кәрәклеге тураһында, ә тәҙрә сайҡай торған һыуҙың, киреһенсә, мөмкин тиклем һалҡын булырға тейешлеге хаҡында Сәмигә әбей ҡолағына әллә нисә тапҡыр туҡып торғаны бар. Был әбейҙең эсен бошора. «Ҡарт, һин ҡатын-ҡыҙ эшенә моронондо тыҡма әле!» – тип ҡырт ҡына өҙә лә ҡуя. Шунан һуң Тиктормаҫ Ғәлиәкбәрҙең тынғыһыҙ ҡулдары берәй эшкә йәбешәләр. Йә ул бер бысаҡ менән икенсеһенә һылашҡан икмәк йомшағын ҡыра, йәки тышҡа сығып берәй сөй юнырға тотона.

Бына шундай ҡарт ул Ғәлиәкбәр. Уның тынғыһыҙ, уңған, шуның менән бергә кешеләргә хуш күңелле икәнлеге күптәргә билдәле. Берәү «Алға» колхозын телгә алһа, уға: «Теге Тиктормаҫ Ғәлиәкбәр ағза булып торған колхозды әйтәһеңме?» –тип һорау ҡуялар. Шуның өсөн был турала һөйләүҙе ошо урында туҡтатып, Тиктормаҫ Ғәлиәкбәрҙең хатта «Алға» колхозсылары ла белеп бөтмәгән бер яғы менән, туп-тура әйткәндә, уның эс бошорғос бер серҙән ҡотолоу тарихы менән таныштырыуға күсәйек.

Ғәлиәкбәр ҡартты күреп белгән кеше уның күп йылдар буйына осҡолоҡ тотоу менән яфаланыуын белә. Ләкин уның уҙған йылды ғына был эс бошорғос серҙән ни рәүешле ҡотолоуын белеүселәр әҙ әле.

Әгәр һеҙ Ғәлиәкбәр ҡарттан: «Донъяла иң хәсрәтле ауыр ни нәмә?» – тип

һорағыҙ, ул һис тә икеләнеп тормай: «Оҫколоҡ тотоу», – тиер ине. Оҫколоҡтан кешенең температураһы ла күтәрелмәй, аппетиты ла юғалмай, тик, тамағына балыҡ ҡылсығы ҡаҙалғандай, күкле-йәшелле тауыштар сығарып, ыҡ-мыҡ килеп ултыраһың. Ә күмәгерәк кеше араһында һин үҙеңдең был ысҡынмалы ҡытҡылдауың менән муйыны бысаҡ аҫтына һалынған әтәсте хәтерләтәһең. Ғәлиәкбәр ҡарт ете йыл буйына ана шулай яфаланды. Ҡараңғы төшөп, өйҙә ут алыр ваҡыт еттеме – мейес аҫтына йәшенгән сиңерткә һайрай башлай. Ғәлиәкбәр ҡарт та шуның кеүек: тамағына ашағас, өҫтәл алдынан тороп китергә лә өлгөрмәй, оҫколоғо йәбешә һәм өс-дүрт сәғәтһеҙ, ә ҡайһы ваҡыт хатта көн буйы туҡтамай. Ҡарт докторға ла күренеп ҡараны. Нисә барһа ла, уға оҫколоғон күп тигәндә бер тәүлеккә туҡтатып тора торған аҡ порошок биреп ҡайтарҙылар. Ул һалҡын һыуҙы ла бик күп эсте, ләкин оҫколоҡто йыуып бөтөрә алманы. Шулай итеп, Ғәлиәкбәр үҙе лә, уның ғаиләһе лә көн дә йәбешә торған сиргә күнегеп киттеләр. Сәмиғә әбей: «Был алланың тиктормаҫ ҡарттарҙы тындырмаҫ өсөн биргән ауырыуылыр инде», – тип, ҡартының хәсрәтле сирҙән ҡотолоуынан өмөтөн өҙҙө.

...Ҡырҡ икенсе йылдың июль аҙағы ине. Зөфәр олатаһына «Ҡыҙыл Башҡортостан»дан «Салауат» колхозы ағзаларының фронтовиктарға йылы кейем йыйыу эшенә то тоноуҙары тураһында уҡыны. «Булыр, булыр ул колхоздан, бер ҙә юҡҡа уға Салауат батыр исеме бирмәгәндәр!» – тине Ғәлиәкбәр һәм гәзитен кеҫәһенә һалып, идараға китте.

– Колхоздың исеме «Алға» икән, эше башҡаларҙан артта барырға тейеш түгел! Уҡы әле бына, Салауаттыҡылар ни эшләп яталар?! — тине Ғәлиәкбәр һәм колхоз рәйесе Латифаға һуҙҙы.

Латифа ҡыҫҡа ғына хәбәрҙе күҙенән үткәрҙе лә Ғәлиәкбәр ҡартҡа ҡарап:

– Беҙ ҙә уларҙан ҡалышмабыҙ, Тиктор... – ул саҡ ҡына ҡарттың ҡушаматын әйтеп ебәрмәне, – Ғәлиәкбәр бабай. Ләкин иртәрәк бит әле, – тине.

Рәйестең һүҙҙәре ҡартҡа оҡшаманы:

– Бүтәндәргә иртә түгел, беҙгә иртә имеш! – тине ул, үпкәсел тон менән. – Иртә булһа ла йыйып ҡуйырға кәрәк, ашарға һорамай бит! Бөгөн үк башларға

кәрәк йыйыу эшен, ҡаршы килмәһегеҙ, үҙ өҫтөмә алам.

Латифа, ҡарттың холҡон яҡшы белгәнгә күрә, һүҙ көрәштереп торманы. Үҙе лә тик тормаҫ, кешене лә тик тотмаҫ ҡартты әйткән һүҙенән ҡайтарыу бал ҡортон сәскәнән ҡыуып ебәреү мөмкин булмаған кеүек, ситен хәл, Латифа риза булды.

Кис менән колхозсыларҙың йыйылышы үткәрелде. Ғәлиәкбәр ҡарттың инициативаһын бер тауыштан хупланылар һәм уға ике ҡатынды ярҙамсы итеп билдәләнеләр.

Икенсе көндө, ҡояш сығыу менән, Ғәлиәкбәр идараға килде. Уны үҙенең ярҙамсылары – Кәримә менән Хөсниә көтөп торалар ине. Ғәлиәкбәр улар алдында үҙен ниндәйҙер ҙур сауҙа эштәре кешеһе кеүек тотто. Ул Кәримәне, йортта ҡалыр кешеләре булмаған колхозсыларҙың эшкә барышлай биреп сығыр өсөн алып килгән кейем-бүләктәрен алып торор өсөн, идара йортонда ҡалдырҙы. Үҙе Хөсниә менән, кисә йыйылышта һөйләшеү буйынса, әҙерләнеп ҡуйылырға тейешле йылы кейемдәрҙе йорт һайын йөрөп йыйырға сығып китте.

Ике сәғәт тә үтмәне, идара йортона бийма, ойоҡ, бейәләй, һырма, һырыған салбарҙар тейәлгән арба килеп инде. Йөк башында үҙенең эше менән артығынса ҡәнәғәт Тиктормаҫ ултырған. Ул үҙе үк туҡтаған атҡа «тр-р-р» тип ҡысҡырҙы ла йөк башынан төштө һәм йөктө урап алыусыларға ҡарап:

– Ил төкөрһә – күл була, тип дөрөҫ әйткән ҡарттар! – тине.

Бүләктәр йөгөн шул көндө үк машина менән районға ебәрергә булдылар. Ләкин был тау кеүек өйөмдә Ғәлиәкбәрҙең үҙ бүләге юҡ ине әле. Халыҡ фронтҡа ысын күңелдән ярҙам күрһәткәндә, буш ҡул менән тороп ҡалыуҙы ул башына индерә торған кеше түгел. Ҡарт йыйылған нәмәләрҙе Латифаға тапшырҙы ла үҙе йүгерә-атлай өйөнә ҡайтып китте.

– Бисә, ҡана, һандыҡты ас әле! –тине ул ишектән инеү менән. Уны һаман осҡолоғо тота ине әле.

Боронғо ҙур ҡалай һандыҡ Сәмиғә әбей ҡулындағы асҡыстың ике тапҡыр боролоуыпан ғәҙәттәге тоноҡ тауышы менән яңғырап асылды. Ғәлиәкбәр унан айырата йыйнаҡ итеп төрөп һалынған йәшел һырма һәм шундай уҡ һырыған

салбар тартып сығарҙы. Бер ҙә кейелмәгән был бер пар кейемде, магазинда алғандағыса, әйләндергеләп, ентекләп ҡараны ла:

– Бисә, һырмаһының төймәләрен күсереп ҡаҙарға тура килер. Юҡһа был теге нәҙек оҙон Вәлинур кеүек кешегә үлсәнеп эшләнгән, – тине. Ул үҙенең «ашарға һорамай торған нәмәләр» йәшнигенән аҡбур киҫәге алып, төймәләр ҡаҙай торған урынға аҡ нөктәләр төртөп сыҡты. Үҙе тәнҡитсел күҙ ҡарашын Сәмиғә әбей бармаҡтарының килешле хәрәкәт итеүенә эйәртте. Әбей энәһенең һәр бер сәнсеп алыныуы ҡарттың осҡолоғо менән оҙатыла барҙы. Төймәләре күсерелеп тегелгәс, Ғәлиәкбәр һырманы үҙе кейеп ҡараны.

– Артығыраҡ күсереп ташлағанбыҙ, буғай, ҡарсыҡ! – тине ул төймәләрҙе ҡаптыра биреп.

– Шулай булыр инде ул һинең, бер эште туғыҙ тапҡыр эшләмәһәң, күңелең буламы ни! Һал да илтеп бир тиҙерәк, юҡһа еңдәрен дә үҙгәртеп тегергә ҡуша башларһың тағы! – тине Сәмиғә әбей.

Ғәлиәкбәр ҡарт ысындан да ана шул еңдәргә ҡул тейҙергәндә, нисек булыр икән, тип тора ине лә. Сөнки һул ең уңына ҡарағанда оҙонораҡ төҫлө. Ләкин ул, был турала ауыҙ асмаҫ борон уҡ ҡарсығынан кире яуап алғанлыҡтан, һүҙ ҡуҙғатмаҫҡа булды. Ҡарт һырма менән мауығып, салбар тураһында бөтөнләй оноттомо, әллә бүләкте тиҙерәк илтеп бирергә ашыҡтымы, – икеһен бергә һалып төрҙө лә, ҡултығына ҡыҫтырып, сығып та китте.

Өс минут та үтмәне – тынғыһыҙ Ғәлиәкбәр Зөфәрҙе эйәртеп өйгә кире инде.

– Зөфәрҙе күрмәһәм, бөтөнләй иҫтән сығып ҡалаһы икән, – тине ул, – быларҙы кейәсәк ҡыҙыл армеецҡа хат яҙырға кәрәк. Йәғни һырма кеҫәһенә һалып ебәрергә. Ҡана, балам, ал әле ҡағыҙ менән ҡәләмде!

Ҡарт әйтеп торҙо, уланы яҙҙы. Һуңынан Зөфәр хатты ҡысҡырып уҡып сыҡты. Был бер генә тапҡыр ҡабатланманы. Йылы кейемде алыусы һуғышсыға төбәлгән йылы һүҙҙәр хатта, һырма төймәләре кеүек, бер урынға күсерелделәр. Хат ваҡсыл ҡарт төҙәтмәләре менән сыбарланды. Зөфәр яңынан күсереп яҙҙы, олатаһына тағы ла ҡысҡырыбыраҡ уҡып сыҡты. Олатаһының үҙенә күрә

ниндәйҙер бер көйгә һалынған осҡолоғо Зөфәргә уның бөтә тырышып яҙғандарын юҡҡа сығарырға ҡотортоп тороусы әллә ниндәй хыялдағы ҡош һайрауы кеүек ишетелә ине. Ҡаҙан тирәһендә бешеренеп йөрөүсе Сәмиғә әбей ҙә өҫтәл өҫтөн тултырған яҙмаларҙың тиҙерәк бер бөтөн хат рәүешенә кереүҙәрен көтөп борсола ине.

Оҙаҡ баш ватып ултырғандан һуң, фуфайка кеҫәһенә Ғәлиәкбәр ҡарт үҙ ҡулы менән түбәндәге хатты һалды:

«Тыуған илебеҙҙе немец фетнәселәренән таҙартыу фронтында һуғышыусы батыр егет!

Мин, Башҡортостандың «Алға» колхозы ағзаһы Ғәлиәкбәр Ғәлиәскәров, һиңә ошо бүләгемде ебәрәм. Был һырма менән салбарҙы минең үҙемә колхоздан бүләк итеп биргәйнеләр. Ғәҙәттә бүләкте бүләк итеп бирмәйҙәр. Ләкин мин ул йолаға ҡаршы, иле өсөн йәнен дә аямаған һалдатҡа бер ниндәй бүләк тә йәл түгел. Был кейемдәр һине һыуыҡтан һаҡлаһын. Беҙгә йылылыҡ һеҙҙең өшөмәүегеҙҙән килә. Ҡояшлы тормошто ҡайтарыу һеҙҙең ҡулығыҙҙа... Үлтер, улым, немецты! – минән теләк шул. Минең дә һинең кеүек ике улым немецты үлтерәләр...».

Күрәһең, байтаҡ ҡына ваҡыт үтеп киткән. Ғәлиәкбәр ҡарттың ике килене эштән дә ҡайттылар. Ҡаҙан тирәһендә табаҡ-һауыттарҙың шылтырауы өҫтәлгә тиҙҙән төшкө аш килеүен хәбәр итте. Быларҙың береһенә лә иғтибар итмәйенсә ишектән сығып барған ғаилә башы – Тиктормаҫты Сәмиғә әбей туҡтатты:

– Һин бөгөн ашауыңды ла оноттоң инде, ҡарт, – тине ул. – Сығып китһәң, тағы кискә тиклем юғалаһың инде. Аш өлгөрҙө бит, ашағас барыр инең!

Ҡарт ҡаршы килмәне. Хатта үҙен ашты ташлап сығып китергә ярамау йолаһын иҫенән сығарғаны өсөн эстән генә шелтәләп тә алды.

Тынғыһыҙ кеше, нисә әйтһәң дә, тынғыһыҙ инде ул. Ғәлиәкбәр ҡартҡа Зөфәрҙе булһа ла идараға ебәреп ҡайтармай тороп, ашағаны аш булып үтмәҫтер кеүек ине.

– Бар, балам, илтеп ҡайт ошо кейемдәрҙе. Йыйылған нәмәләр хәҙер машинаға ла тейәлеп бөткәндер инде. Ашыңды һыуыраҡ ашарһың, – тине ул

Зөфәргә.

Олатаһы өҫтәл эргәһенән тороп, ғәҙәттәге осҡолоғо башланыуға Зөфәр ҡайтып та керҙе. Нәмәләре лә үҙе менән ине. Өйгә инеү менән ул уларҙы:

– Бына олатай, һырмаң, бына салбарың! – тип һикегә ташланы.

Ҡарт быны көтмәгәйне. Уның башынан әллә ниндәй уйҙар йүгерҙе.

– Ниңә кире алып ҡайттың? – тип һораны ул.

– Алып ҡайтмай ни эшләтәһең уларҙы, – тине Зөфәр. – Беҙ туғыҙ һүҙле хатты ун туғыҙ тапҡыр яҙып ултырған арала, йыйып йөрөгән нәмәләреңде машина менән районға ебәргәндәр!

Ҡартҡа был һүҙҙәр һалҡын һыу булып һибелделәр. Йөҙө ағарынды. Икмәккә батып торған йөҙөм кеүек бәләкәй һәм ҡыҫыҡ күҙҙәре ҡайғылы ҡаранылар. Зөфәр олатаһына боҙло һыу ҡойоуын тағы ла арттыра төштө:

– Латифа апай әйтә, олатайың колхозсыларҙан бүләкте үҙе йыйып йөрөгәс, үҙенән килтереүҙе артыҡ һанағандыр, тип уйланыҡ, ти.

Ғәлиәкбәр ҡарт ғәйепте кемгә күсерергә лә белмәй өҙгөләнде. Уны ватан эше өсөн ярҙамға үҙенең өлөшөн индерә алмауы иҙҙе. Ул үҙен фронттағы ике улы алдында гонаһлы, ғәйепле кеше итеп һиҙҙе.

Ғәлиәкбәр ултырғысҡа ултырҙы, ҡулдарын тубыҡтарына шап иттереп һуҡты ла яңынан аяғына баҫты.

– Шулай булыр инде ул, бисәләрҙе колхозға баш итеп ҡуйһаң! – тине.

Зөфәргә олатаһы йәл ине, ул ҡыҙғаныс булып күренә. Уны хәҙер осҡолоғо ла тотмай. Тиҙҙән ауыҙынан һүҙе лә сыҡмаҫ кеүек күренә. Быны Зөфәрҙең әсәһе лә, өләсәһе лә күреп торалар ине. Сәмиғә әбей Зөфәрҙе еңенән мейескә табан тартты һәм уға ишетерлек кенә тауыш менән:

– Киҫәк әйтә һалып, олатайыңды бөтөнләй ҡурҡытып ташланың. Күрәһеңме, ҡурҡышынан ҡойолоп төштө. Ситләтеберәк әйтһәң, ни булыр ине һуң! Былдай урында ялғанлабыраҡ ебәрһәң дә зарарлы булмаҫ ине. – тине.

Зөфәр бер ҙә былай булыр тип уйламағайны. Үҙ һүҙҙәренән үҙе үк ҡурҡҡанлыҡтан, олатаһына ысынлыҡты нисек итеп әйтеп һалырға йөрәге етмәй тора ине. Ул эште өләсәһе аша ыңғайға һалып ебәрергә булды:

– Мин былай ҙа ялғанлап әйткәйнем, олатайым уны ысынға алды. Һин уға әйт инде, юҡҡа ҡайғырмаһын: машина китмәгән әле. Тейәлмәгән дә. Мин идаралағылар ашарға таралғанға күрә генә боролоп ҡайттым, – тине.

Сәмиғә әбей, Зөфәрҙе әрләй-әрләй, ҡартына дөрөҫлөктө һөйләп бирҙе. Ғәлиәкбәр ҡарт башта быға ышанмай торҙо; тик шул ваҡытта урамдан үтеп барыусы шофер Талипты үҙ күҙҙәре менән күргәс кенә машинаның әле китмәгәнлегенә ышанып етте. Ғәлиәкбәр бөтөнләй икенсе кеше ине инде. Ул хәҙер элеккесә асыҡ, етеҙ һәм тик тороуҙы белмәгән кеше булыуына ҡайтты.

– Кил әле бында, ялған ҡапсығы малай, ҡолағыңды борайым! –тине ул Зөфәргә.

Күҙҙәре йәшләнгән малай танауын тарта-тарта әкрен генә олатаһы ҡаршына килеп баҫты.

– Ҡурҡма, тоҙло ҡолаҡ, мин һине язаламайым! –тине ҡарт. – Зарар юҡ. Әгәр ялғанлауың киреһенсә булһа – машина бүләктәрҙе районға алып китеп тә, китмәгән тип алдашһаң, ҡолаҡтарыңды, әлбиттә, борғоларға тура килер ине. Шулай ҙа, бынан ары олатайыңды алдай торған булма, ҡолағыңды өҙөп үк алырмын!

Мәк сәскәһе кеүек ҡыҙарынған Зөфәр:

– Бынан һуң бер ваҡытта ла ялған һүҙ әйтмәм, олатай, хатта һинең ашарға һорамай торған нәмәләреӊ йәшнигенә лә рөхсәтһеҙ ҡулымды һуҙмам! – тине...

Зөфәрҙең олатаһын ҡурҡытыуы зарарһыҙ ғына түгел, хатта әйтеп бөтөргөһөҙ файҙалы һөҙөмтә бирҙе: шул көндән алып Ғәлиәкбәр ҡарттың осҡолоҡ тотоуы, ҡайнар һыу менән баҫтырылған өй сиңерткәһе кеүек, икенсе ҡабатланмаҫ булды. Хәҙер бер йылдан ашыу ваҡыт үтте – Тиктормаҫ Ғәлиәкбәрҙе осҡолоҡ тигән нәмәнең борсоғаны юҡ. Уға ана шул ҡурҡыу берҙән-бер дауа булды. Һәм был ғәжәп дөрөҫ, сөнки был ябай ғына ҡурҡыу түгел ине. Был ысын кешенең тыуған ил алдында, уның яҙмышы хәл ителгән ҡанлы көндәрҙә яуаплылыҡ һиҙеү тойғоларының урғылыуы ине. Бындай көслө кисерештәр, күрәһең, ҡайһы бер сирҙәргә доктор рецебы менән күрһәтелмәгән дарыу ҙа була ала икән.

## Разведчик[1]

### 1

Зариф Ариткулов – танылған разведчик. Уны яугирҙәр часть командирының «күҙе һәм ҡолағы» тип йөрөтәләр. Зариф разведкаға яңғыҙы йөрөүҙе артыҡ күрә. Күп ваҡытта ул бер тәүлеккә тип китә, ә тоҡсайына аҙыҡтың өс көнлөгөн һалып ала. Зариф ситен эш оҫтаһы. Ул төндә дошман позицияһының алғы сиген үтеп сыға һәм үҙенә ыҡсым ғына окоп ҡаҙый, уны шик тыуҙырмаҫлыҡ итеп йәшерә. Окопта уға икешәр, хатта өсәр тәүлек тә ултырырға тура килгеләй. Ул шунан үҙенең, ентекле күҙәтеүселек эшен алып бара. Дошмандың ниндәй эш алып барыуын күҙгә сағылған, ҡолаҡҡа ишетелгән һәр төрлө ваҡ деталдәр, ябай күҙ өсөн әһәмиәте булмаған күренештәр менән билдәләй ала.

Мәҫәлән, беҙ уның күҙәтеү журналында: «Иртәнән кискә тиклем бысҡы тауышы ишетелде. Көн уртаһында ике-өс сәғәткә туҡтап торҙо. Балта менән ярыу тауышы ишетелмәне» тигән яҙыуҙы уҡыйбыҙ. Билдәле, утын әҙерләмәйҙәр, бүрәнә ҡырҡалар. Тимәк, яңы дзот йәки блиндаж төҙөйҙәр. Иҫкеләре була тороп, уларҙың яңылары ниңә кәрәк? Өҫтәмә ғәскәр көтөлә. Йәки: «Суҡалы ҡайын башында ҡояш яҡтыһында быяла ялтырауы сағылып китте – бинокль». «Ағаслыҡ өҫтөнән ҡоштар төркөмө пырылдап күтәрелде, һайыҫҡан шыҡырҙаны. Көн ауышҡас, тағы ҡабатланды». Зариф быларҙан да аҡыллы һөҙөмтә сығара.

Зариф күҙәтә, тыңлай, яҙа. Төнөн уйһыуыраҡ урында йәшеренеп, күҙәтә торған әйберҙәрҙе йондоҙло күк фонында күрергә тырыша. Командованиеға белдерелеүен кисектерергә ярамаған мөһим күҙәтеүҙәрҙе – әйтәйек, немецтарҙың тупланыуын – ракета ебәреп хәбәр итә; трасса дошман төркөмөнөң хәрәкәт итеү йүнәлешен күрһәтә. Бына шул ваҡытта инде немецтар сигналсы разведчикты эҙләй башлайҙар. Зарифҡа ғәҙәттән тыш һаҡлыҡ һәм тиҙлек менән урынын алмаштырырға кәрәк. Уның бындай ваҡытта үҙенең алымы бар: ул артҡа, килгән яғына табан түгел, ә, киреһенсә, дошман

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 164-171-се биттәр.

позицияһына ҡарап шыуыша. Немец уны, былдай саҡта кеше артҡа ҡасырға тейеш, тип сигнал бирелгән урындан артта эҙләй. Өҙләкһеҙ ракета яндыра. Тәжрибәле разведчик, төн ҡараһын йыртып һуҙылған яҡтылыҡтан файҙаланып, яңы урындан тыныс ҡына күҙәтә бирә.

Фронттың алғы позицияларында Зариф Ариҭҡуловтың йәйе һәм көҙө бына шулай тәүәккәл үтте. Дивизион командиры капитан Ярцев та, разведчиктар взводы командиры лейтенант Карпов та уның эше менән һәр ваҡыт ҡәнәғәт булдылар, уға ышаныс менән ҡаранылар. Ләкин һуңғы ваҡытта Зариф үҙенең был «тарҡау» күҙәтселек эше менән ҡәнәғәтһеҙләнеү күрһәтә башланы. Уны «тел» алып ҡайтыу ҡыҙыҡһындыра ине. Уның «телселек» эшен булдыра алыуына нигеҙ ҙә бар ине, әлбиттә. Шуға күрә лейтенант разведчиктың теләгенә ҡаршы килмәне, рөхсәт итте.

Ләкин Зарифтың тәүге ике табышы уңыш бирмәне. Декабрҙең тәүге аҙнаһында ул үҙенең беренсе «тел»ен алып ҡайтты. Капитан Ярцев «тел»де Зарифтың үҙе алдында уҡ юҡҡа сығарҙы, бер көндән һуң разведчик икенсе «тел» килтерҙе. Ләкин немец иҫенә килә алмай үлде.

Командованиеға «тел» кәрәк. Карповты ашыҡтыралар. Ә Зариф, үс иткәндәй, тоғонан йә аңғыра, йә үлек немец сығара. Немец ҡайта – «тел» юҡ. Лейтенант бындай ашығыс эш артынан башҡа кешеләрҙе лә ебәрә ала, ләкин ул сержант Ариҭҡуловтың яҡшы «тел» алып ҡайтыуына һаман ышаныс тота.

– Кискә тиклем ял ит, төнөн тағы барып ҡарарһың, – тине лейтенант.

Зариф бының киреһен көткәйне. Взвод командирының уны разведканан ситләтеүен түгел, ә өмөтлө ҡарауын күргәс, шатлыҡлы йылмайып ҡуйҙы.

Ул землянканың ҡоро кукуруз япраҡтары түшәлгән тотош һикеһенә менеп ятты. Тиҙ генә йоҡоға китә алманы. Береһе бөтөүгә икенсеһен урап, тәмәке тартты. Тышта асыулы ел ҡарҙы туҙҙыра. Махорка төтөнөнә сумған Зариф ел һыҙғырыуы аҫтында әсәһен хәтерләй. Бер саҡ әсәһе уны шундай елле-буранлы көндө бик иртә уятты, урмандан утын алып ҡайтырға ҡушты. Зариф тыңламаны: «Яҡшы кеше урамға этен дә сығармай торған көндө һин мине, әсәй урманға ҡыуаһың!» – тине лә башынан уҡ бөркәнеп, икенсе яғына әйләнеп

ятты. Ниңә ҡарышты икән ул. Әсәһе шуның өсөн улына һаман рәнйейме икән әллә? Юҡһа, ни өсөн ул бер ай буйы хат яҙмай тора?..

Ул ҡараңғы төшкәс кенә уянды. Иптәштәре ҡалдырған төшкөлөктө кискелек менән бергә ашаны. Бөтә кәрәк-яраҡтарын алып, сығып китергә әҙерләнеп бөткәс, үҙенең землянкала ҡалдырып йөрөтә торған көндәлек дәфтәренә һуңғы өс көндө индерҙе.

**2**

Иртән, разведчиктар йоҡонан торғанда, Зариф Ариҡуловтың урыны буш ине. «Ҡайтырмы, әллә немецтар ҡулына төштөмө?» Кукуруз япраҡтары түшәлеүенән торған хужаһыҙ постель һәр «телсе»лә шундай һорау тыуҙырҙы. Лейтенант Карпов үҙ фекерен өҙөп кенә әйтмәне. Шулай ҙа унының разведчиктар менән һөйләшеүенән Зарифтың иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуына ышанысы юғалмауы һиҙелә ине.

Көн уҙҙы, кис етте. Зариф һаман ҡайтманы. Лейтенант, ашыҡтырылған «тел»де табып ҡайтыр өсөн, разведчиктар группаһы билдәләне. Ер өҫтөн ҡараңғылыҡ баҫҡас, группа алғы линияға китте.

Бушыраҡ минуттарҙа лейтенант Карповтың Аритҡулов яҙмаларынан торған иҫке күҙәтеү журналдарын аҡтарыу, уларҙы дошман ғәскәрҙәре тураһында мәғлүмәт биреүсе яңы бер белешмә итеп, ҡайтанан уҡыу ғәҙәте бар. Унның был ҡыҙыҡһыныуы йәш разведчиктарҙы өйрәтеү өсөн тәжрибә материалдары һайлап алыу теләгенән килә. Бөгөн дә ул, Зарифтың керләнеп бөткән журналдарын күҙҙән үткәреп сығыу уйы менән, иң өҫтә ятҡан береһен ҡулына алды. Ләкин был бәләкәй форматлы дәфтәр Зарифтың шәхси көндәлек яҙмаларының дауамы булып сыҡты. Дәфтәрҙең тышына бишле номеры һуғылған. Лейтенант унан яҙмалар авторының өс көнөн уҡыны.

«3 декабрь.

Алып ҡайтҡан «тел»де юҡҡа сығарҙылар. Теле котелок төбө ялар өсөн генә хеҙмәт иткән ярым иҫәр немецтан капитан кәрәкле мәғлүмәт ала алманы. Ул үҙенең ҡорһағы тураһында ғына һөйләй белә торған булып сыҡты. Бына инмә ти ул: «Мин, беҙҙең частар ташлап киткән йөрөтмәле кухняны күргәс,

ротамдан айырылып ҡалдым. Күпме кәрәк – шул тиклем бутҡа ашаным. Ятып йоҡланым. Йоҡонан торғас, тағы бутҡаға йәбештем, һуңынан, аяҡтарҙы көскә һөйрәп, үҙебеҙҙекеләрҙе эҙләп китеп бара инем...». Капитан, бындай фриц менән бутҡа бешереп булырлыҡ түгел, тине лә үҙен тылға оҙатырға ҡушты».

«5 декабрь.

Күктә йондоҙҙар ҙа һүнмәгәйне әле. Тоҡ эсенә һалып бер ефрейтор алып ҡайттым. Юлда фриц холоҡһоҙлана башланы. Тынысландырырға уйланым үҙен. Ҡыҙыбырак киткәнмен, күрәһең, – немец тоҡтан сыҡҡас, бер һүҙ ҙә әйтә алманы – иҫенә килә алмайынса үлде. Тере немец тотоп, үлек «тел» алып ҡайттым. Маҡтана алмайым».

«6 декабрь.

Ваҡыт – 21.00. Бөгөн дә «тел» алып ҡайтырға йыйындым. Төн маҡтап бөтөргөһөҙ яҡшы: ҡараңғы, ел ҡаршы – көндөҙ яуған ҡарҙы һеперә. Мин гражданкала саҡта бындай көндө (төнөн әйтеп тораһы юҡ инде уның) юлдан аҙашырмын тип, урманға барырға ла ҡурҡа инем. Бына нисек гүзәл төн. Яҡшы «тел» алып ҡайтырға шарты килеп тора».

**3**

Етенсе декабргә ҡаршы төндө Зариф немецтарҙың көсәйтелгән хәрби һағын үтә алманы. Уны һиҙеп ҡалдылар. Ҡулға тереләй төшөрөү уйы менән ҡамап, ҡыҫырыҡлай башланылар. Разведчиктың хәле ҡыл өҫтөндәге кеүек ине. Ул тәүәккәл һәм хәйләле юл менән генә ҡотолоп ҡала алды. Ләкин Зариф буш тоҡ менән кире боролманы, заданиеның үтәлеүен алдағы төнгә ҡалдырып, көндө уңай бер соҡор эсендә үткәрҙе.

Түҙемһеҙлек менән көтөлгән төн етте. Зариф ҡалҡыулыҡты икегә бүлеп һуҙылған ҡул эсендәге юлға төштө. Юл миналанған булып сыҡты. Уға ташлы текә тау бите менән барырға тура килде.

Ел ҡарҙы һеперә. Немецтар өсөн төн ҡурҡыныс. Улар әленән-әле ракета ебәреп, тирә-йүнде яҡтыртып торалар. Бына уң яҡтан, төн ҡараһын йыртып, ракета атылды. Зариф аҡ халаты менән ергә йәбешкән кеүек ятты. Яҡында икенсе, өсөнсө ракеталар ярылып сәселгәндә, ул инде утыҙ-ҡырҡ метр алға

шыуышып, ҙур бер ҡая артына йәшеренеп алғайны. Ҡаянан алыҫ түгел ерҙән ҡалҡыулыҡты урталай киҫкән миналы юл һулға боролоп, өҫкә – тигеҙлеккә сыға. Юл тыныс. Зариф юл буйынан алға шыуышты.

Ракеталар сәселеп һүнгәнгә тиклем булған арала Зариф ҡаршыһында сүмәләнеп торған блиндаж күрҙе. Блиндаж алдында һаҡсы шәүләләнә. Уң яҡтараҡ – брустверы һырланып һуҙылған траншея. Ләкин кеше барлығы һиҙелмәй. Блиндаж менән ике аралағы юл да тапау түгел.

Зариф төн ауышҡанға тиклем күҙәтеп ятты. Ике тапҡыр часовой алмашынды. Зариф көткән яҡшы «тел» һаман күренмәне. Бәйләүҙәге эт кеүек, сикләнгән арала бер алға, бер артҡа китеп йөрөүсе часовойҙы тоҡ эсенә һалыу Зариф өсөн бер ни ҙә тормай. Ул уны ҡаҡмай-һуҡмай, тере килеш алып та ҡайтыр. Ә немец тағы аңғыра булып сыҡһа, кәрәкле нәмә тураһында һөйләрлек булмаһа, Зариф ни эшләр? Ни йөҙө менән күренер?

Посында арлы-бирле өҙлөкһөҙ йөрөп торған бағауыл ҡапыл туҡтаны һәм, баҫҡан урынында аҙ ғына хәрәкәтһеҙ торғандан һуң, туп-тура Зариф ятҡан яҡҡа ҡарап атланы. Разведчик үҙен һиҙҙерерлек бер ниндәй ҙә хәрәкәт күрһәтмәгәйне күрһәтеүен. Шулай ҙа йөрәге ҡыҙыуыраҡ һуға башланы. Немец Зарифҡа етеһигеҙ аҙым ғына етмәҫтән туҡтаны, уға һул яғы менән боролоп, тәмәке урарға тотондо. Бына шунда ғына Зариф һаҡсының нимә өсөн блиндаж алдынан ситкәрәк китә төшөүен аңланы.

Ләкин уға тәмәкеһен тартырға тура килмәне. Зариф, һыуҙа йөҙгән кеүек өс тапҡыр ынтылып, алға шыуышты һәм, күҙ эйәрмәҫлек тиҙлек менән аяҡтарына баҫып, ҡалған араны бер һикереү менән үтеп, һаҡсыға ташланды. Көслө ҡулдар немецты бер ниндәй ҙә тауыш сығарырға ла ирек бирмәй, бороп йыҡтылар. Алдан әҙерләнгән сепрәк фрицтың ауыҙына тығылды.

Ике минут эсендә башына немец шлемы кейгән һәм ҡулына немец винтовкаһы тотҡан Зариф блиндаж алдына килеп баҫты. Уға күп көтөргә тура килмәне. Блиндаждан, шинелен яурындарына ғына һалған килеш, ялан башлы бер офицер сыҡты. Ул, алдындағы һаҡсыға иғтибар итмәҫтән, тәбиғи хәжәтен үтәр өсөн арыраҡ атланы, елгә арты менән тороп баҫты. Зариф алдында немец

«бер тәүлек буйына һин көткән тауар – бына мин үҙем инде» тигәндәй торҙо. «Тел»дең бынан да яҡшыһын, ваҡыттың бынан да уңайлыһын көтөү башҡаса кәрәк түгел» – разведчикты бына шул уй ҡыйыу хәрәкәткә килтерҙе. Ул офицерҙың артына уҡ килеп баҫты һәм приклад менән уның елкәһенә һуҡты. Шунда уҡ бер ҡулы менән ҡамыр кеүек йомшап ҡарға һығылып төшкән офицерҙың ауыҙын ҡапланы. Автомат кеүек эшләгән ҡулдар немецты шинеленә урап тоҡҡа һалдылар. Зариф операцияһын шундай тиҙлек һәм оҫталыҡ менән эшләне, ситтән тороп ҡараусы булһа, уны тере немец менән түгел, ә ниндәйҙер ҡарасҡы менән эш итә, тип уйлар ине.

Төн ауышып бара. Зариф үҙенең ҡайтыу юлын төн менән ярышып үтә һымаҡ. Тоноҡ күк ситендә һиҙгер һәм тәжрибәле күҙҙәр өсөн генә беленерлек беренсе билдәләр таң яҡынлашыуын күрһәтәләр. Хәҙер төндөң кәрәклеге ҡалманы. Рельефтың «телселәр»ҙе дошман күҙәтеүенән йәшерә торған урындарын һайлап үтелгән урау һәм ауыр юл артта ҡалды инде. Алдағы ара ике километр ҙа булмаҫ. «Тел»ле тоҡ йөкләгән Зариф хәҙер үҙен иркенерәк тота: ул инде немецтар өсөн үлем сығанағы булған зонала.

Зариф, хәл йыйып алыр өсөн, ауыр снаряд ярылыуынан яһалған соҡорға туҡталды. Иркен итеп һулыш алды. Ҡасандыр аҡ булған яулығы менән тир һәм ҡарҙан еүешләнгән йөҙөн һөрттө. Ул тыныс. Тик бына «тел»дең бер ҙә тауышы сыҡмай. Ҡарышып тыпырсынмай ҙа.

Зарифтың тотҡон менән һөйләшеп ҡарарға теләге ҙур, дәрте көслө. Ләкин уның, атаһы мәрхүм әйтмешләй, дарманы юҡ – ятлап алған немецса һүҙ һәм фразалары унға ла тулмай. Улар ҙа был урында файҙаланырлыҡ түгелдәр. Нисек инде тоҡ эсендә ятҡай немецҡа иҫәр һымаҡ: «Һальт!» – туҡта, «Һенде һох!» – ҡулыңды күтәр, йәки «Ваффен һинлеген!» – ҡоралыңды ташла, тип ҡысҡырмаҡ кәрәк? Дөрөҫ, Зариф тағы бер нисә фраза белә. Мәҫәлән, ул: «Вер бист ду?» – тип һорай ала. Был да урынһыҙ. Разведчик яҡшы белә: «тел», тотоп алғанда, немец ине, тоҡ эсенә инеү менән ул, әлбиттә, фин йәки румын булып китмәгән. Шулай булғас, унан «һин кем?» тип һорауҙан мәғәнә юҡ.

Яҡтыра башлағайны инде.

Зариф ауыр аҙымдар менән землянканың беләүләнгән ер иҙәненән эскә үтте. Сисенмәй генә ятҡан Карпов йоҡлай ине әле. Уның баш осонда баҫынҡы тауыш ишетелде.

– Иптәш лейтенант, иптәш лейтенант!..

«Бына хәҙер лейтенант башын күтәрер ҙә “ни бар?” тип һорар». Зариф уны йоҡоһонан беренсе тапҡыр ғына уята торған кеше булһа, шуны көтөр ине. Һуң ятып, иртә тороусы, зирәк йоҡоло командир был юлы ла тап Зариф көткәнсә уянды – өндәшеү менән иҙәнгә үк тороп баҫты.

– Иптәш командир, задание үтәлде – «тел» алып ҡайттым!

Карповтың йоҡоһо туймаған күҙҙәрендәге шатлыҡлы ҡараш ирендәрендәге шундай уҡ йылмайыу менән ҡушылды.

– Мин шулай уйлағайным да, Ариҡкулов, яҡшы! – тине лә ҡулын сержанттың иңбашына һалды. – Йә, күрһәт тауарыңды!

Зариф тоғонан туҙынған оҙон сәсле обер-лейтенантты сығарҙы. Бәләкәй буйлы немец офицеры иҫертеүҙән айный алмаған ҡиәфәт менән аяҡтарына баҫып, тирә-яғына асыуы ҡараш ташланы. Ул үҙенең ҡайҙа икәнлеген аңланы.

Карпов телефон аша штаб менән һөйләште, һүҙен: «Хәҙер, иптәш капитан», – тип бөтөрҙө, һуңынан Ариҡуловҡа боролоп:

– Кейҙер шинелен, штабҡа илтәбеҙ, – тине.

Зариф, немец офицерының ҡаршыһына баҫып, шинелде, кәрәкмәһә лә, бер һелкеп алды һәм, ҡыланышы менән «Рәхим итегеҙ, кәрәкле ҡунаҡ!» тигәнде аңлатып, кейҙерергә әҙерләне. Быны аңлаған обер-лейтенант Зарифҡа асыулы итеп ҡараны ла арты менән боролдо. Уның ҡалтыранған ҡулдары еңдәргә керә алмай торҙолар. Быны күҙәтеп торған Карпов:

– Һинән, сержант, насар гардеробсы сығыр ине! –тип көлдө.

Ариҡкулов яуапты, немец шинелде кейеп, ҡаптырмаларын эләктерә башлағас ҡына ҡайтарҙы.

– Дөрөҫ әйтәһегеҙ, иптәш лейтенант, минең бындай эштә оҫталығым юҡ; минең өсөн, немецҡа, шинель кейҙереүгә ҡарағанда, тоҡ кейҙереү еңелерәк! – тине.

16.12.43.

## Дошман тылында[1]

### *Һауанан кешеләр төшәләр*

1944 йылдың башы. Ҡараңғы төн. Өҫтө көндөҙ яуған ямғырҙан шаҙраланып боҙолған ҡар яланы төнгө яҡтылыҡ бирә алмай. Украинаның көнбайыш яғында быйыл ҡыш шундай. Буранды хәтерләтә биргән һепертмәле ел ямғыр менән алмашынып тора. Һалҡын төндәрҙән һуң йомшаҡ көн килә. Шуның өсөн бындай ҡышты ҡыш тип әйтке килмәй. Бындағы быйылғы ҡыш – йылдың ғинуар менән май айҙары араһындағы ниндәйҙер урта климатлы бер ваҡыты ул.

Самолеттар фронт линияһын киҫеп, немец ғәскәрҙәре тылына үттеләр. Дошман оборонаһының алғы сиге өҫтөндә ул тулҡынланып ҡалды. Төрлө төҫтәге ракеталар, трасса һыҙып атылған пулялар, зенит туптарынан сыҡкан снарядтар күккә стеналар булып күтәрелделәр, һауа моторҙар тауышынан гөрләп торҙо.

Лейтенант Кәрим Иҙелбаев 7-се номерлы машинала ине. Машина эсе ҡараңғы, тын. Парашют бауҙарына сырмалған десантсылар тығыҙланып ултырғандар.

Кәрим бишенсе кеше булып һикерҙе. Уның артынан башҡа офицер һәм боецтар атылдылар. Көслө ел десантсыларға бер тирәгәрәк төшөргә ирек бирмәне, улар бер-береһенән алыҫ аралы булып сәселделәр.

Урман буйындағы тәрән ҡарға төшкән Кәрим парашютын төрҙө. Курткаһының төймәләрен ысҡындырҙы; һәр яҡлап үҙенә бер тәртип менән аҫылған йөктәр баҫымы аҫтында парашют менән булашыу уны эҫеләткәйне Ул нәмәләрен барлап сыҡты. Бөтәһе лә үҙ урынында: арҡала тығыҙ эстәлекле ыҡсым тоҡсай, кеҫәләрҙе граната һәм патрондар баҫып торалар. ППШ, дискылар, һыулы фляжка, планшет...

Баш өҫтөндә самолеттар һаман геүләйҙәр ине әле: десантсыларҙы

---

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 171-175-се биттәр.

төшөрөү дауам иттерелә. Лейтенант азимут буйынса самалап йыйылыу пунктына ҡарай китте. Артта ҡар тиҙлеген боҙоп ҡала барған ауыр аяҡ эҙҙәренең һаны ҡырҡҡа ла тулмағандыр, ҡаршыла кеше күренде. Кем был: беҙҙең десантсымы, әллә немецмы? Кеше оҫта йөрөшлө, шәүләләнеп тә етмәҫтән, ҡарға ҡушылып юғала һәм, тейен кеүек, бер ағастан икенсеһенә күсә биреп, юлын дауам иттерә. Кәрим уның юлына ҡаршы сыға төшөп:

– Туҡта, кем килә? – тип ҡысҡырҙы.

Кеше тын ҡалды. Кәрим башта затвор асылып ябылыуын, уның артынан кешенең үҙ тауышын ишетте:

– Кил бында!

Кәрим автоматын атыуға әҙер тотҡан килеш кешегә яҡынлашты һәм кеҫә фонарын яҡтыртып:

– Ун, – тине.

Теге кеше пароль менән:

–Ун биш, – тип яуап бирҙе.

Был – штаб начальнигы капитан Лазарев ине. Ул да, Кәрим кеүек, һауанан әле генә төшөп, ергә аяҡ баҫҡан. Улар күрешеүҙәре өсөн шат инеләр.

### *Йылға өҫтөндә... Нөктә бар*

Иртәгәһенә десанттарҙың ҙур өлөшө урманға йыйылғайны инде. Алда ауыр операцияларҙы башҡарыу тора. Дошмандың оборона районында эш итергә кәрәк. Подполковник Назаров, шарттарҙың үҙенсәлегенән сығып, операциялар планы төҙөй. Картаға төрлө билдәләр яһай, нөктәләр менән сыбарлай. Уға дошман тылынан тороп, беҙҙең частарға Случь йылғаһын аша сығырға әҙерлектә ярҙам күрһәтеү ҡушылған. Назаров уйлай. Ул канонаданан ҡалтыранып-ҡалтыранып ҡуйған урманда ултыра. Ләкин уйҙары менән немецтарҙың ышаныслы нығытмаларын айҡап йөрөй. Ул, бынан тороп, ҙур юлда ығы-зығы килгән бронемашиналарҙы, тиҙ йөрөшлө штаб автомашиналарын күҙҙәре менән түгел, ә күңеленән күрә. Бурыс: уларҙы күҙгә күренмәҫлек хәлгә килтереү.

Кәримде Назаровҡа саҡырҙылар.

– Иптәш Иҙелбаев, ҡара һәм тыңла, – тине подполковник. Кәрим күҙ ҡарашын уның ҡулындағы алты ҡырлы ҡыҙыл ҡәләмдең карта өҫтөндә төрткөләр ҡалдырып йөрөүенә эйәртте.

– Бына ошо ерҙәрҙән Случь тигән йылға аға, беләһеңме?

– Эйе, беләм.

– Юҡ, белмәйһең әле, күрәһең генә. Ҡара һәм тыңла, белерһең.

Кәримдең күҙҙәре картала. Случь йылғаһы, һунарсынан үҙенең эҙен йәшереү өсөн тура юлды уралып-уралып үткән ҡырағай йәйлек кеүек дуғалы боролмалар яһап аға.

Ул үҙенең сығанағын Каменец-Подольский өлкәһенең көнбайышынан уҡ ала һәм, ҡамышлы күлдәргә тоташа биреп, көнсығышҡа ҡарай бара; Любар тигән урынға еткәс, ҡапыл төньяҡҡа борола, ә унан тағы ла көйәнтәләнә төшөп, Житомирщина ауыл һәм ҡалалары аша аға ла, һулға боролоп, Ровно өлкәһенә сыға. Случь Людвиполь ҡалаһын үткәс, төньяҡҡа ҡарай төҙәйә төшә һәм Сарны урмандарына инеп юғала.

Случҡа десант тупланған Сарны урманына инергә ун биш километрлап ер ҡалғас, подполковник картаға ҙур итеп нөктә төрттө.

– Күрәһеңме, бына бында нимә бар? – тип һораны ул Кәримдән.

– Күпер, – тине лейтенант.

– Эйе, күпер. Бына шул күперҙе унан алырға кәрәк. Йылға туңыр-туңмаҫ хәлдә. Дошман көсөнөң ҙур өлөшө был районда ана шул күпер аша үткәрелә. Күперҙе алыу менән беҙ немецтың ҡойроғон ярым туңған йылға һыуына ҡатырабыҙ тигән һүҙ!

Кәрим баҫҡан урынында төҙәйә биреп:

– Аңлашыла, иптәш подполковник, –тине.

– Аңлашылһа, күперҙе шартлатыу эшен һиңә тапшырам. Үҙең теләгән ике кешене алып, төнөн заданиены үтәргә тейешһең.

Подполковник, уңыш теләп, Кәримдең ҡулын ҡыҫты. Лейтенанттың йөҙө етди ине.

### *Ҡыл өҫтөндә*

Һаҡта тороусы иҫкәрмәҫтән ҡаҙалған бысаҡтан бөгөлөп төштө. Күперҙең урталығына толлы йәшниктәр ҡуйылды. Сержант Лебедев ҡулындағы шнурҙы һуҙа биреп артҡа шыуышты. Яр ситендә йәшеренгән өсөнсө десантсы, төн фонында шаҡтай һүрәтләнеп торған күпер өҫтөндәге Кәрим менән Лебедевты асыҡ күрмәһә лә, тынын йәшереп, күҙҙәрен талдырғансы секерәйтеп, шул яҡҡа ҡарап торҙо. Ул дөрөҫ һиҙенә: һаҡсы хәрәкәтһеҙ, күпер ҡыл өҫтөндә тора. Бына-бына хәҙер йә Кәрим, йә Лебедев ҡылды тартып ебәрер...

– Булды, – тип бышылданы Кәрим. Улар икеһе лә күперҙән ситләштеләр, Кәрим шнурҙың осон бармағына урай башланы.

Кәрим, сигнал көткән һымаҡ, бер секундҡа тын торҙо ла, ҡапыл шнурҙы тартып ебәрҙе. Аралары бер-береһенән алыҫ булмаған өс десантсы бергә тындарын йотоп, ҙур һөҙөмтә көтөп ҡалдылар. Ләкин шартлау булманы. Көтөлмәгән тынлыҡтан егеттәрҙең ҡолаҡтары һаңғырауланғандай булды.

Кәрим һикереп торҙо. Нимәнелер сәйнәп өҙөргә телгән кеше асыуы менән тештәрен ҡыҫты. Эстән генә һүгенде лә, эйелә төшөп, күпергә йүгерҙе. Ул күпергә аяҡ баҫҡанда, арттан ҡурҡыныс тыуыуын иҫкәртеү тоны менән сыҡҡан тауыш ишетте:

– Иптәш лейтенант?!

Ләкин быға яуап булманы. Ҡаршы яр йәнләнеп китте. Немецтарҙың өҙөп-өҙөп һөйләшеүҙәре ишетелә башланы Күперҙең таҡталар йәйеме өҫтөндә туң итек үксәләре шаҡылданылар. Кәрим үлек часовойға абынып йығылды. Нисек тора һалғанын үҙе лә һиҙмәйенсә, кеҫәһенән запас шартлатҡыс ала-ала, немецтарға ҡаршы йүгерҙе. Ул ҡысҡырыныуҙарға ла, автомат очередтарына ла иғтибар итмәй. Уның башында бер генә уй – эште аҙағына тиклем алып барып сығыу. Бына ул күҙ эйәрмәҫлек тиҙлек менән толдың ярақһыҙ шартлатҡысын яңыға алмаштырҙы. Күпер хәҙер ҡыл өҫтөндә. Күпер өҫтөндә – Кәримдең ямышы. Ул, бер нисә метр артҡа сигенеп, шнурҙы тартты. Тол шартланы. Кәримдең ҡолаҡтары уның тауышын һыйҙыра алманы... Тыйылғыһыҙ дауыллы

көстө Кәрим күтәрә алманы.

### *Әҙһеҙ аҙымдар*

...Тирә-яҡ иртәнге ҡуйы томан эсендә. Әйтерһең, снарядтар ярылыуынан йәрәхәтләнгән ер рәхәт йоҡоға талған. Ер йоҡоһо томан булып күтәрелгән, уның тәбиғи тынлығын орудиелар гөрһөлдәүе лә боҙа алмай. Бындай томанлы иртәләр берәм-һәрәм йөрөгән немецтар өсөн ҡурҡыныслы: беҙҙең разведчиктар уларҙы терелэй тотоп алып китәләр. Хәйер, салт аяҙ иртәләр ҙә немецтарға күңелле түгел: снайперҙар уларҙы берәм-берәм сүпләп торалар.

Кәрим күҙҙәрен асты. Үҙенең тере булыуына ышана алмай торҙо. Ул ғүмерендә беренсе тапҡыр тилеләр кеүек «был минме, түгелме?» тип үҙенә икеләнеп ҡараны. Ул ҡар эсендә ята, тәрән итеп өңөп төшкән. Бында үҙе килеп кергәнме, килтереп ташлағандармы – Кәрим уныһын хәтерләмәй. Ул табут эсенә һалынған тере кеше кеүек, үҙенең ҡайһы ерҙә икәнлеген белмәй. Ләкин ул ятҡан ер бик тыныс булһа кәрәк: канонада ла ишетелмәй, снарядтар ҙа ярылмайҙар. Шулай ҙа күңел тыныс түгел. Өшөгән ҡулдар билдәге бысаҡҡа һуҙылалар. Ләкин ҡыны буш. Кәрим шунда ғына бысаҡтың немец һаҡсыһы арҡаһында ҡаҙалып ҡалыуын иҫенә төшөрә. Ул ятҡан еренән ҡуҙғалмай ғына, быялаһы ҡырылған, секунд стрелкаларынан башҡа стрелкалары төшкән ҡул сәғәтенә ҡарай, кәрәкмәһә лә, ҡолағына тотоп йөрөшөн тыңлай. Ғәжәп күренеш – әйләнә, ә сәғәттең эске механизмы эшләмәй. Ләкин был ҡолаҡтарының тауыш ишетеүҙән туҡтауын һаман әле белмәгән кеше өсөн генә ғәжәп хәл. Кәримдең ҡолаҡтары ишетмәйҙәр. Ул шаңҡыған булған.

Ул аяҡтарына баҫты һәм, ҡар тигеҙлеге өҫтөнә башын сығара биреп, яҡ-яғын тикшереп алды. Күкһел төтөн кеүек томан араһында бер ниндәй ҙә йән эйәһе күренмәй. Хатта ҡар өҫтөндә Кәримдең ярылып ятырға тейешле аяҡ эҙҙәре лә юҡ. Был самолеттан һикереп, ергә яңы аяҡ баҫҡан десантсыла ғына була торған хәл. Шулай ҙа үҙенең торған урынын билдәләү Кәримдән артыҡ баш ватыуҙы һораманы. Ҡаршыла ҡарға ҡаҙап ҡына ҡуйылған кеүек тырпайышып торған ваҡ ҡыуаҡтар үтә емерек күпер һынланды. Ара алыҫ түгел. Кәрим уны сама менән метрҙарға күсерҙе.

Хәҙер аңлашыла. Кәрим күперҙе ташлап үҙ аяҡтары менән бер аҙым да китмәгән, уны толлы йәшниктәр шартлауынан тыуған дауыллы һауа тулҡыны юнышҡы кеүек осортоп, яр буйына алып бәргән, ҡарға батырған. Бына ни өсөн ҡолаҡтар һаңғырау, аяҡтар эҙһеҙ икән. Десантсы шат: ул тапшырылған эштә кәрәкле эҙен ҡалдыра алды. Хәҙер топографик картала Случь йылғаһы өҫтөндәге ҙур нөктә юйылды инде. Назаров үҙенең алты ҡырлы йыуан ҡәләме менән йылғаның был урынына ҡәлғә билдәһен ҡуйғандыр ҙа инде. Кәрим тыныс: уның яҙмышы ҡыл өҫтөндә түгел, уны ҡар йәшерә. Эйе, йәшерә генә, туңдыра алмай. Ул был ояһында көндө ҡурҡыныcһыҙ үткәрә ала. Ә төн уның Сарны урмандарына тиклем ҡала барған аяҡ эҙҙәрен йәшерер.

### Әтәс фажиғәһе[1]

«Әтәс төшөндә ярмаға туйыр, фриц төшөндә әтәс һуйыр».

*(Фронтовиктар мәҡәле)*

**1**

Иртә менән госпиталь начальнигы Гергард Рейнер бишенсе палатала ятыусы һалдат Зигфрид Зингерҙы үҙенең кабинетына саҡырып кертте лә:

– Йә, билең нисек? – тип һораиы.

– Һыҙлауы баҫылмай, капитан әфәнде, төнөн бик борсой. Әлбиттә, бынан өс ай элек ауыртҡаны кеүек өҙөлөп һыҙламай һыҙлауын, – тине ауырыу Зингер.

– Һиңә тағы шул тиклемерәк ятырға тура килә әле.

– Тағы өс ай? Туҡһан көн, туҡһан төн?

– Эйе. Унда ла әле билеңдең һыҙлауы ғына бөтөргә мөмкин.

– Ә бөкрө шул көйө ҡалырмы?

– Ҡалыр шул. Ғөмүмән бөкөрөләрҙе госпиталь түгел, ҡәбер төҙәтә!..

Немец һалдаты Зигфрид Зингер үҙен ҡәбер алдында торған кеүек һиҙҙе. Ул күҙен йомдо. Уйҙары уны ҡәбергә һөйрәнеләр. Ҡаршыһындағы капитан Рейнер госпиталь начальнигы булып түгел, уның ҡәбере өҫтөндә телмәр һөйләүсе булып күренде. Әйтерһең, начальник хәҙер уның менән һөйләшмәй, ә

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 175-184-се биттәр.

уны күмеүселәр алдында телмәр тота: «Яҡшы кеше ине. Рус-герман һуғышынан бөкрө булып ҡалды. Ләкин ул теге донъяға төҙөк кеше булып барасаҡ. Фюрер өсөн бөкрө булып үлгән саф ҡанлы немецтарҙы ожмах хирургтары нәүбәттән тыш төҙәйтәләр...».

Кабинеттағы ҡәбер тынлығын шул уҡ капитан Рейнер боҙҙо:

– Әгәр, һалдат Зингер, һине өйөңә ҡайтарып ебәрһәләр, нишләр инең?

– Нишләр инем, шатланыр инем, – тине һалдат ҡурҡып ҡына. – Билем һыҙлауы ла баҫылыр ине, бөкрөлөк тә һиҙелмәҫ ине. Ләкин был хыял бит, господин капитан!

– Улай булғас, һине ҡайтарып ебәрергә тура килә. Бына һиңә документ, бына һиңә госпиталдән справка. Бөгөн үк китәһең, алты айға. Унан һуң тағы алты айға оҙайтырҙар, унан тағы...

Зингер башта, шаярып һөйләйҙер был, тип ышанмай торҙо. Ләкин алдан әҙерләнеп ҡуйылған мисәтле ҡағыҙҙарҙы үҙе лә һиҙмәҫтән ҡулына алғас, ҡайтып китеүҙең дөрөҫлөгөнә ышанды, һәм ул, бер үҙе ике тауыҡ ашап бөтөргән фриц шатлығынан да көслөрәк ҡыуаныс менән:

– Рәхмәт һеҙгә, господин капитан! – тине.

– Нишләп миңә рәхмәт, бөкрөңә рәхмәт әйт!

Ауылына ҡайтып китте. Юлда уға күп кенә нужа күрергә тура килде. Поездан поезға күсеп йөрөү, аяҡһыҙ һәм ҡулһыҙҙар менән шығырым тулы вагонда ҡыҫылып ҡайтыу уның билен ҡуҙғатты. Ғәрип Зингер өйөнә яҡкан еренән ҡалҡына алмаҫлыҡ хәлгә төшөп ҡайтты. Шулай ҙа ҡатыны Луиза шат ҡаршы алды. Һуғыштан ауылдың беренсе тере кешеһе булып ҡайтҡан Зигфридты күрергә күршеләре керҙеләр. Ул уларға яҡкан килеш кенә үҙенең яраланыу тарихын һөйләне. «...Каскаларҙы батырып кейҙек тә рустарға ҡаршы һөжүмгә киттек. Тештәр ҡыҫылды, күҙҙәр ҡанланды – рустарҙы ҡырабыҙ. Түҙә алманылар, тәртипһеҙ ҡаса башланылар. Беҙ ҡыуабыҙ, улар йүгерә, беҙ ҡыуабыҙ, улар йүгерә... Мин үҙем ете русты штык менән ҡаҙап үлтерҙем... Беҙ позицияны нығытырға тотондоҡ. Үлектәрҙе, яралыларҙы ла йыйышырға тура килде. Шулай, яралы һалдаттар араһында йөрөйөм. Күрәм: йәш кенә бер һалдат

үлә алмай интегә. Бахырҙы тынысландырырға уйлайым, ләкин мылтыҡта патрон юҡ. Малайҙан өс аҙым ғына арыраҡ үлек рус офицеры ята, эргәһендә револьвер. Револьверҙы алдым да, теге үлә алмай ятҡан йәш немец һалдатына тоҫҡап, курогын тарттым. Атылманы – рус һуңғы пуляһына тиклем сығарып бөтөргән, һәм бына тап шул ваҡытта минең артта ғына мина ярылды. Мин аяҡтан йығылдым, арҡа һөйәге өҙөлөп киткәндәй булды... Күҙҙе асҡанда, госпиталдә инем. Операция яһанылар. Ләкин билдән мина ярсыҡтарын алып бөтөрә алманылар. Бына шул яфалай ҙа мине...».

Зигфрид, башынан үткәндәрҙе хикәйә иткәндә, ятҡан урынынан үҙе лә һиҙмәҫтән бер нисә тапҡыр һикереп торҙо. Билдең киҫәктән генә өҙөлөп китеүенә ҡарап, яраланыу тарихын һөйләү ҙә киҫелеп торҙо. Шулай ҙа күршеләр бөкрө Зигфридты һуғыш батыры итеп таный алдылар. Хатта ҡайһы берәүҙәре уны «Тимер тәре» орденына ла лайыҡ итеп күрҙеләр.

**2**

Икенсе төн үтеп бара. Зигфрид Зингерҙың тыныс йоҡо күргәне юҡ әле. Ул һаташа, ҡурҡыныс төштәр күрә. Ул һаман фронтта, үлектәр, үлә алмаусылар араһында. Бына ул үлек рус офицерының планшетын аҡтара һәм асыуланып атып бәрә. Планшет сәс тарағына әйләнә. Зингер тараҡты кеҫәһенә һала – Луизаға бүләк!.. Зингерҙы госпиталгә алып китәләр. Иҙәнгә һуҙып һалалар ҙа бысҡы менән билен ҡырҡалар. Ул ҡысҡыра, ләкин уның тауышына иғтибар итеүсе юҡ. Уны бер ишектән палатаға кертеп һалалар, ә ул икенсе ишектән сығып ҡаса... Ул ҡараңғы урманда йөрөй. Кемдер берәү «Һальт!» тип ҡысҡыра. Зингер ҡулын күтәрә. Рус партизаны уны үҙенең отряды ятҡан ергә алып китә. Партизандар отряды начальнигы: «Ни эшләтәбеҙ быны?» – тип һорай. «Бөкрөһөн төҙәйтергә кәрәк!» – ти бер партизан. Яҡында ғына этәс ҡысҡыра...»

Шыбыр тиргә батҡан Зингер урынынан тороп ултыра.

Төн буйы ыҙаланып сыҡтың, – ти ҡатыны. – Хәҙер таң атып килә, ишетәһеңме, ана, этәс ҡысҡыра. Бәлки, тыныс ҡына йоҡлап та китерһең.

Зигфрид башын һелкә. Был ишара менән генә ҡатынына йоҡлай алмауҙың серен аңлатыу мөмкин түгеллеген белеп:

– Ана шул этәсең йоҡлатмай ҙа инде мине! – ти. – Кисәге төндө был турала бер һүҙ ҙә әйтмәй уҙғарҙым. Бөгөн булдыра алмайым. Ул этәсең бар саҡта мин йоҡо əҫәре күрә алмаясаҡмын. Ишетәһеңме?! Әгәр беләһең килһә, минең билһеҙ ҡалыуым да ана шул этәстән булды!

Зингер һаташмай һөйләй ине. Уның һүҙҙәре ыңғырашыу менән оҙатыла барһалар ҙа, зиһене дөрөҫ. Шулай ҙа ҡатын иренең этәскә булған дошманлығына əһәмиәт биреп еткерә алманы:

– Бер нәмә лә аңламайым мин! – тине.

– Аңламаҫһың шул. Мин үҙем дә уны билде һындырғас ҡына аңланым! Нисек кенә булмаһын, этәсеңдең муйынын борорға тура килә, муйынын! – тине ярһыу Зигфрид.

Был һүҙҙәр генә, әлбиттә, Луизаның ҡулдарын этәс муйынын бороорға күтәрмәйәсәктәр. Шуға күрә Зигфрид этәс фажиғәһен ентекләберәк һөйләп бирергә булды.

Һин мине, бисәкәй, һөйләүемә ҡарап, ирем һуғыш батыры, тип уйлайһың. Күршеләр ышанһын, ә һин ышанма уға. Дөрөҫөн әйтәйем, ике йыл буйына фронтта булып, рустарға ҡаршы һуғышҡа бер тапҡыр ҙа керергә тура килмәне. Минең көндәр гел генә аттар тирәһендә, хәрби хужалыҡ эштәре өҫтөндә үтте. Ҡайҙа ул миңә ете русты штык менән сәнсеп үлтереү, уларҙы күрергә лә тура килмәне. Һәм минең яраланыу минанан да түгел, арҡамда ярма бөртөгө саҡлы ла тимер киҫәге юҡ. Тыңла, минең кешелектән сығыу бына нисек булды. Брянскиҙан көньяҡтараҡ, Бытош тигән ҙур ғына поселокта, оборонала ятабыҙ. Ҡыш. Беҙ иптәшем Ганс Бюхлер менән һарайҙа бесәнгә күмелеп ҡуна инек. Шулай бер төндө, таң ваҡытында, башҡа бер уй килде. Барыбер йоҡлап булмай, бет ашай, мин әйтәм, әйҙә, Ганс, булмаһа, этәс ауларға сығып китәйек, һалдаттар торғолағансы бешереп ашарбыҙ, тим. Ә ул, ялҡау, минең фекергә ҡушылманы. Юҡ, ти, ҡулға эләкмәҫ этәсте бешереп ашау тураһындағы хыял үҙеңде беттән ашатып ятыуҙан артыҡ түгел ул, ти. Асыуландым да бер үҙем сығып киттем. Ишетәм: алыҫ түгел бер йортта этәс ҡысҡыра. Тауышына ҡарағанда, бик көр булырға тейеш. Ләкин ҡайһы йорт этәсе икәнеп шәйләмәй

ҡалдым. Баш ватып торғанда, әтәс тағы бер ҡысҡырҙы. «Әһә, мин әйтәм, хәҙер миңә позицияң билдәле, был һуңғы ҡысҡырыуың булыр». Баҡса аша шул йортҡа керҙем, аҙбарға үттем. Аҙбар ҙур, үҙе ҡараңғы. Бер ҙә ҡош-ҡорт булыуы һиҙелмәй. Әтәс үҙен маскировать итте! «Ярай, мин әйтәм, һине мин тағы бер ҡысҡырғансы көтөп тә тора алам». Ярты сәғәткә яҡын көтәм, әтәстең тауыштыны сыҡманы. «Поселокта һинән башҡа әтәс бөтмәгәндер әле» тинем дә аҙбарҙы ташлап сығып киттем. Урамға ғына аяҡ атлағайным, минең һүҙҙе дөрөҫләгәндәй, арғы оста бер әтәс тауышы яңғыраны, һәм шуның артынан уҡ теге әтәс тә ҡысҡырҙы, муйыны өҙөлгөрө. «Юҡ, мин әйтәм, һин бик хәйләкәр булып сыҡтың, һинең артыңдан йөрөп ваҡыт әрәм итеп булмаҫ», тим. Арғы осҡа киттем. Хәҙер яҡтыра ла башланы. Күп уйлап торманым, бер йортҡа индем. Бына бәхет! Ҡойма буйындағы ватыҡ сана өҫтөндә бер әтәс ҡысҡырып ебәрмәһенме! Мин уға табан йәшеренен кенә яҡынлаша башланым. Әтәс бик аңғыра булып сыҡты – миңә табан боролдо ла елпенеп-елпенеп ике тапкыр ҡысҡырып алды. Эстән генә «мин һинең йырлағаныңды тыңлар өсөн килгән немец түгел» тинем дә әтәскә ташландым. Ләкин... киҙәнеп һуҡҡан күҫәк аҫтында ергә йығылдым. Торорға маташҡанда, әтәстең хужаһы булған таҙа ҡатын һүгенә-һүгенә ауыр күҫәген тағы бер тапҡыр арҡаға төшөрөп алды. Күҙҙәрҙән уттар күренде. Шунан һуң ҡатын автомат тиҙлеге менән аяҡтарҙан тотоп алды ла урамға һөйрәп сығарып ташланы. Аяҡҡа баҫырлыҡ хәл дә юҡ ине. Иртә менән ике патруль килтереп ҡуйҙы һәм шул көндө ук госпиталгә һалдылар.

Бына шунан бирле минең ҡолаҡ төбөнән әтәс тауышы китмәне. Билем ҡатыраҡ һыҙлай башланымы, күҙ алдымда ана шул ҡәһәрле әтәс муйынын һуҙып ҡысҡырып торған кеүек. Әтәс тауышы ишеттемме – билемә йәбешә. Төнөмдө йоҡоһоҙ итә. Бына шуның өсөн һинең дә әтәсеңде юҡ итергә тура килә.

– Берҙән-бер әтәсебеҙ ине бит әле, – тине Луиза ҡыйыуһыҙ тауыш менән.

Зигфридҡа ҡатынының әтәс йәнле булыуы бөтөнләй оҡшаманы. Ул асыулы тауыш менән:

– Мин һинең берҙән-бер ireң түгелме ни? Һайла улай булғас: йә мин, йә этәс! – тине.

– Мин былай ғына әйткәйнем...

– Былай ғына булһа, бар хәҙер үк этәсеңде бында алып кер!

Зингер үҙенең дошманын ниндәй юл менән юҡ итеү планын да ҡороп өлгөрмәне, ишектән ҡулына бәләкәй генә ябыҡ этәс тотҡан ҡатыны килеп керҙе һәм:

– Бына үҙе, нишләтәһең? – тип һораны. Әтәсте өҫтәлгә баҫтырҙы.

Зингер өҫтәл өҫтөндә лә үҙен ирекле һиҙгән этәскә асыулы ҡараш ташланы.

– Әтәс тимәҫ инең, был ҡошҡа башҡа исем юҡ инде, – тине ул. – Бигерәк ваҡ калибрлы икән дәһә! Унан шул тиклем ҙур тауыш ҡайҙан сыға һуң?

Был һорауға яуапты этәс үҙе бирҙе: ҡанаттарын йәйҙе лә муйынын юғарыраҡ күтәрә биреп, ҡысҡырып ебәрҙе. Уның тауышы Зингерҙың асыуын шул тиклем ҡабартты, әйтерһең ул өҫтәл өҫтөндә түгел, ә Зингерҙың нервыларына баҫып ҡысҡырҙы.

– Ал үҙен, тышҡа сығар ҙа муйынын бороп эткә ташла! – тип ҡысҡырҙы Зингер.

Луиза этәсте тышҡа алып сыҡты. Ләкин ул берҙән-бер йорт ҡошоноң муйынын борорға теләмәне, йорт ҡапҡаһын шығырҙатмай ғына асып һәм уны шундай уҡ һаҡлыҡ менән ябып, ауыл осона таба ҡарай китте.

**3**

Әтәстән башы ҡотолғас, Зингер үҙен тынысыраҡ һиҙҙе. Арҡа һөйәгенең ауыртыуы ла йомшара төшкәндәй булды. Төндәре лә йоҡоло һымаҡ үтә башлағайны. Ләкин был күпкә һуҙылманы. Бөкрөгә гел кәкре килеп тора бит ул! Зингерҙың нервыларын тырнауы яғынан этәстән аҙ ғына ҡалыша торған икенсе бер яуыз нәмә килеп сыҡты.

Зигфрид Зингер фронтта Блох фамилиялы бер фельдфебелгә туранан-тура буйһоноп хеҙмәт итте. Бына шул командир Блох Зингерҙың теңкәһен ҡоротоп бөтөрҙө. Юҡ ҡына нәмә өсөн дә аҡырына, екеренә, бөтөнләй башҡа кеше ғәйебе

өсөн дә Зингерҙы тотоп һүгә торғайны, һуңға табан, Блох бөрөп алған ваҡыттарҙа, рядовой һалдат Знгер ҙа ауыҙын асып тормай башланы – бер һүҙгә икене ҡайтарыуҙан ҡурҡмай ине. Лейтенант Блохтың үҙенә лә кәрәгеп бирә биреүен; ләкин бынан Зингер өсөн бер ниндәй ҙә отош юҡ: Блох үҙ нәүбәтендә Зингерҙы теткеләй. Ул Зингерҙы смирно командаһы менән баҫтыра ла:

– Һин хайуан, ике аяҡлы хайуан, беләһеңме? – ти.

– Беләм, – ти Зингер.

Былай һүгеү бағана кеүек ҡатып тороусы Зингерҙың йөрәген тишеп керерлек булмағас, Блох икенсе төрлө итеп ялғап алын китә:

– Һин быҙау, ауыҙынан шылағайы ағып торған быҙау!

– Дөрөҫ түгел. Быҙау дүрт аяҡлы була, ә үҙең әле генә мине ике аяҡлы хайуан тигәйнең!

– Молчать! Ике аяҡлы быҙау!.. Һәм фельдфебель аҡырыныуынан үҙе арымайынса туҡтамай. Зингерҙы быҙауҙан алып айыуға тиклем еткерә. Рядовой Знгер, урыны тура килгәндә, һүҙ ҡыҫтырғылап тора: «Айыу бал ашай, ә һин ун грамм шәкәргә лә интегеп йөрөйһөң!» – ти.

Зингер үҙенең командирынан тиргәлеү-һүгелеүҙе көн дә ҡабатлана торған ғәҙәттәге бер тренаж итеп ҡарай ине. Уға төрлө сағыштырыуҙар ҙа тәьҫир итмәй – бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сығып китә. Тик бына уның тауышына күнегә алманы ул. Фельдфебельдең тауышы кәзә тауышын хәтерләтә. Зингерға был тауыш менән һүгелеү түгел, маҡталырға тура килгәндә лә ҡоҫҡоһон килтерер ине. Зингерҙың ҡулынан килә торған булһа, ул Блохты кәзә көтөүсеһе итеп кенә тотор ине.

Госпиталдә ятҡанда, Знгер Блохты ла, уның тауышын да онотҡайны. Өйгә ҡайтҡас та, бер нисә көн Блох күҙ алдында һүрәтләнмәй торҙо. Ә бына бөгөн иртәнән бирле өҙлөкһөҙ баҡырып торған ас кәзә ана шул ҡәһәрле картинаны соҡоп сығарҙы, һәм биленең баҫыла төшкән һыҙлауы, әтәсле төндәрҙәгесә, яңынан көсәйеп китте.

Знгер күҙ ҡарашын түшәмдәге ниндәйҙер бер ҡара тапҡа йүнәлтте лә кәзә тауышынан нисек итеп ҡотолоу тураһында баш вата башланы. Йоҡо

ҡасты, сөнки бил һыҙлай, һыҙланыу туҡтамай – Блох үҙенең кешеләрҙә булмай торған йәмһеҙ тауышы менән күҙ алдынан китмәй. Блох һүрәтләнә – сөнки кәзә баҡыра. Кәзә баҡыра: ашарына юҡ. Тимәк, кәзә тауышынан ҡотолоу өсөн ике юл бар: йә кәзәнең ауыҙын айырмаҫҡа, йә бөтөнләй кәзәнең үҙенән айырылырға.

Знгер икенсе юл яғында ҡалды. Сөнки кәзәне туҡтауһыҙ ашатып тороу мөмкин түгел: быға Зингерҙың хәле етмәй. Икенсенән, кәзә өҙлөкһөҙ ашатҡанда ла баҡырырға мөмкин, бер ҙә тауышы сыҡмаған хайуан булмай бит. Оҙаҡ баш ватҡандан һуң, Зингер иртәгә үк кәзәне һатырға булды. Быға уның ҡатыны ла ҡаршы төшмәйәсәк. Сөнки хайуан йәл: ике көн буйы ашамаған, шуға артабан уның аслы-туҡлы торорға күнегеүенән бигерәк, бөтөнләй үлеп ҡуйыу ҡурҡынысы ҙур.

Икенсе көндө иртән үк Луиза кәзәне етәкләп баҙарға китте. Зингер уларҙы тәҙрә үтә оҙатып ҡалды. «Миңә рәнйемә инде, кәзәкәй, – тине ул эстән генә. – һинең менән айырылышыуға мин ғәйепле түгел. Ғәйеп минең үҙәккә үткән фельдфебель Блохта. Әгәр уның тауышы һыйырҙыҡына оҡшаған булһа, һинән йортто ташлатмаҫ инем...».

4

Кәзәне һатҡан аҙнаны Зигфрид биленә зарланманы тиерлек. Көндөҙөн йортҡа сығып йөрөнө, бил бөгөлөүен һорамаған еңел эштәрҙе лә ҡулынан үткәргеләне. Төндәре лә шаҡтай тыныс үттеләр. Хатта күп ваҡытта ул урамды гөрһөлдәтеп фронтҡа үтеүсе йөклө автомашиналарға ла нервыланмай ҡарай алды. Әгәр урамға ҡараған тәҙрә ҡаршыһындағы ҡуйы ботаҡлы ҡарт ҡайын булмаһа, Зингер, бәлки, бөтөнләй һауығып китер ине һәм, кем белә, ул йорт уртаһында бомба ярылһа ла, йоҡоһоноң тыныслығы боҙолмай торған кешегә әүерелеп китер ине. Әх был ҡарт ҡайынды! Олатаһы ҡайын ултыртмаған, Зигфрид өсөн ҡайғы ултыртҡан, ҡайғы үҫтергән! Төнөн Зигфрид йоҡоға ғына киттеме, рус снайперы ана шул ҡайын башына менеп ала ла, һул күҙен ҡыҫа биреп, винтовкаһын Зигфридҡа ҡарап тоҫҡай ҙа тора. Хатта ул һуңғы ваҡытта Зингерҙың биленә, бөкрө арҡаһына әллә ниндәй борсаҡ кеүек пулялар ата ла

башланы.

...Таң алдынан Зингер үҙен-үҙе койканан күтәреп бәрҙе лә, аҡылдан шашҡансы ҡысҡырынып, койка аҫтына шыуышты.

– Рус! Рус! Ҡайын башында рус! Винтовкаһын боевой патрондар менән ҡорҙо... Рус ата! Ҡас!..

Иренең һаташып енләнеүенә күнегеп бөткән Луиза ла был юлы ҡалтырап төштө, һәм был юлы Зигфридты бер ниндәй ҙә рустың юҡлығына ышандырыр өсөн күп кенә ваҡыт кәрәк булды.

Зингерҙың һарғылт йөҙө, болғатылған һыуҙың талғын ғына тона барғаны кеүек, рустан ҡото осоп ҡурҡыу билдәләренән әкрен генә бушана барҙы. Уның күҙҙәре лә хәҙер терегөмөш кеүек мәғәнәһеҙ уйнап тормайҙар, тын алышы ла нормалләште. Ғәжәпкә ҡаршы, билендә лә борсоулы һыҙлауы баҫылды. Ул тоташтан ике стакан һыуҙы йотлоғоп эсте лә иҫереүенән айнып еткән кешене хәтерләтә биреп:

– Ҡатын, бысҡы ҡайҙа? – тине.

– Нимәгә кәрәк булды ул тағы?

– Ҡайынды киҫәбеҙ. Үҙеңә утын булыр. Уны рус «кәкүге» өсөн оя итеп тота алмайым мин!

– Алдағы төндә русың ҡапҡа башына менеп ултырһа, нишләрһең? Ҡапҡаны ла киҫеп ҡолатырбыҙмы?

Ҡатын тонған һыуҙы яңынан болғатып, яңынан ҡомландырып ебәрҙе. Зингер дулап китте, асыуы боғаҙына тығылды. Ул:

– Етәр һиңә, шайтандан ҡыуалаған нәмә, русҡа юл күрһәтеп ултырырға! Ал бысҡыңды! – тип ҡысҡырҙы.

Луиза «беткә асыу итеп, туныңды утка яғаһың» тип әйтергә уйлағайны ла, иренең ҡулында балта күргәс, ауыҙын асманы.

Улар ҡайынды бик оҙаҡ быстылар. Бысҡы үткер генә булһа ла, Зингерҙың бил яйына ғына ҡаратып йөрөткәнлектән, эш ырамһыҙ барҙы. Етмәһә, Зингер, бысҡының һырты күмелгәнгә тиклем көс һалғас, бик төптән алғанбыҙ, билдең ҡуҙғалып ҡуйыуы бар, тип, аяҡ үрә тороп бысыуҙы кәрәкле тапты. Ләкин былай

ҙа барып сыҡманы. Ағас яртылаш ҡырҡылды тигәндә, Зингер бысҡыны тартып алды ла:

– Ҡайынды ҡырҡҡандан һуң, быңдай оҙон төптөң ҡуҡрайып ҡалыуы ҡайындың үҙенән дә яманыраҡ, – тине. Төптөң башына менеп ултырҙыңмы – бөтә өй эсе ҡул усындағы кеүек күренә. Теге русҡа шул ғына кәрәк тә инде. Юҡ, билде бөгөргә тура килһә килер, бысҡыны иҫке эҙенә һалабыҙ. Төптө һуңынан бик һәйбәтләп ҡар менән күмеп ҡуйырбыҙ.

Луиза ишетелер-ишетелмәҫ тауыш менән:

– Әйҙә, ҡыланһаң ҡылан инде, – тине.

Зигфридтың ҡолаҡтары был һүҙҙәрҙе тотоп ҡала алманылар, күрәһең.

– Нимә тинең, ҡатынҡай? – тип һораны.

– Русты төп башына ултырттыҡ, тим!

– Төптөң дә ниндәйенә әле, ҡар менән күмелгәненә! Ха-ха-ха...

Ҡарт ҡайын урамға арҡыры төшөп ҡоланы. Ҡайын менән бергә Зингерҙың ҡотон алған рус снайперы ла ҡолап төшкәндәй булды. Зингер ҡайынды ботаҡтарынан таҙартыуҙан элек, тиҙерәк уның төбөн яҙғы ҡаты ҡар менән күмеп ташларға ашыҡты. Ҡатынын көрәк алып сығырға кертеп ебәрҙе, үҙе төпкә ултырып тәмәке урарға тотондо, һәм тап ошо минутта ауылға автомашиналар гөрһөлдәп килеп инделәр. Моторҙар геүләүенән Зингер төп кеүек ҡатып ҡалды. Әйтерһең, ҡапыл ер тетрәтеп күк күкрәне лә, көслө йәшен ҡарт ағасты атып йыҡты, ә Зингер үҙенең тере ҡалыуына ышана алмай торҙо... Яралы һалдаттар тейәлгән йөк машиналары тар урамға арҡылы төшөп йығылған ҡайынға килеп еткәс туҡтанылар. Алдан килеүсе автобус кабинаһынан бер офицер сыҡты ла туп-тура Зингер ҡаршына килде.

– Фронтта ҡан түгеүсе немецтарға юлды бүләһең?! Рустарға булышаһың, бөкрө шайтан! – тип ҡысҡырҙы ул.

Зингерҙың ирендәре ҡыбырҙаны, ауыҙынан һүҙе сыҡманы. Офицер кабураһынан револьверын тартып сығарҙы һәм Зингерҙың маңлайына тоҫҡап курогын тартты. Зингер, уңға-һулға сайҡалып, тапалған ҡарға йөҙө менән йығылды. Шоферҙар ҡайынды ситкә алып ташланылар. Машиналар яҙғы насар

юлдан алға – көнбайышҡа ҡарай уҙҙылар.

Ауылдың арғы осонда Луизаның әтәсе ҡысҡырҙы.

*21.9.43*

## Ҡайғылы шатлыҡ[1]

«Беҙҙең көстө белә тороп,
Ниңә инде бында килдегеҙ?
Етмәйме әллә илегеҙҙә
Ҡәбер ҡаҙыр өсөн ерегеҙ?»

*Языков*

Элек тә бер ниндәй ҙә грамотаһы булмаған ауыл малайы Франц Кранке фронтҡа килеү менән тағы ла аңғыралана төштө. Шулай ҙа уны берәү ҙә башҡаларҙан айырып алып, «был һалдат шыр аңғыра» тип төртөп күрһәтә алмай. Франц Кранке үҙен ефрейтор Шульцтан аҡыллыраҡ һанай. Ул аҡты ҡаранан айыра белә. Әйтәйек, иптәштәренә килгән хатта «атайҙың сәләмәтлеге яҡшы» тип яҙһалар, был – ҡайғы, «атай ауырый» тигән хәбәр – шатлыҡ. Ул быны яҡшы белә. Кранке үҙе шулай ғына булһа ла, Германиялағы тотош мобилизацияның нимә икәненә төшөнә торған һалдат ул! Тик бына шуныһы насарыраҡ: атаһы хатты кешенән яҙҙыра, Франц кеше яҙған хатты кешенән уҡыттыра. Икеһендә лә грамота юҡ. Кранке үҙ-ара һөйләшкәндә был кәмселеген кесерәйтеберәк әйтә: «Грамота етмәй, грамота!» – ти.

Франц Кранкеға ауылдан күптән көтөлгән хат килә. Шатлыҡ! Атаһы ауырыған. «Тышҡа ла көскә сығып йөрөй», – тип яҙғандар. Был хәбәрҙе ишеткәс, Франц хатты аҙағына тиклем уҡыттырып та тормай, бармаҡтарын шартатып, бейергә үк тотона. Ләкин бейеп бөтөүгә, Франццың ярым ас булыуын да онотторған шатлыҡ һыуына башлай. Иптәштәренә килгән хаттарҙа күңелһеҙ хәбәр бар: үҙе тышҡа сығып йөрөрлөк ауырыу ҡарттарҙы ла мобилизовать итәләр икән, фронтҡа ла ебәрәләр имеш, ти. Бына һиңә кәрәк булһа ауыртмаç башҡа тимер таяҡ, Франццың атаһына ла аҙыраҡ асыуы бар: үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ауырыған, шунда ла әҙәм рәтле ауырый белмәгән!

Һалдаттар һөйләй, Кранке тыңлай: «йыйын ҡарт-ҡороноң, рәтләп мылтыҡ

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әçәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 184-185-се биттәр.

та тота белмәгән халыҡтың, бында рус еренә килеп үлеүҙәренә ҡарағанда, үҙ йорттарында үлеүҙәре мең тапҡыр артыҡ».

«Ысындан да шулай бит, – тип уйлай Кранке, – үлер өсөн күпме ер килергә кәрәк. Етмәһә, сит ил еренә. Франц атаһының үҙ ере юҡмы ни? Насар ғына булһа ла, өйө бар. Карауатыңа ят та йомшаҡ мендәр өҫтөндә рәхәтләнеп үл дә ҡуй! Күмеүсеһе лә табылыр, ҡәберең дә билдәле булыр. Ә бында башың бер ерҙә, аяҡ-ҡулың әллә ҡайҙа. Юҡ, бында үлеү эш түгел ул».

Франц ике аҙна буйына атаһына йомшаҡ үлем теләп йөрөй, һәм уның теләге ҡабул була – атаһы үлә. Тик уның үлеүендә аҙыраҡ башҡалыҡ бар. Ҡарт һуғышып үлгән. Ләкин нисек кенә булмаһын, Франц ҡәнәғәт һәм шат. Һуғышып үлгәнме, йығылып үлгәнме – уныһы бәләкәй мәсьәлә. Үҙ өйөңдә үлеүе үҙе ни тора!

Франц был юлы бейемәй. Үҙе яратҡан ниндәйҙер бер ярым күңелле, ярым һағышлы көйгә йырлай. Уның тауышы ғәҙәттәгенән көслөрәк яңғырай. «Смирно!» командаһына ла иғтибар итмәй, эргәһенә килеп баҫҡан полковник Беккерҙы ла күрмәй. Уны ҡайғылы шатлыҡ, шатлыҡлы ҡайғы иҫертә.

Полк командиры полковник Беккер Францты түңәрәк эсенә алып тыңлаусы һалдаттарға ҡарап:

– Был ниндәй солист тағы? – тип һорай.

– Был, полковник әфәнде, һалдат Франц Кранке, шатлығынан йырлай, –ти аранан берәү.

– Ниндәй шатлыҡ?

– Атаһы үлгән...

– Һуғышыпмы? Фюрер өсөн?

– Эйе, һуғышып. Бына атаһы тураһында хат бар.

– Атаң нисә йәштә ине? – тип һорай полковник.

– Алтмыш икелә, – ти Франц әкрен генә.

– Полковник Беккерға был күренеш бик оҡшай. Тик бына Францты солғап алған һалдаттар түңәрәге генә бәләкәйерәк. Киңәйтергә кәрәк, Франц Кранкены шатлана белеүселәр өлгөһө итеп күрһәтергә кәрәк... Беккер шул уй

менән полкты сафҡа теҙҙерә. Кранкены алға сығарып баҫтыра ла тантаналы тон менән һөйләй башлай: һеҙҙең алда рядовой Франц Кранке баҫып тора Уның ҡаһарманлыҡ күрһәткәне лә юҡ. Ләкин уның иҫ киткес бер ҡиммәтле сифаты бар. Саф ҡанлы немецта ғына ундай сифаттың, булыуы мөмкин. Ул – шатлана белеү. Францтың алтмыш ике йәшлек атаһы изге юлда, фюрерҙың бөйөк идеяһы өсөн көрәш майҙанында һуғышып үлгән...

– Господин полковник әфәнде, рөхсәт итегеҙ... – ти ҡаушаған Франц. Нимәлер әйтергә теләй. Ләкин шаңҡығандан һуң ҡолағы ярым һаңғырау булып ҡалған Беккер уны ишетмәй, һүҙен дауам итә бирә:

–...Һалдат Кранке бының өсөн ҡайғырмай, киреһенсә, шатлана ғына. Сөнки ул аңлы һалдат, фюрер тотҡан маҡсат өсөн йәнен дә аямай торған саф ҡанлы немец һалдаты...

Полковник бик ялҡынлы итеп һөйләргә, Францса шатланыуҙы һәр бер немец һалдатының йөрәгенә һеңдерерлек көс менән һөйләргә йыйынғайны. Ләкин ул тыңлаусылар йөҙөндә бер төрлө лә йәнләнеү күрмәне. Уның алдан әҙерләнгән бөтә һүҙлек запасы ваҡытынан элек сығып бөттө. Уны башлыраҡ һалдаттар, барлыҡ патронын атып бөтөрөп тә бер дошманды ла аяғынан йыға алмаған автоматсыға сағыштырҙылар. Полк баҫып тора. Митингыны нисек тә осларға кәрәк.

– Ҡайҙа, атаң тураһындағы хатты бир әле? – ти ул Францҡа.

Полковниктың ҡолаҡҡа ҡаты икәнеп белеп алған Кранке:

– Хат ефрейтор Шульцта. Мин уҡый-яҙа белмәйем, полковник әфәнде! – тип ҡысҡыра.

Был инде Беккерҙың бөтә һөйләгәнен яртылаш юҡҡа сығарғандай була. Шульц хатты килтереп һуҙа. Полковник ефрейторға хатты полк алдында ҡысҡырып уҡып сығырға бойора.

Ефрейтор уҡый, полк тыңлай:

«Ҡәҙерле Франц, һинең өсөн ҡайғылы хәбәр яҙам. Атан үлде...»

«Ҡайғылы» һүҙе полк командирына оҡшамай. Нисек инде, кеше бында шатлыҡ тураһында һөйләй, ә хаттың тәүге юлы уҡ «ҡайғылы» башлана. Шулай

ҙа ул бер һүҙ ҙә әйтмәй. Беккер бөтә иғтибарын ана шул «ҡайғылы»ға ҡаҙаҡлап торған арала, Шульц хаттың түбәндәге юлдарын уҡып та өлгөргәйне инде:

«Повестка менән саҡырыуға бармағас, атаңдың өйөнә килделәр. Ҡарт һаман үҙенекендә торҙо: өс улым фронтта үлде, дүртенсеһенең дә тере ҡалыуына ышаныс юҡ, өйөмдән аяҡ атлап сыҡманым, ти. Шунан һуң ҡоралды кешеләр килделәр Атаң уларҙы балта менән ҡаршы алды...»

Беккерҙың ҡаты ҡолаҡтары «ҡайғылы» һүҙенән былайыраҡтарҙы ла ишетеп ҡалдылар. Хәҙер инде тыныс тороу мөмкин түгел ине. Ғөмүмән был хат ул көткәнсә яҙылмаған. Хат түгел был – ҡайғы.

Асыуынан ҡыҙарынып-бүртенеп, Беккер Шульцҡа ҡарап ҡысҡыра:

– Туҡта! Нимә уҡыйһың һин, цирк клоуны?!

Ҡурҡыуынан ҡойолоп төшкән Шульц тотлоғоп яуап бирә.

– Нимә яҙылған, шуны уҡыйым, полковник әфәнде.

– Ниндәй ҡоралды кешеләр унда, балта, тағы әллә нәмәләр, ә?

– Франц Кранкеның атаһы үҙ өйөндә һуғышып үлгән...

Көлкөгә ҡалған полковник ни эшләргә лә белмәй. Аптырағас, яңынан Шульцҡа ҡарап екеренә:

– Шатлыҡ түгел был! Немецса шатланыу улай булмай! Аңлайһыңмы һин, ә? – ти.

– Бер нәмә лә аңламайым, полковник әфәнде, шатлыҡты – ҡайғынан, ҡайғыны шатлыҡтан айырыуы ауыр хәҙер!..

## Иҫәнгилде ҡиссаһы[1]

1

Иҫәнгилде ағай үҙ ғүмерендә тәү башлап врачҡа килде. Дөрөҫ, уның тымау төшкән, тейешһеҙ нәмәләр ашап ташлаған ваҡыттарында ауырығылап алған саҡтары ла булды булыуын, ләкин ул больницаға барыуҙы кәрәкле тип тапмай торғайны. Бындай ауырыуҙарға ул һәр кемдә һәр ваҡыт булып үтә торған «ваҡ-төйәк ауырыуҙар» тип ҡарай. Уның иң ҡурҡҡан нәмәһе – оятҡа

[1] Октябрь, 1946, №1. 29-33-сө биттәр.

ҡалыу: ауырыным, тип врачҡа ярҙам һорап барарһың, ә тымауың йәки ауыртыр-ауыртмаҫ торған эсең унда барып кергеләгәнсе бөтөр ҙә ҡуйыр. Һәм врач әйтер: «Иҫәнгилде ағай, иҫән генә килгәнһең, һау ғына ҡайтып кит инде, беҙҙән ярҙам һорарлыҡ ауырыуың юҡ һинең». Быңдай һүҙҙәрҙе ишетә торған булһа, уның ысындан да ауырып ҡуйыуы мөмкин. Бушҡа безәнләп йөрөүөң менән ана шулай ауыртмаҫ башҡа тимер таяҡ алыуың бар.

Иҫәнгилде ағай ана шулай уйлай торғайны. Ләкин уға врачҡа күренергә тура килде.

Кабинетан:

– Следующий! – тигән саҡырыу тауышы ишетелде.

Сират Иҫәнгилде ағайҙа ине. Ул, үҙенән башҡа берәй «следующийҙың» юҡлығына ышанып алғас, ишекте асып эскә инде. Төрлө дарыуҙар еҫе менән тулған һалҡынса бүлмә һауаһы ҡарттың тын алышына ниндәйҙер татлы рәхәтлек бирҙе, әйтерһең быңдай дарыулы һауаны тымау кеүек «ваҡ-төйәк» сир менән килеүселәрҙе ишектән ингәс үк дауалап, уларҙы врач алдында көлкөгә ҡалдыр өсөн юрамал эшләгәндәр.

– Амангилдин Иҫәнгилде, – тине врач, алдында ятҡан карточкаға ҡарап.

– Эйе, Амангилдин Иҫәнгилде Ишкилде улы, – тине пациент.

– Хуш Иҫәнгилде ағай, нимәгә жаловаться итәһегеҙ?

– Бер ниндәй ҙә жалу менән килмәнем, врач иптәш.

– Һуң?

– Һуң тип ни, мин жалу итеп йөрөй торған кеше түгел. Семьяла ла татыу торам, колхозда ла шулай уҡ, эсеп-нитеп, һуғышып, туҡмалып та йөрөмәйем мин. Шулай булғас, кем өҫтөнән жалу менән киләйем, ти?

Врач кеткелдәп көлөп ебәрҙе. Иҫәнгилдегә бүлмәнең тәмле еҫ менән аңҡыған һауаһы таралып киткән кеүек булды.

– Улай түгел, иптәш Амангилдин, – тип аңлата башланы врач, – ниндәй ауырыуға жаловаться итәһең тимен, значит, һеҙҙе ниндәй сир борсой тигән һүҙ – үпкә сиреме, йөрәкме, бөҫөрме... Иҫәнгилде төшөнөүен төшөндө, тик врачтың

әллә ҡасан онотолған бүҫерҙе хәтергә алыуы ғына «һиҙенәме икән әллә был» тигән шиккә төшөрҙө...

Ул врачтың иғибарын бүҫер тирәһендә туҡтатмаҫҡа тырышып:

– Минең тештәр сәләмәт түгел, ҡаушап торған кеүек, урт та бүртеберәк тора, ҡан да килгәндәй итә, – тине.

– Күптән шулай тип әйтергә кәрәк ине, – тине врач һәм Иҫәнгилдене махсус ултырғысҡа ултыртып, уның ҡарт кешеләрҙә һирәк осраусан төҙөк тештәрен ентекләп ҡарарға тотондо. Ул үҙенең пациентына быға тиклем меңәр тапҡыр тапҡыр ҡабатланған һорауҙарын бирҙе. Ҡарт яуап ҡайтарҙы. Һуңынан врач, сирҙе дөрөҫ билдәләүенә ышанып алғас, йәнәшә өҫтәлдә рецепт яҙып ултырыусы ҡыҙыҡайға ҡарап:

– Гингвит, скорбут, антискорбут, – тигән аңлайышһыҙ һүҙҙәр әйтте.

Иҫәнгилде был һүҙҙәр өмөт артыҡ бошонманы, тик врач «капут» тип кенә әйтә күрмәһен инде, тип уйлай ине.

– Иҫәнгилде Ишкилдеевич, – тине врач аҙаҡ килеп, – ауырыуығыҙ былай ҡурҡынысла түгел, шулай ҙа һаҡланырға кәрәк, белмәҫһең, цынгаға әйләнеп китеүе бар. Йәшелсә, фруктылар, еләктәр ашарға кәрәк. Иң яҡшы дарыуы шул уның, йәғни: кишер, кәбеҫтә, картуф. Салат, алма һәм теләһәниндәй емеш, әйтәйек: ҡарағат, сейә, ҡурай еләге кеүек нәмәләр.

Иҫәнгилде кеше аңламай торған һүҙҙәре яҙып ултырыусы теге ҡыҙыҡай биргән рецепты алды ла врачҡа рәхмәт әйтеп, сығып китте. Ул ишектән сығыу менән сират көтөп ултырыусы, ҡарар күҙгә былай бер ҙә ауырыу кешегә оҡшамаған, таҙа бер «следующий» кабинетҡа үтте. Иҫәнгилде ағай юл ыңғайында аптекаға туҡталды. Уға дарыуығыҙ ике сәғәттән әҙер булыр тинеләр. Иҫәнгилде көтөп тормайынса ҡайтып китте.

Иҫәнгилденең уйҙары һаман үҙе менән түгел. Уның күҙ алдында һаман әле тәмле еҫ аңҡытып торған яҡты бүлмә, башҡортсаны татарса менән бутап, руссаға латин һүҙҙәре өҫтәп һөйләүсе, күҙлекле врач. «Шулай ҙа хитрый был врач халҡы, – ти эстән генә Иҫәнгилде, – нәмә ти, яңы ғына өҙөлгән ҡарағат, сейә, ҡурай еләге аша, ти. Ә тышта ноябрь айы! Хәйер, бер ҡарағанда хитрый

тип тә булмай инде уларҙы, врачтарға ғилемдәре шулай ҡуша. Ә Иҫәнгилденең ноябрь айында теш урттары бүртеп йөрөүендә ғилемдең ни эше бар? Ярай әле, врач бүҫер ҡиссаһын белмәй, өйрәтер ине һиңә ғилемде!»

2

Иҫәнгилде ҡарттың бүҫер ваҡиғаһы бынан ун йылдар элек булды. Унын әле лә күҙ алдында, уттай эш өҫтө ине, бөтә халыҡ баҫыуҙа, арыш уралар. Иген ҡайырып алғыһыҙ унған, эш ҡулы етешмәй, ә Иҫәнгилде көпә-көндөҙ бүҫер менән ыҙаланып, ишек алдында бөршәйеп ята, эсен ыуа, үрһәләнә.

Бригадир өсөнсө тапҡыр килде инде. Килгән һайын бер үк һорау:

– Йә, хәлең нисек, Иҫәнгилде ағай?

Яуап та бер төҫлө генә:

– Шәп түгел, Сәфәр ҡустым, йәбеште лә ебәрмәй, ҡалай итәһең инде уны.

– Бына мин үҙем дә шуны әйтәм шул, халыҡ баҫыуҙа. Бәләкәй генә балалар ҙа үҙҙәренән ҙур көлтә ҡосаҡлап йөрөйҙәр, ә әҙмәүерҙәй Иҫәнгилде бүҫерен ҡосаҡлап ята.

Иҫәнгилденең был һүҙҙәрҙән хәтере ҡалды булһа кәрәк:

– Һин ундай һүҙҙәр һөйләмә инде, ҡустым, – тине ул. – Мин үҙем теләп ятмайым. Әйттем һиңә: эйелеп эшләнә торған эшкә ҡушма тип. Ә бына хәҙер күрәһең хәлде. Былтыр еңгәң үлеп китте, ә быйыл, Алланыҡын белеп буламы ни...

Сәфәргә Иҫәнгилде йәл булып китте. Ауырыуға кисәге һау-сәләмәт Иҫәнгилде менән һөйләшкәндәге кеүек һүҙҙәр әйтеүе өсөн үҙен эстән генә шелтәләп алды. Был, әлбиттә, Иҫәнгилдене ауырып аяҡтан йығылған хәлдә күреп өйрәнмәүҙән килә торғандыр.

– Иҫәнгилде ағай, – тине Сәфәр, күңел йыбатырға тырышыу тоны менән, – бөгөн беҙҙең колхозға беркетелгән врач килеп сыҡмаҡсы, туп-тура һиңә ебәрермен.

Бригадир ауырыуҙы башҡаса һүҙҙәр менән борсомауҙы артығыраҡ күреп, тыныс ҡалдырырға ашыҡты һәм үҙ эше артынан китте.

Кискә табан врач килде. Ул төҫкә һөйкөмлө, телгә үткер, Ямал Садикова тигән бер ҡыҙ ине. Белмәгәне юҡ үҙенең, энәһенән ебенә саҡлы тигәндәй тикшерҙе, ауырыуҙың башын бүҫергә бер ҙә бәйләнеше булмаған һорауҙар менән дә зинкетеп бөтөрҙө. Һәм һуңынан әйтте:

– Иҫәнгилде ағай, тине ул, – эш улай уҡ ҡурҡыныс түгел. Хәҙергә операция кәрәкмәй әле, бына ошо дарыу ҙа етә, – ул бәләкәйерәк бер шешәнән сәй ҡалағына балдан шыйыҡыраҡ дарыу ағыҙып, ауырыуға эсерҙе. – Ә ҡалған өлөшөн флаконы-ниһе менән һеҙгә биреп китәм, һәр өс сәғәттән һуң берәр сәй ҡалағы эсерһегеҙ. Унан һуң бүҫер тигән нәмәңдең йәбешеүен һин күр ҙә мин күр булыр.

– Дарыуҙың бик шәбе була инде улай булғас, – Иҫәнгилденең ҡалын ирендәрендә йылмайыу беленде.

– Эйе, бик көслөһө. Быға тиклем дарыуың килешмәне тигән кеше юҡ ине әле. Иртәгә үк аяҡҡа баҫырһығыҙ, инде бүҫер йәбешеүе тағы ла ҡабатлана торған булһа, ул ваҡытта операция яһарға тура киләсәк.

Врач китте. Дарыуҙың көсө тураһындағы һүҙҙәр Иҫәнгилделә алдан ышаныу тыуҙырҙы: донъялағы бөтә бүҫерҙәрҙе туҡтата торған шундай бер шифалы нәмә булһын да ти, Иҫәнгилдегә килешмәһен имеш, ти. Был ҡыҙ Иҫәнгилдене иртәгә лә шундай уҡ аунап ятҡан хәлдә күрһә, ғәйепләй ҙә башлар: дарыу килешмәгән икән тимәҫ, тотор ҙа «һиндә бүҫер ҙә юҡ, чер та юҡ, юрый эштән ҡасып ятаһың» тиер, «күҙемә күренмә, шагом марш баҫыуға!» тиер. Алла һаҡлай күрһен, бәләгә эләгеүең бар.

Ғәжәпме ни, эш тап врач әйткәнсә килеп сыҡты. Икенсе көндө, ҡояш яҡшы уҡ күтәрелгәс. Ҡыҙыл тәре менән ярты ай билдәһе һуғылған брезент сумкаһын аҫҡан ямал Садикова баҫыуға, колхозниктар ҡырына китеп бара ине. Ауыл ситендәге күперҙе сыҡҡанда, ҡайҙандыр ҡайтып килеүсе Иҫәнгилде осраны. Һәм улар туҡталмайынса үтә алманылар.

– Ҙур рәхмәт, һеңлем, һиңә. Шифалы дарыуың өсөн, – тип һүҙ башланы Иҫәнгилде, – теңкәмә тейгән бүҫерҙе бөгөн, үҙең әйтмешләй, һин күр ҙә мин күр. Шуны эсүем булды – ике сәғәттән һуң бүҫерҙең туҡталыуы булды,

әйтерһең әкиәттәге сәмреғош үҙенең ҡанаттары менән һыйпап алды! Нисек ҡарайһығыҙ миңә, күңелһеҙ булһа ла, бер аҙнаға эшкә тотонмаҫҡа тура киләләр бит? Шуныһын да һорайы әле. Миңә әлеге дарыуҙың исемен яҙып бирер инегеҙ, ни өсөн тиһәң, шуның өсөн, сөнки...

Иҫәнгилде фекерен әйтеп бөтөрә алманы: ҡыҙҙың кисәге яғымлы сырайында бөгөн ниндәйҙер ризаһыҙлыҡ, хатта асыу билдәләре күрҙе. Ул быға артыҡ иғтибар бирмәҫкә тырышһа ла әйтер һүҙен ялғап ебәрә алмай, тотлоғоп ҡалды. Садикова Иҫәнгилденең һораулы ҡараш күрһәткән күҙҙәренә туп-тура ҡарап:

– Мин үҙем дә шуны көткәйнем, – тине һәм дауам итте. – Элек шуныһын әйтәйем, һин эскән дарыу ҙа һәм башҡа бер ниндәй дарыу ҙа кешене бүҫер ауырыуынан дауалай алмай. Бүҫерҙән ҡотолоу өсөн бер генә сара бар, ул - операция яһау. Ә һиңә, Иҫәнгилде ағай, бер ваҡытта ла операция яһарға тура килмәйәсәк, сөнки һиндә бүҫерҙең әҫәре лә юҡ. Һиндә бер генә ауырыу бар – ялҡаулыҡ, башыңды сиргә һалып, колхоз эшенән ҡасып ҡалыу, һин ысын симулянт, – һәм врач ҡыҙып китте. – Оят кәрәк, иптәш Амангилдин, оят! Хөрәсән ялҡауынан да уҙҙырғанһың һин, аҡыллы баш. Кемде алдарға йыйынаһың һин, ә?

Иҫәнгилде ауыҙынан өн сығарманы, башын эйгән хәлдә, күпер бағанаһы кеүек ҡатып ҡалды. Ул хәрәкәтһеҙ, ләкин бөтә йәне-тәне менән һыҙлана ине. Әгәр ул кисә, ишек алдында ятҡанда, ошо хәлдә булһа, ауырыулығына Сәфәр генә түгел, хатта үҙе лә ышаныр ине. Унда хәҙер рухани һыҙланыу көслө, намыҫһыҙлыҡ күңелен әрнетә уның.

Ямалдың Иҫәнгилденән берәй һүҙ ишетеүҙең кәрәге лә юҡ ине, шуға күрә ул китеп тә барҙы. Тик биш-алты аҙым атлағас та, боролоп ҡараны ла:

– Минеңсә, дарыуҙың исемен әйтеп тороу кәрәкмәйҙер инде, бик ҡыҙыҡһынһаң, ҡайтҡас ҡарарһың, шешәлә дарыуҙың исеме яҙылып йәбештерелгән ҡағыҙ бар, шунан ғына уҡырһың, үҙеңде грамоталы ғына кеше тиҙәр бит, – тине.

Иҫәнгилденең үҙ ғүмерендә бынан да ҙур оятҡа, бынан да оло ғәрлеккә ҡалғаны юҡ ине. Ул көтөлмәгән хурлыҡты йыуыр өсөн, һис булмаһа еңеләйтер өсөн саралар эҙләп ҡараны. Аптырауҙан күҙҙәрен сытырҙатып бер йомдо, бер асты, ләкин ул үҙен һаман шул уҡ күпер өҫтөндә күрҙе. Бына хәҙер күреп емерелеп, баҫып торған ер аҫты өҫкә килһә, Иҫәнгилдегә еңелерәк булыр ине. Иҫәнгилде үҙе лә һиҙмәҫтән уң ҡулын пинжәк кеҫәһенә тыҡты һәм унан кисә Ямал ҡалдырған шешәне тартып сығарҙы. Бына ул Иҫәнгилдене оятҡа ҡалдырған бүҫер һауыты! Уның төбөндә генә күренгән ҡараһыу-ҡыҙғылт дарыуы ла шул көйө, ҡул теймәгән. Иҫәнгилде шешәнән дарыуҙың исемен уҡыны: «Витамин “С”». Һәм ул был һүҙҙең серле мәғәнәһен аңларға тырышты: «”Витамин” тигәне, һис шикһеҙ, дарыу инде уның, ә бына «С» нәмә аңлата? Нимә аңлатһын, «Симулянт» исеме тағылған кешеләрҙе әҙәм көлкөһө итер өсөн эшләнгән дарыу булып сыға инде был». Иҫәнгилде шешәне асыу менән күпер бүрәнәһенә һуҡты, шешә селпәрәмә килде; үсегеүе еткән Иҫәнгилде тештәрен ҡыҫа биреп, ҡулын бер аҙ алмай торҙо, бармаҡ араларынан витамин тамсылары бәреп сыҡтылар.

«Ни эшләргә? Артынан барырғамы?» Һәм ниндәйҙер ҡыйыулыҡ Иҫәнгилденең аяҡтарын ҡыҙыу хәрәкәткә килтерҙе. Ямал шаҡтай алыҫайғайны инде, ул шул яҡҡа ҡарап йүгерҙе. Һәм ул, тыны бөтөп, түтә ерҙән врач ҡаршыһына барып сыҡты. Икеһе лә баяғыса туҡталдылар. Иҫәнгилде күҙ ҡараштарын сабата баштарына йүнәлтеп өҙөк-өҙөк һүҙҙәр һөйләй башланы:

– Ҡыҙым кеше, йәғни иптәш врач. Мин һине ҡыуып етергә булдым. Мин... мин йүгерҙем. Хурлығымды ана шул күпер өҫтөнә, юҡ, күпер аҫтына ҡалдырып ҡасҡандай йүгерҙем. Һин, ҡыҙым, мине ғәфү ит инде. Мин бер генә нәмә үтенәм, һин был хәлде кешегә һөйләй күрмә инде, юҡһа күҙемде лә астырмаҫтар. Мин һүҙ бирәм. Мин теге «С»-тәр рәтенә инмәйем, мин инде симулянт түгел, мин...

Иҫәнгилденең күҙенән ике-өс йәш тәгәрәне. Ул һаман аҫҡа ҡараған килеш, сабаталары менән ерҙе ышҡый ине. Ләкин Ямал уның йәшле күҙҙәренә түгел. Уң ҡулына ҡарай ине.

– Был ниндәй ҡан? – тип һораны ул.

Иҫәнгилде шунда ғына бармаҡтарының шешә ватыҡтарынан киҫелгәнен һиҙҙе. Һәм ул быға бер ҙә иғтибар бирмәҫкә теләгән ҡараш күрһәтһә лә, ихтиярынан тыш сирҡанып ҡуйҙы: бармаҡтарҙан ҡан түгел, витамин тамсылары сыға кеүек күренә ине.

– Ә был... былай ғына, шунда һиҙмәҫтән булып ҡуйҙы инде. – тине ул.

– Юҡ инде. Иҫәнгилде ағай, врач кеше күренеп торған ҡанға тыныс күңел менән ҡарай алмай. Күрһәт әле бында ҡулыңды!

Ямал бармаҡтарҙың бер нисә урындан сыйғаланғанын, сәнскеләнгәнен күрҙе һәм, йәрәхәттең зарарһыҙ икәненә ышанғас, сәбәбен төпсөп торманы, ҡыҙыл тәре һәм ярты ай билдәләре төшөрөлгән төшөрөлгән сумкаһынан йод алып һөрттө лә бинт менән урап ҡуйҙы.

– Ярай, Иҫәнгилде ағай, – тине тине Садикова, – һин тигәнсә булһын, был ваҡиға икебеҙҙең арала ғына ҡалыр. Ләкин шул шарт менән – үҙең биргән һүҙҙе аҡлау һинең өҫтә ҡала. Колхоздың алдынғы кешеһе була алыуыңа ышанырға мөмкинме?

– Билләһи мөмкин, иптәш врач! Беренсе ударник булырмын.

– Улай булһа, шулай һөйләштек. Мин ышанам, – Ямал кисәге кеүек үк асыҡ йылмайҙы, ләкин был юлы ул ысын күңелдән йылмая ине. Ул Иҫәнгилденең һул ҡулын ҡыҫты. Улар дуҫтарса айырылыштылар.

Иҫәнгилде ысындан да үҙенең вәғәҙәһендә торҙо. Был ваҡиғаның икенсе көнөндә үк колхоздың иң ауыр эштәренә тотондо. Күптәр: «Иҫәнгилде ул өс кенә көнгә заводить итеlә, унан һуң уның пружиналары бушай, бүҫерләнә башлай», – тип ҡаранылар. Ләкин ул, кешеләрҙең ғәжәпләнеүенә ҡаршы, эштә һаман алдынғы булып барҙы. Һәм серҙе аңламаған колхозсылар тиҙҙән Иҫәнгилдене яҡшы ударник итеп кенә күрергә күнегеп киттеләр. Ямал Садикова ла үҙ һүҙен боҙманы. Тик, әйтергә кәрәк, ул районды бүтән колхоздарында йыйылыштарҙа сығыш яһағанда, был бүҫер ҡиссаһын икенсе бер билдәһеҙ кеше исеменә күсереп, ғибрәт итеп һөйләй торғайны. Кем белә,

бәлки ул һаман ҡайһы бер кешеләрҙе ялған ауырыуҙан шундай юл менән дауалай торғандыр.

3

Иҫәнгилде өйөнә ҡайтҡас, килененә мейескә тәгәрәтеп картуф бешерергә ҡушты; өҫтәл өҫтөн кишер, шалҡан, сөгөлдөр, памидор кеүек нәмәләр менән тултырып ташланы; улар араһына ҡунаҡ килгәндә генә сығарыла торған алмалар ҙа килеп буталды.

– Еләктәре лә булһа. Барып сыға ине лә был, – тине ул, ҙур бер шалҡанды ҡабығынан әрсей биреп, – ярай инде, килен, уларын ҡалдырып торайыҡ. Нисек тигән әле Туҡай был турала?

Һәм килененең яуап биреүен көтмәҫтән, иҫке мәктәптә уҡыштырып йөрөгән сағында ятлап алған «Төлкө һәм йөҙөм емеше» шиғырынан ике юлды декламировать итте:

Йөҙөмдәр сей әле, өлгөрмәгәндәр, бешмәгәндәр,

Боҙорһоң ашҡаҙаныңды килешмәй эскә улар.

Үҙе шунда уҡ ейәне Сәүбәнде саҡырып килтерҙе лә рецепт тотторҙо һәм, «бына һин миңә хәҙер өлгөргән дарыуҙы алып ҡайт» тип, аптекаға ебәрҙе.

Килене бер нәмә лә төшөнә алмай ине әле. Ҡарт уға үҙенең ҡыланыштары менән ҡаты ауырыуҙан һуң аҡылға еңеләйә төшкән кешене хәтерләтте. Килен өҫтәлдәге йәшелсәләргә ғәжәпһенеп ҡарат торҙо ла:

– Беҙҙең ҡабаҡ та. Кәбеҫтә лә бар бит, улары кәрәкмәйме? – тип көлә башланы.

– Юҡ инде, киленкәй, – тине ҡайныһы, – илле йәшкә етеп, сей ҡабаҡ ашап ултырып булмаҫ! Ә бына кәбеҫтә хәтеремдә ҡалмаған: әллә ярай, әллә ярамай. Пожалуй, уны ла минең янға ҡуйырға тура килер.

Бына шунда ғына Иҫәнгилде килененә үҙенең ни нәмәләр эшләргә йыйынғанлығын яҡшылап һөйләп бирҙе.

Сәүбән аптеканан ҡайтып ингәндә, өҫтәлдә бер баш кәбеҫтә һәм өс сөгөлдөрҙән башҡа нәмә күренмәне. Малай олатаһының һорауын да көтмәйенсә дарыуҙы эсеү тәртибен күрһәткән яҙыуҙы уҡып бирҙе: «Сәй ҡалағы менән

көнөнә өс тапҡыр ҡабул итергә». Иҫәнгилде шешәләге дарыуҙы шунда уҡ үҙ ҡулы менән теүәл бер ҡалаҡ итеп һалып, эсеп тә ебәрҙе һәм мыйығын һөртә-һөртә:

– Үҙе бик тәмле икән дәбаһа, – тип ҡуйҙы.

Ләкин Сәүбәндең ҡыҙыҡһыныуы олатаһының тәмләп дарыу эсеп ултырыуында түгел ине әле, ул шешәгә йәбештерелгән ҡағыҙҙағы һүҙҙәрҙең бөтәһен дә ҡысҡырып уҡып сығырға ашыҡты. Дөрөҫөн әйткәндә, ул был яҙыуҙы аптекала уҡ уҡығайны инде, ләкин эш унда түгел. Уның теләһә ниндәй яҙыуҙы ла уҡый белә алыуы өсөн, олатаһынан маҡталаһы килә ине. Малай яңынан шешәне алды ла олатаһының иғтибарын ҡаратырлыҡ итеп ҡысҡырып уҡый башланы:

– Витамин «С» в сиропе из...

Ләкин ҡарт ҡапыл уны бүлде:

– Нисек, нисек тиһең?

– «Витамин» тип яҙғандар ҙа, унан һуң ҙур итеп «С» хәрефе ҡуйғандар, унан һуң тағы ваҡ ҡына хәрефле һүҙҙәр китә, унан һуң...

Иҫәнгилде ҡарт ҡалғанын тыңлап торманы, тиҙ генә күҙлеген кейә һалып шешәне морон төбөнә үк килтерҙе лә яҙыуын үҙе уҡып ҡараны. Күҙлек быялаһы аша ул ҙур ҡара квадрат өҫтөнә аҡ менән яҙылған «С» хәрефен күрҙе. Ә уның өҫтөндә «Витамин» тигән һүҙ айырылып тора. Хәҙер инде ышанмаҫҡа мөмкин түгел ине.

– Әлеге Витамин «С» булып сыҡты был нәмә! Ярай инде хәйерле булһын! – тине шешәне өҫтәлгә ҡуйып.

Сәүбән олатаһының һүҙҙәрен эләктереп алды:

– Әйттем бит мин шулай тип, ә һин ышанмаған булаһың. Беләһеңме, олтай, «Витамин» тигәне ана шул һин эскәне була торғанды инде, ә «С» – просто хәреф, алфавитта ун туғыҙынсы урында тора. Бындай хәреф, олатай, «Сәүбән дүртенсе класс уҡыусыһы» тигән һүҙҙәрҙә лә бар бит.

– Барҙыр, улым, – тип дөрөҫләне ҡарт. – Ләкин ул һүҙҙәрҙә «С» бик шәп ишетелмәй шул, ә бына «симулянт» тигәндә бөтөнләй ҡолаҡты яра торғайны...

Үпкәләр хәл юҡ, врачтар улар дарыуҙы сиреңә ҡарап бирәләр. Витамин «С» тигәне, күрәһең бөтә ауырыуҙарға ла килешә торған шифалы дарыу булып сыҡты.

Ноябрь, 1945.
*1951–1956*

## Яңы Ҡәһәриә[1]

«Шуның башын әйләндереп, үҙемә ҡаратмаһам, исмем Гәүһәриә булмаһын! – тине һылыу ҡатын. Һәм мут ҡатын. Һәм әйләндерҙе, ирҙәр затынан берҙе түгел, бишәүҙе, шулар араһында хатта шефын да үҙенә ҡаратты. 5:0 Гәүһәриә файҙаһына.

«Шул Зәйниҙең башын әйләндереп, үҙемә ҡаратмаһам, исемем Гәүһәриә булмаһын», – тине ул алтынсы тапҡыр. Әммә баш әйләнмәне, Гәүһәриәгә ҡараманы: Зәйни үҙенең Зәйнәбе менән ҡушылды. Гәүһәриә исеменән яҙҙы. Уны әхирәттәре Ҡәһәриә тип йөрөтә башланылар.

Исемгенәһе ниндәй бит – Ҡәһәриә! Ярыл да үл. Гәүһәриә быға түҙеп тора алмаç. Барыбер үҙенекен итәсәк ул – баштарҙы әйләндерәсәк, ир-егеттәрҙең һушын аласаҡ. Ә Ҡәһәриә тигән лаҡапты инде, үҙенең байрам күлдәгенән йыуып ташлаған тап һымаҡ, алып ырғытыр ул. Үс алмай ҡаламы һуң Гәүһәриә!

Ҡапыл звонок шылтырап ҡуйҙы. Утыҙ өс йыл исеме менән йөрөп тә, утыҙ дүртенселә әхирәттәре өсөн Ҡәһәриә булып киткән Гәүһәриә шефының кабинитена ашыҡты.

– Тынлайым, Артур Хәмәтнурович.

– Бына ике документ тороп ҡалған. Постель хаҡы. Өфө – Мәскәү, – йәнә бер һум. Ошоларҙы минең аванс отчетыма теркәргә кәрәк. Хәҙер үк бухалтерға.

– Ә ул юҡ.

– Ҡайҙа булған?

– Кем белһен уны. Иртәнсәк күренеп ҡалғайны, шунан юҡ булды. Өсөнсө көндө лә юғалып торҙо. Теге аҙнала субботникка ла сыҡмаған. Ғөмүмән, ул…

– Бәлки берәй эш менән киткәндер?

– Башымды киçергә бирәм, эш артынан йөрөмәй ул. Һис юғында шелтә

[1] Һәнәк, 1968. №23. 4се бит.

бирергә кәрәк ине үҙенә, Артур Хәмәтнурович.

– Шулай тиһең инде һин ә?

– Шулай тимен.

– Һәм шелтә бирҙеләр. Гәүһәриә, шефының асыҡ ҡына итеп әйткәнен дә көтмәй, үҙ өҫтәленә сыҡты ла, машинаһын тыҡылдатып алды. «Эш ваҡытында үҙ хәжәттәре артынан йөрөгәне өсөн өлкән бухгалтер Айытбай Күсәрбаевҡа шелтә бирергә». Приказға ҡул ҡуйылды.

Йома көн ине был. Кис менән Айытбай Күсәрбаев йортонда ҙур туй гөрләне. Ул үҙенең берҙән-бер ҡыҙы Зәйнәпте берәүҙең Зәйни атлы берҙән-бер улына ниҡахландырҙы. Айытбай ағай ҙа, Мәрхәбә еңгә лә, ҡоҙа менән ҡоҙағый ҙа бик ҡыуанышты. Ҡыҙ ҙа шәп, егете лә елле шул. Туйҙағылар: «Икегеҙ пар килгәнһегеҙ…» тип, бик урынлы йырлаштылар.

Айытбай бергә эшләгән иптәштәренән Сәмиғулла менән Хәлилйәнде саҡырғайны. Улар һүҙ ҡуйышҡандай (ихтимал, ысынлап та шулайҙыр) икеһе лә бисәһеҙ, икеһе лә берәр шешә шампанский тотоп килгән. Сәмиғулла быны хикмәтен йорт хужаларының үҙҙәренә генә төшөндөрөп бирергә булды.

– Мин үҙем шампанскийҙе эсмәйем, – тине ул. – Баҡһаң, Хәлилйән ҡорҙаш та минең кеүек икән. Беҙ араҡы эсәбеҙ, эсәбеҙ тип ни, төшөрәбеҙ инде шунда хәлдән килгәнсә. Ә шулай ҙа туйығыҙға шампанский алып килдек. Ни өсөн тиһәң, мин үҙем шампанскийҙең шартлап асылыуын бик яратам. Әйтерең бармы, Хәлилйән ҡорҙаш та шулай икән. Хәҙерге заман туйында нимәлер шартларға тейеш булһа, ул – мотлаҡ шул шампанский. Бер ҙә бүтән нәмә түгел. Шампанмкийҙе шартлатып, тын ғына «мәскәүскиҙе» һемереп ултырыуға ни етә!

– Йоманың шаулы төнө үтте. Туй йолаһы шәмбене лә, йәкшәмбене лә алды. Айытбай ағай йонсой төшһә лә, бирешмәне. Дүшәмбе көн эшкә, ғәҙәтенсә, бер минут та һуңламай килде. Уны ҡыҙының туйы менән ҡотланылар, йәш ғаиләгә бәхет теләнеләр. Шул ваҡыт кемдер берәү: «Ә ҡарттарҙы бәхет тирәһенә ебәрмәҫкә итәләр бит әле», тип иғландар таҡтаһына төртөп күрһәтте. Шунда йәбештерелгән приказды беренсе булып Сәмиғулла

уҡыны. Уҡыны ла:

Шелтә, Күсәрбаевҡа шелтә! – тип ҡысҡырып ебәрҙе, Ул ҡапыл шундай көслө һәм сәйер итеп ҡысҡырҙы, гүйә вайымһыҙ ғына торғанда, шампанскиҙең тығыны шартлап атылып китте, – Вәт әй, нисек кәм-хур итәләр беҙҙең ишене! Үҙемдең күҙ алдымда бер түрә Айытбай уҙаманға эштән элегерәк китергә рөхсәт бирҙе. Туй уңайы менән. Ә икенсе түрә шул көндө үк шелтә сәпәгән. Бына һиңә, кәрәк булһа, туй! Юҡ, мин быны былай ғына ҡалдырмайым. Бына уҡығыҙ, иртәгә профсоюз йыйылышы тәғәйенләнгән. Шунда мин ярам да һалам баш түрәне. Тетмәһен тетәм үҙенең, ҡарар ерен ҡалдырмайым. Беҙ үҙебеҙҙе танытырбыҙ әле. Шулаймы, Хәлилйән ҡорҙаш!

– Шулай, әлбиттә.

Һәм улар үҙҙәрен таныттылар. Йыйылыш тәртип хаҡында ине. Сығып һөйләүселәр байтаҡ булды. Әммә Сәмиғулла менән Хәлилйән тауыш-тын сығарманы, ләм-мим. Йыйылыш бөтөр алдына Артур:

– Нишләп берегеҙ ҙә күңелһеҙ приказ хаҡында һүҙ әйтмәйһегеҙ әле! – тине. – Күбегеҙгә билдәлелер әле, үткән йома көндө Айытбай Күсәрбаев, минең урынбаҫарҙың рөхсәте буйынса, файҙаланмаған ике көнлөк отгулы иҫәбенә эштән биш сәғәткә элек киткән. Сәбәбе лә мөһим – ул кисте ҡыҙының туйы булған. Ә мин уйламай-нитмәй, бер кем менән дә кәңәләшмәй, ҡыҙып китеп, үҙебеҙҙең хөрмәтле өлкән бухгалтер, халыҡ…, эйе, намыҫлы хеҙмәткәр Күсәрбаевҡа шелтә биреп ташлағанмын. Ғәфү үтенәм. Приказды юҡ тип иҫәпләгеҙ.

Йыйылыш башланыр алдынан ғына управляющийға Күсәрбаевтың идаралыҡта һайланып ҡуйылған халыҡ контролеры икәне лә мәғлүм булған. Быны ул үҙенең сығышында саҡ ҡына әйтеп ебәрмәне.

Артур Хәмәтнурович залда бер юлы ике ҡул күтәрелде. Был Сәмиғулла менән Хәлилйән ҡулдары ине. Председателе лә мут кеше булып сыҡты: тегеләрҙе күрмәмешкә һалышты, һуңға ҡалдығыҙ, тип әйтмәксе, күрәһең. Һүҙ, һорамаһа ла, Күсәрбаевтың үҙенә бирҙе.

– Минең әйтер һүҙем юҡ, – тине Күсәрбаев. – Башлығыбыҙ миңә үҙе

яҡҡан ҡара тапты үҙе алып ташланы. Үҙ ғәйебен үҙе аңлаған өсөн мин уның ҡулын ҡыҫырға әҙермен. Ә анау, туй үткәс – дөмбөр, тигәндәй, бер күтәрелеп, бер төшөп торған ике ҡулды ҡыҫырға микән, юҡ микән? Аптырап ҡалдым. Үпкәләштән булмаһын, мин ул ҡулдарҙың эйәләренә үҙҙәре генә аңлай торған телдә ошолай әйтмәксемен: «Шампанскийҙың шартлап асылыуына ҡыҙығып, уны көн элгәре стакандарға ҡойорға ярамай. Ни өсөн тиһәң, ул тамам айнып, һыуҙан да ҡәҙерһеҙгә әйләнә».

Шулай итеп, радио теле менән әйткәндә, аяҙайыусан болотло көн булып алды Айытбай Күсәрбаевтың биографияһында. Ул көнгә биш алты йыл ваҡыт үтте инде. Хәҙер Айытбай аҡһаҡал пенсияла.

Һеҙҙе, әлбиттә, Гәүһәриәнең яҙмышы ла ҡыҙыҡһындыра торғандыр. Әммә мин уның һуңғы йылдарҙағы тормошон аныҡ ҡына белмәйем. Миңә шул ғына мәғлүм. Айытбай Күсәрбаев пенсияға сыҡҡан йылды уҡ Гәүһәриә идаралыҡтан киткән, тиҙәр. Китер алдынан Артур Хәмәтнурович менән Гәүһәриә араһында ошондай һөйләшеү булған имеш, тип һөйләйҙәр:

«*Артур*: Һеҙ (ул ниңәлер “һеҙ”гә күскән) идаралыҡҡа үҙегеҙ теләп килгәйнегеҙ. Ә хәҙер үҙегеҙ теләп китер ваҡыт етте. Сәбәбен, әйтмәһәм дә, белеп торһығыҙ. Ҡәһәриә булып күпме йәшәргә мөмкин! Һеҙҙе Яңы Ҡәһәриә тиҙәр. Унның иҫкеһелә булған икән. Иҫкеһе хаҡында бер яҙыусы яҙып та сыҡҡан, тип һөйләйҙәр. Ә Яңы Ҡәһәриә тураһында яҙмаҫтар тиһеңме ни? Мин уны теләмәйем. “Эштән үҙем теләп китәм” тип ғариза яҙығыҙ.

*Гәүһәриә:* Ҡурҡаһығыҙ.

*Артур:* Шөрләйем.

Гәүһәриә: Айырма күрмәйем. Ә характеристика?

*Артур:* Иң һәйбәте. Тап беҙгә килгәндә алып килгән характеристикағыҙ кеүек.

*Гәүһәриә:* Шулай булғанда, осорға бер ҙә атлығып тормаһам да эштән үҙ теләгем менән китергә ризамын. Әммә ун ике көн үткәс. Хәҙер үк ғариза бирәм. Һеҙ мине ебәрмәй тотоп тораһығыҙ. Ҡалырға бер нисек тә күндерә алмағас, мин закон буйынса китәм дә барам. Һарыҡ та иҫән, бүре лә туҡ».

Суҡ-суҡ сәскәле сәләм[1]

***(Кескәй фельетон)***

Хәмиҙә еңгәнең улы, етенсе класта уҡыусы Хәсән, мәктәптән ҡайтып инде. Өйҙә уның өсөн ят ҡунаҡ бар ине. Хәсән, үҙен ғәҙәтенсә ҡыйыу тотоп, иҫәнләште:

– Суҡ-суҡ сәскәле сәләм апай кешегә!

– Һаумы, һаумы, лирик егет!

Хәмиҙә еңгә Хәсәнде ҡунаҡ менән таныштырҙы. Ул уларҙың яҡын ғына ҡәрҙәше, Фәриҙә исемле врач ине. Хәсәндең уны быға тиклем күргәне юҡ, әсәһе һөйләүе буйынса ғына белә ине.

Хәмиҙә еңгә, улының тырыш уҡыусы булыуын һөйләп, маҡтанып алды. Был арала сисенеп тә, йыуынып та өлгөргән Хәсән өҫтәл янында ине инде. Өсәүләп сәй эстеләр. Фәриҙә Хәсәнде һүҙгә ылыҡтырырға булды:

– Йә, Хәсән, ҙур егет булып буламы? Уҡыуҙар нисек бара?

– Тегенеһен дә, быныһын да булдырабыҙ инде, Фәриҙә апай!

«Тегенеһе» тигәне – уҡыу, «быныһы» – егет булып үҫеүе ине. Сәй һүҙһеҙ генә эселә бирҙе.

– Эс, улым, эс, өшөп тә, асығып та ҡайтҡанһыңдыр! – тине әсәһе.

– Тегенеһе лә, быныһы ла бар, әсәй. Ләкин тегенеһе етдиерәк әһәмиәткә эйә булып тора: тышта һыуыҡ, үткер ҡар яуа, энә осо кеүек.

– Ниндәй ҡар тинең, улым?

– Энә осо кеүек үткер, тинем.

Быңдай сағыштырыу әсәһенә оҡшап бөтәүен бөтмәне. Ләкин ул, улын тәү башлап ҡына күрешкән апаһы алдында уңайһыҙ хәлдә ҡалдырмаҫҡа теләп:

– Уҡыған бала һүҙҙең йәтешең табып тора инде ул, Фәриҙә ҡыҙым, –тигән булды.

Һүҙ һаман ялғанып китә алмай торҙо. Хәсән, нисектер, кәйефһеҙерәк

[1] Харисов Ә.И. Үткән ғүмер – ҡалған хәтер. Мәҡәләләр, публицистик яҙмалар, нәфис әҫәрҙәр. Өфө: Китап, 1997. 187-190-сы биттәр.

ултыра. Әсәнең быға эсе бошоңҡорай:

– Улым, ниңә улай күңеле китек кеше кеүек ултыраһың? Бер-бер хәл булдымы әллә?

– Күңел сынаяҡ түгел, әсәй, бер ватылһа, замазка менән генә йәбештереп булмай! Ғөмүмән, күңел баҡса түгел. Уға теләһә кем кереп йөрөй алмай...

Хәмиҙә еңгә менән Фәриҙә бер-береһенә ҡараштылар. Малайҙың сәйер һүҙҙәр менән һөйләшеүенә ғәжәпләнделәр. Хәмиҙә еңгә уңайһыҙлана башланы. Улынан «тегенеһен-быныһын» төпсөмәҫкә булды. Мәрхүм Хисам ағай әйтмешләй, не рад булырһың. Әле генә маҡтаған малайың: «Күңел ул иҫке биҙрә түгел, бер тишелһә, Сафый тимерсе генә ямай алмаҫ!» – тип әйтеп һалыуы бар тағы.

Ләкин Хәсән үҙе төпсөнә башланы:

– Һеҙ, Фәриҙә апай, ниндәй өлкә буйынса доктор булып эшләйһегеҙ?

– Куйбышев өлкәһендә, – тине Фәриҙә, – күҙ врачы.

Хәсән был яуапҡа асыҡлыҡ индереүҙе кәрәкле тапты:

– Тимәк, медицинаның күҙ ауырыуҙары өлкәһендә була. Һеҙҙең күҙҙең төҫөн үҙгәртеү практикаһы ла бар инде, улай булғас. Әйтәйек, йәшел күҙҙе зәңгәр күҙгә әйләндереү тәжрибәһе. Химический күҙ!.. Мин тегенеһен дә, быныһын да белеп торам инде, Фәриҙә апай. Һеҙ башта обязательно хирург булырға уйлағанһығыҙ. Ләкин ҡандан ҡурҡҡанһығыҙ ҙа күҙ врачы булып киткәнһегеҙ. Дөрөҫ әйтәмме, Фәриҙә апай?

– Юҡ, дөрөҫ түгел. Ғөмүмән мин һине аңлап етмәйем, Хәсән ҡустым. Сәйер һүҙҙәр һөйләйһең һин.

Фәриҙә Хәсәнгә ҡарата шелтәле һүҙҙәр әйтте. Бындай ситен фекерҙең сәбәптәрен белергә тырышты. Хәсәндән уҡытыусылары тураһында һорашты. Уларҙың нисек уҡытыуҙары менән ҡыҙыҡһынды. Аҙаҡ килеп, Хәсәндең сумкаһындағы бөтә китаптар, дәфтәрҙәр сығарылып, өҫтәлгә һалынды. Фәриҙә уларҙы, ауырыуҙы ентекләп ҡарағандан, иғтибар менән ҡараны. Тик шунда ғына ул Хәсәндәге тел һәм фекер ауырыуының сәбәбен тапты булһа кәрәк.

Фәриҙә, Хәсәндең өйгә бирелгән эш дәфтәрен алып, кисә генә үтелгән

эшкә туҡталды. Дәфтәрҙә шундай «эш» эшләнгәйне:

«Өйгә эш. Берәй яҙыусы әҫәренән алып, *«сәләм», «ҡар», «күңел»* тигән һүҙҙәрҙең эпитеттар һәм сағыштырыуҙар менән ҡулланылыуына миҫалдар килтерергә».

Хәсән үҙе уҡыған әҫәрҙән шундай миҫалдар күсереп яҙған:

*1. «Туғаным Нажиә! Һиңә сук-сук сәскәле сәләм».*

*2. «Энә осо кеүек үткер ҡар яуғанда, бер-бер артлы санаға ултырып, ауылдан сығып киттек».*

*3. «Ә һин ул ҡырылыусан күңелеңде бер аҙ нығыта төш. Ватылып китеп, йыйып алмай тороуың бар. Бер ватылһа, уны замазка менән генә йәбештереп булмай. Күңел ул сынаяҡ түгел».*

«Өйгә эш. Берәй яҙыусы әҫәренән *«баҡса», «практика», «врач», «хирург»* тигән һүҙҙәр ҡулланған һөйләмдәр килтерергә».

*1. «Күңел баҡсаңа әсәйең инеп йөрөгәне бармы һуң? Беҙҙең әсәй ул күңел баҡсаларын бик белә торған кеше бит».*

*2. «Йәшкелт күҙен яратмаһаң, икенсе төҫкә кертербеҙ. Мин бит врач, ә бит врачтарҙа хәҙер күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртеү практикаһы бар».*

*3. «Шуны әйтәм: ниңә ҡан күрә алмайым икән мин? Ә үҙем хирург булырға әҙерләнәм. Уйлап-уйлап торам да шул һөҙөмтәгә киләм: мин ҡан күреү менән шул ҡан эйәһен ҡыҙғанам, йәлләйем булһа кәрәк. Мин ниндәй хирург булырмын икән, ә?».*

Был «йәшкелт» һөйләмдәр Ғариф Ғүмәрҙең «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» тигән повесынан дөрөҫ күсерелгәйне. Фәриҙә повееты үҙе уҡып сыҡты һәм Хәсәнгә йәштәрҙе дөрөҫ тәрбиәләргә ярҙам итмәгән бындай әҫәрҙе уҡымаҫҡа, бигерәк тә уның сөсө телле геройҙарына оҡшарға тырышып һөйләшеүҙән ҡасырға кәңәш бирҙе. Ул, әҙәбиәтсе булмаһа ла, был әҫәрҙең тормоштан түгел, ә яҙыусының үҙ «күңел баҡсаһы»нан ғына алып яҙылыуын, уның «замазка» менән генә нығытылған булыуын һәм «энә осо кеүек үткер» тәнҡиткә мохтаж икәнен бик оҫта аңлатып бирҙе.

– Ни тиһәң дә, күҙ врачы шул, – тине Хәмиҙә еңгә, – күҙе яҡшы күрә, сирҙе

бик тиҙ таба белә. Трахом ти: күҙҙә генә түгел, һүҙҙә лә – яҙыусы китабында ла – икән шул!

Хәсән, уның әсәһе һәм Фәриҙә яҙыусының үҙенә хат яҙырға булдылар.

*«Суҡ-суҡ сәскәле сәләм һеҙгә, яҙыусы иптәш...»* – тип башламаҡ булдылар улар хатты.

Сәләмдән һуң Хәсән яҙыусының түбәндәге үҙ һүҙҙәрен күсереп яҙырға тәҡдим итте:

*«Беләһегеҙме нимә? Йә, табығыҙ! Хатты уҡымай тороғоҙ. Кеҫәгеҙгә һалығыҙ ҙа уйлағыҙ: беҙ һеҙгә ни нәмә тураһында әйтергә теләйбеҙ хәҙер? Йә, табығыҙ! Таптыңмы? Тапһағыҙ ҙа, тапмаһағыҙ ҙа әйтмәй торорға сабырлыҡ етмәй...».*

Һәм шуға үҙҙәре ялғап алып киттеләр: *«...оҡшап бөтмәне беҙгә һеҙҙең «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» тигән повесығыҙ. Тегенеһе лә, быныһы ла – дуҫлығы ла, мөхәббәте лә – беҙҙе ҡәнәғәтләндерә алманы. Тормош юҡ, унда геройҙар үҙҙәренең хаттары менән бергә конверт эсенә бикләнгәндәр. Шуларҙы тормошҡа сығарып булмаҫмы?*

*Беҙ һеҙҙән, хөрмәтле Ғариф Ғүмәр иптәш, быға тиклем байтаҡ һәйбәт әҫәр яҙған яҙыусынан, яҡшы повесть көтәбеҙ. Беҙ хәҙер Һеҙҙең бер хикәйәгеҙҙәге ат ярлығы менән загс ҡағыҙын бутап йөрөгән кешеләр түгел инде...».*

Бына шулай яҙылды (йәки яҙылырға мөмкин ине) ул суҡ-суҡ сәскә сәләмле хат.

1953

## Ағымдағы ремонт[1]
## (***Кескәй фельетон***)

Ни өсөн ат, һыйыр, һалам, аҡса һымаҡ һүҙҙәр газеталарҙа йыш ҡына тартыу көсө, мөгөҙлө эре мал, тупаҫ аҙыҡ, средство булып йөрөй икән?

Газета уҡыусылары хатынан.

[1] Харисов Ә.И. Әҙәби күренештәр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1963. 277-279-сы биттәр.

Ағымдағы йәйҙең ғәҙәттәге бер иртәһе ине. Сәхипъямал апай үҙенең мул һәм юғары сифатлы һөт бирә торған мөгөҙлө эре малын һауырға ла өлгөрмәгәйне әле. Ғәлләү ағай егелмә инвентарға ерән йөнлө тартыу көсөн егеп, аҫтына тупаҫ мал аҙығы менән йәшел масса һалып алып, халыҡ йәшәү пуктынан сығып китте. Ваҡытты тығыҙлау маҡсатында, ул егелмә инвентарҙың тәгәрмәстәренә майлау материалы ла һөртөп торманы.

Беҙҙең юлсы район үҙәгенә туҡтау менән тартыу көсөн дауалау учреждениеһы алдына бәйләп ҡуйҙы ла үҙенә йөкмәтелгән эштәрҙе йылдам рәүештә үтәй башланы. Башта ул сауҙа селтәренә инеп сыҡты. Унан һуң культура-ағартыу йортона барҙы. Һуңғыһында үҙешмәкәр түңәрәк ағзаларының нәүбәттәге репетицияһы йәйелдерелгәйне. Өҫтөнә тегелгән кейем кейгән, эшләпә һәм галстуктағы бер үҙешмәкәр мөдирҙең ниндәйҙер кәңәшмәлә икәнен аҫтына һыҙып әйткәс, Ғәлләү ағай, тотҡарлыҡһыҙ, был объектты ҡалдырып сығып китте. Ул башҡа бик күп аппараттарҙа, әллә ниндәй точкаларҙа булды. Бары тик тамашасылар учреждениеһының административ берәмеге менән генә һөйләшергә тура килмәне – ул уҙған көндө генә эстәлекһеҙ отпускыға китеп барған икән.

Ҡушылған йомоштарҙың даирәһе ғәйәт дәрәжәлә киң ине. Уларҙы ҡырҡа башҡарыуҙы тәьмин итергә көсөргәнеш яһап, Ғәлләү ағай үҙенең шәхси ихтыяждары артынан йөрөмәне. Бары тик һаҡлыҡ кассаһына инеп, үҙенең счетына ун һум средство һалып сыҡты. Эш араһында ғына район ҡапҡылап алыу пунктына инеп, өс йөҙ грамм он изделиеһы менән бер порция ит изделиеһы, ике дана йәшелсә, өс дана фрукт ашап алды. Аҙаҡтан бер бутылка алкоголһеҙ эсемлек эсте.

Район ҡапҡылап алыу пункты тейешле дәрәжәлә йыһазландырылған. Мебелдәрҙең ҙур күпселегенә ағымдағы ремонт үткәрелгән. Ғәлләү ағай бында регуляр рәүештә була – райүҙәккә килгән һайын инмәй китмәй. Ҡасан килһә лә уны йылы ҡабул итәләр, бик яҡшы хеҙмәтләндерәләр. Был осраҡта уға ҡарата айырыуса сәләмсел булдылар. Хатта ҡапҡылап алыу кухняһына яғыулыҡ ташыусы персоналға тиклем:

– Юғары аппетит теләйем, клиент ағай! – тине.

Ғәлләү ағайҙың тағы бер урында – райутиль-сүп-сар-сбыт контороһында йомошо бар ине. Ләкин хәҙер бөтә ерҙә лә нәүбәттәге төшкө аш ваҡыты булғанлыҡтан, унда һуңыраҡ барарға булды. Ул, үҙенең фураждағы ерән тартыу көсө эргәһенә кире килеп, йәшел масса түшәлгән егелмә инвентарға ҡырын төшөп ятты һәм иртәнән бирле уҡырға ваҡыт етмәй йөрөгән бөгөнгө газетаны ҡулына алды. Уның күҙҙәре Күсәрбай Бүкәншин тигән берәүҙең «Туҡай һәм Заман» исемле мәҡәләһенә туҡталды. Беҙҙең Ғәләү ағай газетала сәйерерәк материал күрһә, элек уның аҙағын уҡыусан. Был юлы ла шулай итте.

«...Бөгөнгөһө көндә бөйөк Туҡай традицияларын лайыҡлы дауам иттереүсе йәш шағирҙарҙан иң элек Вильгельм Миңнәхмәтиҙе күрһәтергә кәрәк, – тиелгән был мәҡәләлә. – Уның Туҡай рухында, Туҡайҙың шифалы йоғонтоһонда яҙылған шиғырҙарынан бигерәк тә береһе – “Илдус менән ваҡ мөгөҙлө мал” тигәне уҡыусының күңелен яулап ала. Бына ул гүзәл шиғыр:

Беҙҙең Илдус бигерәк татыу
Ваҡ мөгөҙлө малдар менән.
Бына мөгөҙ ҡарап тора
Ферма эсенән, тәҙрәнән.

Илдус уны кукуруз менән
Ҡунаҡ итә, хөрмәт итә.
Ваҡ мөгөҙ мал рәхмәт уҡый,
Тамаҡ ҡыра, һаҡалын һелкетә».

Ғәлләү ағай Күсәрбай Бүкәншин мәҡәләһен уҡыуҙы дауам итте:

«Ә бына Шәғәли Шаҡман ижадында бындай тәрәнлекте һәм күркәмлекте күрмәйбеҙ. Шәғәли Шаҡмандың “Баҫыу алдынғылары” тигән шиғыры баҫыу алдынғылары хаҡында яҙылған. Темаһы бик актуаль һәм тәрән, әммә шиғырҙың йөкмәткеһе һай. Пафосы юғары, шиғриәте түбән. Ғөмүмән алғанда был шиғыр уңышлы ғына, конкрет килгәндә – эшкә ашырлыҡ түгел. Беҙгә колхоз маяҡтарының тулы ҡанлы, алтын ҡуллы, тимер beләкле, ҡорос йөрәкле, батыр күкрәле образын ҡалтайтып күрһәткән әҫәрҙәр кәрәк; беҙҙең уҡыусылар

оригиналь буяулы, матур биҙәкле, юғары кимәлле, киң ҡоласлы, күп ҡырлы поэмалар көтәләр. Беҙгә эмоция менән һуғарылған, тойғолар менән туйҙырылған, рухи көс менән ашатылған, лирика менән эсертелгән, сатира менән әсетелгән, гуманизм менән өрҙөрөлгән, героизм менән ҡабартылған, патриотизм менән йәнләндерелгән, реализм менән ҡанатландырылған, мөхәббәт һәм нәфрәт менән осортолған шиғырҙар кәрәк...»

Бына ошо урынға еткәс, мәҡәләне уҡыу өҙөлдө: Ғәлләү ағайҙың күҙҙәре йомолдо, ул, ғырылдап тәрән йоҡоға китте.

Ял итһен әйҙә, борсомайыҡ. Уны тағы ла үҙенә йөкмәтелгән ағымдағы йомоштар көтә бит.

*1951–1961*

### Бер иштән[1]

(Ҡайһы бер авторҙарҙың яҙыусылыҡ практикаһынан)

Башына һыныҡ козыреклы кепка, өҫтөнә һары буйлы йәшел күлдәк, уның өҫтөнән еңдәре ҡыҫҡара төшкән һорғолт пинжәк кейгән, тубыҡ баштары иҙерәй башлаған салбарлы, ике аяғына ла носки, носки өҫтөнән утыҙ дүртенсе размерлы ҡара ботинка кейеп алған быжыр Марс Уралдарға килде.

Башынан Марстыҡы менән бер иш кепка кейгән, өҫтөнә йәшел буйлы һары күлдәк, уның өҫтөнә утыҙ бишенсе размерлы һарғылт ботинка кейгән Урал ҡайтмағайны әле.

Уралдың әсәһе Марсты ҡаршы алып:

– Урал хәҙер ҡайтыр, сисен, улым, – тине. – Бир әле бында Урал менән бер иш, әммә һыныҡ козыреклы кепкаңды, сөйгә эләйем. Өй бик йылы, еңдәре ҡыҫҡара төшкән һорғолт пинжәгеңде һал, утыҙ дүртенсе размерлы ҡара ботинкаңды ла һал. Һары буйлы йәшел күлдәгең менән тубыҡ баштары иҙерәй башлаған салбарыңды һалмаҫҡа мөмкин.

Марс уларын һалманы.

Шул ваҡыт ишек шаҡынылар. Башына Марстыҡы менән бер иш кепка

[1] НА. УФИЦ РАН, Ф. 40, оп. № 1, ед.хр. № 65.

кейгән...Урал уйындан ҡайтып инде.

*Али Ашкаҙаров*

## Фронт көләмәстәре[1][2]

Был көләмәстәрҙең күп өлөшө 1943 йылдың һуңғы яртыһында, Алкиндағы хәрби (учебный) частәрҙең береһендә, фронтта булған һалдаттар ауыҙынан яҙып алынды. Көләмәстәрҙең сығанағы ике башҡорт егете: Зариф Ариткулов һәм Нәби Сәфәрғәлиев. Мин улар менән бергә ярты йыл бер взводта хеҙмәт иттем. Беҙҙең рота күп өлөшө Башҡортостан егеттәренән торған минометсылар ротаһы ине. Беҙҙе шунда старшина булырға өйрәтеләр.

Әйтергә кәрәк, сержант Ариткулов (Көйөргәҙе районынан, «гражданкала» тракторист булып эшләгән) миңә (һуғышта булмаған кешегә) фронт тормошонан хикәйәләр яҙырға ла ҙур ғына ярҙам күрһәтте. Мин шул ваҡытта яҙылған хикәйәләремдең береһендә («Разведчик»та) уның үҙен үк төп образ итеп алдым.

Ариткулов һәм Сәфәрғәлиев ауыҙынан яҙылған көләмәстәрҙең барыһы ла улар ижады түгел, әлбиттә. Мәҫәлән, «Астың күҙе икмәктә», «Тәжрибәле финансист», «Ҡыҙыҡлы хәбәр», «Моральный дух» кеүек көләмәстәрҙе хәрби газеталарҙа («Сталинец», «Доблесть») һәм журналдарҙа уҡығаным бар.

Көләмәстәрҙең бер өлөшө – «Ике хат, бер хәбәр», «Яҡшы мишень», «Киҫелер баш», «Ағас аяҡ, ағас баш», «Төш юрау», «Ҡомһоҙлоҡ нәтижәһе», «Кинәйәле сағыштырыу», «Кем ҡырағай», «Һанһыҙ трофей», «Фюрер китабы һәм уны уҡыу сараһы», «Немец мәктәбендә» – үҙемдең ижад.

*Ә. Харис.*
*Ғинуар, 1944.*

## *Ике фрицтың төнгө һөйләшеүҙәре*

1.

*Людвиг.* Һиҙәһеңме, хәҙер көн ҡыҫҡара, ә төн оҙая башланы.

---

[1] НА. УФИЦ РАН, Ф. 3, оп. № 2, ед.хр. № 143.
[2] Ә.Харисовтың архивынан алынған көләмәстәр БХИ XVI томында баҫылып сыҡты // Башҡорт халыҡ ижады. XVI том: Бөйөк Ватан һуғышы фольклоры / [төҙ.: А.М. Хәкимйәнова, Г.Р. Хөсәйенова] / Өфө: Китап, 2020. 262-278-се биттәр.

*Франц.* Тимәк беҙҙең көн тиҙҙән бөтөнләй бөтәсәк икән.

2.

– Төн ниндәй ҡараңғы. Күктә бер генә йондоҙ ҙа юҡ.

– Уның ҡарауы ерҙә йондоҙло рус һалдаттары күп.

3.

– Фән ҡараңғыла кеше күҙенең күреү һиҙгерлеге яҡтылағына ҡарағанда, ике мең тапҡыр артыҡ, тип өйрәтә. Дөрөҫмө икән шул?

– Рус разведчиктарына ҡарата дөрөҫтөр. Һинең менән миңә ҡарата был – буш һүҙ.

***Ике хат, бер хәбәр***

1.

*I – немец.* Бөгөн ҡатындан хат килде.

*II – немец.* Йә, нимә яҙа?

*I – немец.* Көн күреү бик ауыр, тигән.

*II – немец.* Һин уға яҙ: һеҙгә көн, ә бында беҙгә рус төнөн күреүе лә бик еңелдән түгел, тиген.

2.

*II – немец.* Миңә лә кисә хат килде. Ағай яҙа: «Тормошмо ни былай йәшәү, ҡатын ауырыу, балалар ас, барлы-юҡлы хужалыҡ таралып бөткән», – тигән.

*I – немец.* Был да яңы хәбәр түгел. Мин, ағайың урынында булһам улай зарланып тормаҫ инем, хужалыҡты аяҡҡа баҫтырып ебәрер инем.

*II – немец.* Ағайҙың үҙенә баҫырға ла аяҡтары юҡ. Сталинградта өҙөлөп ҡалғандар.

*I – немец.* Тиҙерәк илгә ҡайтарһындар ине. Беҙ һинең менән икәү дүрт йыл буйына донъяны урап сыға яҙҙыҡ бит инде.

*II – немец.* Дөрөҫ әйтәһең. Был донъяла эш бөттө, беҙгә теге донъяға ғына китәһе ҡалды инде.

***Яҡшы мишень***

*Ганс.* Һин, Альберт, яңы полковникты күрҙеңме әле? Ғәжәп киң маңлайлы кеше үҙе.

*Альберт.* Бер ҙә иҫ китер ере юҡ. Беҙҙең полковник өсөн – маңлай, ә совет һалдаты өсөн – бик яҡшы мишень ул.

***Киҫелер баш***

*Отто.* Ҡара әле, яңы командирҙың ҡиәфәтенә: сәстәре пумала кеүек, һаҡал-мыйыҡтары тәртипһеҙ тырпайып торалар. Ниңә аҙыраҡ үҙен-үҙе ҡарамай икән?

*Рудольф.* Нигә ҡарайһың уны, киҫелер баш өсөн барыбер түгелме ни?

***Башлы һәм башһыҙ болвандар***

*Генрих.* Мине бөгөн обер-лейтенант һүкте. Ой, һүкте лә һуң!

*Шульц.* Нисегерәк?

*Генрих.* Һин немец түгел, башһыҙ болван, ти.

*Шульц.* Ә һин нимә тинең?

*Генрих.* Беҙҙең арала айырма ҙур түгел икән, мин әйтәм, мин башһыҙ болван, ә һин башлы болван, тинем.

***Дөрөҫ яуап***

Гитлер газеталары немецтарҙы
«баштарын һаҡларға» саҡыралар.
(Газеталарҙан).

Капитан Брук. Брянский районында ҡыйратылған батальондың ҡалдығын йыйып, Берлин газетаһында «Башты һаҡларға» тигән бер мәҡәлә уҡый.

– Господин капитан, – ти һалдаттарҙың береһе, – беҙ баштарҙы юғалтҡаныбыҙ ҙа юҡ. Беҙҙең баштар һуғыш майҙанында кәүҙә менән бергә тороп ҡалалар!

***Ике мөмкинлек***

*Обер-лейтенант.* Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, беҙҙе рустар был ҡаланан да һөрөп сығарасаҡтар. Был юлы имен генә ҡотолоп булмаҫ төҫлө. Һин башты һаҡлап ҡалыр өсөн берәй төрлө мөмкинлек белмәйһеңме?

*Лейтенант.* Беләм, Ҡыҙыл Армия алдында беҙҙең өсөн ике мөмкинлек бар: йә ҡулды күтәрергә, йә аяҡты һуҙырға.

***...Үлеү артығыраҡ***

Лейтенант Курт үҙенең взводына һәр һалдатты туйҙырып бөтөргән бер үк моралде уҡый:

– Һәр бер немец һалдаты рустарға ҡаршы йәнен аямай һуғышырға тейеш, Фюрер өсөн үлергә тейеш...

– Бик дөрөҫ әйтәһегеҙ, господин лейтенант, Фюрер өсөн йәшәүҙән, үлем артығыраҡ! – ти бер фриц.

***Реаль мөмкинлек***

*Келлер.* Күрәһеңме, рустар нисегерәк һөжүм итәләр

*Мюллер.* Беҙгә ышаныслы мөмкинлек бар икән улай булғас.

*Келлер.* Тере ҡалырғамы?

*Мюллер.* Юҡ, Фюрер өсөн үлергә.

***Ике һыңар – бер пар***

(Немец баҙарында)

*Алыпһатар.* Бабай, ботинка кәрәкме әллә?

*Карл.* Эйе, ботинка.

*Алыпһатар.* Үҙең өсөнмө?

*Карл.* Юҡ, ике улыма.

*Алыпһатар.* Миндә бер генә пар бит.

*Карл.* Миңә ике парҙың кәрәге лә юҡ. Улдарым көнсығыш фронтынан икеһенә бер пар аяҡ менән ҡайттылар.

***Ағас аяҡ, ағас баш***

*Мастер I.* Ҡалала беҙҙең мастерской ғына ла көн һайын биш йөҙ пар ағас аяҡ һәм ҡултыҡ таяҡтары эшләп сығара. Әгәр һалдаттарға ағастан баш та яһарға тура килә торған булһа, утынға ла интегеп ултырыр инек!

*Мастер II.* Әгәр Рейхстагта ағас башлы бәндәләр ултырмаһалар, кешеләр үҙ аяҡтары менән йөрөрҙәр ине.

***«Тәжрибәле» финансист***

Полк штабы командиры капитан Гранд фельдебель Бренделде саҡырып килтерә.

– Мин һине, – ти капитан, – штабтың финанс бүлегенә хисапсы итеп алам. Бухгалтерия менән танышлығың нисек? Аҡса менән ултырғаның бармы?

– Бар, господин капитан.

– Күпме ваҡыт?

– Өс йылға яҡын.

– Ҡайҙа?

– Мюнхен төрмәһендә. Бер банктың аҡсаһын талап тотолғайным. Шунда ултырҙым.

***Осрашыу***

*Лейтенант.* Һин, Густав, һуғышҡа тиклем ниндәй эштә эшләнең?

*Густав.* Һеҙҙе һаҡланым, господин лейтенант.

*Лейтенант.* Мине?

*Густав.* Эйе, һеҙҙе. Мин төрмә охранкһында эшләй инем...

***Төш юрау***

*Фриц.*Төш юрай беләһеңме, Ганс?

*Ганс.* Нимәһен юрап тораһың уның. Төштә нәмә күрһәң, өнөңдә шуның киреһе була, тиҙәр.

*Фриц.* Улай булһа, мин бик хәүефле төш күргәнмен икән. Төшөмдә Днепр ярына ултырып ниндәйҙер бер ҙур балыҡ ашағайным.

*Ганс.* Ә һин ҡурҡма. Балыҡ ауыҙына ҡабыуыңды һин үҙең барыбер белмәйҫең.

*Фриц.* Нисек улай?

*Ганс.* Нисек тип ни, һин Днепрҙың төшөңдә балыҡ ашағанерендә ултыраһың. Рус снайперы һине ашыҡмай ғына атып һыуға төшөрә. Унан һуң инде балыҡ йоттомо, бүре ашанымы – барыбер түгелме ни?

***Ҡомһоҙлоҡ нәтижәһе***

*Миллер*. Кисә беҙ икәү теге ат итенең бешеп етеүен дә көтмәй ашағанбыҙ.

*Блюхер*. Кисә кис ашағанға бөгөниҫең китәме.

*Миллер*. Юҡ, эсем китә.

### ***Немец ҡайғыһы***

Гитлер грабармияһы совет граждандарының йорт йыһаздарын талайҙар, кейемдәрен һалдырып алалар. Улар балалар ойоғон урлауҙан да тартынмайҙар.

(Совинфорбюронан)

Немец полевой госпиталенә һул ҡулы өҙөлгән бер офицерҙы килтерәләр. Офицер тынысһыҙлана. Үрһәләнә.

– ...Алтын ине, һәләк иттеләр, – ти ул.

– Һәр кемдең дә ҡулы үҙе өсөн алтын инде ул, – ти врач.

– Үҙемдә лә ғәйеп ҙур инде, ниңә кеҫәгә генә тығып йөрөтмәҫкә?

– Һеҙ дөрөҫ һөйләмәйһегеҙ. Һуғышта ҡулды гел генә кеҫәгә тығып йөрөү мөмкин түгел бит. Унан һуң, кеҫәләр ҡулдарҙың яраланмауы өсөн гарантия ла була алмайҙар.

– Һин мине, врач, аңламайһың, күрәһең. Һүҙ өҙөлгән ҡулда киткән сәғәт тураһында бара. Беләһеңме, сәғәт алтын ине! Идеальный сәғәт ине.

### ***Уртаҡ төш***

*Немец һалдаты*. Төштә ҡош күрһәң, өнөңдә нәмә була икән?

*Ефрейтор*. Ниндәй ҡош бит. Мәҫәлән, «Орел» үҙең беләһең, беҙҙең дивизияларға үлем килтерә.

*Һалдат*. Мин тауыҡ күрҙем.

*Ефрейтор*. Был ерунда.Тауыҡ һинең төшөңә генә керә торған ҡош түгел ул.

### ***Немец һалдатының моральный духы***

*Генерал*. Һалдаттарҙың моральный дух торошо нисек?

*Полковник*. Бик яҡшы, господин генерал, иң юғары дәрәжәлә.

*Генерал*. Мин быны конкрет һалдат йөҙөндә үҙ күҙем менән күрергә теләйем. Саҡырығыҙ әле миңә берәй рядовой һалдатты.

Шунда уҡ бер һалдатты саҡырып алалар. Һалдаттан араҡы еҫе бәрелеп тора.

– Һинән ниндәйҙер еҫ килә? – ти генерал.

– Моральный дух, господин генерал!

### *Кинәйәле сағыштырыу*

*Генерал Арнд*. Донъяла төрлө калибрлы ҡоштар бар. Шуларҙы үҙ-ара сағыштырһаң, күҙ алдына ғәжәп ҡыҙыҡ картина килеп баса. Әйтәйек, клибри тигән ҡоштоң ҙурлығы ярты баш бармаҡ саҡлы ғына. Бөтә буйы – суҡышынан алып ҡойроғона тиклем оҙонлоғо – ике сантиметр ярым. Ә страустың буйы ике метр тип әйтерлек. Калибриҙың страусты күргәндә йөрәк кенәһе бөтөнләй ярыла торғандыр, ә?

*Генерал Эрдеш.* Йәғни был сағыштырыуҙың ике яғы бар: калибриҙың хәле ҡыҙғаныс, страустыҡы – ҡыҙыҡлы. Һеҙ әлбәттә, үҙегеҙҙе калибри урынында күрәһегеҙ. Ситләтелгән мәғәнәләге был сағыштырыуығыҙҙы мин тап үҙегеҙсә аңланым: рус генералын йыраҡтан күргән хәлдә лә, һеҙҙең йөрәгегеҙҙең ярылыу сигенә етеүен һиҙәм.

### *Эҙ һәм эҙәрләүселәр*

– Господин подполковник, минең рота партизандар эҙенә төштө.

– Шәп, бик шәп!

– Ләкин партизандар әкрен генә беҙҙең арттан төшөп алдылар...

– Быныһы шәп түгел.

– Һәм көтөлмәгән шәплек менән ташландылар... Ротаның эҙе лә ҡалманы.

### *Бер һорауға бер яуап*

*Капитан*. Алда хутор бармы?

*Часовой*. Бар.

Капитан яуап менән ҡәнәғәтләнә. Машина алға китә. Төҫөнә ҡурҡыу билдәләре сыҡҡан икенсе часовой иптәшенә ҡарап:

– Нигә һин ул хуторҙың партизандар тарафынан алынғанын әйтмәнең?

*Беренсе часовой.* Сөнки шундай капитан, һорамағанға яуап биргәнем өсөн өс көн гауптвахтала ултырттҡайны.

### *Ҡыҙыҡ хәбәр*

*Клоп*. Үткән төндә беҙҙең утыҙ ике самолет Лондондың хәрби объекттарына налет яһаған. Утыҙ икеһе лә үҙ базаларына кире ҡайтҡан.

*Кнабе*. Был ҡыҙыҡлы түгел. Мин Германинформбюроһының радио аша хәбәр итеүендә ҡырҡ өс самолеттың Мәскәүгә уңышлы налет яһап, ҡырҡ туғыҙы ла үҙ базаларына ҡайтмауҙарын ишеткәнем бар.

**_Күңел өсөн генә булһа ла..._**

Төн. Силәктән ҡойған күек ямғыр яуа. Хуторҙың бейек тип һаналған өй түбәһендә немецтарҙың зенитный пулеметы урынлашҡан. Поста тороусы расчет ямғырҙан зарлана.

*Беренсе номер*. Күктең төбө тишелде буғай: ҡәһәрле ямғыр яуа ла яуа.

*Икенсе номер*. Тишелһә лә тишелер шул – беҙҙең был тиклем атыуға. Күңел өсөн генә булһа ла бер генә совет самолетын да имгәткәнебеҙ юҡ бит.

**_Хыл һәм факт_**

*Мартин*. Һин повор булып эшләгәнһең бит, әйт әле: тауыҡты тәмле итеп жарить итеү өсөн нәмә кәрәк?

*Вальтер*. Иң элек ҡулыңда тауыҡтың үҙе булыуы кәрәк!

**_Булып өлөргән_**

*Марта*. Фрау, һеҙҙең улығыҙ – алла ғүмерен бирһен – ниндәй ҙур булып үҫеп килә. Һалдатка ярарлыҡ булған бит!

*Клара*. Ярарлыҡ ҡына түгел, һалдаттың тап үҙе булып өлгөрҙө инде: кисә атаһының кеҫә сәғәтен урлап һатҡан. Бөгөн һеҙҙе ридикулһеҙ ҡалдырыуы мөмкин.

**_Германияла ғәжәп факт_**

– Әбей, нәмә һөтө һатаһың?

– Нимә һөтө булһын, һыйыр һөтө. Һөт күргәнең юҡмы әллә?

– Һөт күргәнем бар барын да, һыйырлы кеше күргәнем юҡ ине.

**_Берлин зоопаркында_**

– Нишләп зоопаркта бер маймыл да ҡалмаған?

– Күрәһең, Геббельс ағалары үҙенең нәүбәттәге ҡайғыһын уртаҡлашырға саҡырып алған.

**_Кем ҡырағай_**

Рота командиры Шкрабе үҙенең һалдаттарына Берлин газетаһынан «ҡырағай» башҡорт атлылары тураһында уҡый. Уҡып бөткәс, бер фриц һорау бирә:

– Шулай ҙа, господин обер-лейтенант, миңә аңлашылманы әле, – ти. Башҡорттарҙың ҡырағай булыуҙары нимәнән тора һуң?

– Улар ат ите ашайҙар, ат һөтө эсәләр... Ғөмүмән башҡорттар ҡырағай халыҡ.

– Шул ҡырағайлыҡ буламы?

– Ә һин нисек уйлағайның?

– Мин башҡорттар беҙҙең кеүек эт, бесәй, ҡомаҡ ашаусылармы әллә тип уйлағайным.

***Разведкала***

*Тимербай*. Салих, һул яғыңа абайлабыраҡ ҡара әле, кемдер беҙгә табан шыуышып килә.

*Салих*. Кем булһын – немец!

*Тимербай*. Ә мин кеше тип торам. Кеше ашаусы икән.

***Һанһыҙ «трофей»***

Дивизия командиры фон-Краузе загородительный отряд командиры капитан Кугелде саҡырып ала ла:

– Ике сәғәттән сигенә башлайбыҙ. Ятҡан урынды һәм тирә-яҡты минировать итеп китергә кәрәк. Иң мөһиме – башҡорттарға бер ниндәй ҙә трофей ҡалдырмаҫҡа! Был һеҙҙең бурыс, – ти.

Тап шул ваҡытта гармун тауышы ишетелә.

– Был нидәй концерт тағы? – тип һорай фон-Краузе.

– Һалдаттар гармун тарталар, господин генерал, – ти капитан Кугель.

– Тарттырырмын мин уларға! Бөтә музыка ҡоралын минировать итеп ҡалдырығыҙ. Ҡабатлап әйтәм, башҡорт атлыларына бер нәмә лә ҡалмаһын!

Сәғәт ярымдан һуң капитан генералға доклад менән килә.

– Ташлап китәһе урын һәм предметтар минировать ителде. Ләкин дошманға бары бер трофей ҡала: башҡорттар һөйә торған музыка ҡоралын минировать итеп бөтөрлөк түгел.

– Кем ҡушты һеҙгә ул тиклем күп музыка ҡоралы тарттырып йөрөргә, ә? Ниндәй инструмент ул һанына сыҡмаçлыҡ?

– Ҡурай, господин генерал! Беҙ ятҡан ер гел генә тип әйтерлек шыр ҡурайлыҡтан тора.

**_Телен йотҡан «тел»_**

*Сержант Кинйәбаев.* Иптәш капитан, боевой задание үтәлде – «тел» алып ҡайттым.

*Капитан.* Ә нигә ауыҙынан һүҙе сыҡмай?

*Кинйәбаев.* Ҡурҡыуынан телен йотҡандыр, иптәш капитан!

**_Тел төбө_**

*Вәли.* Һин, Хәсән, гел генә «тел» ташыйһың, ә үҙеңдең немецсә бер ауыҙ һүҙ ҙә белгәнең юҡ әле!

*Хәсән.* Зарар юҡ. Мин немецтең телен белмәһәм дә, уның тел төбөндә нәмә ятҡанын бик яҡшы аңлайым!

**_Фюрер китабы һәм уны укыу сараһы_**

*Ҡатын.* Магазинда һағыҙҙы Гитлерҙың «Минең көрәшем» тигән китабына төрөп һаталар.

*Ир.* Бик дөрөç эшләйҙәр. Сөнки ул китапты һағыҙ сәйнәмәйенсә уҡыу мөмкин түгел: һүгенергә төкөрөк етмәй.

**_Немецса һөйләшеү_**

1.

*Бала.* Атай, ҡара әле, анау ҡарт нәмә етәкләп китеп бара?

*Атаһы.* Быҙау, улым.

*Бала.* Ә мин һыйыр балаһылыр, тип уйлағайным.

2.

*Бала.* Магазиндан нәмә алып ҡайттың, әсәй?

*Әсәһе.* Сират.

*Бала*. Көн буйы өйгә сират ташыйһың, – тиҙҙән үҙебеҙ ҙә магазин асырбыҙ инде!

3.

*Бала*. Әсәй, әтәс нигә ҡысыра ул?

*Әсәһе*. Ҡысҡыраһы килгәнгә.

*Бала*. Мин ашаһы килгәнгәме икән әллә тип уйлай инем.

4.

*Бала*. Әсәй, тараҡты нәмәнән яһайҙар?

*Әсәһе*. Мөгөҙҙән.

*Бала*. Ә мөгөҙҙө нәмәнән яһайҙар.

*Әсәһе*. Тиле малай, мөгөҙҙө яһамайҙар. Ул һыйыр һәм кәзә кеүек хайуандарҙа була.

**_Немец мәктәбендә_**

(скетч)

«Германияла мәктәп биналарының күбеһе госпиталь ителгәнлектән, балалар класс өсөн яраҡлаштырылған, иҫке, ярым ташландыҡ йортаррҙа уҡыйҙар»

(Газеталарҙан).

*Уҡытыусы*. Нимә күшеккән тауыҡтар кеүек ултыраһығыҙ?

*Бер уҡыусы*. Господин уҡытыусы, беҙҙең был ҡыйыҡ аҫтында ултырыуыбыҙ ямғырҙан һаҡланырға уйлап ер тырмаһы аҫтына кергән цыганды хәтерләтә.

*Уҡытыусы*. Зарар юҡ, ирemәҫһегеҙ әле. Шәкәрҙән яһалмағанһыҙҙыр бит?

*Уҡыусы*. Нәмә ул шәкәр?

Уҡытыусы һорауға яуап бирмәй. «Алдағы дәрескә» ҡалдыра.

– Һорау темаға бәйләнешле түгел. Уҡытыусы Зуккермандан һорағыҙ. Уның фамилияһы ла шәкәр (немецсә: Зуккер) һүҙе менән башлана.

Дәресте дауам итергә тура килмәй: уҡытыусыны директор кабинетына саҡыртып алалар. Уҡытыусы, балалар буш ултырмаһындар өсөн, ҡушыу, алыу,

бүлеү һәм арттырыу буйынса үҙҙәренә хисап мәсьәләләре уйларға һәм уларҙы эшләп сығарырға ҡуша. «Берегеҙ, нәүбәт буйынса, мәсьәлә әйтегеҙ, икенсегеҙ сығарығыҙ, ә ҡалғандарығыҙ дөрөҫ эшләнеүен тикшерегеҙ. Күнегеү өсөн миҫалдарҙы үҙегеҙгә яҡын тормоштан алығыҙ, әллә ҡайҙа китеп баш ватмағыҙ», ти.

Һәм уҡыусылар үҙҙәренә ныҡ таныш тормоштан алынған арифметик мәсьәләләр өҫтөндә күнегеүҙәр үткәрә башлайҙар.

*Вилли*. Әйт әле, Бернт, минең олатайға һуғыш башланған йылды илле дүрт йәш ине, хәҙер ул нисә йәштә була?

*Бернт*. Илле һигеҙҙә.

*Вилм*. (Башҡаларға ҡарап) Дөрөҫмө?

*Башкалар*. Дөрөҫ.

*Вилли*. Дөрөҫ түгел шул. Хәҙер минең олатайға алтмыш һигеҙ йәш. Тоталь (дөйөм) мобилизациянан ҡалыр өсөн үҙ йәшенә тағы унды ҡушып йөрөтә ул.

*Эмиль*. Мин дә бер тоҙло ғына мәсьәлә уйланым. Минең әсәй магазиндан көн дә бер килограмм икмәк алып ҡайта һәм уны тигеҙ итеп биш киҫәккә бүлә. Һәр киҫәктә нисәшәр йөҙ грамм икмәк була?

*Бернт*. Быға бер ҙә баш ватып ултыраһы юҡ. Уйланған мәсьәләң, ашаған икмәгең кеүек үк, тоҙһоҙ... Һәр киҫәк икешәр йөҙ грамм икмәк була.

*Эрнст*. Дөрөҫ түгел. Һатыусыларҙың бер кило тип, үлсәп биргән икмәктәре бер ваҡытта ла туғыҙ йөҙ грамдан артмай

*Эмиль*. Дөрөҫ. Хәҙер шуны уҡ дауам итәм. Әсәйем ана шул икмәкте алып ҡайтыр өсөн көн дә дүрт сәғәт сиратта тора. Әгәр уға икмәкте тағы биш магазиндан алырға тура килһә, күпме ваҡыт кәрәк булыр ине.

*Том*. Егерме дүрт сәғәт.

*Вилли*. Юҡ. Әсәйеңә үлгәнсе сиратта торорға тура килер ине.

*Рудольф*. Складта ике мең бомба бар. Шуға тағы биште килтереп ҡушалар. Бөтәһе нисә бомба була?

*Эрнст*. Ике мең дә биш дана була торғандыр.

*Альфред*. Улай булмайыраҡ торһон әле. Әгәр ҡушылған бишәүе совет бомбалары булһа, бер нәмә лә ҡалмай!

Уҡыусыларҙың үҙ ирекtәренә тапшырылған дәрес ошо урында өҙөлә. Башта түшәмдән тамсылап ҡына торған ямғыр һыуы ағырға тотона. Уҡыусылар бинаның түшәме нығыраҡ яғына күсеп, мөйөшкә һыйыналар ҙа анекдот һөйләшә башлайһар.

Класҡа уҡытыусы килеп инә.

– Йә, күнегеү алып бараһығыҙмы? – тип һорай ул.

– Алып барыуын барабыҙ. Ләкин берҙә күнегеп булыр төҫлө түгел әле, господин уҡытыусы! – тиҙәр уҡыусылар.

– Нишләп улай?

– Башта тамғылап ҡына тора ине. Хәҙер ана бөтөнләй өҫкә ағырға кереште. Нисек уға тиҙ генә күнекмәк кәрәк!

## Эпиграммалар[1]

### Бикбай

«Урман артында» йөрөнө ул, «Кәк-күк» тыңлап,
«Ер» үлсәне аҙымдарын ҡыйыу атлап.
Әҙәбиәттә «Яҡшы» «Ҡарлуғас» тип,
Калинин ҡарт орден бирҙе уны маҡтап.

### Чаныш

«Ғүмер буйы Әптүк» менән йөрөп булмаҫ,
«Кәртә-Мәргән» булһын әле минең юлдаш.
Кавказдағы «Мествери» ҙә миңә яҡын,
Тиҙҙән китәм Ҡаҙағстанға эҙләп аҡын.

### Ғүмәр

Ғариф Ғүмәр подвал-подвал «шиғыр» яҙҙы
Күмер даешь! Тимер даешь! Нефть даешь!
Заводтарҙың торбаһы оҙон, төтөнө ҡоңғорт,

[1] Октябрь, 1939. №7. 75-се бит.

Кешеләре күренмәйҙәр, понимаешь!

**Мифтах**

«Пандар иле»н: пыр туҙҙырҙы Сәғит Мифтах,

«Зимагурҙар» эйәртте лә ҡайтып төшөтө.

«Һаҡмар»ҙан да тәрән йылға юҡ ул тиеп,

Балығын тотто, муйынынан батып – һыуын эсте.

Әйтелмәгән әйтемдәр[1]

Йылдың ни арба, ни сана сағы бар, әҙәбиәтең ни хикәйә, ни очерк жанры юҡ.

***

«Осло ҡәләмле» булыу әҫәрҙең оcһоҙ (арзан) булмауы менән үлсәнә.

***

Бер ҡарлуғас яҙ яһамаһа ла, бер «Ҡарлуғас» театр яһарға мөмкин.

***

Унының балалар өсөн яҙа алыуына беренсе ышаныс бар: ул яҙыусылыҡ эшенә «балаларса» ҡарамай.

***

Ямауы бар, йөйө юҡ (сюжеты руссанан сәлдерелгән әҫәр), тауышы бар, көйө юҡ (Ахметов музыкаһы).

***

Әмириҙең һәр яҙғаны «Алтын» түгел.

***

Уҡыусы экзамен биргәндә, яҙыусы ла һынала.

***

Йәш яҙыусы булып ҡартайыу менән әҙәбиәттә «мыйыҡлы» булып булмай.

***

Яҙылмаған әҫәрҙән «өҙөк» баҫтырыу менән ижад төҙөкләнмәй.

***

[1] Октябрь, 1948. № 5. 79-сы бит.

Уның лирикаһы кешегә йылылыҡ бирә: төшөнә алмай тирләп бөтәһең!

***

Ыңғай һөйләм: «Өфөнән Туймазыға барҙым», кире һөйләм: «Туймазынан Өфөгә ҡайттым!»

***

«Шуныһы характерлы был әҫәрҙең: унда характерлы характерҙарға бирелгән характеристика характерһыҙ сөсөлөктөң контрасы булған характерлы әселек менән гүзәл характерлана, шул арҡала әҫәрҙең арҡа һөйәген характерлай торған тулы ҡанлы, оло, гүзәл ыңғай образ-персонаж, герой-героиняларҙың төптө интим личный субъектив-индивидуаль тойғоларының общественный интерестар юғарылығына мул күтәрелеүе һәм гармониялы ҡушылыуы менән үҙенең простой, ләкин монументаль характерын алған». (Характерлы бер тәнҡитсебеҙ реченан).

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ИНЕШ. БЕҘГӘ ӘЙТЕР ҺҮҘЕ БАР ........ 6
БЕРЕНСЕ БҮЛЕК. ФӘННИ ҺӘМ ПУБЛИЦИСТИК МӘҠӘЛӘЛӘР ........ 13
Мамай хан хикәйәте ........ 13
Шағирҙың тауышы (Шағир Х. Кәрим ижады тураһында) ........ 18
Бикчәнтәй новеллалары ........ 29
«Девон» ........ 35
Салауат Юлаев һәм уның әҙәбиәттәге образы ........ 45
«Әйләндерелгән» китаптар битенән ........ 64
Рәхмәт һиңә, шағир! (Рәшит Ниғмәтиҙе ерләгәндә) ........ 66
Поэзия ҡаһарманы ........ 67
Урал бөркөтө ........ 74
Һеҙгә әйтер һүҙем бар, йәш дуҫтар ........ 75
Йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ ........ 79
Босфор ике ағымлы ........ 91
ИКЕНСЕ БҮЛЕК. НӘФИС ӘҪӘРҘӘР ........ 130
Зәңгәр күҙҙәр ........ 130
Тормош яңынан башлана ........ 148
Иҫтәлек өсөн ........ 157
Ҡыйыу пионер ........ 171
Дарыу ........ 178
Разведчик ........ 186
Дошман тылында ........ 193
Әтәс фажиғәһе ........ 198
Ҡайғылы шатлыҡ ........ 208
Иҫәнгилде ҡиссаһы ........ 211
Яңы Ҡәһәриә ........ 221
Суҡ-суҡ сәскәле сәләм ........ 225
Ағымдағы ремонт ........ 228
Бер иштән ........ 231
Фронт көләмәстәре ........ 232
Эпиграммалар ........ 244
Әйтелмәгән әйтемдәр ........ 245

При подготовке электронного издании использовались следующие программные средства:

- Adobe Acrobat − текстовый редактор;
- Microsoft Word – текстовый редактор

*Все права защищены. Книга или любая её часть не может быть скопирована, воспроизведена в электронной или механической форме, в виде фотокопии, записи в память ЭВМ, репродукции или каким-либо иным способом, а также использована в любой информационной системе без получения разрешения от издателя. Копирование, воспроизведение и иное использование книги или её части без согласия издателя является незаконным и влечёт уголовную, административную и гражданскую ответственность.*

*Научное издание*

**Харисов Ахнаф Ибрагимович**

**«МНЕ ЕСТЬ ЧТО ВАМ СКАЗАТЬ…»**

**Сборник избранных трудов**

*Электронное издание сетевого доступа*

*За достоверность информации, изложенной в сборнике,*
*ответственность несут составители*

*Статьи публикуются в авторской редакции*

Подписано к использованию 11.11.2025.
Гарнитура «Times New Roman». Объем 2,58 Мб. Изд. № 51.
*Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*450054, РБ, г. Уфа, пр. Октября, 71.Тел.: (347) 235-60-50*
*E-mail: rihll@anrb.ru*